МИНИСТЕРСТВО НАУКИ И ВЫСШЕГО ОБРАЗОВАНИЯ
РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ
ФЕДЕРАЛЬНОЕ ГОСУДАРСТВЕННОЕ БЮДЖЕТНОЕ ОБРАЗОВАТЕЛЬНОЕ
УЧРЕЖДЕНИЕ ВЫСШЕГО ОБРАЗОВАНИЯ
«БАШКИРСКИЙ ГОСУДАРСТВЕННЫЙ УНИВЕРСИТЕТ»

БИРСКИЙ ФИЛИАЛ БАШГУ

# СОВРЕМЕННЫЙ УРОК – 2021

М а т е р и а л ы
Всероссийского конкурса методических разработок

Выпуск 5

БИРСК
2021

УДК 372.8
ББК 74.26
С – 58

Рецензенты:
Абдуллина А.Ш., доктор филологических наук, профессор БФ БашГУ;
Илиева А.А., кандидат филологических наук, доцент БФ БашГУ.

Авторы-составители:
**Каскинова Г.Н.,** кандидат филологических наук, доцент кафедры филологии **БФ БашГУ;**
**Ганеева Г.Г.,** кандидат филологических наук, доцент кафедры филологии **БФ БашГУ**

**Современный урок**. Материалы Всероссийского конкурса методических разработок. Выпуск 5. – Бирск: Бирск.фил. Баш. гос. ун-та, 2021. – 261 с.

В сборник вошли разработки уроков, внеклассных и воспитательных мероприятий. Конспекты составлены с учетом современных тенденций развития школьного образования и соответствуют требованиям ФГОС. Все статьи сборника сохраняют авторскую редакцию.

Сборник рассчитан на специалистов-филологов, работников сферы образования, а также самый широкий круг читателей.

© Составители Г.Н. Каскинова,
Г.Г. Ганеева 2021
© Бирский филиал Башкирского
государственного университета, 2021

РӘСӘЙ ФЕДЕРАЦИЯҺЫ
ФӘН ҺӘМ ЮҒАРЫ БЕЛЕМ БИРЕҮ МИНИСТРЛЫҒЫ
ЮҒАРЫ БЕЛЕМ БИРЕҮ ФЕДЕРАЛЬ ДӘҮЛӘТ БЮДЖЕТ
МӘҒАРИФ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
"БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТ УНИВЕРСИТЕТЫ"

БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТ УНИВЕРСИТЕТЫНЫҢ БӨРӨ ФИЛИАЛЫ

# ЗАМАНСА ДӘРЕС – 2021

Бөтә Рәсәй методик эшкәртмәләр конкурсы
м а т е р и а л д а р ы

5-се сығарылыш

БӨРӨ
2021

УДК 372.8
ББК 74.26
С – 58

Рецензенттар:
Абдуллина Ә.Ш., филология фәндәре докторы, БДУ-ның Бөрө филиалы профессоры;
Илиева А.А., филология фәндәре кандидаты, БДУ-ның Бөрө филиалы доценты.

Автор-төҙөүселәр:
**Ҡаскынова Г.Н.,** филология фәндәре кандидаты, БДУ-ның Бөрө филиалы доценты**;**
**Ғәниева Ғ.Ғ.,** филология фәндәре кандидаты, БДУ-ның Бөрө филиалы доценты.

**Заманса дәрес**. Бөтә Рәсәй методик эшкәртмәләр конкурсы материалдары. 5-се сығарылыш. – Бөрө: БДУ-ның Бөрө филиалы, 2021. – 261 бит.

Йыйынтыҡҡа дәрестәрҙең, дәрестән тыш һәм тәрбиәүи сараларҙың методик эшкәртмәләре индерелде. Конспекттар мәктәптә белем биреү үҫешенең заманса тенденцияларын иҫәпкә алыу нигеҙендә төҙөлгән һәм ФДББС талаптарына яуап бирә. Һәр мәҡәлә автор редакцияһында бирелә.

Йыйынтыҡ филология өлкәһендә эшләгән белгестәргә, мәғариф сфераһы хеҙмәткәрҙәренә һәм киң ҡатлам уҡыусыларға тәғәйенләнә.

© Төҙөүселәре Г.Н. Ҡаскынова,
Ғ.Ғ. Ғәниева 2021
© Башҡорт дәүләт университетының
Бөрө филиалы, 2021

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

### ЗАМАНСА БАШҠОРТ ТЕЛЕ ДӘРЕСЕ

Йылҡыбаева Г.У. Ҡылым. Беҙҙә ҡышлаусы ҡоштар.......6

Камалова Э.Ғ. Башҡортостан йылғалары. Һан. Ябай һәм ҡушма һандар.......12

Мәҡсүтова З.М. Башҡортостандың ҡалалары һәм ауылдары. Һан.......16

Мостафина А.Н. Башҡорт теле дәрестәрендә дистанцион технологиялар ҡулланыу.......21

Рәхимова М.М. «Һан» темаһын ҡабатлау буйынса дәрес-сәйәхәт.......26

Ғәләүетдинова Р.Р. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәрҙе ҡабатлау.......30

Сәйетгәрәева Ә.Ф. Биҙәктәр. Исемдәрҙең күплек формаһы.......34

Фәтҡуллина Р.М. “Мин фармацевт буласаҡмын”.......37

### ЗАМАНСА БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ ДӘРЕСЕ

Ғимазова А.Ф. Рәми Ғариповтың “Урал йөрәге” хикәйәте.......41

Ғиндуллина З.Т. Р.Ғариповтың “Урал йөрәге” шиғыр-хикәйәтен өйрәнеү.......52

Ғәлләмова Г.Р. Йөрәгенән йондоҙ ҡабыҙған шағир – Рәшит Назаров.......56

Ғәлләмова В.В. Н. Мусин. “Таң ҡыйылған саҡ”.......60

Камалова Ф.Ф. Нур Ғәлимов. “Яуҙан ҡайтҡан ҡурай”.......66

Кәбирова А.Ф. Рауил Бикбаевтың «Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда» шиғырын өйрәнеү.......70

Садретдинова Г.М. Халыҡ ижады – милли мираҫ.......76

Фаршатова Ә.Ә. Р.Ғарипов. Туған тел.......79

Хәҙимуллина Р.Р. Мостай Кәримдең тормошо һәм ижады. “Ҡайын япрағы тураһында” шиғыры.......87

Хәмиҙуллина Ә.Т. Рәшит Ниғмәти. “Нимә ул Ватан?”.......103

Хөснуллина Р.Д. “...Нурға сумған түбәһе, Күккә ашҡан Уралым!”.......108

Әхмәтзакирова И.Ф. Абдулхаҡ Игебаевтың “Башҡортостан – илгенәм”

шиғырын өйрәнеү........................................................................................................117

## КЛАСТАН ТЫШ САРАЛАРҘЫҢ ЗАМАНСА ФОРМАҺЫ

Ғәйнетдинова Л.Р. “Саф күңелле Файыҡ бабай”..................................................120

Галяутдинова Р.Р. «А ну-ка, девочки!»...................................................................127

Гильманова Н.С., Ахмадиева Э.Н. Правила этикета на дне рождения для гостя. Дарение подарка.......................................................................................................133

Закирова А.Ғ. “Айға үрләп, нурҙа уйнап, күкрәгемде нурланым”.........................137

Закирова И.Я. «Гордимся славою героев»...............................................................141

Йомағужина Н.Ф. Рәми Ғарипов ижадын йомғаҡлау.............................................146

Йылҡыбаева Г.У. “Батырлығы мәңге хәтерҙә”.........................................................151

Латипова Р.Р. Сценарий мероприятия «Дружба народов»....................................156

Печёнкина Е.С. Классный час. «Дар маленького зернышка»................................160

Равилова А.И. Классный час «День рождения класса»..........................................164

Селянина Л.В., Белобородова О.А. Светофор – наш друг.....................................168

Уйылданова А.К. “Йәшләй китте, йәшнәп китте!”.................................................172

Хәҙимуллина Р.Р. Урал батыр уҙған юл буйлап сәйәхәт........................................176

Хамитова Р.Р. Башҡорт ырыуҙары...........................................................................188

Харасова Р.Г. «Великая дочь Большого Иргиза»...................................................191

Яхина Г.Р. «Семь чудес моего села»........................................................................193

## ЗАМАНСА ТАТАР ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ ДӘРЕСЕ

Ахунова И.Г. Ш. Маннур. “Чәчәкләр һәм снарядлар”............................................197

Шәрипова А.Р. Күрсәтү алмашлыклары..................................................................201

## СОВРЕМЕННЫЙ УРОК МАРИЙСКОГО ЯЗЫКА И ЛИТЕРАТУРЫ

Аликова И.Г. Класс деч ӧрдыжсӧ паша «Аван кечыже»........................................205

Иркабаева В., Иркабаева А., Байгулова М. Марий йылмызе-влак....................................................................................................209

Муллашаева О.А. Простой да сложный предложений..........................................212

Салаев И., Петров А., Гимаев Р. Изи йылмызе-влакын квн-ышт....................................................................................................217

Тукбаева Н.И. Имя числительное..........................................................................222

## БАЛАЛАР БАҠСАҺЫНДА ЗАМАНСА ДӘРЕС

Бадретдинова С.Ф., Бакирова Ф.Р. Сценарий праздника к 100-летию РБ............225

Баһауетдинова З.М. Балалар баҡсаһында «Бәпес күреү» йолаһы.......................229

Ғәлләмова Н.А. Ҡарға бутҡаһы..................................................................................235

Әғәзуллина Р.Ғ. “Минең ғаиләмдә ҡунаҡта”.........................................................240

Әлбәкова З.Й. «Тыуған төйәгем – Хәйбуллам».......................................................243

Аллаярова З.И., Ғөбәйзуллина Г.З., Рамазанова З.Ғ. Милли уен коралы курай иленә сәяхәт.............................................................................................................247

# ЗАМАНСА БАШҠОРТ ТЕЛЕ ДӘРЕСЕ

**Йылкыбаева Г.У.,**

*Шаһи Ямалетдинов исемендәге*
*Белорет районы Шығай ауылы*
*урта дөйөм белем биреү мәктәбе*

## Ҡылым. Беҙҙә ҡышлаусы ҡоштар

**(6-сы класс)**

**Дәрес төрө:** ҡатнаш дәрес.

**Планлаштырылған һөҙөмтәләр:**

Предмет УУЭ һөҙөмтәләре: тема буйынса яңы һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр өйрәнеү, уларҙы бәйләнешле телмәрҙә ҡулланыу; ҡылымдың грамматик билдәләрен ҡабатлау, нығытыу.
Метапредмет (предмет- ара) УУЭ һөҙөмтәләре:
а) регулятив: уҡытыусы менән берлектә дәрес темаһын, маҡсатын билдәләргә, булған белемдәрен барлау, баһалау;
б) танып белеү: темаға ҡағылышлы һүҙҙәр менән ҡылымдар ҡулланып һөйләмдәр төҙөү. Бирелгән текстан ҡылымдарҙы табып билдәләү;
в) коммуникатив: темаға ҡағылышлы һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр ҡулланып логик яҡтан дөрөҫ һәм бәйләнешле булған һөйләмдәр төҙөй белеү, үҙ - ара аралашыу, төркөмдә хеҙмәттәшлек итә белеү;
Шәхси УУЭ һөҙөмтәләре: үҙҙаллылыҡ сифаттары, тыуған яҡ тәбиғәтенең матурлығына һөйөү һәм һаҡсыл ҡараш булдырыу.

**Йыһазландырыу:**

Дәреслек (Солтанбаева Х.В., Балапанова Л.С. Башҡорт теле. – Өфө: Китап, 2017), мультимедиа проекторы, экран, ноутбук, ҡоштар һүрәттәре менән конверт, электрон дәреслек.

**Предмет-ара бәйләнеш:** әҙәбиәт, география, биология, мәҙәниәт.

**Дәрес этаптары.**

Уҡытыусы эшмәкәрлеге.

Уҡыусылар эшмәкәрлеге.

Дәрестең һәр этабында формалаштырылған УУЭ.

1.Ойоштороу моменты.

Уҡыу эшмәкәрлегенә мотивация булдырыу:

Һаумыһығыҙ, уҡыусылар! Хәйерле көн!

Кәйефтәрегеҙ нисек?

Бөгөнгө дәрестә һеҙҙе күреүемә бик шатмын. Әйҙәгеҙ, дәрестә үҙебеҙгә уңыштар теләп бер - беребеҙгә ҡарап йылмайышайыҡ.

Дәресебеҙҙе дауам итер алдынан, ауыҙ-телдәребеҙҙе көйләп фонетик - артикуляцион күнегеү үткәреп алайыҡ.

(1-се слайд) 1. Күрҙем ҡарға: төшкән ҡарға,
Ҡарға төшкән аҡ ҡарға.
Шул ҡарғаны күрер өсөн,
Ҡарға йыйылған ҡарға.

Уҡыусылар башҡорт теленең һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрен, һүҙҙәрҙе уҡытыусы артынан ҡабатлайҙар.

Регулятив: үҙҙәренең уҡыу эшмәкәрлеген ойошторалар;
Шәхси: белем алыуға, уҡыуға ҡарата, дәрескә ыңғай ҡараш күрһәтәләр;
Танып белеү: яңы белем алыу кәрәклеген аңлайҙар, үҙҙәренең эшмәкәрлеген планлаштыралар.

2. Уҡыу ситуацияһын тыуҙырыу (белемдәрҙе актуаллаштереү).
(С.Әлибайҙың “Матур көн” шиғырын уҡыу)
Ынйы- ынйы ҡарҙар яуа,
Ғәжәп матур көн бөгөн.
Ҡулға тотоп алғы килә
Ҡарҙың һәр бер бөртөгөн.
Бәүелеп- бәүелеп төшә,
Ҡар яуа- матур ниндәй!
Әйтерһең дә, кемдер күктә
Ҙур иләктән он иләй.

Уҡыусылар, мин уҡып ишеттергән шиғырҙа тәбиғәттең ниндәй миҙгеле тураһында һүҙ бара?

Дөрөҫ, ҡыш миҙгеле тураһында яҙылған был шиғырҙа. Ҡыш көнө һауа торошо, көндәр ниндәй була? Кешеләр нимә эшләй? Ә йәнлектәр, ҡоштар нимә эшләй?

Йылы яҡтарға осоп китмәгән ҡоштарҙы беҙ нисек атайбыҙ?

Дөрөҫ. Яңынан тиҙәйткесебеҙҙең текстына күҙ һалығыҙ әле. Ул нимә тураһында? (тиҙәйткесте ҡабатлайҙар).

Ә аҫтына һыҙылған һүҙҙәр нимәне белдерә? Ниндәй һорауға яуап бирәләр?

Регулятив: уҡыу мәсьәләһен аңлау, ҡабул итеү, маҡсатҡа ярашлы эштәрҙе башҡарыу, ҡуйылған һорауҙарға яуап бирә белеү;
Танып белеү: кәрәкле мәғлүмәтте уҡытыусы телмәренән ишетеп аңлау;
Коммуникатив: тыңлайҙар һәм диалогҡа инәләр, әңгәмәгә ҡушылалар;
Шәхси: уҡыу эшмәкәрлегенә мотивация булдырыу, уҡыуға, яңылыҡ белеүгә ынтылыш, ҡыҙыҡһыныусанлыҡ сифаттары формалаша.
3.Уҡыу мәсьәләһен (проблемаһын) ҡуйыу.
Шулай итеп, уҡыусылар, беҙ бөгөнгө дәрестә нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ?
Үҙебеҙгә ниндәй маҡсат ҡуябыҙ?
Ҡышлаусы ҡоштар, ҡылым тураһында һөйләшәсәктәре тураһында әйтәләр.
Уҡытыусы менән берлектә дәрескә маҡсат ҡуялар.

Танып белеү: логик фекерләү алгоритмын төҙөйҙәр;
Регулятив: уҡытыусы менән берлектә дәрестең маҡсатын билдәләйҙәр.
4.Яңы материал үтеү. Уҡыу проблемаһын сисеү.
Дәфтәрҙәрегеҙгә бөгөнгө датаны, дәрестең темаһын яҙығыҙ.

**Ҡылым. Беҙҙә ҡышлаусы ҡоштар.**

– Тәбиғәттең йоҡоға талған тылсымлы бер миҙгеле. Тыуған яғыбыҙҙа ҡыш. Ниндәй һоҡланғыс, ниндәй гүзәл ул ҡыш миҙгеле!

Күҙ алдына килтерегеҙ әле, һеҙ урманда саңғыла йөрөйһөгөҙ, ти. Һалҡынса, рәхәт. Һирәк кенә булһа ла ҡош тауыштары ишетелә. Әйҙәгеҙ әле бергәләп ҡош тауыштарын тыңлайыҡ. Ниндәй ҡош тауышы икәнен һеҙ әйтерһегеҙ. (2-6-сы слайдтар).

– Ә был ҡош тураһында ниндәй мәғлүмәттәрегеҙ бар?

– Уҡыусылар, бер дәрестә генә бөтә ҡышлаусы ҡоштарҙы ла күрһәтеп бөтөп буламы?

– Дөрөҫ, сөнки Башҡортостанда 70-ләп төр ҡош ҡышлай. Бер нисәһенең һүрәттәрен ҡарап үтәйек.

Ҡыҙылтүш (7-се слайд).
Тумыртҡа (8-се слайд).
Өкө (9-сы слайд).
– Уҡыусылар, әле генә беҙҙең яҡта ҡышлаусы ҡоштарҙың бер нисәһен ҡарап үттек. Ҡышҡы урманда ҡоштар тауышын тыңлап саңғыла йөрөү оҡшанымы һеҙгә?

Уҡыусылар дәфтәрҙәренә датаны, дәрес темаһын яҙалар.

Ҡоштарға ҡарата йомаҡтар.
(Ҡоштоң исемдәрен интеракатив таҡтаға яҙалар).
Уҡыусыларҙың яуаптары.

Танып белеү: ҡоштарҙы тауыштарынан, һүрәттәрҙән таныу, һорауҙарға яуап биреү.

Коммуникатив: уҡытыусы ҡуйған һорауҙарға логик яҡтан дөрөҫ төҙөлгән, тулы һөйләмдәр менән яуап биреү. Бер-береһе менән хеҙмәттәшлек итеү, үҙ эштәрен анализлау, башҡаларҙы тыңлай белеү, әңгәмәгә ҡушыла белеү формалаша;

Шәхси: ҡышты беҙҙең яҡтарҙа үткәреүсе ҡоштарҙың исемдәрен беләләр.

5. Ял минуты (Интерактив таҡтанан видеоролик менән бергә хәрәкәт итәләр).

Арығанһығыҙҙыр. Ял минуты үткәреп алайыҡ.

“Ҡаҙҙар”
Ҡаҙҙар осто, осто, осто теҙелеп.
Остолар ҙа төштөләр.
Ултырҙылар, ял иттеләр,
Һәм тағы ла остолар.
Остолар, остолар,
Парта аҫтына боҫтолар!
Ҡулдарын ҡанат кеүек һелкәләр.
Ҡулдарын төшөрәләр.
Сүкәйәләр.
Ҡулдарын һелкәләр.
Хәрәкәтләнәләр.
Ултыралар.
Шәхси: уйында ҡатнашыу мәҙәниәте формалаша, уҡыу материалына ҡыҙыҡһыныу арта

6. Белемде нығытыу (яңы белемде практикала ҡулланыу).

– Эшебеҙҙе артабан дауам итәбеҙ. Бирелгән тексты уҡыйыҡ, тәржемә итәйек. (Интерактив таҡтала һүҙлек эшен башҡарыу).

Төр – вид
Аслыҡтан – из-за голода
Үлә – умирает
Тағараҡ – кормушка
Ем – корм
“Башҡортостанда 70-ләп төр ҡош ҡышлай. Уларҙың күбеһе һыуыҡтан түгел, ә аслыҡтан үлә. Шуға күрә уларға тағараҡтар яһарға, унда ем һалырға

кәрәк.” (Ҡоштар тураһында ҡыҫҡаса видеоролик күрһәтеү).

Текстағы ҡылымдарҙы табығыҙ.

Уҡыусылар, һеҙ был һүҙҙәрҙең ҡылым икәнен нисек билдәләнегеҙ?

Был һүҙҙәр ниндәй һорауҙарға яуап бирәләр?

Ҡылым тураһында тағы нимә әйтә алаһығыҙ?

Дәресебеҙҙе дауам итеп уйын - ярыш үткәрәм. Мин һеҙҙе ике командаға бүләм. 1-се команда “Аҡҡоштар”, 2-се команда “Һандуғастар”.

Электрон дәреслек буйынса эшләйбеҙ. Шундағы һорауҙарға яуап бирәбеҙ.

Мин һеҙгә карточкалар таратам. Был һүрәттәрҙә ҡоштар бирелгән. Һеҙ был ҡоштар араһында ҡайһыһы артыҡ һәм ни өсөн икәнен әйтергә тейешһегеҙ.

1-се эш. Турғай. Тумыртҡа.
Һайыҫҡан. Күгәрсен.
Өкө. Ҡыҙылтүш.
Сыйырсыҡ. Ҡарлуғас.
Ала ҡарға. Ҡарабаш турғай.
2-се эш. Ҡайһы һүҙ артыҡ? Ни өсөн?
Уҡый. Яҙа
Йырлай. Бейей
Һөйләй. Ашай
Мәктәп. Ҡош
Ултыра. Йүгерә
Ҡыш, ҡош һүҙҙәренә синквейн төҙөү.
Ҡыш – исем
Һыуыҡ, ҡарлы
Һыуыта, туңдыра, буранлай
Ҡыш – иң күңелле миҙгел
Яңы йыл.

Ҡош – исем
Матур, бәләкәй
Һайрай, сүпләй, оса
Ҡош – осоусы йән эйәһе
Турғай.
Афариндар! ( Еңеүсе команда билдәләнә).
Беҙҙең ҡанатлы дуҫтарыбыҙ тураһында бик күп йырҙар, шиғырҙар ижад ителгән. Бәлки, бер нисәһен уҡып китербеҙ.
Уҡыусылар ҡышлай, үлә, яһарға, һалырға ҡылымдарын табалар.

Ҡышлай – ни эшләй?
Үлә – нимә эшләй?
Яһарға – ни эшләргә?
Һалырға – ни эшләргә? һорауҙарына яуап бирәләр. Ҡылымдың заман, зат формалары бар.
Уҡыусылар артыҡ ҡоштоң исемен әйтәләр, ни өсөн икәнен аңлаталар.
Уҡыусылар артыҡ һүҙҙе табалар, ни өсөн икәнен аңлаталар.
Ҡоштарҙың исемдәрен атайҙар.
Уҡыусыларҙың яуаптары.
Уҡыусылар алдан әҙерләгән шиғырҙарын уҡыйҙар.

Шәхси: тасуири уҡыу күнекмәләре формалаша, уҡыуға ҡарата ҡыҙыҡһыныу;
Регулятив: уҡыу мәсьәләһен (биремен) аңлау, үҙҙәренең эшмәкәрлеген планлаштырыу;

Коммуникатив: диалог төҙөйҙәр, һорауҙарға яуап бирәләр, башҡаларҙы тыңлай белеү, әңгәмәгә ҡушыла белеү формалаша;

Танып белеү: анализлау, сағыштырыу, алған мәғлүмәтте дөйөмләштереү.

7. Өйгә эш биреү

Яратҡан ҡош тураһында ҡыҫҡаса презентация әҙерләргә.
Танып белеү: кәрәкле мәғлүмәтте анализлай, һайлай белеү;
Регулятив: яңы уҡыу мәсьәләһен ҡабул итә белеү, үҙҙәренең эшмәкәрлеген планлаштырыу;
Коммуникатив: һорауҙарға яуап биреү.
8. Дәресте йомғаҡлау.
Эшмәкәрлеккә рефлексия.
– Шулай итеп, бөгөнгө дәрестән үҙегеҙгә ниндәй яңылыҡтар алдығыҙ?
– Ни өсөн ҡышлаусы ҡоштар беҙҙең ярҙамға мохтаж?
– Ҡылым һүҙ төркөмөнә ҡараған һүҙҙәр булмаһа, беҙҙең телмәребеҙ аңлайышлы булыр инеме?
– Уҡыусылар, дәрес башында ҡуйған маҡсаттарыбыҙға ирештекме?
– Алған белемдәрегеҙ тормошта кәрәк булырмы?
(Уҡыусыларҙы баһалау).
Дәрестә алған белемдәрегеҙҙе тормошта ҡулланырһығыҙ, тәбиғәтте һаҡларһығыҙ, ҡышлаусы ҡоштарға ярҙам итерһегеҙ тип ышанам.
Тәртипле, аҡыллы малай һәм ҡыҙҙар булып, Тыуған илебеҙгә файҙалы һәм кәрәкле шәхестәр булып үҫеүегеҙҙе теләйем.
Дәрес тамам. Һау булығыҙ!
Уҡыусыларҙың яуаптары.
Регулятив: үҙҙәренең эшмәкәрлегенә баһа биреү, уҡытыусының баһаһына адекват ҡараш формалаша;
Шәхси: үҙүҫеш, баһалау һәләте үҫә.

**Камалова Э.Ғ.,**
*Башҡортостан Республикаһы*
*Бәләбәй калаһының 1-се һанлы гимназияһы МАДББУ*

# Башҡортостан йылғалары. Һан. Ябай һәм ҡушма һандар (6-сы класта яңы белем биреү дәресе)

**Дәрес темаһы: Башҡортостан йылғалары. Һан тураһында төшөнсә. Ябай һәм ҡушма һандар.**
**Планлаштырылған һөҙөмтәләр:**
**Предмет УУЭ һөҙөмтәләре:** тема буйынса яңы һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр өйрәнеү, уларҙы бәйләнешле телмәрҙә ҡулланыу; һан тураһында төшөнсә биреү, ябай һәм ҡушма һандарҙы айыра белеү, уларҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡуллана белергә өйрәтеү.
**Метапредмет (предмет-ара) УУЭ һөҙөмтәләре:**
<u>а) регулятив:</u> уҡытыусы менән берлектә дәрес темаһын, маҡсатын билдәләргә күнегеү, булған белемдәрен барлау, баһалау;
<u>б) танып белеү:</u> темаға ҡағылышлы һүҙҙәр менән һандар ҡулланып һөйләмдәр төҙөү. Бирелгән текстан һандарҙы табып билдәләү;
<u>в) коммуникатив:</u> темаға ҡағылышлы һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр ҡулланып логик яҡтан дөрөҫ һәм бәйләнешле булған һөйләмдәр төҙөй белеү, үҙ-ара аралашыу, төркөмдә хеҙмәттәшлек итә белеү;
**Шәхси УУЭ һөҙөмтәләре:** үҙҙаллылыҡ сифаттары, тыуған яҡ тәбиғәтенең матурлығына һөйөү һәм һаҡсыл ҡараш булдырыу.
**Йыһазландырыу:** Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. Башҡорт теле: уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 6-сы класы өсөн башҡорт теленән Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булараҡ өйрәнеү өсөн дәреслек. – Өфө: Китап, 2020; мультимедиа проекторы, экран, ноутбук, Башҡортостан картаһы.
**Предмет-ара бәйләнеш: әҙәбиәт, география.**
**Дәрес барышы.**
**I. Психологик инеш.**
– Һаумыҙығыҙ, уҡыусылар!
– Һаумы, ҡояш!
Һаумы, зәңгәр һауа!
Һаумыһығыҙ, уҡытыусым!
Һаумыһығыҙ, дуҫтарым!
**II. Артикуляцион күнегеү.**
Дәресебеҙҙе дауам итер алдынан, ауыҙ- телдәребеҙҙе көйләп фонетик-артикуляцион күнегеү үткәреп алайыҡ.
1) Һалҡын һыулы Һаҡмарҙа һайрай һары һандуғас.
2) Ай Ағиҙел, Ағиҙел,

Күпте күргән Ағиҙел.
Ҡартлас Урал ни күрһә,
Шуны күргән Ағиҙел.
*Рәшит Ниғмәти*

**III. Уҡыу мәсьәләһен ҡуйыу.**

– *Уҡыусылар*, был тиҙәйткес менән шиғырҙа нимә тураһында һүҙ бара? Дөрөҫ, йылғалар тураһында.

– Һеҙ тағы ла Башҡортостандың ниндәй йылғаларын беләһегеҙ?

– Күпме йылғаны иҫкә төшөрҙөк, бергәләп һанайыҡ әле. (Уҡытыусы һанай).

– Беҙ бөгөнгө дәрестә нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ?

– Үҙебеҙгә ниндәй маҡсат ҡуябыҙ? *Уҡыусыларҙан дәрестең темаһын, маҡсатын әйттереү.*

Эйе, бөгөн беҙ һеҙҙең менән һандар, Башҡортостан йылғалары тураһында һөйләшербеҙ. Уларҙы һаҡлау өсөн ни эшләргә кәрәк? Бергәләшеп ошо һорауға яуап бирергә тырышып ҡарарбыҙ.

**Дәфтәрҙәрегеҙгә бөгөнгө датаны, дәрестең темаһын яҙығыҙ.**

**IV. Яңы материал үтеү. Уҡыу проблемаһын сисеү.** (*Кроссворд сисеү).*

1. Әгәр ҙә был кроссвордты сисһәк, Башҡортостандағы йылғаның исеме килеп сығыр.
1) Был йылға Башҡортостандағы иң ҙур йылғаларҙың береһе һанала.
2) Был йылға исемен Башҡортостандың бер районы йөрөтә. Бишбүләк районы территорияһынан аға.
3) Нөктәләр урынына төшөп ҡалған йылға исемен яҙығыҙ.

… тыуҙым, … үҫтем,
Еләк йыйҙым туғайҙа.
Эй-й йәмле … буйы,
Бик һағындым был юлы.

4) Был йылға беҙҙең данлы йылға
Күпте күргән, күпте кисергән.
Унда беҙҙең батыр Салауат та
Аҡбуҙ атын төшөп эсергән.
5) Зәйнәб Биишеваның романындағы йылғаның исеме.
6) Элек был йылғаны Яйыҡ тип атағандар.

*Беҙ һеҙҙең менән Ағиҙел һүҙен килтереп сығарҙыҡ. Әйҙәгеҙ, хәҙер был йылғаны һәм Башҡортостандың башҡа йылғаларын картанан ҡарайыҡ. Иң ҙур йылғабыҙ Ағиҙел, шунан Ҡариҙел, Дим һ.б. Йырҙарҙа йырланған, данланған йылғабыҙ тураһында тәрәнерәк беләйек.*

**2. Өҙөктө уҡығыҙ, предметтың иҫәбен белдергән һүҙҙәрҙе табығыҙ. Улар нимә тип атала? Һандар ниндәй һорауҙарға яуап бирә?**

Башҡортостан картаһына ҡарағыҙ. Уның бер осонан икенсе осона тиклем бер йылға ағып үтә. Оҙонлоғо 1240 километр, майҙаны 141900 квадрат километр. Был Ағиҙел йылғаһы.

Ағиҙел Учалы районы Яңы Хөсәйен һәм Байһаҡал ауылдары янында башлана. Башланған ерендә йылға бала-саға ла атлап сығарлыҡ тар ғына. Ә шул тиклем һыуҙы ҡайҙан ала һуң ул?

Йөҙ йәшлек бабай әйтә:

– Һеңлеләренән ала уны, – ти. Бына бер һеңлеһе… Ике, өс, дүрт, биш, алты… Бына тағы… Һеңлеләре бик күп уның. Өс йөҙ тирәһе булыр…

Ә апаһы берәү генә – Иҙел… Ағиҙел шул апаһын эҙләп бара.

*(Әнғәм Атнабаевтан).*

3. Схема күрһәтеү.

Шулай итеп, *Һан – предметтың иҫәбен, уның һаналыу тәртибен белдергән һүҙ. Нисә, күпме, нисәү, нисәшәр, күпмешәр һорауҙарына яуап бирә.*

4. Бирелгән текст менән эш.

– Текстан бер һүҙҙән торған һандарҙы табығыҙ.

– Ике һүҙҙән торған һандарҙы табығыҙ.

– Был һандар нисек атала икән?

*Йомғаҡ яһау:* Яһалышы яғынан һандар **ябай** һәм **ҡушма** һандарға бүленә.

**Ябай һандар** бер генә һүҙҙән тора: бер, ике, һигеҙ, туҡһан һ.б.

**Ҡушма һандар** бер нисә һүҙҙән тора: ун алты, егерме биш һ.б.

**5.** Хәҙер инде һандарҙың яҙылышын нығытайыҡ. (*Дәреслек менән эш. 22-се күнегеүҙе эшләү. Цифрҙарҙы һүҙ менән күсереп яҙығыҙ, һандар ҡулланып 2 һөйләм төҙөгөҙ). Таҡтала эшләү.*

**6. Ял минуты.** Арығанһығыҙҙыр. Ял минуты үткәреп алайыҡ. (*Аҡҡан һыу тауышын ҡуйыу, тыңлау, күнегеүҙәр эшләү).*

Уҡыусылар, бына сылтырап аҡҡан йылға, шишмәләр тауышын тыңланыҡ. Ә беҙгә улар кәрәкме һуң? Эйе, ерҙәге бөтә тереклеккә һыу – һауа кеүек кәрәк. Ер шарының картаһына ҡараһаң, донъяла ҙур-ҙур океандар, диңгеҙҙәр бар икәнен күрергә була. Улар Ерҙең иң күп өлөшөн алып тора. Диңгеҙ һыуы ниндәй?

– Тоҙло.

Ысынлап та, диңгеҙ һыуы тоҙло, уны эсеп булмай. Эсергә яраҡлы һыу Ер шарында күп түгел. Хәҙерге ваҡытта халҡы таҙа һыуға мохтажлыҡ кисергән илдәр күп. Шуға ла сөсө һыу ятҡылыҡтарын таҙа тоторға, бысратмаҫҡа кәрәк. Бының өсөн нимә эшләргә кәрәк? (Әңгәмә ҡороу).

**7. 23- сө күнегеү.** Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ. Нөктәләр урынына тейешле һандар өҫтәп, күсереп яҙығыҙ. Һандарҙы табып, уларҙың ябай һанмы, ҡушма һанмы икәнен билдәләгеҙ.

*Дөрөҫ яҙылған һандарҙы слайдта күрһәтеү.*

**8.** Хәҙер алған белемдәрҙе нығытып беҙ һеҙҙең менән синквейн төҙөргә өйрәнәбеҙ. Кем белә: нимә ул синквейн?

Синквейн биш юлдан торған шиғыр. Француз теленән тәржемә иткәндә, *биш уңыш – успех, биш илһам – вдохновение* тигәнде аңлата. Синквейн – яңылыҡты, ҡатмарлы идеяны, тойғоно һәм күренеште бер нисә һүҙ менән бирә белеү оҫталығы.

Һайланған тема буйынса (1-се рәт – “Һыу”, 2-се рәт – “Тәбиғәт” тураһында) шиғыр яҙа:
*1-се юл* – шиғырҙың төп темаһын белдереүсе бер һүҙҙән тороусы исем.
2-се юл – 2 сифат.
*3-сө юл* – 3 ҡылым.
*4-се юл* – шиғырҙың мәғәнәһен асыусы һөйләм (4 һүҙҙән тороусы фраза). фразеологик берәмек, мәҡәл булырға мөмкин.
*5-се юл* – теманы йомғаҡлаусы, дөйөмләштереүсе һүҙ (исем йәки сифат).
*Уҡыусыларҙың яуаптарын тыңлау.*
V. **Өйгә эш.** Уҡыусылар эш төрҙәрен үҙҙәре һайлап ала.
1) 26-сы күнегеү. Нөктәләр урынына тейешле һандарҙы ҡуйып, күсереп яҙырға;
2) Һандар ҡулланып 5 һөйләм төҙөп яҙырға;
2) “Башҡортостан” темаһына синквейн яҙырға.
**VI. Рефлексия. Дәресте йомғаҡлау. Баһалау.**

Шулай итеп, беҙ бөгөн һеҙҙең менән нимәләр белдек?
– Һандар нимәне белдерә?
– Ниндәй һорауҙарға яуап бирә?
– Яһалышы яғынан һандар нимәләргә бүленә?
– Ябай һандар нисә һүҙҙән тора?
– Ҡушма һандар нисә һүҙҙән тора?
– Ни өсөн беҙ йылға-күлдәребеҙҙе һаҡларға тейеш?
– Уҡыусылар, дәрес башында ҡуйған маҡсаттарыбыҙға ирештекме?
– Алған белемдәрегеҙ тормошта кәрәк булырмы? (Уҡыусыларҙы баһалау).

Дәрестә алған белемдәрегеҙҙе тормошта ҡулланырһығыҙ, йылғаларыбыҙҙы һаҡларһығыҙ. Тәртипле, аҡыллы малай һәм ҡыҙҙар булып, Тыуған илебеҙгә файҙалы һәм кәрәкле шәхестәр булып үҫеүегеҙҙе теләйем. Дәрес тамам. Һау булығыҙ!

**Мәксүтова З.М.,**
*Башҡортостан Республикаһы*
*Борай районы Ҡайынлыҡ ауылының*
*урта дөйөм белем биреү мәктәбе МДББУ*

# Башҡортостандың ҡалалары һәм ауылдары. Һан (4-се класс)

**Маҡсаттар:**

Шәхси сифаттарҙы үҫтереү өлкәһендәге үҫеш: балаларҙың телгә ҡарата булған ҡыҙыҡһыныуын, күҙәтеүсәнлеген үҫтереү, Башҡортостандың ҡалалары менән танышыу, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

Метапредмет өлкәһендә үҫеш: халыҡ ижадын өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, балаларҙың фекерләү һәләтлеген үҫтереү.Тәрбиәүи: Башҡортостанға һөйөү тәрбиәләү, Башҡортостан ҡалалары тураһында белешмә биреү. Һан темаһын дауам итеү.

**Йыһазландырыу**: дәреслек, карточкалар, интерактив таҡта.

Дәрес барышы.

1. **Ойоштороу моменты.**

– Һаумыһығыҙ, уҡыусылар, хәйерле көн! Бөгөн һеҙҙә мин ,Мәксүтова Зөлфиә Миҙхәт ҡыҙы дәрес үткәрәсәкмен. Мин һеҙҙе күреүемә бик шатмын. Бөгөн дәрестә беҙ бер-беребеҙҙе аңлап, һөҙөмтәле эш күрһәтербеҙ тип ышанам.

Бөгөн беҙҙә Башҡорт теле
Яратам һине, телем.
Рәхмәт һиңә, һинең аша
Алам мин яҡшы белем.

– Бер-беребеҙгә йылмаябыҙ, йылмайыу күңелдәрҙе иретә, яҡшы кәйеф бүләк итә.

2. **Белемдәрҙе актуалләштереү.**

Дәресте башлар алдынан бер аҙ телдәрҙе лә шымартып алайыҡ.

Үҙ-үҙ-үҙ – Беҙ үҙебеҙ башҡорттар,
Үп-үп-үп –Күп ырыуға баш йорттар,
Ҡа- ҡа-ҡа – Беҙҙә күп ҡалалар,
Ҙә-ҙә-ҙә – Беҙҙә матур ауылдар.

Ә хәҙер ҡарайыҡ, өйҙә тырышып эшләгәнһегеҙме икән? Өйгә эштәрегеҙҙе тикшерәйек әле.

Өйҙә нимә эшләп килергә тейеш инегеҙ. Һандар ҡулланып, хикәйә төҙөп килергә ине. Әйҙәгеҙ, тикшереп үтәйек. (1, 2 уҡыусы сығышы).

3. **Уңыш ситуацияһын тыуҙырыу**.

Алдығыҙҙа ятҡан карточкаларға күҙ һалығыҙ. 1, 2, 3, 4.
– Бер, ике, өс, дүрт, биш – ниндәй һүҙҙәр?
(Һандар)
– Нимә ул һан?
Нимәне белдерә һуң һандар?
– Ниндәй һорауҙарға яуап бирәләр?
(Һан “числительное” предметтың һанын белдерә. Нисә, күпме һорауҙарына яуап бирә).

Ребустарға күҙ һалығыҙ. Унда ниндәй һүҙҙәр йәшеренгән.

1. 


2. 


**7 М, 5 ЕК, 100 ӨК, 5 МӘТ, Б 6 РҒАН.**
(етем – сирота), (бишек – колыбель) йөҙөк – кольцо, бишмәт – костюм, балтырған –Борщеви́к).

Афарин, уҡыусылар, бик әүҙем эшләнегеҙ. Бына ошо ребустар нимәне берләштерә?
Дөрөҫ, уҡыусылар, улар бөтәһе лә Башҡортостандың ҡалаларын аңлаталар.
Бөгөн беҙ һеҙҙең менән дәрестә һан тураһында алған белемдәрҙе нығытасаҡбыҙ һәм Башҡортостандың ҡалалары һәм ауылдары, ундағы эштәр менән танышып китәбеҙ.
**Яңы тема.**
Таҡтаға бөгөнгө датаны һәм теманы яҙып ҡуяйыҡ.
Тема: Башҡортостан ҡалалары һәм ауылдары. Һан.
Ә хәҙер, уҡыусылар, таҡтаға иғтибар итәйек. Бында бөгөнгө дәрестә ҡулланыласаҡ һүҙҙәр күрһәтелгән. Мин уҡыйым, һеҙ минең арттан ҡабатлайһығыҙ.

**Һүҙлек эше.**

Ҡала – город, ауыл – деревня, село, ҡасаба − поселок.

**Әңгәмә.**

Башҡортостан Республикаһында 54 район, 21 ҡала, 4674 ауыл бар. Иң ҙур ҡалалар: Өфө, Стәрлетамаҡ, Салауат, Сибай, Учалы, Нефтекама. Кеше һаны буйынса иң ҙуры – Өфө ҡалаһы, иң бәләкәйе –Ағиҙел ҡалаһы.

Йәше буйынса иң олоһы – Өфө ҡалаһы, иң йәше – Межгорье. (Основан в 1979 году. Город с 1995 года).

Биләгән майҙаны буйынса иң ҙуры – Өфө ҡалаһы, иң бәләкәйе – Яңауыл. Яңауыл ҡалаһы Башҡортостандың төньяғында урынлашҡан, көньяғында Баймаҡ, көнсығышында Учалы, көнбайышында Октябрьский ҡалалары тора.

Учалы, Сибай, Туймазы, Октябрьский, Межгорье ҡалаларының рәсми исеме башҡортса ла урыҫса ла бер төрлө яҙыла һәм уҡыла.

Ҡалалар баш хәреф менән яҙыла.

**Дәреслек буйынса эш.**

1-се күнегеү. Уҡып сығыу; һорауҙарға яуап биреү, 57 - се бит.

– Башҡортостандың баш ҡалаһы ?
– Ул ниндәй?
– Унда нисә кеше йәшәй.?
– Өфө нисә районға бүленгән.?

–Уҡыусылар, һеҙҙең алдығыҙҙа карточкалар ята. Был – **баһалау карточкалары**. Ошо карточкаларға дәрес барышында үҙегеҙгә баһалар ҡуйып барасаҡһығыҙ. Ә дәрес аҙағында беҙ уларға таянып йомғаҡ яһарбыҙ.

| **1-се күнегеү** | **2-се күнегеү** | **Тактала эш** | Ҡалаларҙы парлау | Һүҙбәйләнештәр |
|---|---|---|---|---|
| | | | | |

**4. 1-се күнегеү. Йәйәләрҙе асып һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ. Парҙарҙа эш.**

1) Мин (4) класта уҡыйым. 2) Миңә (10) йәш. 3) Беҙҙең ғаиләлә (5) кеше. 4) Беҙ (21) быуатта йәшәйбеҙ. 5) Мин дәрестә (“5”) алдым. 6) Бөгөн беҙгә (6) дәрес кērә. 7) Минең ағайым (10) класта уҡый. 8) Мин (3) мәктәптә уҡыйым. 9) Миндә (100) һум аҡса бар.

Бына, балалар, һеҙҙең яуаптарығыҙҙың һәр береһендә һандар сағылыш тапты, шулай бит.

**2-се күнегеү. Һандарҙы цифр менән яҙығыҙ.**

| | |
|---|---|
| Һикһән | |
| Егерме | |
| Йөҙ | |
| Алтмыш | |

| | |
|---|---|
| Ун | |

**Ял минуты**.
Бер – баҫайыҡ, киреләйек.
Ике тигәс, эйеләйек.
Өс тигәндә тура баҫ,
Дүрт тигәндә сүкәйҙек,
Биш тигәс тә баҫайыҡ,
Алты тигәс, бер-бер артлы аяҡтарҙа һикерәйек.
Ә етелә ултырайыҡ.

**Тактала эш**. Карточка менән эш. Һүҙҙәрҙе ике төркөмгә бүлеп яҙыу.
Ҡалалар, һандар.
Бәләбәй, ике, Ағиҙел, өс, Бөрө, ун, Мәләүез, Сибай, Өфө, ете, һигеҙ, туғыҙ.

**Төркөмдәр менән эшләү.**

1. Ҡалаларҙы парлау.

| | |
|---|---|
| Бөрө | Агидель |
| Ағиҙел | Уфа |
| Өфө | Стерлитамак |
| Стәрлетамаҡ | Янаул |
| Яңауыл | Бирск |

2. Ауыл тормошона ҡараған һүҙбәйләнештәр аҫтына – йәшел, ҡала тормошона ҡараған һүҙбәйләнештәр аҫтына зәңгәр ҡәләм менән һыҙ.

Заводтар күп,баҡса үҫтерәләр, биш-ун ҡатлы йорттар, мал тоталар, саф һауа, төтөн еҫе, трамвайҙар, троллейбустар йөрөй,университеттар бар, тыныс тормош.

**Дәрескә рефлексив анализ.** Бөгөнгө дәрескә йомғаҡлау үткәрәйек. Бының өсөн һорауҙарға яуап бирәбеҙ.

– Йәше буйынса иң оло ҡала? (Өфө ҡалаһы).

– Ниндәй ҡалаларҙың рәсми исеме башҡортса ла, урыҫса ла бер төрлө яҙыла һәм уҡыла? (Учалы, Сибай, Туймазы, Октябрьский, Межгорье).

– Ниндәй ҡала кеше һаны буйынса иң бәләкәйе?__ (Ағиҙел ҡалаһы).

– Ниндәй ҡала майҙаны буйынса иң бәләкәй ?___ (Яңауыл).

– Башҡортостандың ниндәй ҡалаларын беләһегеҙ?

– Нисә ҡала Башҡортостанда? (21)

– Иң ҙур ҡалаларҙы әйтеп сығығыҙ?

****

Әйҙәгеҙ, балалар, карточкаларығыҙҙан ҡарағыҙ әле, һеҙгә дәрес нисек бирелде? Әгәр ҙә оҡшаһа, алдығыҙҙа ятҡан йәшел түңәрәкте, уртаса бирелһә, һары түңәрәкте күтәрәбеҙ.

Миңә оҡшаны...

Мин белдем...

**Өй эше.** 1. Ауылдағы эштәр аҫтына һыҙып сығарға (41-се бит, 1-се күнегеү).

2. Һандар ингән мәҡәлдәр табып яҙырға.

3. Ауыл тормошо темаһына һүрәт төшөрөп, шул һүрәт буйынса хикәйә төҙөп килергә (39-сы бит, 3-сө күнегеү).

Уҡыусылар, дәрестә бик актив булдығыҙ! Рәхмәт, бөгөн алған белемдәрегеҙҙең тормошта файҙаһы тейер, тип ышанам. Дәресте шиғыр юлдары менән тамамлайыҡ.

Әсә телен белгәндең<br>
Теле матур, бай булыр.<br>
Белмәгәндең белеме<br>
Һәм күңеле һай булыр.

**Мостафина А.Н.,**
*Башкортостан Республикаһы Борай районы*
*Борай ауылының 1-се һанлы урта дөйөм белем биреү мәктәбе МДББУ*

# Башҡорт теле дәрестәрендә дистанцион технологиялар ҡулланыу

Бөгөн дистанцион белем биреү, һәр уҡытыусының үҙ уҡыусылары өсөн майҙансыҡ ойоштороу мәсьәләһе киҫкен тора. Үҙ уҡыусылары өсөн булдырылған майҙансыҡ платформаларын өс төркөмгә бүлергә була: социаль селтәр базаһы, белем биреү һәм уҡытыусыларҙың шәхси сайттары. Интернет сайт, күп уҡыусылар өсөн ҡыҙыҡлы буласаҡ, әммә уҡытыусыларҙан был интернет-ресурс өҫтөндә эшләү, билдәле булыуынса, сайт төҙөү күнекмәләрен белеүҙе талап итә.

Уҡытыусылар белем биреү өлкәһендә маркетинг тураһында һөйләй башланылар, йәғни беҙ балаларҙың менталь фекер йөртөү һәләтен поп- культуранан ситләштерергә тейешбеҙ. Был өлкәлә методологиялар бар, әммә эшләү инструменттары аҙ. Дистанцион уҡытыу системаһы, атап әйткәндә, уҡытыусыларҙың интернет-сайттары һәм веб-сервис ZOOM быны эшләй ала, сөнки улар балалар өсөн ғәҙәти мөхиттә ҡыҙыҡлы итеп дәрестәр үткәреүгә мөмкинлек бирәсәк, шул иҫәптән интерактив биремдәр ҙә ҡулланып була.

Шунан уҡыусыларҙың уҡыуға мотивацияһы күтәрелә, уларҙың ижади һәм интеллектуаль потенциалы оҫта үҙойошоу һәм компьютер техникаһы менән бәйләнеш иҫәбенә арта.

**Дәрескә технологик карта**

Ф.И.О: Мостафина Айгөл Нәғим ҡыҙы

Вазифаһы: башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы

Предмет: башҡорт теле

Класс: 6

Дәрес тибы: яңы материал өйрәнеү

Дәреслек: В.И.Хажин ,Ә.Х.Вилданов, М.И.Ҡарабаев, З.Р.Әминева.

Дәрес формаһы: дистанцион дәрес http://aimustafina.ucoz.ru/ сайтында һәм веб-сервис ZOOM урынлаштырылған дәрес материалдарын ҡулланыу.

**Дәрестең темаһы:** Һан тураһында төшөнсә. Ябай һәм ҡушма һандар.

**Маҡсат:** Һан тураһында төшөнсә биреү, ябай һәм ҡушма һандарҙы айыра белеү, уларҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡуллана белергә өйрәтеү, уҡыусыларҙың фекерләү һәләтен арттырыу, һөйләү телмәрен үҫтереү, тыуған тәбиғәтебеҙгә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.
Уҡытыу онлайн-платформаһы: Уҡытыусының шәхси-сайты. Сайттың адресы: **http://aimustafina.ucoz.ru**

**I. Ойоштороу мәле.**

1. Уҡыусылар ЗУМ плотформаһына һәм уҡытыусының шәхси сайтына инеп бер-береһен сәләмләйҙәр. Сайт: http://aimustafina.ucoz.ru и вебсервис ZOOM.

Уҡытыусының сәләмләү һүҙҙәре:

– Балалар, хәйерле көн!

– Хәйерле булһын, хәйерле бөгөнгө уйҙарыбыҙ.

Уйҙы тормошҡа ашырһын

Һөнәрле ҡулдарыбыҙ!!!

**II. Артикуляцион күнегеү.** (тиҙәйткесте интернет-ресурстан үҙ аллы уҡыу).

*(2 ҡат эстән уҡығас, хор менән әйттереү).*

– Һигеҙбай **һигеҙ** һарыҡ һуйып һатҡан, **һигеҙе** лә һип- һимеҙ.

– **Һигеҙ** һарыҡ ыҙанда, һимеҙ һарыҡ һабанда.

**III. Дәрестең маҡсатын билдәләү:** Был тиҙәйткестә ниндәй һүҙҙәр ҡара хәреф менән яҙылған? Улар ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай? Тимәк бөгөнгө дәрестең темаһы ниндәй?

**IV. Яңы темаға күсеү.**

– Эйе, ысынлап та, һандар кеше ғүмерендә ҙур һәм мөһим роль уйнай. Һан-бик кәрәкле һәм мөһим һүҙ төркөмө! Ә нимә ул һан? Уның ниндәй төрҙәре бар? Бөгөн беҙ ошо һорауҙарға яуап бирәсәкбеҙ!

1. Дәфтәрҙәргә числоны, теманы яҙыу.
2. Электрон ресурстан һандар тураһында белешмәне уҡыу.

**Һандар (имена числительные)** предметтың иҫәбен белдерә. Башҡорт телендә һанды белдереүсе 20 һүҙ бар: бер ,ике, өс, дүрт, биш, алты, ете, һигеҙ, туғыҙ, ун, егерме, утыҙ, ҡырҡ, илле, алтмыш, етмеш, һикһән, туҡһан, йөҙ, мең. Башҡа бөтә һандар ошо һүҙҙәрҙең теҙмәһенән яһала: ун ике, ике йөҙ мең, алты йөҙ туҡһан бер. Бер генә һүҙҙән торған һандар ябай һан тип, ә ике йәки бер нисә һүҙҙән торған һандар ҡушма һандар тип атала. Ҡушма һан эсендәге бөтә һүҙҙәр ҙә айырым яҙыла: ике мең өс йөҙ илле алты – 2356

**V.Яңы теманы аңлатыу.**

Һан – предметтың иҫәбен, уның һаналыу тәртибен белдергән һүҙ төркөмө. Ул нисә? Күпме? Нисәнсе? Нисәү? Нисәшәр? һорауҙарына яуап бирә: 5-се автобус, миңә 13 йәш, 2009 йыл.

Һандар килеш, һан менән үҙгәрмәй: 6 класта 25 уҡыусы. Баҡсала 1 алмағас үҫә. Һөйләмдә аныҡлаусы булып килә.

1. Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады жанры булған мәҡәл, әйтем, экиәттәрҙә лә 7 һаны йыш осрай. Әйҙәгеҙ әле шуларҙы иҫкә төшөрәйек.

*7 ҡат үлсә, 1 ҡат киҫ. Егәрлелең ҡулы 7. Батырҙарҙың 7 юл сатында 7 башлы аждаһаны еңеүе,.Батырҙарҙың 7 диңгеҙ, 7 тау гиҙеүе.*

**VI. Һүҙлек эше үткәреү.** ***<u>Һүҙлек диктанты.</u>*** (уҡыусылар сайттың интернет-ресурсын ҡулланып дөрөҫ яуаптарҙы түбәндәге формаларға яҙып, уҡытыусының электрон почтаһына һалалар).

(Е, йе)гет, оҙон (лоҡ, лыҡ), йы(йе, йы)лыш, (йә,я)шелсә, ке(е, йе)к, төлкө(не, нө), (ю,йу)лдар. *<u>(Сайттын интернет-ресурсы).</u>*

**Орфограммалар:**

Һүҙ башында е хәрефе, һүҙ уртаһында йе ҡушымсаһы яҙыла. Башҡорт һүҙҙәрендә йо ҡушымсаһы яҙыла . Тамырында ла о (ө), ялғауында ла о (ө) ҡалын һүҙҙә ҡалын ҡушымса, нәҙек һүҙҙә нәҙек ҡушымса. Йу, йа ҡушымсалары юҡ, ю, я хәрефен яҙабыҙ.



ФИ ученика *:

E-mail ученика *:

Класс обучения *:

Школа *:

Соглашаюсь на обработку моих персональных данных в соответствии с условиями пользовательского соглашения*:

Һүҙлек диктанты:

Отправить ОТВЕТ

**VII. Ял итеү минуты.**

Берәү, икәү, өсәү, дүртәү,<br>
Бер ҡулымда бармаҡ бишәү.<br>
Күҙем икәү, танау берәү<br>
Ҡолаҡтарым да икәү.

**VIII. Тест.**

| | |
|---|---|
| 1. Һан нимәне белдерә?<br>1) Предметтың атамаһын.<br>2) Предметтың иҫәбен.<br>3) Предметтың билдәһен.<br>4) Предметтың эшен. | 2. Һандар ниндәй һорауҙарға яуап була?<br>1) Кем? нимә?<br>2) Күпме? нисә?<br>3) Ни эшләй? |
| 3. Икешәр ,өсәр, бишәр – был һандар ниндәй төркөмгә ҡарай?<br>1) Рәт һаны.<br>2) Бүлем һаны.<br>3) Сама һаны.<br>4) Төп һан.<br>5) Йыйыу һаны. | 4. Икәү ,өсәү, алтау – был һандар ниндәй төркөмгә ҡарай?<br>1) Рәт һаны.<br>2) Бүлем һаны.<br>3) Сама һаны.<br>4) Төп һан.<br>5) Йыйыу һаны. |
| 5. Ике өс алтмыш – был һандар ниндәй төркөмгә ҡарай?<br>1) Рәт һаны.<br>2) Бүлем һаны.<br>3) Сама һаны.<br>4) Төп һан.<br>5) Йыйыу һаны. | 6. Унынсы, бишенсе, егерменсе – был һандар ниндәй төркөмгә ҡарай?<br>1) Рәт һаны.<br>2) Бүлем һаны.<br>3) Сама һаны.<br>4) Төп һаны.<br>5) Йыйыу һаны. |
| 7. Ҡушма һандарҙы билдәләгеҙ. | 8. Ябай һандарҙы билдәләгеҙ. |

| | |
|---|---|
| 1)Егерме өс.<br>2)Етенсе.<br>3)Өсәрләп. | 1)Биш.<br>2)Ун бер.<br>3)Илле бишенсе. |
| 9.Үлсәү һүҙҙәре булған һандарҙы табығыҙ.<br>1) Биш ҡолон.<br>2) Өс оя ҡаҙ<br>3)100 һум аҡса. | 10.Һан ҡатнашҡан исемдәрҙе табығыҙ.<br>1) Илле.<br>2) Дүртөйлө.<br>3) Миллион. |

**Тестың яуаптарын электрон ебәреү формаһы** (түбәндә скриншоты бирелә).




**IX. Күнегеүҙәр өҫтөндә эш.**

***177-се күнегеү.*** Һорауҙарға яуаптар яҙығыҙ. Һинең буйың, ауырлығың күпме? Оҙонлоҡҡа, бейеклеккә нисә сантиметр һикерә алаһың? Турникта нисә тапҡыр күтәрелә алаһың? Һинең сумкаңда бөгөн нисә китап бар? Әле дәфтәреңдең нисәнсе битенә яҙаһың? Был күнегеү китаптың нисәнсе битендә?

**X. Дәресте йомғаҡлау.**

Шулай итеп, беҙ бөгөн һеҙҙең менән нимәләр белдек? (уҡыусылар менән кире элемтә булдырыу).

1. Һандар нимәне белдерә?
2. Ниндәй һорауҙарға яуап бирә?
3. Яһалышы яғынан һандар нимәләргә бүленә?
4. Ябай һан. Нисә һүҙҙән тора?

**XI. Өй эшенә әҙерлек.**

Хикәйә яҙырға: «Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын».

**XII. Рефлексия.**

Дәрестә ниндәй яңылыҡ алдығыҙ? Дәрес оҡшанымы? Үҙегеҙҙең эшегеҙгә ниндәй баһа, билдәләр ҡуйырһығыҙ?

**XIII. Баһалау. Йомғаҡлау.**

– Дәрестә әүҙем ҡатнашып, матур яуаптар бирҙегеҙ. Бөтәгеҙгә лә рәхмәт! (баһалар ҡуйыу).

**Әҙәбиәт**


1. Хажин, В.И. Башкирский язык и литература [Электронный ресурс]. Режим доступа: URL:http://www.kitapufa.ru/information/elektronnye-uchebnye posobiya.php
2. Габитова, З. М., Башкорт теле [Текст]: учеб. пособие / З.М. Габитова, М.Г. Усманова. – Уфа: Китап, 2019. Режим доступа: URL:http://www.kitapufa.ru/information/elektronnye-uchebnye posobiya.php

**Рәхимова М.М.,**
*Н.А.Мәжитов исемендәге Красноусол башҡорт гимназия-интернаты*

# «Һан» темаһын ҡабатлау буйынса дәрес-сәйәхәт (6-сы класс)

**Маҡсат**: а) һан темаһы буйынса алған белемдәрен камиллаштырыу; һандарҙы дөрөҫ яҙырға өйрәтеү; б) һандарҙы телмәр стилендә дөрөҫ ҡулланыу һәм дөрөҫ яҙыу күнекмәләрен үҫтереү; в) туған телгә, тәбиғәткә һөйөү һәм һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу**: мультимедиа, компьютер, “маршрут биттәре”, ҡабатлау өсөн терәк- схема, дәреслек.

**Дәрес барышы:**

**1.Ойоштороу моменты**.

Башҡорт теле низән кәм тип,
Һәр кемдә уянһын сәм.
Үҙ телен онотҡан йәндең
Тормошонда булмаҫ йәм, – тигән шиғыр юлдары менән башлайбыҙ бөгөнгө башҡорт теле дәресен.

– Һаумыһығыҙ, ҡәҙерле уҡыусыларым! Кәйефтәрегеҙ нисек? Һеҙҙең көләс, мөләйем йөҙҙәрегеҙҙе күреүемә мин бик шатмын.

**2.Фекерләүҙе үҫтереү өҫтөндә эш. Бирелгән мәкәлдәрҙе дауам итегеҙ.**

Ете ҡат үлсә, (*бер ҡат киҫ)*
Йөҙ һум аҡсаң булғансы, (*йөҙ дуҫың булһын)*
Көслө берҙе еңер, (*белемле меңде еңер)*
Батыр бер үлә, *( ҡурҡаҡ мең үлә)*

– Ошо мәкәлдәрҙең ҡайһыныһын бөгөнгө дәрестең девизы итеп алырға мөмкин? Ни өсөн ?

– Ә хәҙер бер-берегеҙгә яҡшы кәйеф теләп, ҡаршыла, йәнәшәлә ултырған класташтарығыҙҙы сәләмләгеҙ! Һәм бергәләп девизды ҡабатлағыҙ!

**3. Телде шымартыу.**

– Дәрес башында телдәрҙе шымартып алайыҡ әле. Һеҙҙең алдығыҙҙа тиҙәйткес, уны беҙ тиҙ генә әйтергә тейешбеҙ.

Мейес башында биш бесәй,
Биш бесәйҙең биш башы.
Биш бесәйҙең биш башына
Емерелмәһен мейес башы.

**4. Дәрестең темаһы, маҡсаты менән таныштырыу, сәйәхәткә саҡырыу.**

– Мин һеҙҙе бөгөн сәйәхәткә саҡырмаҡсымын. Сәйәхәтебеҙ ябай түгел, ә үҙенсәлекле. Ул беҙҙе Морфология илендәге бер ҡаласыҡ менән таныштырасаҡ. Уҡыусылар, һеҙ нисек уйлайһығыҙ, нимә ул сәйәхәт?

(*Сәйәхәт – ул ҡайҙалыр булһа барыу*) Эйе, сәйәхәт – ул күңел асыу йәки белем алыу маҡсаты менән ҡайҙалыр булһа барыу. Ә бөгөнгө сәйәхәтебеҙҙең маҡсаты ниндәй икән: белем алыумы, әллә күңел асыумы? (*Белем алыу*) Дөрөҫ, маҡсатыбыҙ – белем алыу. Шул уҡ ваҡытта үткән дәрестәрҙә алған белемдәрҙе иҫкә төшөрөү. Ниндәй ҡаласыҡ тураһында һүҙ бара икән, һеҙ нисек уйлайһығыҙ? (*Һандар иленә*). Дөрөҫ, әлбиттә Һандар ҡалаһы.

– Дәрескә ниндәй маҡсат ҡуябыҙ? Тимәк, беҙ сәйәхәтебеҙҙә һандар тураһында үтелгәндәрҙе ҡабатлауҙы маҡсат итеп ҡуябыҙ.

**Дәфтәрҙәргә числоны, теманы яҙыу.**

**5. “Телефон ” уйыны.**

– Әлбиттә, ҡунаҡҡа барыр булғас, балалар, беҙ алдан килеүебеҙҙе хәбәр итеп, телефондан шылтыратырға тейешбеҙ. Ә телефон номерын белер өсөн киләһе эште башҡарырға кәрәк булыр.

| **Һүҙбәйләнеш** | | **Аҫҡыс** | **Төркөмсәһе Номеры** |
|---|---|---|---|
| 0,2 миллиметр | ... | төп | 1 |
| Икәү килә | .... | кәсер | 2 |
| 2019 йыл | ... | йыйыу | 3 |
| өс көн, өс төн | ... | рәт | 4 |
| етеле шәм | ... | бүлем | 5 |
| өсәр алма | ... | үлсәү | 6 |

– Беренсе бағанала бирелгән һүҙбәйләнештәрҙә һандарҙы табып, төркөмсәләрен билдәләгеҙ һәм нөктәләр урынына аҫҡысты ҡуйығыҙ. Өҫтән аҫҡа уҡыһағыҙ, телефон номерын белерһегеҙ (*Уҡыусылар эште башҡара*).

– Ниндәй номер барлыҡҡа килде? (23-41-65)

– Афарин. Бына ниндәй номер икән. Килеүебеҙ тураһында хәбәр иттек.

**6. Ребус сисеү.**

– Бына беҙ ҡала ҡапҡаһы янына килеп тә еттек. Ҡалаға үтер өсөн ребус сисергә кәрәк. Балалар, ребусты сисәбеҙме? Ребуста нимә тип яҙылған? (*Бер ағас ҡырҡһаң, икене ултырт*).

– Мәҡәлдең мәғәнәһен нисек аңлайһығыҙ.

– Дөрөҫ. Бөгөнгө көндә экологик проблемаларҙың береһе – ул урмандарҙы һаҡлап ҡалыу. Ерҙә йәшәүсе һәр кешенең изге бурысы. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, урманды һаҡлауҙа беҙ нимә эшләй алабыҙ һуң?

– Мәҡәлдә һандар бармы? Ниндәй төркөмсәгә ҡарай? *(Төп һандар*).

Бына беҙгә ҡаланы күрһәтеүсе дуҫтарыбыҙ менән танышырға ла ваҡыт етте.

**7. Һандар темаһы буйынса ҡабатлау (1-се экскурсоводты осратыу).**

– Таҡтаға күҙ һалайыҡ әле, унда – Һан ҡаласығының картаһы. Улар беҙҙе үҙҙәренең ҡалалары менән таныштырып үтер. Һеҙ иғтибар менән тыңлап ултырығыҙ, осраған һәр һанды дәфтәрҙәрегеҙгә яҙып ҡуйығыҙ. Рәхим итегеҙ.

**1-се экскурсовод.**

*Беҙҙең ҡала Һандар ҡалаһы тип атала. Унда ике киң проспект: төп һәм рәт һандары проспекттары. Төп һандар проспектының һул яғында иң күп халыҡ йәшәй. Урамдың биҙәге булып ҡырҡ рауза, туҡһан хризантема һәм йөҙ тюльпан үҫкән клумбалар тора. Төп һандар проспектының күршеһе – Кәсер һандар урамы. Был урамда бөтә өйҙәр ҙә ике ҡатлы. Яҡында ғына Йыйыу һандары урамы урынлашҡан. Был урамда йәшәүселәр бик татыу. Сәскәләр үҫкән ерҙә ялғауҙар фонтаны бар. Бында бигерәк тә рәт һәм бүлем һандары килергә ярата.*

– Ҙур рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Ә класс ниндәй һандарҙы яҙҙы икән? (*ике, ҡырҡ, туҡһан, йөҙ*).

– Ә хәҙер, 2-се экскурсоводтың һөйләгәнен тыңлап, картаға иғтибар менән ҡарайыҡ һәм ҡалала ниндәй ҡағиҙәләр барлығын асыҡлайыҡ.

**2-се экскурсовод:**

*Әгәр Рәт һандары проспекты буйлап атлаһаҡ, ундағы тәртипкә хайран ҡалабыҙ. Һәр өй үҙенсәлекле. Был проспектта иң ҡарт урам – Ҡушма һандар урамы. Ул бер мең ике йөҙ егерме беренсе йылда барлыҡҡа килә. Бында йәшәүселәр бик йөрөргә яратмайҙар, ләкин иң һуңғы өйҙә йәшәүселәр генә фонтанға барып ялғау алып ҡайта. Ә Сама һандары урамында йәшәүселәр һәр ваҡыт үҙҙәре менән һыҙыҡ йөрөтә. Ябай һандар урамында йәшәүселәр яңғыҙ йәшәйҙәр. Ҡала ситендә зәңгәр таҫма кеүек Һөйләм йылғаһы аға.*

*Беҙҙең ҡалаға рәхим итегеҙ!*

– Ә хәҙер, 2-се экскурсоводтың һөйләгәнен иҫкә төшөрөп, һандар иленең дөрөҫ яҙылыу ҡағиҙәләрен ҡабатлайыҡ.

1) Сама һандары, арауыҡты күрһәтеүсе һандар һыҙыҡ аша яҙыла.
Мәҫәлән, 2-3 кеше, 4-5 көн.

2) Рәт һәм бүлем һандары ялғау ҡабул итһә, һыҙыҡса аша яҙыла: 5-се парта, 2-шәр бала;

3) һандар килеш ялғауы ҡабул итһә, ялғау һыҙыҡса аша яҙыла;

4) ҡушма һандарҙа һуңғы һүҙгә генә ялғау ҡушыла: егерме бишенсе

5) датаны белдереүсе һандарҙа ялғауҙар менән уҡылһа ла, яҙғанда ялғау яҙылмай.

Сәйәхәт итеп арып та киткәнһегеҙҙер, әйҙәгеҙ, ял итеп алайыҡ.

**8.Физминутка.**

**9.“Маршрут биттәр”е тултырыу (1-2, 3-4 парҙар эшләй).**

– Артабан беҙгә “маршрут бит”тәре тултырырға кәрәк. Карточкаларҙа яҙылған һандарҙы төркөмсәләр менән үҙгәртергә.

– Ә хәҙер үҙенең “маршрут бит”ен ...... уҡып күрһәтә. (1-2 уҡыусының эшен тыңлау).

**10.“Йәш сәсәндәр” туҡталышы. Ҡобайыр яҙыу. (1-3, 2-4 парҙар эшләй).**

– Уҡыусылар, сәйәхәтебеҙҙең һуңғы туҡталышына ла килеп еттек. Ул “Йәш сәсәндәр ” тип атала. Әйҙәгеҙ, бергәләп ҡобайыр яҙып ҡарайыҡ. Мин беренсе юлын әйтәм, һеҙ тамамлайһығыҙ.

– Ай, афарин. Ҡобайырыбыҙ ниндәй эстәлекле булды. Сәйәхәтебеҙ аҙағына ла етте. Оҡшанымы?

**11.”Йомробаштар” туҡталышы (Математик һорауҙарға яуап биреү).**

1.Страус бер аяғында 60 кг тарта ? Ике аяғына баҫһа, нисә кг тартыр?

2. Самолет Санкт- Петербургтан 1 сәғәт оса, ә кайтканда 60 минут. Ниңә улай?

3. Былтыр 30 февралдә нимә булды?

4. Нимә еңелерәк: 1 кг тимерме, әллә 1 кг мамыҡмы?

**12. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Тест.**

1. Һан нимәне аңлата?

а) Предметтың эшен

б) Предметтың билдәһен

в) Предметтың иҫәбен

2.Ҡайһы һандың яҙылышында хата бар:

а) 2-се рәт

б) 9-сы Май байрамы

в) 3-сө һанлы мәктәп

3. <u>Мин 6-7 йәштәремдә үк ғәрәп һәм фарсы телдәре менән бергә урыҫ телен дә өйрәнә башланым</u> һөйләмендә һанды табып төркөмсәһен билдәләгеҙ:

а) Рәт һаны

б) Сама һаны

в) Йыйыу һаны

**12. Баһалау.**

**13. Рефлексия.**

**14. Йомғаҡлау.** – Уҡыусылар, дәрес барышында ниндәй маҡсат ҡуйылғайны? Маҡсатыбыҙға ирештекме?

– Ниндәй эш ауыр булды? Нимә оҡшаны?

**14. Өйгә эш.** а) 159-сы күнегеү; б) һандар ҡулланылған географик атамалар яҙырға; в) ”Минең яратҡан һаным” темаһына фекер алышыуға әҙерләнергә.

**Ғәләүетдинова Р.Р.,**

*Башкортостан Республикаһы Дүртөйлө районы*

*Исмаил ауылының урта дөйөм белем биреү мәктәбе МДББУ*

# Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәрҙе ҡабатлау (6-сы класс)

**Маҡсат:**
– янғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәрҙе айыра белеү һәм дөрөс яҙыу;
– уҡыусыларҙың яҙыу һәм һөйләү телмәрен үҫтереү;
– ата-әсәгә, туғандарға ҡарата һөйөү тәрбиәләү.
**Йыһазландырыу:** дәреслек, компьютер, экран.
**Дәрес барышы:**
**Ойоштороу мәле**
– Хәйерле көн, уҡыусылар, хөрмәтле ҡунактар! Дәресебеҙҙе башлайбыҙ. Бөгөн кем дежур? (Бөгөн мин дежур...)

Минең исемем ....
Минең фамилиям ...
Бөгөн 28 ғинуар
Кесаҙна
Көн һалҡын, ҡар яуа.
Дәрестә юҡ ....
Беҙ башҡорт теле дәресен яратабыҙ

– Ярай.Ултыр.
– Дәрестә дөрөҫ, матур итеп һөйләшер, уҡыр өсөн, әйҙәгеҙ, телде шымартып алайыҡ. Бының өсөн башҡкорт теленең үҙенсәлекле хәрефтәрен ҡабатлап сығайыҡ: **ғ ҙ, ҡ, ң, ө, ҫ, ү, һ, ә**
– Тимәк, башҡорт телендә рус теленән айырмалы булараҡ, үҙенсәлекле 9 өн бар: **ғ ҙ, ҡ, ң, ө, ҫ, ү, һ, ә (ошо өндәр менән һүҙҙәр һөйләмдәр төҙөү).**

**II. Яңы тема өтөндә эш**
– **Әминә, Әклимә** **мәктәпкә** **килделәр.**
**Был һөйләмдең баш киҫәктәрен табығыҙ (Әминә, Әклимә – эйә, килделәр - хәбәр).**
Әминә, Әклимә һүҙҙәре ниндәй хәрефтән башлап яҙылған? **(Ҙур хәрефтән башлап яҙылған)**
– Тимәк, был Әминә, Әклимә янғыҙлыҡ исемдәр.
– Өҫтәлдәр, ултырғыстар класта бар.
– Был өҫтәлдәр, ултырғыстар һүҙҙәре хаҡында нимә әйтеп була? **(Был һүҙҙәр уртаклыҡ исемдәр, үткән дәрестә беҙ һеҙҙең менән уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр тураһында һөйләшкән инек).**
– Дөрөҫ.

–Бөгөнгө дәрестең темаһы: **Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр темаһын ҡабатлау.**
–Уҡусылар, дәфтәрҙәрҙе асып бөгөнгө числоны яҙып ҡуйығыҙ.

**Егерме һигеҙенсе ғинуар, кесаҙна.**

**– Ә бына был һүҙҙәр һеҙгә дәрес дауамында ҡәрәк буласаҡ.**
– **Һүҙлек эше**:
Көйләү – напевать
Хуплау – поддержать
Ҡапҡан – капкан
Тонсоғоу – задыхаться
Мәке – прорубь
Һүҙлек һүҙҙәре менән танышып алдыҡ, был һүҙҙәрҙе һеҙҙең ҡайҙа ишеткәнегеҙ бар? (Өйҙә укып килгән шиғырҙа).
– Эйе, үткән дәрестә мин һеҙгә өйгә эше итеп “Уртаҡ ҡыш” тигән шиғырҙы тасуири укырға ҡушҡан инем. Әйҙәгеҙ, хәҙер китаптарығыҙҙы асығыҙ: 60-сы бит, берәр куплетлап сылбырлы уҡыйбыҙ һәм берәр яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр табабыҙ.
Ә хәҙер теманы күнегеүҙәр менән нығытыу эшләйбеҙ – өйҙә уҡып килгән шиғырҙа яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр табығыҙ ...(1-се строфала ғына).
-Беренсе строфала янғыҙлыҡ исемдәр (Дим, Динис)
-Урталыҡ исем беренсе строфала (апай, ҡыш, буран)
-2-се строфала яңғыҙлыҡ исемдәр (Булат, Ләлә, Мәрҙинә, Әхиәр)
-2-се строфала уртаҡлыҡ исемдәр (апай, ҡыш,)
-3-сө строфала яңғыҙлыҡ исемдәр (Ләлә)
-3-се строфала уртаҡлыҡ исемдәр (ҡыш, боҙ)
-4-се строфала уртаҡлыҡ исемдәр (әкиәт)
-5-се строфала яңғыҙлык исемдәр (Динис)
-6-сы строфала уртаҡлыҡ исемдәр (ҡул,сана)
-7-се строфала яңғыҙлык исемдәр (Дим)

**Тимәк, ниндәй һығымта яһап була?**
**Ҡағиҙә ... (Слайд)**

**Части речи - Һүҙ төркөмдәре**

| **САМОСТОЯТЕЛЬНЫЕ – ҮҘ АЛЛЫ** | | | |
|---|---|---|---|
| **Части речи<br>Һүҙ төркөмдәре** | **Что обозначает?<br>Нимә белдерә** | **Вопросы<br>Һорауҙар** | **Примеры<br>Миҫалдар** |
| **Существительное<br>Исем** | предмет | **кем? кемдер? – кто?**<br>(употребляется только для наименования человека)<br>**ни? нимә? ниҙәр?** | ҡала – город<br>һыу – вода<br>һауа – воздух<br>ҡош – птица<br>малай - мальчик |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | **нимәләр? – что?** (для названий всех остальных живых существ, предметов и явлений) | |

**Рус телендәге кеүек, башҡорт телендә лә яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр була. Яңғыҙлыҡ исемдәр ҙур хәрефтән яҙыла.**
**– Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ! Существительные делятся на:**
**1. Имена собственные (янғыҙлыҡ исемдәр):** Өфө, Нефтекама, Урал тауы, Сәлимә, Алина, Андрей, Ағиҙел, Ҡариҙел.
**2.Имена нарицательные (уртаҡлыҡ исемдәр):** өҫтәл, ҡала, ауыл, китап, урман, ҡалаҡ, тәҙрә, өй.
**К именам собственным относятся** имена, фамилии людей и псевдонимы: Айһылыу, Рәшитова, Пётр, Олег, Варвара.
**Кем? Нимә? һорауҙарына яуап бирә.**

– Ә хәҙер иғтибарығыҙҙы слайдҡа.
– Был һүрәттә кем? **(өләсәй) (Слайд).**
– Ә рус телендә нисек була? **(бабушка**).
– Дүртөйлө районы диалектында өләсәйҙе нисек атайбыҙ? (Нәнәй, дәү әни).
– Был һүрәттә кем? **(әсәй) (Слайд).**
– Был һүҙҙәрҙе дөйөмләштереп бер һүҙ менән нәмә тип әйтеп була? **(ғаилә) (Слайд).**
– Яҡшы, дөрөҫ.
– Уҡыусылар, ә хәҙер мин һеҙгә карточкалар таратып бирәм, һеҙ төшөп ҡалған хәрефтәрҙе яҙығыҙ.

| Әҙәби телдә | Тәржемә | Диалектта |
|---|---|---|
| **әс...й** | **м...ма** | **әнк...й, эн...й** |
| **ат...й** | **папа** | **ат...й, эт...й** |
| **өл...сәй** | **б...бушка** | **нән...й, ҡар...ый, дәү эн...й** |
| **ола...ай** | **дед...шка** | **ҡарт...тай, дәү эт...й** |
| **...пай** | **ст...ршая сестра** | **а...а** |
| **ағ...й** | **бр...т** | **аб...й** |
| **һе...ле** | **младшая с...стра** | **ап..й, сеңл...** |
| **ҡ...сты** | **мл...дший брат** | **энек...ш** |

**-Тикшерәйек**

| Әҙәби телдә | Тәржемә | диалектта |
|---|---|---|

| | | |
|---|---|---|
| **Әсәй** | **Мама** | **энкәй, эней** |
| **Атай** | **Папа** | **атай, этей** |
| **Өләсәй** | **Бабушка** | **нэнәй, картый, дәү эней** |
| **Олатай** | **Дедушка** | **картатай, дәү этей** |
| **Апай** | **старшая сестра** | **апа** |
| **Ағай** | **Брат** | **абый** |
| **Һеңле** | **младшая сестра** | **апай, сеңле** |
| **Ҡусты** | **младший брат** | **энекәш** |

– **Ял минуты.**
**Бастыҡ ...**
– Балалар, беҙҙең мәктәптә шәжәрә төҙөү буйынса бәйге бара. Видеояҙмалар килә башланы. Шуның берәһен ҡарап үтәйек. **(Видеояҙма ҡарау).**

– Ә хәҙер һүҙҙе ... Әйҙәгеҙ, шәжәрәләр менән танышып китәйек.
– Ҡалғандарығыҙ ҙа шәжәрәләрегеҙҙе килтереп бөтөрөрһөгөҙ һәм видеояҙмаларығыҙҙы миңә ебәрерһегеҙ.
– Ғаилә – һәр кемдең тормошонда ҙур роль уйнай. Ауыр саҡта ла, шатлыҡлы мәлдәрҙә лә беҙ ғаиләбеҙгә ашығабыҙ. Унда беҙҙе көтәләр, яраталар, аңлайҙар.
**Рефлексия.**
– Шулай итеп, бөгөн дәрестә беҙ нимә эшләнек?
– Ә хәҙер көндәлектәрегеҙҙе асығыҙ, өй эше: «Минең ғаилә" темаһына мини-минша яҙып килергә. (слайд).
– Көндәлектәрегеҙгә үҙегеҙгә-үҙегеҙ баһа ҡуйығыҙ.
– Кемдәр "5" алды?
– Кемдәр "4" алды?
– Афарин, барығыҙ ҙа дәрестә яҡшы ҡатнашып ултырҙығыҙ. Ҙур рәхмәт, балалар.
– **Дәрес тамам.**
–Хөрмәтле ҡунаҡтар, иғтибарығыҙ өсөн һеҙгә ҙур рәхмәт.

Әҙәбиәт

1. Султанбаева Х.В. Частицы речи в современном башкирском языке// Ядкяр. – 2016. – №1. – С. 72-76.
2. Дмитриев Н.К. Грамматика башкирского языка / Н.К.Дмитриев. – М.; П.: Изд-во АН СССР, 1948. -276 с

**Сәйетгәрәева Ә.Ф.,**
*Бөрө ҡалаһының 1-се һанлы урта дөйөм белем биреү мәктәбе*

# Биҙәктәр. Исемдәрҙең күплек формаһы

**Маҡсаттар:**

1. Уҡыусыларҙың башҡортса төҫтәр тураһында алған белемдәрен иҫкә төшөрөү; текст менән таныштырыу;
2. Балаларҙың һөйләү телмәрен үҫтереү; һүҙлек запасын байытыу;
3. Исемдәрҙең күплек ялғау формаларын үҙләштереүҙе дауам итеү;
4. Тыуған илгә, тәбиғәткә, бер-береһенә ҡарата һөйөү, ихтирам тойғоһон тәрбиәләү.

**Йыһазлау:** паравоз, сәйәхәт схемаһы, тиҙәйткес, сәскә һүрәте, дәреслек, һүҙлек, япраҡтар, таблица, карточкалар.

**Дәрес барышы.**

1. ***Ойоштороу моменты.***

*Башҡортса иҫәнләшеү.* – Һаумы, ҡояш,

Һаумы, дуҫым,
Һаумыһығыҙ, уҡытыусым!
Бөгөн беҙҙә башҡорт теле,
Яратам һине, телем.
Рәхмәт һиңә,
Һинең аша алам мин белем.

2. ***Дәрестең темаһы һәм маҡсаты менән таныштырыу.***

– Балалар, бөгөн беҙҙең дәрескә ҡунаҡтар килгән. Әйҙәгеҙ, үҙебеҙҙең белемдәребеҙҙе күрһәтәйек. Яҡшы итеп дәрес үткәрәйек. Ә дәрес беҙҙең сәйәхәт формаһында буласаҡ. Р.Ниғмәтиҙең беҙҙең дәрескә арналған шиғырын хор менән уҡыйыҡ:

Ниндәй тиңһеҙ шатлыҡ та һуң –
Белемдәрҙе белеү.
Парта артында көйөнсә
Донъяны гиҙеп йөрөү.

– Беҙгә сәйәхәт итергә ошо паровоз һәм туҡталыштар ярҙам итәсәк. Дәрестә актив булһағыҙ, туҡталыштарҙа осраған һорауҙарға дөрөҫ яуап бирһәгеҙ, сәйәхетебеҙ уңышлы үтер. Ә ниндәй маҡсат менән сәйхәткә сығырбыҙ һуң? Картаға иғтибар итегеҙ әле, ҡайҙарҙа буласаҡбыҙ бөгөн?

1.Өндәр йәйләүе. 2. Сәскә яланында.

4. Сәсәндәр тирмәһе. 3. Грамматика иле.

III. ***Төп өлөш.*** 1. *Өндәр гимнастикаһы.*

**Ға-ға-ға** – әйҙә киттек урманға!
**Шә-шә-шә** – урманда еләк бешә!
**Ле-ле-ле** – ауыҙ итәйек әле.
**Ге-ге-ге** – ҡалай тәмле еләге.

2. *1-се туҡталыш. "Өндәр йәйләүе".*

Беренсе туҡталышта беҙҙе ниндәй һөнәрҙәр көтә?

А) Бына һеҙгә башҡорт хәрефтәре бирелгән, тиҙ генә итеп һәр хәрефкә берәр һүҙ табығыҙ.

Ә Ү Ө Ҡ Ғ Ҙ Һ ҫ ң

б) Тиҙәйткес өҫтөндә эш.

Күрҙем ҡарға, төштө ҡарға,
Ҡарға төштө аҡ ҡарға.
Шул ҡарғаны күрер өсөн,
Ҡарға йыйылды ҡарға.

(Ҡарға – ворона, Ҡарға – на снег. Ҡарға һәм ҡар һүрәтен йәбештереү).

- Афарин, балалар, ары киттек: Тик-так-так, тик-так-так, пух-пух-пух, ту-у-у, ту-у-у!

3. *2-се туҡталыш. "Сәскәләр яланында".*

- Балалар, ҡарағыҙ әле, ниндәй матур яланға килеп туҡтаныҡ беҙ.
- Нимәләр күрәбеҙ беҙ бында? (бик күп сәскәләр).
- Бына был ҡыҙыл, зәңгәр, һары, күк сәскәләр, ә япраҡтары йәшел.
- Был матур сәскә. Был сәскә ниндәй төҫтә? (балалар һанап сыға).

а) Һүҙлек эше.

– Әйҙәгеҙ был һүҙҙәрҙе һүҙлек дәфтәренә яҙып сығайыҡ (аҡ, зәңгәр, ҡара, ҡыҙыл, күк, һары, көрән, һоро, йәшел япраҡ).

- Беҙҙең кластағы предметтарҙың төҫтәрен әйтеп сығайыҡ.

(аҡбур, парта һары, таҡта йәшел һ.б.)

б) Дәреслек менән эш. "Биҙәктәр" тигән текст менән танышайыҡ.

- уҡытыусының уҡыуы;
- һүҙлек эше;
- хор менән уҡыу;
- үҙ аллы уҡыу;

- сылбырлы уҡыу;
- анализлы уҡыу;
- һүҙлектәге һүҙҙәр менән һөйләмдәрҙе табып уҡыу;
- һорауҙарға яуап биреү.

в) Ял минуты. Сәп-сәп сәпәкәй. Ел иҫә-иҫә-иҫә.

Беҙҙең Башҡортостанда
Шулай бөгөлә тауҙар,
Ошондай бейек тауҙар,
Шулай ҡағына ҡаҙҙар,
Шулай бейей балалар,
Шулай ырғып алалар,
Шунан шым ғына ултырып,
Тағы белем алалар.

4. *3-сө туҡталыш. Грамматика иле.*

А) Таблица менән эш.

– Хәҙер, балалар, таблицаны иҫкә төшөрәйек. Күплек ялғауҙары. (бергәләп уҡыйбыҙ).

Б) Карточкалар менән эш (ике бала таҡтала, ҡалғандары парҙар менән эшләйҙәр).

В) Таҡтала эш. (таҡтала һөйләмдәр бирелгән, шул һөйләмдән күплек ялғаулы исемдәрҙе билдәләргә).

Ҡоштар китте.

Көҙ килде. Ҡарғалар, сыйырсыҡтар китәләр. Ҡоштар файҙалы. Улар беҙҙең дуҫтар.

- Афариндар.

5. *4-се туҡталыш. Сәсәндәр тирмәһе.*

а) Уйын.

– Беҙ был туҡталышта уйнап алабыҙ. Беҙ-беҙ-беҙ инек.

– Магнитлы таҡтаға сәскәләр ҡуйылған, һеҙ уларҙы йыйып төҫтәрен әйтергә тейешһегеҙ. Кем күберәк?

IV. ***Йомғаҡлау.*** – Ә хәҙер, балалар, әйҙәгеҙ класыбыҙға әйләнеп ҡайтайыҡ. Шулай итеп, сәйәхәт һеҙгә оҡшанымы? Иҫкә төшөрөгөҙ әле, ҡайҙарҙа булдыҡ, нимәләр күрҙек, белдек?

V. ***Өйгә эш.*** Һүҙлекте ятлау, тексты тасуири уҡыу.

**Фәтҡуллина Р.М.,**

*Башҡортостан Республикаһы*
*дәүләт автономиялы һөнәри белем биреү учреждениеһы*
*“Бөрө медицина һәм фармацевтика колледжы”*

## “Мин фармацевт буласаҡмын”
## (Фармация бүлегенең рус төркөмө студенттары өсөн тәғәйенләнгән дәрес)

Дәрестең маҡсаттары һәм бурыстары.

Уҡытыу һәм өйрәтеү маҡсаты:

”Мин фармацевт буласаҡмын” темаһын өйрәнеү өсөн кәрәк булған лексика күләмен ҡабатлау һәм нығытыу, телмәрҙә ҡылымдың билдәле киләсәк заман формаһын дөрөҫ ҡулланырға өйрәтеү.

Бурыстары:
- Студенттарға “Мин фармацевт буласаҡмын” темаһы буйынса яңы лексика биреү;
- һорауҙар буйынса монолог төҙөргә өйрәтеү.

Үҫеш биреү маҡсаты:
- Студенттарҙа белем алыуға, башҡорт телен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу уятыу.

Бурыстары:
- Телмәрҙе тыңларға өйрәтеү, текст йөкмәткеһе буйынса таныш булмаған һүҙҙәрҙе аңлау;
- һүҙлек менән эшләү күнекмәләрен активлаштырыу;
- бирелгән тема буйынса һөйләшергә өйрәнеү, тел этикетын белеү.

Тәрбиәүи маҡсат:
- Әҙәплелек ҡағиҙәләрен төшөндөрөү.
- Профессиональ этика. Һайлап алған профессияға һөйөү һәм ғорурлыҡ тойғоһо тәрбиәләү.

Бурыстары:
- Аралашырға, үҙеңде һәм бер-береңде дөрөҫ баһаларға тәрбиәләү.
- Студенттарҙа яҡшы сифаттар тәрбиәләү.

Теманы үҙләштереү процесында студенттарҙың дөйөм һәм профессиональ компетенциялары формалашырға тейеш.
- ДК 6. Коллективта, командала эшләргә, коллега, етәксе һәм ҡулланыусылар менән эффектив аралашырға.

- ДК 10. Халыҡтың тарихи һәм мәҙәни традицияларына һаҡсыл ҡарарға, социаль, мәҙәни, дини айырмалыҡтарын ихтирам итергә.
- ДК 11.Тәбиғәтте һаҡлауға, йәмғиәткә, кешегә, ҡарата әхләҡи яуаплылыҡҡа әҙер булырға.
- ДК13. Профессиональ һәм тормош маҡсаттарын тормошҡа ашырыр өсөн сәләмәт тормош алып барырға, физик культура менән шөғөлләнергә.

Дәрес төрө: Практик дәрес
Үткәреү ваҡыты: 90 мин.
Үткәреү урыны: аудитория

Йыһазландырыу: 1. Мультимедиа.
2. Персональ компьютер.

Дәрестең уҡытыу-методик төҙөлөшө

| Дәрес этаптары | Уҡытыусы эшмәкәрлеге | Студенттар эшмәкәрлеге | Эштәрҙе мотивациялау | Ваҡыт |
|---|---|---|---|---|
| 1. Ойоштороу этабы | Студенттарҙы сәләмләү. Һорауҙарға яуаптар | Һорауҙарға яуап бирәләр | Студенттарҙың иғтибарын уҡыу эшәкәрлегенә йүнәлтеү | 5мин. |
| 2. Дәресте мотивациаялау | Студенттарҙы дәрестең темаһы, маҡсат һәм бурыстары менән таныштырыу | Уҡытыусы етәкселегендә студенттар менән үтелгән теманы ҡабатлау | Танып белеү эшмәкәрлеген булдырыу, иғтибарҙы активлаштыру | 5мин. |
| 3.Өйгә эш тикшереү | Әңгәмә | Сығыштар | Йомғаҡлау. Баһалау | 20 мин. |
| 4. Яңы материалды аңлатыу | Ҡылымдың Билдәле киләсәк заман формаһын аңлатыу | Уҡытыусы етәкселегендә студенттар билдәле киләсәк заман формаһының яһалышы менән | Яңы материалды үҙләштереү | 15мин. |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | танышалар | | |
| 5.Үтелгән теманы нығытыу | Практик эште аңлатыу. Студенттар күнегеүҙәрҙе үҙ-аллы эшләй. Уҡытыусы тикшерә һәм ярҙам итә, һорауҙарына яуап бирә | Студенттар үҙ белемдәренә таянып практик эштәрҙе үтәйҙәр | Яңы материалды үҙләштереү һәм нығытыу күнекмәләрен булдырыу | 30 мин. |
| 6.Студент-тарҙың белемдәрен баһалау, өйгә эште аңлатыу | Үтелгән тема буйынса тест үткәреү | Студенттар тест һорауҙарына яуап бирәләр | Һүҙ байлығын арттырыу, иғтибар һәм логик фекерләүҙе үҫтереү, баһалау | 15 мин. |

Дәрес йөкмәткеһе:

**1 - се этап.** Ойоштороу.

– Һаумыһығыҙ, ултырығыҙ.

– Бөгөн нисәһе?

– Аҙнаның ниндәй көнө?

– Һауа торошо нисек?

– Йылдың ниндәй миҙгеле?

(Студенттар һорауҙарға яуап бирәләр)

Интерактив таҡтала “Көҙ” һүрәте

– “Көҙ” миҙгеленең билдәләрен һанап сығығыҙ.

**2 – се этап.** Дәресте мотивациялау.

- Студенттарҙы дәрестең темаһы, маҡсат һәм бурыстары менән таныштырыу.

– “Көҙ миҙгелен кешенең ниндәй характеры һәм эске тойғолары менән сағыштырыр инегеҙ?

– Ә һеҙгә ниндәй кешеләр оҡшай?

**3 - сө этап.** Өйгә эште тикшереү.

Студенттар өйҙә әҙерләп килгән “Әйҙәгеҙ, танышайыҡ” сайтына әҙерләгән проекттары менән сығыш яһайҙар.

(Кешенең тышҡы ҡиәфәте һәм холҡо темаһын ҡабатлау).

**4 - се этап.** Яңы материалды аңлатыу.

Интерактив таҡтала башҡорт халыҡ мәҡәле “Төҫ матурлығы матур түгел, эш матурлығы матур”

– Был мәҡәлде нисек аңлайһығыҙ?

– Фармацевт булыр өсөн кеше ниндәй характер үҙенсәлектәренә эйә булырға тейеш?

(Студенттарҙың яуаптары).

– Башҡорт телендә дөрөҫ итеп “Мин гәҙел, әҙәпле, тырыш фармацевт буласаҡмын” һөйләмен төҙөр өсөн, һеҙгә ҡылымдың билдәле киләсәк заман формаһының яһалышын белергә кәрәк.

Интерактив таҡтала билдәле киләсәк заман яһалышы таблицаһы.

– Теманы аңлатыу.

(Грамматика рус телендә аңлатыла. Интерактив башҡорт теле сайтын ҡулланырға була).

**5 - се этап.** Үтелгән теманы ныҒытыу.

– Күнегеүҙәр эшләү.

1. 159-сы бит, 3-сө күнегеү. Уҡырға һәм тәржемә итергә, үҙҙәренең текстарына фармацевт һөнәре тураһында һөйләмдәр өҫтәп яҙырға.

**Өйгә эш:** Тексты ябайлаштырып башҡорт теленә тәржемә итергә.

Буквально через год я пойду работать за первый стол (отпуск готовых препаратов и консультирование по приему и хранению) и, наконец, в полной мере смогу ощутить всю значимость и ответственность профессии фармацевт.

А потом… что будет потом, через 10 – 15 лет, не знает никто.

Возможно, я стану заведующей аптекой или открою свою аптечную сеть, стану научным работником и займусь изобретением лекарства от ВИЧ инфекции или вернусь в родной колледж и буду обучать будущих специалистов.

Әҙәбиәт

1. Усманова М., Солтанғолова З. Башҡорт теле: башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған башланғыс һәм урта профессиональ белем биреү учреждениелары өсөн дәреслек. – Өфө: Китап, 2011. – 124 бит.

# ЗАМАНСА БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ ДӘРЕСЕ

**Ғимазова А.Ф.**
*Башкортостан Республикаһы Илеш районы МР*
*МБДББУ Рсай ауылы урта дөйөм белем биреү мәктәбе филиалы*
*Үрмәт ауылы төп дөйөм белем биреү мәктәбе*

## Рәми Ғариповтың “Урал йөрәге” хикәйәте
## (8-се класс)

**Дәрестең планлаштырылған белем биреү һөҙөмтәләре:**

1. **Шәхси:** Уҡыуға ҡарата яуаплы мөнәсәбәт формалаштырыу,әҙәби әҫәргә үҙ ҡарашынды аныҡ итеп әйтергә өйрәнеү, анализлағанда үҙ интерпретацияңды биреү, һөйләү этикеты нормаларын үҙләштереү , халҡыбыҙҙың бөйөк шәхесенең ижады менән ҡыҙыҡһыныу; төркөмдәрҙә килешеп эшләргә өйрәнеүҙе дауам итеү, телмәрҙе үҙаллы камиллаштырырға ынтылыу, логик фекерләүҙе үҫтереү, башҡа кешегә, уның фекеренә, донъяға ҡарашына, ҡиммәттәренә аңлы, ихтирамлы мөнәсәбәт формалаштырыу;тыуған илебеҙгә, телебеҙгә һөйөү, халыҡтың мәҙәни мираҫына һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү, тамашасылар алдында сығыш яһау күнекмәһе булдырыу.
2. **Метапредмет**: Әҙәби әҫәрҙең яҙылыу дәүере менән бәйләнешен аңлау, башҡорт халҡының арҙаҡлы улдары тураһында белемде арттырыу,танып белеү мотивтарын һәм ҡыҙыкһыныусанлыҡты үҫтереү; максаттарға ирешеү юлдарын, уҡыу һәм танып белеү бурыстарын хәл итеүҙең эффектив ысулдарын аңлы рәүештә һайлау; планлаштырылған һөҙөмтәләр менән үҙ хеҙмәтеңде тиңләштерә белеү, һөҙөмтәләргә ирешеү процесында эшмәкәрлекте контролдә тотоу; аңлап-төшөнөп уҡыу алымына эйә булыу; үҙ тиңдәштәрең һәм уҡытыусы менән уҡыу эшмәкәрлеген ойоштора, төркөмдә һәм үҙаллы эшләй, үҙ фекереңде формалаштыра һәм уны яҡлай белеү, һүҙ сәнғәте булараҡ әҙәбиәттең образлы тәбиғәтен аңлау.
3. **Предмет:** Р.Ғарипов ижады буйынса белгәндәрҙе тулыландырыу, “Урал йөрәге” хикәйәтенең идея–тематик йөкмәткеһен үҙләштереү, поэтик тексты эмоциональ ҡабул итеү, анализлау, әҙәби терминдарҙы, әҙәбиәт теорияһын белеү,башҡарылған ғәмәли эштәрҙән сығып, һығымталар, йомғаҡлауҙар яһарға өйрәнеү.

**Дәрес барышы:**

| Дәрес этаптары | Уҡытыу методтары | Дәрестең уҡытыу, танып-белеү бурыстары | | Формалаштырылырға тейешле универсаль уҡыу эшмәкәрлеге |
|---|---|---|---|---|
| | | Уҡытыусы эшмәкәрлеге | Уҡыусылар эшмәкәрлеге | |
| I.Психологик комфорт булдырыу | Һөйләү, әңгәмә, һорау, фекер йөрөтөү, күргәҙмәлелек, инструктаж | **Ыңғай психологик һәләт тыуҙыра (психологик релаксация).**<br>-Уҡыусылар, әйҙә,күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ. Һеҙ иҫ киткес матурлыҡ донъяһында:зәңгәр һауа, һары йылыҡай ҡояш, Уралтауҡайҙың күккә ашҡан түбәһен мамыҡтай йомшаҡкай аҡ болот сорнап алған, аяҡ аҫтында күпереп үҫкән хәтфә үлән.Ниндәй хозурлыҡ!<br>-Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ ҙа бер-берегеҙгә ҡарап йылмайығыҙ. Эстән генә дәрестең уңышлы, файҙалы булыуын теләйек.Ҙур теләк менән эш башлайыҡ. Бындай саҡта нимә тиҙәр әле?<br>-Эйе,хәйерле сәғәттә тип әйтәләр! | Күҙҙәрен йомоп уҡытыусы һүрәтләгән “картина эсенә инәләр”.Ихлас йылмаялар, бер-береһенә теләк еткерәләр. | ШУУЭ: эшкә рухланыу, психиканы көйләү.<br>КУУЭ: тиңдәштәре һәм уҡытыусы менән аралашыуҙы ҡороу. |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| II. Белемде актуалләштереү, яңы тема менән бәйләнеш булдырыу | мәғлүмәти-коммуникацион технология ҡулланыу, һорау, фекер йөрөтөү | -Уҡыусылар,иғтибарығыҙҙы интерактив таҡтаға йүнәлтегеҙ әле.<br>(Экранда Р.Ғариповтың портреты, блиц-һорауҙар)<br>-Кем был?<br>-Яҡшы, блиц-һорауҙарға яуап биреп ҡарағыҙ.<br>ИСЕМ:<br>УЛ:<br>ТЫУҒАН ЕРЕ:<br>АЛДАҒЫ КЛАСТАРҘА БЕҘ ТАНЫШҠАН ШИҒЫРҘАРЫ: | Уҡыусылар фекер йөрөтәләр, үткәнде иҫкә төшөрөп яуап бирәләр. | <u>ТБУУЭ</u>: логик һәм тамға символдары менән эш итә белеү.<br><u>КУУЭ</u>: уҡытыусы һәм иптәштәре менән хеҙмәттәшлек итеү. |
| III.Уҡыу мәсьәләһен ҡуйыу,маҡсатты асыу, мотивация булдырыу | әңгәмә, һорау, фекер йөрөтөү, мәғлүмәти-коммуникацион технология ҡулланыу, проблемалы эҙләнеү | **а) Уҡытыусы уҡыусыларға үҙ алдарына маҡсат һәм бурыстар ҡуйыуҙа йүнәлеш бирә**.<br>-Интерактив таҡтаға тағы ла иғтибар итегеҙ (слайд "Урал тауҙары")<br>-Нимә күрәһегеҙ?<br>-Яҡшы. Бына һеҙҙең алда Рәсәй картаһы.Таныйһығыҙмы тауҙар теҙмәһен?<br>Кем картанан Башҡортостанды табып күрһәтә?<br>Иғтибар, уҡыусылар, хәҙер карталағы Башҡортостанға йөрәк һүрәте беркетәм.<br>Минең һорауҙарға дөрөҫ яуап бирһәгеҙ, бөгөнгө теманы асырһығыҙ. | Һорауҙарға яуап бирәләр, Урал тауҙары икәнен әйтәләр, фекер йөрөтәләр, яуаптар менән иҫбатлайҙар.<br>Яуап бирәләр, дәрестең темаһын, яҡынса маҡсатын әйтәләр. | ШУУЭ: телмәр үҙ камиллаштырыуға ынтылыу.<br>РУУЭ: маҡсат ҡуйыу, прогнозлау, хеҙмәттәшлек.<br><u>ТБУУЭ</u>: логик һәм тамға символдары менән эш итә белеү.<br>КУУЭ: телдән һәм яҙма телмәрҙе адекват ҡабул итеү. |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | Портретта кем ине? ( Р.Ғарипов)<br><br>Ниндәй тауҙар? (Урал)<br><br>Башҡортостанға нимә беркеттем? (йөрәк). Йөрәк һүҙен 3-сө эйәлек затына ҡуйығыҙ (йөрәге)<br><br>Легенда рухында яҙылған тәрән фәлсәфәле әҫәр нисек атала? (хикәйәт).<br><br>Тимәк, бөтәһен бергә йыйып әйтһәк....<br><br>(Р.Ғариповтың “Урал йөрәге” хикәйәте)<br><br>-Афариндар, теманы билдәләнегеҙ.<br><br>Нисек уйлайһығыҙ: дәрестә нимәләр эшләйәсәкбеҙ, беҙҙең алда ниндәй маҡсаттар тора?<br><br>Шулай, уҡыусылар,бөгөн маҡсатты тормошҡа ашырып өсөн, беҙ төркөмдәрҙә кейстар менән эшләйәсәкбеҙ.<br><br>**б) Таҡтаға числоны, теманы яҙып ҡуя**. – Дәфтәрҙәрҙе астыҡ. Числоны, теманы яҙып ҡуябыҙ. | Яҡынса яуап: Ошо хикәйәттең идея-тематик йөкмәткеһе менән танышасаҡбыҙ, һорауҙарға яуап бирәбеҙ, анализлайбыҙ, һүрәтләү сараларын табасаҡбыҙ, әңгәмәләшәсәкбеҙ, үҙ фекерҙәребеҙҙе әйтәсәкбеҙ, дәлилләйәсәкбеҙ... Дәфтәрҙәрҙә числоны, теманы яҙып ҡуялар. | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| IV. Яңы теманы үҙләштереү буйынса тәүге тапҡыр эшмәкәрлек. | уҡыу, әңгәмә, һорау, проблемалы эҙләнеү, мәғлүмәти-коммуникацион методы | **а) Хикәйәтте яҙманан тыңлата.**<br>https://www.youtube.com/watch?v=0a6pmGtmp1c М.Аҡмулла исемендәге БДПУ студенты Ләйсән Еникеева уҡый.<br>**б) Һүҙлек эшен ойоштора** (слайдта).<br>Ҡурсыу-<br>Тамға –<br>Ырыҫ –<br>Юрап –<br>Монарланып-<br>Ҡылғандар- | Уҡыусылар хикәйәтте иғтибар менән тыңлай. Уҡыйҙар, аңлашылмаған һүҙҙәрҙе яҙып алалар, мәғәнәләрен аңлатмалы һүҙлектән асыҡлайҙар, ҡабатлайҙар, хәтерҙәренә һалып ҡуялар. Яңы информацияны ҡабул итәләр, төшөнәләр, аңлайҙар. | <u>ТБУУЭ</u>: кәрәкле мәғлүмәтте системаға килтереү һәм киренән эшкәртеү; дөрөҫ аргументлай белеү. <u>КУУЭ</u>: аралашыу процесында башҡорт телмәр этикетын һаҡлау. |
| V.Уҡыу мәсьәләһен сисеү. | уҡыу, әңгәмә, һорау, инструктаж, проблемалы эҙләнеү, кейс-технология | **Төркөмдәргә бүлә.**<br>**Төркөмдәрҙә эшләү өсөн эштәрҙе тарата. Ваҡытты билдәләй.**<br>Эште башлар алдынан һәр төркөм хикәйәтте ҡабат уҡып сыға.<br>**1-се төркөмгә кейс-эш.**<br>а) Хикәйәт ни өсөн “Урал йөрәге” тип атала?Дәлилләгеҙ.<br>б) Күҙ алдына ниндәй образдар килде? Шуларҙы атағыҙ. | Төркөмдәргә бүленәләр, кейс менән эшләү ҡағыҙәһен иҫкә төшөрәләр. Һәр төркөмдә модератор билдәләй. Төркөмдәрҙә модератор булдырыла. Ул, үҙ сиратында, ҡайһы һорауға кем яуап бирәсәген билдәләй. Төркөмдәрҙә | <u>ШУУЭ</u>: үҙ телмәреңде күҙәтеү һәм уны баһалау күнекмәһен булдырыу.<br><u>РУУЭ</u>: уҡыу эшмәкәрлегендә үҙеңде адекват тотоу,билдәле формала һөҙөмтәләрҙе күрһәтә белеү. |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | в) Әҫәрҙең төп фекере ниндәй?<br><br>**Проблема: Ни өсөн Р.Ғарипов Башҡортостан менән бер рәттән Ағиҙелде  лә йөрәккә оҡшата.Һеҙ бының менән килешәһегеҙме?**<br><br>**2-се төркөмгә кейс-эш.**<br><br>а) Шағир ниндәй проблемалар күтәрә?<br><br>б) Ни өсөн әҫәр хикәйәт жанрына тап килә?Миҫалдар килтерегеҙ.<br><br>в) Әҫәрҙең идеяһы ниндәй?<br><br>**Проблема: Грек халҡының Прометей тураһындағы мифы менән хикәйәттең оҡшашлығы бармы? Булһа, был оҡшашлыҡ ҡайһы строфаларҙа һәм нисек сағыла?**<br><br>**3-сө төркөмгә кейс-эш.**<br><br>а)  Шиғырҙа синонимдар, антонимдар бармы? Улар ниндәй маҡсатта ҡулланылған?<br><br>б) Хикәйәттә ҡулланылған  һүрәтләү сараларын  табығыҙ.Уларҙың әһәмиәте нимәлә?<br><br>**Проблема:  Башҡорт  халҡының** | эшләйҙәр, ваҡытты тойомлайҙар.<br><br>Һәр төркөмдә фекерләү, иҫбатлауҙың логик сылбырын төҙөйҙәр, уҡыусылар сығыш яһай, һорауҙарға яуап бирә,бер-береһенең  яуабын тулыландыра. Кем килешмәй, үҙ позицияһын әйтә, дәлилләй; ҡуйылған проблеманы сисәләр, автор идеяһын үҙ фекерҙәре менән сағыштырып һығымта яһайҙар. | <u>КУУЭ</u>:ҡуйылған проблема буйынса үҙ фекереңде теүәл, логик яҡтан бәйләнешле итеп еткереү; мәғлүмәтте эҙләү һәм табыуҙа хеҙмәттәшлек итеү. Монологик һәм диалогик  телмәр формаларын дөрөҫ ҡулланыу.<br><br><u>ТБУУЭ:</u> кәрәкле мәғлүмәтте табыу һәм билдәләү; шиғри текст менән иркен эшләү; проблеманы анығлау, логик яҡтан төҙөк фекер йөрөтөү, иҫбатлай алыу. |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | **революцияға тиклемге тормошон күргән яҙыусы Глеб Успенский: “Һәләк булыр был башҡорт, һис һүҙһеҙ һәләк булыр был башҡорт!”- тип яҙған? Был турала шиғырҙа нисек әйтелә? Автор позицияһын билдәләгеҙ.**<br><br>**4-се төркөмгә кейс-эш**<br><br>**Һорауҙар:**<br><br>а) Нимә ул сал тарих? Ул нимә менән яҙып ҡалдырылған?<br><br>б) Әҫәрҙә телгә алынған шәхестәрҙе һанағыҙ. Һеҙ улар тураһында нимәләр беләһегеҙ?<br><br>в) Был шәхестәрҙең “Урал йөрәгенә” ниндәй бәйләнеше бар?<br><br>**Проблема: Бөгөнгө заман кешеһенә халыҡ тарихының данлы ваҡиғаларын, шәхестәрен белеү кәрәкме?** | | |
| VI. Ял итеү минуты | инструктаж | **“Урал” көйөнә ял итеү минуты үткәрә.** | Уҡыусылар баҫа, ҡулдарын яҡ-яҡҡа һуҙып, һауала осҡан бөркөттө хәтерләткән хәрәкәттәр башҡара | <u>ШУУЭ</u>: Әҙәп-әхлаҡ нормаларҙы белеү.<br><u>КУУЭ</u>: класс менән хеҙмәттәшлек итеү. |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| VII.Үтелгән-де нығытыу, тулыландырыу | рефлексия,сығанаҡтар менән эш, әңгәмә | **Коллектив эште ойоштора.**<br>-Әҫәр  һеҙҙә ниндәй тәьҫораттар, хистәр уятты?<br>- Ҡайһы юлдар әһәмиәтле тойолдо? Ни өсөн?<br>-Поэтик фекерҙең хәрәкәтенә көйө лә, интонацияһы ла тап килә.<br>Һеҙҙеңсә, нисек уҡырға кәрәк  хикәйәтте?<br>Лирик геройҙың тауышын ҡайһы строфаларҙа ишетергә була? (2-се, 15-се строфаларҙа)<br>Автор хикәйәтте тамамлаған юлдар менән килешәһегеҙме? Һеҙ нисек тамамлар инегеҙ?<br>Киләсәгебеҙ тыныс,  матур булһын өсөн нимәләр эшләй алаһығыҙ? | Һорауҙарға яуап бирәләр, тасуири уҡыйҙар, үҙәренең ҡараштарын белдерәләр.<br>1-се бүлек–бер бөтөн мелодик комплекс–хикәйәләү интонацияһы.<br>2-се бүлек-риторик һорау интонацияһы.<br>3-сө бүлек-юғары тон менән.<br>4-се бүлек нәфрәт менән.<br>5-се бүлектең беренсе строфаһын ҡыҙғаныу хисе, икенсе строфаһын юғары  пафос менән.<br>6-7-се бүлектәрҙе һоҡланыу | ШУУЭ: төп әҙәби тел нормаларын күҙәтергә өйрәнеү, үҙ билдәләнеш булдырыу.<br>ТБУУЭ: килеп тыуған ижади һәм эҙләнеү мәсьәләләрен  хәл итеү  юлын табыу, кәрәк һәм кәрәк булмаған мәғлүмәтте айыра белеү;<br>РУУЭ: мәғлүмәтте төрлө формала эҙләү, әҙәби тел, аралашыуҙың этик нормаларына яраҡлы төрлө ысулдар файҙаланыу.<br>КУУЭ: уҡытыусы һәм иптәштәре менән хеҙмәттәшлек итеү, башҡаларҙы тыңлай белеү |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | | интонацияһы менән<br>8-се бүлектә мелодик хәрәкәт юғары нөктәгә етә. Шулай итеп, интонация тауыш аша конкрет образдарҙы кәүҙәләндереүҙә булышлыҡ итә. Логик баҫым иһә мөһим булған һүҙҙәрҙе көслө тауыш менән әйтеүҙе талап итә. Аҙаҡҡы 15-се строфаны тантаналы интонация менән уҡырға кәрәк. | |
| VIII. Рефлексия | Һорау, фекер йөрөтөү, анализлау, күргәҙмәлелек, инструктаж, тулы булмаған һөйләм методы менән рефлексия | **1 ) Уҡыусыларҙың үҙ эшенә баһа биреүҙе ойоштора.**<br>Дәрестә мин... белдем.<br>...ҡабатланым.<br>...өйрәндем.<br>...аңланым. | Ҡуйылған маҡсаттарҙың ирешелеүен анализлайҙар, әңгәмәләшәләр, үҙҙәренең эшмәкәрлеген | <u>РУУЭ</u>: үҙ контроль, үҙ эшмәкәрлегеңде аңлы, дөрөҫ итеп баһалауҙы тормошҡа ашырыу. <u>КУУЭ</u>: уҡытыусы һәм иптәштәре менән |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | ...уйландым.<br>…ауыр булды.<br>Хәҙер мин.… булдыра алам.<br>**2) Уҡыусыларҙың эшенә баһа бирә** ( төркөм, дөйөм класс эшмәкәрлегенә анализ) | баһалайҙар.<br>Тыңлайҙар, көндәлектәренә баһаны ҡуялар. | хеҙмәттәшлек итеү.<br>ШУУЭ: белемде, күнекмәне көндәлек тормошта ҡулланыу һәләтлеген камиллаштырыу. |
| IX.Өй эше биреү, инструктаж | Инструктаж, ғәҙәти булмаған ғәҙәтилек | **Өс төрлө кимәлдәге өй эше тәкдим итә, аңлата.**<br>1) Хикәйәттән өҙөк ятларға;<br>2) ”27,23,1,16,13,21,23,40,4,8,18,8, 19, 2,21,4,21,18,4,21, 26,20,23,20,34,20” темаһына инша яҙырға (һандар–алфавиттағы хәрефтәр тәртибе)<br>3) Шағир тураһында мәғлүмәт туплау эшен дауам итергә. | Тыңлайҙар, уйлайҙар, яҙып ҡуялар. | ТБУУЭ: төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәтте алыу, төп һәм өҫтәмә мәғлүмәтте билдәләү.<br>РУУЭ: мәғлүмәтте төрлө формала эҙләү. |
| X. Дәресте йомғаҡлау | Әңгәмә, рефлексия | **Дәрескә йомғаҡ яһай.**<br>-Уҡыусылар, Рәми Ғарипов Башҡортостанды йөрәккә тиңләгән, ә Мостай Кәрим ҡайын япрағына оҡшатҡанын беләбеҙ. Һеҙ ҙә япраҡҡайға, йөрәккәйгә тиң еребеҙҙең лайыҡлы ул–ҡыҙҙары, шағир ғорурланған милләттең бер саҡҡыһы. Рәми ағайҙың өмөттәрен аҡлап, аҡыллы, илһөйәр булып үҫеүегеҙҙе теләйем. Дәрес башында күҙ алдығыҙға баҫҡан Башҡортостан һыны әҫәрҙе уҡығас тағы ла гүзәлләнгән, матурланғандыр тигән өмөттә һеҙҙең | Хушлашалар | КУУЭ: телмәр нормаларын һәм башҡорт телмәр этикетын һаҡлау. |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | менән хушлашам.Һау булығыҙ! | | |

Әҙәбиәт

1.Грин А.А. Педагогик техника алымдары: Һайлап алыу ирке. Асыҡлыҡ. Эшмәкәрлек. Кире бәйләнеш. Идеаллыҡ: Уҡытыусы өсөн ҡулланма. – Өфө: Китап, 2013.
2. Ғималова М.Ғ. Башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы. – Өфө: Китап, 2008. – 160-163-сө бб.
3. Полат Е. С. Современные педагогические и информационные технологии в системе образования: учеб. пособие для студ. высш. учеб. заведений / Е. С. Полат, М. Ю. Бухаркина. — 3-е изд., стер. — М.: Академия, 2010. — С. 179-188.
4. Юлмөхәмәтов М.Б., Иҙелбаев М.Х. Башҡорт әҙәбиәте: уҡытыу туған ( башҡорт) телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 8-се класы өсөн дәреслек-хрестоматия -3-сө баҫма.-Өфө:Китап,2020.
Интернет ресурс: Мәктәптә белем биреү практикаһында кейс метод .
https://www.surwiki.admsurgut.ru/wiki/images/f/fb/Кейс_технология.pdf

**Ғиндуллина З.Т.**

*Башҡортостан Республикаһы*

*Ҡариҙел районы Яңы Бәрҙәш урта дөйөм белем биреү мәктәбе*

## Р.Ғариповтың “Урал йөрәге” шиғыр-хикәйәтен өйрәнеү

## (Туған әҙәбиәт, 6-сы класс)

**Маҡсат**:

1. Шағир тураһында биографик белешмә биреү;

2. “Урал йөрәге” шиғыр-хикәйәтенең идея-тематик йөкмәткеһен асыу (милләт яҙмышы хаҡында уйланыу);

3. Шиғыр-хикәйәттең художество үҙенсәлектәрен асыу. Әҫәрҙең образлы тел саралары өҫтөндә күҙәтеү яһау. Уларҙы телмәрҙә ҡуллана белеү күнекмәләрен үҫтереү;

4. Уҡыусыларҙа тыуған илде яратыу һәм уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу**: Башҡортостан картаһы, шағирҙың портреты, китап йыйынтыҡтарынан күргәҙмә, шағирҙың тауышы яҙылған фонояҙма, Арҡауылдағы йорт-музейы күренеше, карточкалар, мәҡәлдәр менән әҙерләнгән презентация

**Дәрес төрө**: дәрес-әңгәмә

**Дәрес тибы**: яңы белем биреү дәресе

**Эш төрҙәре**: дәреслек менән эш, ижади эш, көс һынашыу

**Дәрес барышы**

**Эпиграф.**

Йөрәгем, тип изге төйәгемде –

Хаҡ яҙмышым шунда ташланған,

Шунда минең бәхет таңым атҡан,

Шунда миңә Ватан башланған!

(Р.Ғарипов)

**Ойоштороу мәле**

- Һаумыһығыҙ, уҡыусылар! Ултырығыҙ.

**Яңы темаға инеш**

- Уҡыусылар, бөгөн беҙ дәрестә шиғри әҫәрҙәрҙе өйрәнеүҙе дауам итәбеҙ. Үткән дәрестәге шиғырҙарҙың ҡайһылары айырыуса хәтерегеҙҙә уйылып ҡалды? Бәлки, ҡайһы берҙәрен һөйләп ишеттерерһегеҙ? Арағыҙҙа шиғыр яҙған уҡыусылар ҙа барҙыр, бәлки?

- Ә хәҙер һөйләнәсәк шиғырҙың авторын һәм исемен иҫегеҙгә төшөрөргә тырышығыҙ әле.

- Эйе, уҡыусылар, һеҙ Р.Ғарипов ижады менән бер ни тиклем танышһығыҙ. Бөгөн беҙ уның ижадын өйрәнеүҙе дауам итеп, “Урал йөрәге” шиғыр-хикәйәте менән танышасаҡбыҙ.

- Ә ниндәй әҫәргә **хикәйәт** тип әйтәләр һуң?

(*Легендаларға нигеҙләнеп йәки легенда рухында яҙылған юғары романтикалы һәм тәрән фәлсәфәле әҫәрҙәрҙе* ***хикәйәт*** *тип йөрөтәләр*)

- Тимәк, бөгөн ошо шиғыр нигеҙендә килеп тыуған тыуған ер, тыуған төйәк, милләт яҙмышы хаҡында фекерҙәребеҙ менән уртаҡлашасаҡбыҙ.
- Уҡыусылар, Р.Ғарипов ҡайҙа тыуған?
- Эйе, шағир Салауат районы Арҡауыл ауылында 1932 йылдың 12 февралендә колхозсы ғаиләһендә донъяға килә.
- Был төбәк тағы ниндәй билдәле шәхестәре менән данлыҡлы һуң?
- Әйтергә кәрәк, башҡорт халҡының милли батыры һәм шағиры С.Юлаевтың рухы, шағир Р.Ғариповҡа ла күскәндер, тип әйтһәк, һис хаталанмабыҙ, сөнки Р. Ғарипов та Салауат Юлаев эскән һыуҙы эсеп, ул йөрөгән һуҡмаҡтарҙы үткән.
- Эйе, Р.Ғарипов тыуған ауылында етенсе синыфты тамамлап, 1946 йылда Өфөгә килеп, 9-сы башҡорт мәктәбенә уҡырға инә. Был мәктәп фронтта аталары үлеп ҡалған балалар өсөн асылған мәктәп-интернат була. Һеҙгә билдәле булыуынса, ошо мәктәп бөгөнгө көндә Р.Ғарипов исемендәге 1-се башҡорт Республика гимназия-интернаты тип йөрөтөлә. Белем алыуын шағир артабан юғары уҡыу йорттарында дауам итә. Талантлы әҙиптең

“Йүрүҙән” (1954)
“Таш сәскә” (1958)
И.Франконың проза әҫәрҙәрен башҡортсаға тәржемә иткән “Яҡтыға таба” (“Навстречу свету”)
“Һабантурғай йырҙары” (1964)
“Осоу” (1966)
“Аманат” (1969)
“Песня горицвета” (1969)
“Возвращение” (1969)
“Миләш-кәләш” (1974)
“Йондоҙло уйҙар” (1979)
“Умырзая йыры” (1981)

“Минең антологиям” (1990)
“Алырымҡош менән Бирмәмҡош” (1992)
Ғүмәр Хәйәм “Робағиҙар” (1992)
Ғүмәр Хәйәм тәржемәләре (1993)
“Әҫәрҙәр”, 1-се том (1996)
2-се том (1998)
3-сө том (2001)

тигән китаптары баҫылып сыҡты.

**Дәреслек менән эш**

- Ә хәҙер, уҡыусылар, дәреслегебеҙҙә бирелгән “Урал йөрәге” шиғыр-хикәйәте менән танышыуға күсәйек.

**Һүҙлек эше**

*Аҡ ҡылған* – седой ковыль

*Шәһит, Баһау* – граждандар һуғышы революционерҙары Шәһит Хоҙайбирҙин һәм Баһау Нуриманов

**Текст өҫтөндә эш**

Уҡытыусының өлгөлө уҡыуы, һәр һорауға яуап биреү юлы аша әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен асыу:

- Р.Ғарипов Башҡортостанды һәм Ағиҙелде нимә менән сағыштыра?

- Шағир ҡурай тауышын ишеткәндә халыҡтың үткәндәре хаҡында нимәләр уйлай?

- *Шағир халыҡтың ауыр үткәндәрен, ҡанлы тарих биттәрен аҡтарып, илен ҡурсып үлгән ирҙәр тураһында уйлап һыҙлана.*

- Был бүлектә ирек һөйгән халыҡ образы нисек тасуирлана?

- *Ирек һөйгән өсөн халыҡ батырҙары ҡарт Уралдың ҡая башына бығауланған һәм ике башлы йыртҡыс ҡарағош уның күкрәгенә тырнаҡтарын ҡаҙап, ҡанын эскән. Тимәк, шағир тыуған халҡының үткән тормошон Урал ҡаяһына бәйләнгән баһадир итеп, ә батша самодержавиеһын халыҡ күкрәгенә тырнағын батырған ике башлы ҡарағош итеп күҙ алдына баҫтыра.*

- Был бүлектә Башҡортостан тарихының ниндәй биттәре асыла?

- *Был бүлектә шағир башҡорт халҡының үҙ азатлығы өсөн алып барған ихтилалдары, уларҙың ут һәм ҡан менән баҫтырылыуы тураһында хәтерләй.*

- Халыҡ физик яҡтан ҡырылһа ла, рухи яҡтан үлемһеҙ булып ҡалған. Был турала шиғырҙа нисек әйтелә?

- *Был юлдарҙа халыҡтың быуаттар буйы кисергән фажиғәләре, үлемгә дусар ителеүе тасуирлана.*

**Уҡыусыларҙың тасуири уҡыуы.**

Эпиграф менән йомғаҡлап ҡуйыу.

Шиғырҙың һуңғы өлөшөндә автор ирек яулаған Уралтау менән Ағиҙелкәйгә ҡарап һоҡлана, ошо илдә бәхет таңы атыуына сикһеҙ шатлана һәм ғорурлана. Әҫәрҙең төп фекере бына шул.

**Мәҡәлдәр менән эш**

**Пар менән эшләү** (*карточкаларҙа)*

Р.Ғарипов был әҫәрҙә халыҡ ижады традицияларын бик оҫта файҙалана, шуға күрә лә уның теле бай, образлы һәм кинәйәле. Ә хәҙер ошо карточкаларҙан художестволы һүрәтләү сараларына миҫалдар килтерәйек әле.

**Шағирҙың шиғырҙарын һәм уның һүҙҙәренә яҙылған йырҙар тыңлау:**

- “Салауат батыр”
- “Сыңрау торна”,
- “Уйҙарым”
- “Кәкүк”
- “Бәхет – һәр саҡ һуңлап килер ҡунаҡ”
- “Үтте лә китте йәшлегем”
- “Туй йыры”
- “Таңғы йыр”
- “Минең йондоҙом”

**Йомғаҡлау.**

Р.Ғарипов 1977 йылдың 20 февралендә Өфөлә вафат була. Мосолман зыяратына ерләнә. Уға 1988 йылда “Һайланма әҫәрҙәре” һәм “Табыныу” поэмаһы өсөн Республикабыҙҙың С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы бирелә. 1992 йылда Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән юғары исемгә лайыҡ була. Ә хәҙер шағирҙың тыуған ауылы Арҡауылда асылған йорт-музейына сәйәхәт яһайыҡ.

- Р.Ғарипов ижады һеҙҙә ниндәй тойғолар уятты?

**Өйгә эш:**

Ошо уй-кисерештәрегеҙҙе өйҙә кемдер һүрәт ярҙамында, кемдер шиғыр йә булмаһа сәсмә формала сағылдырып килергә тейеш.

**Баһалар ҡуйыу.**

**Ғәлләмова Г.Р.**
*Башҡортостан Республикаһы*
*Илеш районы Үрге Йәркәй 4-се һанлы урта мәктәбе*

# Йөрәгенән йондоҙ ҡабыҙған шағир – Рәшит Назаров

*”Рәшит Назаров башҡорт шиғриәтендә иҫ киткес уникаль фигура һәм бик тә үкенесле, фажиғәле исем. Ул бөтә көсө менән балҡып өлгөрмәгән бер йондоҙ”.*
Назар Нәжми, Башҡортостандың халыҡ шағиры.

**Маҡсат:**

1. Шағирҙың тормош юлы һәм ижады менән таныштырыу, шиғырҙарын тасуири уҡыу һәләттәрен үҫтереү, үҙенсәлеген аңлатыу.
2. Уҡыусыларҙың телмәрен, ижади фекерләү ҡеүәһен үҫтереү.
3. Яҙыусыға, уның әҫәрҙәренә, ихтирам, ижадына ҡыҙыҡһыныу , гениаль шағирыбыҙ менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү.

**Эпиграф:**

“Гениаль шиғри шәхес, феноменаль фекер эйәһе”. (Р.Бикбаев).

**Йыһазлау:** шағирҙың портреты, китаптары күргәҙмәһе, әҫәрҙәргә ҡарата эшләгән һүрәттәр, презентация, видеофильм, аудиояҙма.

**Дәрес барышы**

**I.Ойоштороу мәле**:

**1. Инеш өлөш**.

Кешелек донъяһы башланғандан бирле донъяға күпме сәсәндәр, шағирҙар, һүҙ оҫталары тыуған!

Бөгөнгө кластан тыш уҡыу дәресебеҙҙә шундайҙарҙың береһе – феноменаль фекер эйәһе, яңы шиғри аң асыусы шағирҙың ҡыҫҡа ғына арауыҡтағы мөғжизәле ижады менән танышырбыҙ.

**2. Теманы билдәләү**:

**Вилдан Яруллин башҡарыуында “Йөрәк” йырын тыңлау.**

Кем яҙған был йырҙың шиғырын?

Ул шиғыр нисек атала? (Уҡыусылар яуабы)

Әлбиттә, Рәшит Назаров. Ул әҙәбиәт күгенән күренгән балҡыш, яңы йондоҙ. Ә шиғырҙары уның 22 йәшенә тиклем генә яҙылған.

Р.Назаровтың ижадын өйрәнеүсе шағир Риф Мифтахов уны “атылған йондоҙ” тип атай. Үҙе билдәләүенсә, шағирҙың “алтынға бәрәбәр ижадын” бөртөкләп йыйыу, туплау, халыҡҡа еткереү эше менән йылдар буйы шөғөлләнә, ҙур һәм күп көс һала.

- Ни өсөн “атылған йондоҙ”? Ошо һорауға беҙ дәрес аҙағында яуап бирербеҙ, фекер алышырбыҙ..

**ll. Яңы теманы аңлатыу. Рәшит Назаровтың тормош юлы, ижады.** (Презентация ярҙамында шағирҙың тормош юлы һәм ижады менән танышыу)

**Слайд 2.** Рәшит Назаров – Ауырғазы районы Төрөмбәт ауылында 1944 йылдың ноябрь айында Фатима апай менән Сәйетбаттал ағайҙың бишенсе балалары булып донъяға килгән.

**Слайд 3.** Төрөмбәт урта мәктәбен тамамлағас, колхозда эшләй. Көнө-төнө лирик, ҡайһы ваҡыт сатирик шиғырҙар, нәҫерҙәр, хикәйәләр яҙа, поэмалар ижад итә.

**Слайд 4.** 1963-1966 йылдарҙа хәрби хеҙмәттә була. Ул Силәбе өлкәһенең Злотоуст ҡалаһында хеҙмәт итә. Унда ла ул ҡәләмен ҡулынан төшөрмәй. Һалдат тормошо, бурысы, ил, Ватан хаҡында уйланыуҙары аша “Һалдат тормошо”, “Мин һалдатмын” шиғырҙарын яҙа. Армияла Рәшит Назаров әҙәби ижад менән өҙлөкһөҙ шөғөлләнә, күп яҙыша. Ғүмер буйы ижад иткән ҡайһы бер шағирҙарҙан да күп яҙыша ул, әйтерһең дә, яҙмышын алдан күрә. Һөҙөмтәлә көн һайын яңы шиғырҙары тыуа.1966 йылда, өсөнсө йыл хеҙмәт иткәндә, зәхмәтле йән ауырыуына дусар була. Ғүмеренең аҙағына тиклем махсус йорттарҙа йәшәй. Дауаханала ятҡанда ла ул шиғыр яҙыуын ташламай, үҙен тотҡонлоҡта кеүек хис итеүен шиғыр юлдарына һала шағир:

Йылдар, йылдар, мәрхәмәтһеҙ йылдар
Ер аҫтына мине аттылар.
Бығау һалып хискә, аҡылыма
Тар төрмәгә илтеп яптылар...

Р. Бикбаев был турала: “ Салауат та, Рәшит Назаров та бер үк йәштә тиерлек тотҡонлоҡҡа дусар була: береһе каторгаға бикләнһә, икенсеһенең зиһенен ҡараңғылыҡ солғап ала. Әйтерһең дә, улар был донъяға таланттары менән кешеләрҙе хайран итергә лә, шунан һуң тиҙ арала, бәхетһеҙлеккә тарып, милләтте үкендерергә, хәсрәткә һалырға тыуған”.

Шағир дүрт тиҫтә йылға саклы махсус дауалау йорттарында йәшәй.

**Ижады:**

**Слайд 5.** Рәшит Назаровтың ҡәләм тибрәтеүе мәктәп йылдарына тура килә. Тәүге шиғырҙарын ун-ун бер йәштәрҙә ижад итә. Ләкин матбуғатта улар ни бары 60-сы йылдар башында донъя күрә. Әҙиптең әҫәрҙәрен китап итеп баҫтырып сығарыуҙы хәстәрләүҙә уның ҡәләмдәштәренең, айырыуса Риф Мифтаховтың эше баһалап бөткөһөҙ.

Р. Назаровтың шиғырҙары 1962 йылдан баҫыла башлай. Яҙыусының “Таңды ҡаршылау” (төҙөүсеһе Назар Нәжми) исемле тәүге китабы 1965 йылда Башҡортостан китап нәшриәте тарафынан баҫылып сыға.

**Слайд 6.** Артабан “Кояш юлы буйлап” (1970, төҙөүсеһе Әсхәл Әхмәткужин).

**Слайд 7.** “Йөрәгемде һеҙгә илтәм” (1991, төҙөүсеһе Әсхәл Әхмәтҡужин).

**Слайд 8.** “Йәшен” (1994, төҙөүсеһе Риф Мифтахов) тигән поэтик йыйынтыҡтары нәшер ителә. Автор ижадына ихласлыҡ, ябайлыҡ хас. Уның поэзияһы тематик һәм жанр йәһәтенән төрлө, бай йөкмәткеле.

**Слайд 9.** Рәшит Назаров – “Орлоҡ”, “Тере ҡорбандар”, “Яҡты юл”, “Йылдар һәм гөлдәр” тип исемләнгән драматик һәм лирик поэмаларҙың авторы.

**Слайд 10.** Рәшит Назаров - республиканың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт (2004), Ғ. Ибраһимов исемендәге (1996) премиялар лауреаты.

**Слайд 11.** Ауырғазы ерендә тыуған ябай ауыл малайы әҙәбиәт күгендә яҡты йондоҙ булып атыла. 2006 йылдың 14 октябрендә мәшһүр һүҙ оҫтаһының йөрәге тибеүҙән туктала.

**Слайд 12.** Рәшит Назаровтың тормошон һәм ижадын өйрәнеүгә режиссер Гәүһәр Батталова, оператор Урал Ғатауллин ҙур өлөш индергән – улар шағир ижадына арнап «Йөрәк» исемле документаль фильм төшөргәндәр.

**Видеофильмдан Рәшит Назаровтың укытыусылары Зәйнәп Ибраҡова, Әүхәт Ильясовтарҙың хәтирәләрен тыңлау.**

Йыл һайын шағирҙың тыуған ерендә «Назаров уҡыуҙары» үткәрелә.

Шулай итеп, Ауырғазы ерендә тыуған талант үҙенең тыуған ерен, тыуған яғын, Башҡортостанын донъя кимәленә күтәрә.

**III. Рәшит Назаровтың шиғырҙарын тасуири уҡыу, йөкмәткеһе буйынса әңгәмә ойоштороу.**

Ә хәҙер, балалар, яҙыусының бер нисә әҫәре менән танышып үтәйек.

**1.** Уҡытыусы Рәшит Назаровтың “Мин батыр ҙа түгел, йәнем... ’’исемле әҫәрен уҡый.

– Яҙыусыға кешеләге ниндәй сифаттар оҡшай?

– Һөйөү кешегә нисек тәьҫир итә ала?

**Слайд 13.**

**2.** Уҡыусылар тарафынан Рәшит Назаровтың шиғырҙары тасуири уҡыла.

**1-се укыусы “ Ғүмер”** шиғырынан өҙөк уҡый:

Биш ғүмерле кеше кеүекмен мин,
Аҙмы ялҡын, аҙмы ут яна...
Һәр бер таңда минең йөрәгемдә
Башланмаған ғүмер уяна...

**Слайд 14**

**2-се укыусы: “Таң ҡаршылау”**

Урал итәгенә башын терәп,
Ауылым тынған төнгө серемгә.
Ялан еле бишек көйөн көйләй,
Әкиәт һөйләй уға сирендәр...

**3-сө укыусы: “Туған тел”**

Миңәме ни һине онοторға!
Туған телем, әсә һөтөләй,
Сафлыҡ бирҙең миңә, ҡеүәт бирҙең,
Ҡуша үҫтең йөрәк итемә...

**4-се укыусы: “Йәшен”**

Мөхәббәт ул — әйтерһең дә, утлы йәшен,

Һанап, һорап тормай һис бер кемдең йәшен,
Һүнмәҫ ялҡын менән ялмай ҡартын-йәшен,
«Көйҙөрөр», — тип ҡурҡһаң әгәр, ҡас һин — йәшен,
Тик аҙаҡтан ҡоя күрмә күҙең йәшен!
Мөхәббәт ул — әйтерһең дә, утлы йәшен…

– Шағир мөхәббәтте нимә менән сағыштыра?

**3. Һорауҙар буйынса әңгәмә.**

- Күренекле башкорт шағиры Рәшит Сәйетбаттал улы Назаровтың шиғырҙары һеҙҙә ниндәй хистәр уятты?

**Слайд 16**. Р. Назаровтың ижадын өйрәнеүсе әҙип ни өсөн уны “атылған йондоҙ” тип атай?

–“Йөрәк” исемле шиғырын йыр итеп башҡарыусы йырсының исеме?

– Иң һуңғы шиғыры ҡасан яҙылған?

–Тағы ла Р. Назаровтың ниндәй шиғырҙарын беләһегеҙ?

**(**Һорауҙарға яуап алыу, фекерҙәрен тыңлау**)**

**4. Йомғаҡлау.**

- Шулай итеп, дәрестә мәшһүр һүҙ оҫтаһы Рәшит Назаровты иҫкә алдыҡ. Кыҫҡаса уның тәбиғәт, мөхәббәт һәм патриотик темаларға арналған әҫәрҙәре менән танышып үттек.

Рәшит Назаровтың шиғриәте халыҡсан һәм уҡыусы тарафынан йылы ҡабул ителә. Автор лирикаһында һүрәтләү саралары уңышлы һәм урынлы ҡулланыла. Шуға күрә уның әҫәрҙәре аң-зиһенгә генә түгел, ә хис-тойғоларға берҙәй үтеп инә.

**Слайд 17.**

**IV. Рефлексив анализ. Баһалау.**

**V. Өйгә эш**.

Рәшит Назаровтың “Йөрәк” шиғырын ятларға.

**Ғәлләмова В.В.**

*Башҡортостан Республикаһы Илеш районы*
*Баҙытамаҡ урта дөйөм белем биреү мәктәбе МБДББУ*

# Н. Мусин. “Таң ҡыйылған саҡ”
# (Кластан тыш уҡыу дәресе)

Маҡсаттар:

1. Н.Мусиндың биографияһын иҫкә төшөрөү, әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү, проблемаларын асыҡлау.

2. Укыусыларҙа тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

3. Уҡыусыларҙың һөйләү телмәрен үҫтереү, һүҙлек байлығын арттырыу.

Уҡыусылар эшмәкәрлегенең эш төрҙәре.

Ноғман Мусиндың тормош юлы һәм ижады менән таныштырыу. Әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү. Унын тәрән маҡсатҡа йүнәлтелгәнен аңлау. Йөкмәткеһе буйынса һораузар төҙөү һәм парҙарға биреп яуап алыу. Әҫәрҙә файҙаланылған һирәк осрай торған һүҙҙәрҙе табып, уларҙың лексик мәғәнәһен аңлатыу.

Йыһазландырыу: дәреслек, Н. Мусиндың портреты, проектор, электрон дәреслек, Н. Мусиндың китаптары.

**I. Ойоштороу мәле.**

– Һаумыһығыҙ! Ултырығыҙ!

II .Өйгә бирелгән эште тикшереү.

– Гөлфиә Юнысованың“Талы бөгөлөп тора” шиғырын тасуири уҡытыу.

– Был шиғырҙа ниндәй тема күтәрелә?

– Һеҙҙең мәктәп уҡыусылары тәбиғәтте һаҡлау буйынса нимәләр эшләй?

– Һеҙҙең арала ла ошондай матурлыҡҡа балта күтәреүселәр бармы?

– Шулай итеп , тәбиғәтте һаҡлау бер үк ваҡытта кеше күңеленең экологияһын да һаҡлау булып тора. Кешеләрҙе ихтирам итә белеү, кәрәк саҡта ярҙамға килә белеү ҙә ошо экологияның бер сағылышы ул.

**III. Яңы теманы аңлатыу .**

Бөгөн беҙ дәрестә тыуған ерҙең матурлығы, унын тәбиғәте тураһында күп әҫәрҙәр ижад иткән, әҙәбиәттең иң күренекле прозаигы, Башҡортостандың

халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия лауреаты Ноғман Мусин ижады, уның“Таң ҡыйылған саҡ” әҫәре менән танышырбыҙ.

1.Хәҙер беҙгә бер уҡыусы яҙыусының тормош юлы тураһында белешмә бирә (презентация).

Ноғман Сөләймән улы Мусин 1931 йылдың 17 июлендә Башҡортостандың Ишембай районының Ҡолғона ауылында тыуа. 1944 йылда үҙҙәренең ауылындағы ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, Маҡар ауылына һигеҙенсе класҡа уҡырға инә. Унынсы класты тамамлағас, үҙе уҡып сыҡҡан мәктәпкә уҡытыусы итеп ҡалдырыла. Ауылда ике йыл уҡытҡас, Стәрлетамаҡ уҡытыусылар институтына уҡырға инә. Ҡолғона ауылында беренсе булып юғары белемгә эйә була.

Н. Мусиндың тәүге ижади аҙымдары ла ошо институтта башлана. Институтты тамамлағас, уға оҙаҡ эшләргә тура килмәй, Маҡар район мәғариф бүлегендә инспектор булып эшләп йөрөгән еренән 1951 йылдың аҙағында хәрби хеҙмәткә алына. Уның тәүге шиғырҙары хеҙмәттә сағында республика гәзиттәрендә һәм “Әҙәби Башҡортостан” журналында баҫылып сыға. Шул йылдарҙа ул проза жанрында ла көсөн һынап ҡарай, һалдаттар тормошона арналған бер нисә хикәйә яҙа. Ә 1958 йыл Өфөгә килеп, “Ағиҙел” журналында — бүлек мөдире, яуаплы секретарь, 1962 йылдың башынан “Совет Башҡортостаны” гәзитендә әҙәби сотрудник булып эшләй. Н. Мусин Башҡорт дәүләт университетының киске бүлеген тамамлай, артабан йәнә “Ағиҙел” журналында бүлек мөдире, Башҡортостан телевидениеһында, унан Башҡортостан китап нәшриәтендә редактор булып эшләй.

Әҙип һуңғы йылдарҙа яҙылған “Һайлап алған яҙмыш”, “Зәңгәртауҙа аҡ болан”, “Яҙғы ташҡындар алдынан” (“Яралы кеше тауышы”), “Мәңгелек урман”, “Таң менән сыҡ юлдарға”, “Һуңғы солоҡ”, “Шунда ята батыр һөйәге” романдары һәм “Йыртҡыс тиреһе” повестары менән башҡорт прозаһының талантлы яҙыусыһы булып танылды. Уның әҫәрҙәренең геройҙары – беҙҙең замандаштарыбыҙ. 2001 йылда Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы исеме бирелә.

1991 йылда Салауат Юлаев исемендәге премияһына лайыҡ була.

**2.Текстың йөкмәткеһен үҙләштереү.**

**Һүҙлек эше**.

шымтайҙың-тындың

кәсеп-һөнәр

вайымһыҙ-бер нимә тураһында ла уйламау

тәкәббер—үҙ-үҙен юғары ҡуйыу

юламаны - яҡын барманы

сәмсел - ғәрсел

**3. Әҫәрҙе анализлау.**

– Әҫәр ниндәй жанрға ҡарай? (Хикәйә жанрына.)

– Нимә ул хикәйә? (Хикәйә – эпик әҫәрҙең иң күп ҡулланылған жанрҙарының береһе.Унда бер йәки бер нисә кеше менән булған хәл-ваҡиғалар һүрәтләнә.)

– Хикәйәлә ваҡиғалар ҡайҙа һәм ҡасан бара?

– Төп геройҙарын атағыҙ.

– Ниндәй проблемалар күтәрелә?

– Хикәйәлә төп геройҙар – Вәлимә, Нурғәле, Таһир, Ғәфүр Аҙнаев. Ваҡиғалар – таулы-урманлы районддарҙың береһендә бара. Вәлимә умартасылыҡ менән шөғөлләнә. Нурғәле уның янына практика үтәргә ҡайтҡан. Унда кешеләрҙең үҙ ара мөнәсәбәте, йәшәү ҡиммәте, кешелеклелек, тәбиғәтте һаҡлау проблемалары күтәрелә.

–Төп образдарға характеристика бирегеҙ.

Уҡыусылар яуабы.

– Нурғәле – ябай егет, бик ихлас, иғтибарлы. Вәлимә – йәш, эшсән, булдыҡлы, үҙ эшен бик яҡшы белә, уҫал, башлаған эшен аҙағына еткереүсән .

– Был сифатары уның ниндәй хәл-ваҡиғаларҙа күренә? Шуларҙы текстан табып, уҡып күрһәтегеҙ.

Уҡыусылар яуабы.

– Вәлимә умарталыҡта бал ҡорттарының күпләп ҡырыла башлауын күргәс, сәбәбен белер өсөн ауылға ҡайта. Ул агрономдың: «Урманды ҡарышлауыҡтар баҫа, япраҡтарҙы ашап бөтөрөүе бар, шуларҙы нисек бөтөрөргә ,” – тип йөрөгәнен белә, химикаттар һиптереүе арҡаһында ҡорттар үлә. Ҡыҙ быны белгәс, күҙенә аҡ-ҡара күренмәй. Ярһый, мотоциклына атланып китә, юлда оса, аварияға осрай, ләкин туҡталып ҡалмай, баҡсалыҡҡа барып, ағастарға һыу һиптереп, уларҙың яртыһын булһа ла ҡотҡара. Бер нимәнән ҡурҡмай. Барыһын да йөрәгенә ала.

– Ғәфүр Аҙнаев райсовет председателенең улы була. Шуғалырмы баҡсасылыҡта егерме йылдан ашыу эшләгән ағайҙы, белемең етмәй тип эштән сығаралар, институт бөткән тип уны баш агроном итеп ҡуялар. Ул бөтәһен дә белгән кеше булып ҡылана, бүтәндәр кәңәшенә ҡолаҡ һалмай. Ерҙең яйын-көйөн, баҫыуҙарҙың бөтәһен яҡшы белгән агрономды тыңламай, үҙенсә сәстерә. Шуға

хәҙер баҫыуҙар ала-ҡола булып ята: ҡайһы урындарҙа игендәр гөрләп үҫә,икенсе баҫыуҙарҙа бойҙай ҡарыштай ғына күтәрелгән.

-Ҡыҙ менән егет араһында конфликт шуның арҡаһында сыға.

Ғәфүр үҙенең хатаһын аңларға теләмәй, уны бөтөрөр өсөн насар аҙымға бара, ҡыҙҙы ҡурҡытып, уға ҡул күтьәрмәксе була. Бында уның насар кеше икәнлеге күренә. Ҡыҙ быны бик ауыр кисерә, ул ауыр ваҡыттарында бал ҡорттары менән кәңәшләшергә ярата. Ирекһеҙҙән кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе бал ҡорттарыныҡы менән сағыштыра. Бал ҡорттарын үҙ балаһылай яҡын итә, улар менән һөйләшә.

Ошо урынды китаптан табып уҡыу.

(Егәрле ҡорттарҙың иртә менән бер-бер артлы ябырылып кейәнән сығыуҙарын, умарта тупһаһынан аҙ ғына йымырҙап бара биргәс, үҙҙәренең булдыҡлылығына ниндәйҙер ышаныс менән осоп китеүҙәрен күргәс, кешеләр араһында ла бына ошондай берҙәмлек, тырышлыҡ, егәрлек булһа, тормош, моғайын икенсе төрлөрәк – тағы ла яҡшыраҡ булыр ине тип уйлап ҡуя ине) .

– Вәлимәнең бал ҡорттары тураһындағы фекерҙәре менән килешәһегеҙме? Әгәр килешмәһәгеҙ, үҙ фекерегеҙҙе дәлилләгеҙ.

– Автор ҡороҡостарға ҡаршы көрәшеүҙең ниндәй икенсе юлын тәкдим итә?

(Бының өсөн ҡоштар үрсетергә, урманды серек-сороҡ ағастарҙан таҙартырға, уны таҙа тотарға, күберәк сыйырсыҡ оялары яһап ҡуярға кәрәк.)

– Умартасылыҡ, ҡортсолоҡ тураһында нимәләр беләһегеҙ?

Бер уҡыусы белешмә бирә.

Башҡорт халҡы борондан ҡортсолоҡ шөғөлө менән дан тотҡан. Нисәмә быуаттар буйы нисек кенә үҙгәрһә лә ата-бабаларыбыҙ ҡортсолоҡ кәсебен юғалтмаған . «Ҡортсолоҡ кәсебендә башҡорттарға тиңләшеүсе халыҡ юҡтыр», – тип яҙып ҡалдырғандар. Бөтмәҫ-төкәнмәҫ донья һынауҙары аша үтеп был кәсепте һаҡлай, хата беҙҙең быуынға еткерә алғандар.

Балдың файҙаһын тәүтормош кешеләре үк белгән. Улар ҡорт ояһын табып нектарын тәмләп ҡарағас, балды йыя башлағандар, балдың файҙаһын һиҙгәс, дауалауҙа ҡуллана башлағандар.

Египетта балды аҙыҡты консервалауҙа ҡулланғандар. Бигерәктә алыҫ походта, косметикала, ауырыуҙарҙы дауалауҙа ҡулланғандар.

Һиндостанда балды йылан ағыуына ҡаршы ҡулланғандар.

Грецияла ла балды яҡшы белгәндәр һәм киң ҡулланғандар. Александр Македонский үлгәс, уның тәне боҙолмаһын өсөн, балға һалып (йәйҙең эҫе көндәрендә) Александрия ҡалаһына алып барғандар (2500км).

Ҡытайҙа ла балды дарыу итеп ҡулланғандар: эске органдарҙы дауалағандар, температураны төшөргәндәр, хәлһеҙ кешеләрҙе дауалағандар. Балды күп ҡулланған кешеләр йәшәргән һәм оҙаҡ йәшәгән.

Японадар балды тәбиғи продукттың короле тип атағандар. Улар ҙа балды дауалауҙа киң ҡулланғандар.

Япониялағы Хиросима һәм Нагасаки ҡалаларына атом һөжүменән һуң, япон ғалимдары халҡына бал ашарға тәҡдим иткәндәр. Япониялағы һәр уҡыусы хөкүмәт тарафынан көн һайын бер ҡалаҡ бал ашай. Японияла егәрле бөжәккә – бал ҡортона һәйкәл ҡуйылған. Ундай һәйкәл Польшала ла бар.

Боронғо Римдә гладиаторҙар үлемесле көрәшкә сығыр алдынан бал ашағандар. Ул хәҙер ҙә космонавтарҙыңһәм спортсмендарҙың рационына инә. Балда В1, В2 ,В3, В6 ,С, К, Е, А витаминдары бар. Кешегә В һәм С витаминдары етешмәһә, төрлө ауырыуҙар килеп сыға: йөрәк һәм ҡан тамыры, нерв системалары. Шулай уҡ хәлһеҙлек, баш ауыртыуы, йөрәк ауыртыуы булырға мөмкин.

Йүкә балы иң сифатлы бал тип һанала, аҡһыл һарғылт төҫтә була. Ул бик файҙалы. Балалар аҙығында балдың әһәмиәте бик ҙур, бал ашаған уҡыусылар физик һәм аҡыл яғынан үҫешкән, талантлы булалар.

Кәрәҙ – ул балға тәбиғәт тарафынан бирелгән һауыт. Һауыты менән ҡуша балды ашап була. Балауыҙҙы оҙаҡ итеп сәйнәргә кәрәк, айырыуса ҡара икмәк менән ашау файҙалы. Кәрәҙле бал туңмай, йылдар буйы яҡшы һаҡлана. Ул бал таҙа, уны хатта ҡайнаған һыу менән ҡатыштырып күҙгә тамыҙырға була.

Башҡорт балы донъя кимәлендә лә ҙур урын биләй. Башҡорт балы – күп һанлы йәрминкәләр һәм күргәҙмәләр еңеүсеһе.

Беренсе тапҡыр башҡорт балы 1900 йылда Францияла Бөтә Донъя Париж йәрминкәһендә алтын миҙал менән бүләкләнә. 1961 йылда Эрфурт ҡалаһында (Германия) – алтын миҙал; 1965 йылда Бухарест ҡалаһында (Румыния) XX Халыҡ-ара Апимондия конгресында көмөш миҙал; 1971 йылда Мәскәү ҡалаһында XXIII Халыҡ-ара Апимондия конгресында алтын миҙал; 2002 йылда Берлинда « Йәшел аҙна» күргәҙмәһендә юғары награда;

– 2009 йылда Башҡортостандың Ете мөғжизәһенең береһе булды.

– Хәҙерге ваҡытта һеҙҙең ауылығыҙҙа умартасылыҡ менән шөғөлләнгән кешеләр бармы?

**IV. Йомғаҡлау**. ( Был әҫәр кешенең эске доньяһы, унының тирә-яҡ, тәбиғәт менән мөнәсәбәтен күрһәтә. Автор бөтә әҫәрҙәрендә лә урманды һаҡлау темаһын күтәрә. Урман – геройҙарының тормош сығанағы, йәшәү рәүеше. Ул уларға аш, эш бирә, йәшәтә.)

**Рефлексив анализ.**

– Хәҙер алдығыҙҙа ятҡан карточкаларҙа эшләйәсәкбеҙ. Унда һорауҙар бирелгән, шуларға яуап бирергә кәрәк.

– Был дәрестә һин нимәләр белдең?

– Бөгөн беҙ нимәләр тураһында һөйләштек?

– Әҫәргә ҡарата ниндәй синквейн төҙөр инегеҙ?

– Ниндәй проблемалар күтәрелде? Уларҙы бер һүҙ менән генә әйтеп бирегеҙ (экология). Ә үҙегеҙ ниндәй һабаҡ алдығыҙ? Дәрес оҡшанымы?

Парта өҫтөндә ятҡан түңәрәк ҡағыҙҙарҙа һеҙҙең кәйефтәрегеҙҙе күрһәткән рәсемдәр яһағыҙ(смайлик).

**V. Өй эше биреү**. Н.Мусин ижадына ҡарата синквейн төҙөргә.

**Баһалау.** Дәрестә актив ҡатнашҡан уҡыусыларға баһалар ҡуйыу.

**Камалова Ф.Ф.**

*Башҡортостан Республикаһы Илеш районы МР*

*Ҡарабаш ауылы урта дөйөм белем биреү мәктәбе МДББУ*

# Нур Ғәлимов. “Яуҙан ҡайтҡан ҡурай”

**Маҡсат:** хикәйәнең йөкмәткеһе буйынса эшләү, Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында башҡорт һалдаттарының батырлығын күрһәтеү, Ғәйфулла Сарбаев образына ҡылыҡһырлама биреү; башҡорт ҡурайы тураһында фекер алышыу; Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында тыуған илде дошмандарҙан һаҡлаған һәм яҡлаған һалдаттарға ҡарата хөрмәт тәрбиәләү.

**Дәрес барышы**

1. **Ыңғай халәт тыуҙырыу.**

– Һаумыһығыҙ, уҡыусылар! Данлыҡлы Илеш ерендә бөтәбеҙ ҙә белем алабыҙ. Ошо ла ҙур ҡыуаныс. Мин Фәнзилә Фаид ҡыҙы булам, ерем, илем, телем тип янып йәшәүселәр рәтендәлер тип уйлайым. Уҡыусылар һеҙҙе лә илен, ерен һәм телен яратҡан уҡыусылар итеп күргем килә , уртаҡ тел табырбыҙ, төплө белемдәрегеҙҙе күрһәтерһегеҙ тип ышанып ҡалам.

2. **Өй эшен тикшереү**

- **Уҡыусыларҙан йомаҡ систереү**

Уралымда үҫкән ул
Урай-урай күпме илдәрҙе
Киң залдарын алҡыштарға сорнап,
Үрә баҫтырманы кемдәрҙе?
Үҙе ябай бер үҫемлек кенә,
Үҙе эйә сикһеҙ тылсымға,
Йә,нимә был, әйтеп ҡара? **(Ҡурай).**

-Бына ҡурай (ҡулымда ысын ҡурай). Уҡыусылар, Абдулхаҡ Игебаев “Ҡурай” тураһында шиғыр яҙған. Хәҙер һеҙгә шуны уҡып ишеттерәм (ҡурай моңо аҫтында шиғыр һөйләнә).

Ерҙең йөрәк тамырынан
Яралғанһың, ҡурайым,
Шуға ла һин, ер-әсәмдәй,
Моңлоһоңдор, моғайын!

– Уҡыусылар, ҡурай һүрәтен ҡайҙа күргәнегеҙ бар?

БР Дәүләт гербы һәм флагы сағылдырылған слайд.

– Башҡортостан гербы һәм флагына иғтибар итәйек. Беҙҙең бөгөнгө темаға ҡағылышлы берәй нәмә күрәһегеҙме? (Флагта ла, гербта ла ҡурай һүрәте бар)

– Ҡурай менән башҡорт халҡы тураһында ни әйтерһегеҙ? (Ҡурай башҡорт халҡының үткән ҡайғыларын моңға һала, йөрәк ҡылдарын тирбәтә, ҡайнар

тойғоларҙы һиҙҙерә. Ҡурай – башҡорт  халҡының милли музыка ҡоралы. Улар күңел асҡанда ла, яуҙа ла айырылғыһыҙ).
– Ҡурайҙы нимәнән яһайҙар? (ҡороған ҡурай үләнен ҡырҡып алып һабағында тишектәр эшләйҙәр).
Ул үлән беҙҙең яҡтарҙа ла үҫә. Был ҡурай беҙҙең данлыҡлы Урал тауҙарында ла үҫә.
– Ҡурайсы ҡурай уйнаһа, күңел күтәрелеп китә, ҡайғылар онотола.
Халҡымдың моң шишмәһе һин,
Йор тауышлы ҡурайым,
Тауышҡайыңды ишетһәм,
Яҡтыралыр сырайым.
Һин һыҙҙырып уйнағанда,
Мин ҡушылып йырлайым.
Милли моңға йән өрөүсе
Әлдә һин бар, ҡурайым!

– “Кем күп белә?” уйынын уйнап алайыҡ
Ҡурайсыларҙың исемдәрен әйтеү: Ришат Рәхимов, Азат Айытҡолов, Илбәков Ишморат, Рушан Биктимеров, Азат Биксурин һ.б.
– Илеш районының талантлы ҡурайсыһы Айбулат Ғиләжетдиновты ла әйтеп китәйек. Ҡарабаш ауылы егете Азат Борхановты ла онотмайыҡ
– Эйе, уҡыусылар ҡурай моңо ҡайғыларҙы оноттора. Нисәмә йылдар элек халҡыбыҙ ниндәй ҙур ҡайғы кисерҙе?
– Һуғыш…112-се Башҡорт дивизияһы… Бөйөк Еңеүгә баһалап бөткөһөҙ ҙур өлөш индергән, илебеҙгә 78 Советтар Союзы Геройы биргән легендар Башҡорт атлы дивизияһы һәм уның ҡаһарман командиры  генерал-майор Миңлеғәле Шайморатов. Беҙ атай-олатайҙар үткән данлы юлды ныҡлап өйрәнергә,тарихыбыҙҙға  яҡты йондоҙ булып ингән шәхестәребеҙҙең тормошон, яуҙағы батырлығын өйрәнеп, киләһе быуындарға еткерергә бурыслыбыҙ.

**3. Теманы һәм маҡсатты билдәләү.**

– Әгәр ҙә ҡурай тарихына күҙ һалһаҡ, ул йөҙәр, меңәр йылдар менән бәйле. Ниндәй генә яуҙар булмаһын, башҡорт халҡы ҡурайынан айырылмаған.
– Ни өсөн, уҡыусылар халыҡ ҡурайҙан айырылмаған ? **(Ҡурай уларға көс, дәрт, ҡеүәт биргән һәм улар һәр саҡ еңеп сыҡҡан).**
– Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ла башҡорт ҡурайы хаҡында бик күп әҫәрҙәр ижад ителгән.
– Ә хәҙер уҡыусылар дәрестең темаһын билдәләп ҡарайыҡ (ҡурай тураһында, Бөйөк Ватан һуғышы хаҡында, һуғыш ваҡытындағы ҡурайсылар).
– Тимәк бөгөнгө дәрестә беҙ нимә тураһында һүҙ алып барасаҡбыҙ?
– Эйе, бөгөн, ысынлап та, ҡурай тураһында һүҙ алып барасаҡбыҙ.
– Хикәйәнең авторын билгеләргә беҙгә слайдтар ярҙамға килер
(Слайдта нурҙарын сәсеп ҡояш сыға һәм йырсы Айҙар Ғәлимов)
Эйе, уҡыусылар, ҡояш нур сәсә;  талантлы йырсы Айҙар Ғәлимов.

Бөгөнгө дәрестә Нур Ғәлимовтың “Яуҙан ҡайтҡан ҡурай” хикәйәһе менән танышабыҙ. Дәфтәрҙәрҙе астыҡ, число, теманы яҙып ҡуябыҙ.

– Беҙҙең алда ниндәй маҡсаттар тора?

✓ Хикәйәне уҡыу

✓ Һорауҙарға яуап биреү

✓ Төп геройға ҡылыҡһырлама биреү

– Дөрөҫ, уҡыусылар. Алдыбыҙҙа тап ошондай маҡсаттар тора.

- ***Яуҙан ҡайтҡан ҡурай... Ни өсөн кәрәк булған ул һуғышта? Ниндәй маҡсат менән алып барғандар уны һуғышҡа?***

1) Эште төркөмдәрҙә алып барырбыҙ. Хикәйәне уҡығанда һеҙгә ошо һорауҙарға яуап эҙләргә кәрәк.

**1-се төркөмгә:**

- Ни өсөн Н.Ғәлимов әҫәрен “Яуҙан ҡайтҡан ҡурай” тип атаған?

**2-се төркөмгә:**

– Хикәйәлә төп образ кем? Уға ниндәй сифаттар хас?

2) Һүҙлек эше

• ***Ирәндек*** нимә ул? Ирәндек – Урал тауҙарының матур урыны. Учалы, Әбйәлил, Баймаҡ һәм Хәйбулла районларында урынлашҡан. Тау арҡаһы буйында матур йылға һәм күлдәр урынлашҡан. Шуларҙың береһе - Талҡаҫ күле ***(метапредмет бәйләнеш)***.

**3. Яңы белемде үҙләштереү**

***Уҡыусыларҙан хикәйәне сылбырлап уҡытыу, үҙем уҡыу, үҙаллы уҡыу.***

Һорауҙарға яуап биреү

- Әҫәрҙә ниндәй осор һүрәтләнә?
- Хикәйәлә төп образ кем? Кем тураһында һүҙ бара?
- Уға ниндәй сифаттар хас?
- Ни өсөн Н.Ғәлимов әҫәрен “Яуҙан ҡайтҡан ҡурай” тип атаған?
- Бөгөнгө көндә был ҡурай ҡайҙа һаҡлана?
- Нисек килгән был ғәжәп ҡурай Башҡортостанға?

– Яуҙан ҡайтҡан ҡурай... Ни өсөн кәрәк булған ул һуғышта? Ниндәй маҡсат менән алып барғандар уны һуғышҡа?

***(Һалдаттарҙың күңелен күтәрә, һуғыш тураһындағы ҡурҡыныс уйҙарҙы ситкә ҡыуа, тыуған ерҙәрҙе һағыныуҙарын баҫа, уларҙы яуҙарға рухландыра)***

– Башҡорт егеттәренең таланты нимәләрҙә күренә был хикәйәлә?

***(Ғәйфулла ҡурайҙа уйнай, майор йырлай, бейеү ансамбле концерт ҡуя)***

5. **Һүрәтләү сараларын ҡабатлау**

– Әйҙәгеҙ, иҫкә төшөрөп үтәйек. Эпитет тип нимәгә әйтәбеҙ?

– Сағыштырыу ниндәй телмәр сараһы?

– Ә метафора тураһында нимә беләһегеҙ?

– Яҙыусы немец самолеттарын һүрәтләгәндә **ниндәй һүрәтләү сараларын ҡулланған?**

Ирәндек итәгендә – **Метафора**

Утлы өйөрмә – **Эпитет**

Ҡоҙғон төҫлө – **сағыштырыу**

– Автор һуғыш эпизодын нисек һүрәтләй, шул тасуирлауҙы табып уҡығыҙ.

**Һуғыш тураһында уҡытыусы һүҙе**. Һуғыш… Бынан да мәрхәмәтһеҙерәк, вәхшиерәк нәмә бар икән донъяла?!

Бөйөк Ватан һуғышы тамамланыуға нисә йылдар үтте, күпме һыуҙар аҡты, әммә бөгөнгө кешеләр өсөн ауыр һынау осоро бер ваҡытта ла онотолмаҫ. Яу яланында ятып ҡалған һалдаттың, һәләк булған балаларҙың, ҡарттарҙың ғүмерен башҡа берәй нәмә менән алмаштырып буламы һуң? Юҡ!

Бына шулай айҙар, йылдар, быуаттар үтер. Әммә үҙҙәренең батырлығы менән Бөйөк Еңеүҙең һәр көнөн яҡынайтыусы ҡаһармандарға мәңгелек хөрмәт тойғоһо һәр кемдең йөрәгендә рәхмәт булып сағылыш табыр.

– Уҡыусылар, нисек уйлайһығыҙ маҡсатыбыҙға ирештекме?

( Беренсе уҡыусы: Үҙебеҙҙең милләт, яугир ҡурайсы, йырсы, легендар ҡурай өсөн беҙҙә ғорурлыҡ уянды, ихтирамыбыҙ артты.)

(Икенсе уҡыусы: Нур Ғәлимовтың әҫәрендә Бөйөк Ватан һуғышы осоронда Ғәйфулла Сарбаевтың отҡорлоғон, ойоштороу һәләтен күрҙек)

(Өсөнсө уҡыусы: Һуғыш барғанда ла улар Польшала халыҡ өсөн концерт күрһәтәләр. Барыһы ла уларҙың сығышын ярата).

Өй эше. Ҡурай үләненең һүрәтен төшөрөгөҙ, хикәйәнең йөкмәткеһен һөйләргә әҙерләнегеҙ.

**Кәбирова А.Ф**

*Башҡортостан Республикаһы Сибай ҡалаһы*

*12 -се урта дөйөм белем биреү мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы*

# Рауил Бикбаевтың

# «Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда»

# шиғырын өйрәнеү

# (8-се класс)

**Тема:** Рауил Бикбаевтың "Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда" шиғырын өйрәнеү.

**Маҡсат:** 1.Р.Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады менән таныштырыу, шиғырҙың идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү.

2.Тыуған Башҡортостан еренә һөйөү,ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү.

3.Уҡыусыларҙы шиғырҙы тасуири уҡырға өйрәтеү,фекерләү һәләтен үҫтереү.

**Йыһазландырыу:** Проектор, ноутбук, экран, слайдтар, китаптар күргәҙмәһе,тест.

**Дәрес планы:**

**I.Ойоштороу.**

**II. Психологик инеш** (психологик комфорт тыуҙырыу,дәрес алдынан уҡыусыларҙың кәйефен күтәреү,эшкә өндәү)

Һаумыһығыҙ,һаумы әле,

Ниндәй йылы һүҙ икән!

Күңелдәрҙе иретерлек,

Һәр кемгә лә үҙ икән.

-Һеҙ ниндәй кәйеф менән килдегеҙ?
Ошо кәйеф менән дәресте башлайбыҙ.Бер-берегеҙҙә ҡарата һәр ваҡыт шулай ихтирамлы,иғтибарлы булығыҙ.Йылы һүҙҙәрегеҙҙе йәлләмәгеҙ.Тылсымлы һүҙҙәр кеше күңелен күтәрә,йәшәүгә көс,дәрт өҫтәй.

**III.Уҡыусыларҙың уҡыу эшмәкәрлегенә мотивация булдырыу**
Дәресебеҙҙе дауам итәбеҙ. Иғтибарығыҙҙы экранға йүнәлтеүгеҙҙе һорайым.
Уҡытыусы:
Уҡыусылар, һеҙ экранда күрһәтелгән шәхес тураһында нимә белергә теләр инегеҙ.

Уҡыусыларҙың яуаптары түбәндәгесә булырға мөмкин: («Кем ул?», «Ҡайҙа тыуған?» , «Кем булып эшләй?», «Ҡайҙа йәшәй?» һ.б.)

-Һеҙ бөгөнгө дәрестә үҙегеҙҙе ҡыҙыҡһындырған бик күп һорауҙарға яуап табырһығыҙ тип ышанам.

*Уҡыусылар Р.Бикбаев тураһындағы белешмә материал менән танышалар, дәрестең темаһы , маҡсатын билдәләйҙәр.*
*(Экранда Башҡортостандың халыҡ шағиры Р.Бикбаевтың портреты яҡтыртыла.)*




-Һеҙ бөгөнгө дәрестә үҙегеҙҙе ҡыҙыҡһындырған бик күп һорауҙарға яуап табырһығыҙ тип ышанам.
Уҡытыусы:
Донъяла шиғыр сығарыусылар ифрат күп, шағирҙар ҙа байтаҡ ҡына. Әммә һүҙ оҫталары, үҙ халҡының эстетик зауығын күрһәтеүселәр бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Талантлы шағир, күренекле йәмәғәт эшмәкәре Р.Бикбаев башҡорт әҙәбиәтенә тос өлөш индергән шәхес. Уның ижадында тыуған ил, тыуған ер, халыҡ яҙмышы темаһы төп урынды биләй. Шағирҙың ижадын юғары баһалап Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ғайса Хөсәйенов былай ти: «Р.Бикбаев-юғары гражданлыҡ тойғоло шағир. Уның поэзияһына эҙләнеүсән, тынғыһыҙ фекер, болоҡһоу хис, әхлаҡ-әҙәп мәсьәләләрен күтәреү, шуларҙы үтемле алымдарҙа поэтиклаштырыу хас.»

**IV.Актуалләштереү.**

Дәрестең маҡсатын ,бурыстарын,башҡарыласаҡ эштәрҙе билдәләү.

Тимәк,дәрестә нимә өҫтөндә эшләйәсәкбеҙ?

Был юлдарҙың авторы кем икән?

*Уҡыусылар Р.Бикбаев тураһындағы белешмә материал менән танышалар, дәрестең темаһы , маҡсатын билдәләйҙәр.*

**V. Уҡыу ситуацияһын тыуҙырыу.**

1). Ҡыҫҡаса биографияһын ҡарап китәйек.Ҡасан,ҡайҙа тыуған? Ҡайҙа уҡыған,белем алған?

- Ошо даталарҙы ҡарап иҫкә төшөрәйек.




2).Рауил Бикбаев тиҫтәнән ашыу китап авторы.Бына уларҙың

бер нисәүһе менән танышып китәйек.




3)Р.Бикбаевтың ижадын нисек үҙләштергәнегеҙҙе белер өсөн тест эшләп ҡарайыҡ.



Яуаптарҙы тикшереү,баһалау.

| Дөрөҫ яуаптар | |
|---|---|
| 1.б | 5.а |
| 2.б | 6.б |
| 3.а,в | 7.в |
| 4.в | |

| Баһалау | |
|---|---|
| **Хата** | **Баһа** |
| 0 | 5 |
| 1-2 | 4 |
| 3-4 | 3 |

## VII. «Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда » шиғырын әҙәбиәт ғилеменә нигеҙләнеп өйрәнеү.

Тыуған еребеҙ Башҡортостандың матурлығы, хозур тәбиғәте кемдәрҙе генә һоҡландырмай. Кемдәрҙе генә үҙенә әсир итмәй икән Ошо ҡабатланмаҫ матурлыҡ кещене илһамландыра, дәртләндерә, көс-ҡеүәт бирә. Рассәмдәр күңелендә ул ҡабатланмаҫ картиналар тыуҙырһа, шағирҙар йөрәгендә шиғыр булып ярала. Рауил Бикбаевтың беҙ өйрәнәсәк шиғыры ла тыуған еребеҙгә унын тәбиғәтен һаҡлауға арналған арнала. (Экранда Башҡортостан картаһы фонында шиғирҙың исеме яҙылған слайд)

*Рауил Бикбаев "Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда" шиғырын өйрәнеү*

1.Уҡыусылар шиғырҙың исеме менән танышҡандан һуң уларға түбәндәге һорау бирелә: «Тыуған еребеҙҙең тәбиғәте һаҡлауға мохтажмы?»

- Уҡыусыларҙың яуаптарын тыңлағандан һуң уҡытыусы дөйөмләштерә.
- Был һорауға яуапты шиғырҙың йөкмәткеһе менән танышып сыҡҡас әйтә алырбыҙ.

(Экранда Башҡортостан тәбиғәтен сағылдырған слайдтар күрһәтелә.)

2. Шиғырҙың фонояҙмаһын тыңлау.

3. Шиғырҙағы ҡыйын һүҙҙәр өҫтөндә эшләү.

Һүҙлек эше:

Аңҡый –көслө булып еҫ бөркөлөү

Яфа – ауыр кисереш,ғазап

Ҡылыҡ – холоҡтағы,тәбиғәттәге бер һыҙат

Ҡыяҡ – тар ғына оҙон үлән япрағы

Мыжыу – юҡ-барҙан сәбәп табып,ризаһыҙланып көйһөҙләнеү

Һөйләмдә һүҙҙәр аңлатыла, текстан ошо һүҙҙәр булған ҙур уҡыла, рус теленә тәржемә эителә.

а) һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлатыу

б)текстан ошо һүҙҙәр булған һөйләмдәрҙе уҡытыу.

в)шиғырҙы дөрөҫ уҡыуға әҙерләнеү.

Шиғырҙы дөрөҫ уҡыу өсөн дөрөҫ тын алыу,тауышты дөрөҫ файҙаланыу мөһим. Шулай уҡ пауза ,логик баҫым ҙур роль уйнай.

г) Логик баҫымды,паузаларҙы билдәләү




Пауза менән баçым үз-ара бәйләнештә булалар һәм шиғыр мелодикаһын тыуҙыралар.

**VIII. Өйрәнелгән белемдәрҙе практик нығытыу.**

1.Тасуири уҡыу күнекмәләрен үçтереү. (Уҡыусыларҙың шиғырҙы тасуири уҡыуҙары.)

2.Рифмалашҡан һүҙҙәрҙе таптырып уҡытыу:




3.Р.Бикбаев был шиғырында үҙенең уй-фекерен нисек итеп шиғыр аша бирә икән?

Ниндәй һүрәтләү саралары ярҙамында образдар тыуҙыра икән?

а) һүрәтләү сараларын ҡабатлатыу

б) шиғырҙан һүрәтләү сараларына миçалдар таптырыу.

Һүрәтләү саралары.

Сағыштырыу: бал булып , ҡыяҡ ҡалҡҡан кеүек

Йәнләндереү: ысыҡ сафлыҡ тойһон,устарыма төшә тирелеп,талпынғанда йырым

Эпитет: шифа йәйҙәре,һүнгән хыял

Һүрәтләү саралары текста ниндәй роль үтәй?(эмоциональ ҡабул итергә,хис-тойғоно үçтерергә ярҙам итә,әçәрҙе тулыландыра)

4.Һораўҙар ярҙамында шиғыр йөкмәткеһе өçтөндә эшләү:

1).Шиғырҙа һүҙ нимә тураһында бара?

2) Ни өсөн шиғырҙы шағир шулай итеп атаған?
3).Шиғырҙың төп фекере ниндәй?
Талпынғанда йырым,
Ысыҡ йырып,
Ҡаршыларға сығам ал таңды .
Йырҙарыма ысыҡ сафлыҡ ҡойһон,
Йүкәләрҙән һығылып бал тамһын тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ? 4).Был шиғырҙы уҡығас,һеҙҙә ниндәй тойғолар уянды?(тәбиғәтте һаҡлау,кәҙерләү) Әйе,тәбиғәт шундай бай,гүзәл.Ләкин уның байлығына,матурлығына ҡурҡыныс янай.Беҙ һеҙҙең менән тәбиғәтте һаҡларға,яҡларға,киләсәк быуынға матур килеш тапшырырға бурыслыбыҙ.Шағир ҙа ал таң,матур киләсәкте ҡаршыларға яҙһын,тәбиғәт матурлығын юғалтмаһын тип әйтә. 5).Ә һеҙ тәбиғәткә нисек ярҙам итә алаһығыҙ?

VIII. Дәресте йомғаҡлау.

Шулай итеп, тәбиғәт яҡлауға,һаҡлауға мохтажмы?

Һығымта яһау.

IX.Рефлексия. “Дәрестә нимәгә өлгәштем?”һорауҙарына яуап биреп уҡыусы үҙенең эшмәкәрлеген баһалай.

X. Уҡыусыларҙың эшмәкәрлеген баһалау.

XI. Өйгә эш биреү.

Бөгөнгө проблемаларҙы яҡтыртып тәбиғәтте һаҡлау,яҡлау тураһында ҡобайыр яҙырға.
Өлгө:
Бер тигәс тә ни яман?
Ерһеҙ ҡалһаң шул яман.
Ике тигәс тә ни яман?
Илһеҙ ҡалһаң,шул яман.
Өс тигәс тә ни яман?
Телһеҙ ҡалһаң,шул яман.
Дүрт тигәс тә ни яман?
Тәбиғәт бысранһа,шул яман.

**Садретдинова Г.М.**
*Башҡортостан Республикаһы Илеш районы Ишкар ауылының урта дөйөм белем биреү мәктәбе МДББУ*

# Халыҡ ижады – милли мираҫ (9-сы класта “Халыҡ ижады” темаһын йомғаҡлау буйынса дәрес-йыйын)

**Маҡсат:** башҡорт халыҡ ижады буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау, йыйын йолаһын пропагандалау һәм тергеҙеү. Уҡыусыларҙың һәләттәрен асыу, үҫтереү. Уҡыусыларҙа халыҡтың ауыҙ-тел ижадына, тарихына, мәҙәниәтенә һөйөү тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу.** Аҫалы балаҫтар, сигелгән әйберҙәр, һандыҡ, һике, таҫтамалдар, боронғо тормош-көнкүреш әйберҙәрҙән күргәҙмә. Халыҡ ауыҙ-тел ижады тураһында китаптар.

**Дәрес барышы.**

Хәйерле көн, балалар!
Матур үтһен көнөгөҙ!
Тик уң булһын эшегеҙ!
Яман эштән ҡараймаһын,
Балҡып торһон йөҙөгөҙ!

Уҡыусылар, һеҙҙе дәрес-йыйында сәләмләүемә шатмын.

**Слайд *(Башҡортостан тәбиғәте).* “Урал” көйө яңғырай.**

Йыйын – хәҙерге заманға тиклем килеп еткән боронғо ҙур байрамдарҙың береһе. Башҡортостаныбыҙҙың хозур тәбиғәт ҡосағында борон беҙҙең ата-олатайҙарыбыҙ йыйын үткәргән. Ошо йыйында мөһим мәсьәләләр хәл ителгән, ә унан һуң байрам: ат сабыштары, уҡ атыш, сәсәндәр әйтеше, һәм башҡа ярыштар ойошторолған. Был матур йола бер аҙ онотолоп торҙо, ә һуңғы йылдарҙа яңынан тергеҙелә башланы. Быйыл Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы **Ырыуҙар йыйыны** исемле яңы **проект** башлап ебәрҙе һәм тәүге **йыйын** Борай районында үтте. **Слайд *(Йыйын күренештәре).***

Ә бөгөн беҙҙә Илеш районы ырыуҙары йыйыны.

***Уҡыусылар, беҙҙең районда нисә ырыу вәкиле йәшәй?(Алты)***

Улар төркөм-төркөм килеп тә еткән. Афариндар!

Йыйында һөйләшеү ниндәй темаға булыр икән, билдәләп китәйек. Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе ҡуйып, мәҡәлдәрҙе уҡырға: **(Слайд)**

Берҙәмлектә – ... ! ***(көс)***

Күмәкләгән – ... . ***(яу ҡайтарған)***

Кәңәшле ил ... . ***(тарҡалмаҫ)***

Уҡыусылар, мәҡәлдәр ниндәй ижадҡа ҡарай? **(Халыҡ ижады).**

Тимәк, йыйында нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ? **(Халыҡ ижады тураһында).**

**Уҡыусылар менән берлектә маҡсатты ҡуйыу:**

– Башҡорт халыҡ ижады буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатларбыҙ, уның жанрҙарын иҫкә төшөрөрбөҙ.

– “Урал батыр” эпосы буйынса әңгәмәләшербеҙ.

– Белемдәрҙе нығытырбыҙ.

**Дәфтәрҙә эш:**

**Теманы яҙыу: “Халыҡ ижады – рухи мираҫ”.**

Уҡыусылар, рух һәм мираҫ һүҙҙәре нимәне аңлата? Алдығыҙҙа һүҙлектәр, улар ярҙамға килер.

**Һүҙлек менән эш: (Слайд) (дәфтәргә аңлашылмаған һүҙҙәрҙе яҙыу):**

**Рух** – кешенең эске уй-тойғоһо. Рухи – кешенең эске донъяһына мөнәсәбәтле.

**Мираҫ** – үткән быуындарҙан ҡалған сәнғәт, әҙәбиәт, мәҙәниәт байлығы.

Әйҙәгеҙ, бер-беребеҙгә уңыштар теләйек һәм ең һыҙғанып эшкә тотонайыҡ.

Йәмле генә Базы буйҙарында

Ҡымыҙлыҡтан йыуан йыуа бар.

Ошо йыйын күркәм булһын өсөн

Ҡатнашып та ултырыр йола бар.

Бәйгеләрҙә әүҙем ҡатнашырһығыҙ тип ышанып ҡалам, уҡыусылар. Парталарығыҙға жетондар ҡуйылған, һәр дөрөҫ яуабығыҙ өсөн ала бараһығыҙ, дәрес аҙағында шуларға ҡарап билдәләр ҡуясаҡмын.

**Өй эшен тикшереү.**

Әйткән һүҙ – атҡан уҡ, ти халыҡ мәҡәле. Беҙ ҙә **“Мәргән уҡсы” ярышын** башлап ебәрәйек. Һеҙ халыҡ ижады буйынса бер-берегеҙгә һорауҙар әҙерләп килдегеҙ. Кем беренсе яуап бирә, шул – иң мәргәне!

**“Халыҡ ижады” темаһын ҡабатлау (төркөмдәр һорауҙарҙы бер-береһенә бирә):**

1. Халыҡ ижадының синонимы? **(Фольклор).**
2. Мәҡәл, әйтем, һынамыш, йомаҡтар халыҡ ижадының ниндәй төрөнә ҡарай? **(Афористик ижад).**
3. Теге йәки был күренеш, предмет, атаманың килеп сығышын аңлатҡан халыҡ хикәйәһе? **(Легенда).**
4. Ҡатын-ҡыҙҙар ғына башҡарған жанр? **(Сеңләү).**
5. Башҡорт эпосының героик йөкмәткеле, халыҡ батырҙарын данлаған шиғри төҙөлөшлө төрө. **(Ҡобайыр).**
6. Башҡорт халыҡ тормошон ҡаһармандар образы аша һүрәтләүсе, йола, көнкүрешен яҡтыртыусы боронғо поэтик жанр. **(Эпос).**

Быйыл һеҙ ниндәй эпос өйрәндегеҙ?

*“Урал батыр” эпосы.*

Эпостың төп идеяһы?

*Әҫәрҙә кешегә дан йырлана. Ул төрлө яуыз көстәрҙе еңеп, донъяла гүзәллек, ирек, иркенлек ойоштороусы төп көс булып һүрәтләнә. Был идея әҫәрҙә Урал батыр образында сағыла.*

**Урал батыр үҙенең төп йәшәү маҡсаты тураһында нимә ти?** (Дәреслек, 56-сы бит). Эпостан һорауға яуапты бер-ике уҡыусы тасуири уҡып күрһәтә.

Уйын ҡыҙа, ярыш дауам итә. Сираттағы бәйгебеҙ – **“Ат сабышы.** “Аты барҙың – ҡанаты бар” тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр. Республикабыҙҙың төрлө

төбәгенән Йыйынға ҡунаҡ булып килгән шағирҙар, яҙыусылар, журналистар һеҙгә “Урал батыр” эпосы буйынса һорау бирә. Беренсе булып яуап биргән ырыуҙың аты иң йүгереге була. (Һорауҙарҙы яҙыусы В. Исхаҡов, шағирә А. Ғарифуллина, тележурналист Әнисә Ғиләжева бирә) **(Экранда видео).**

1. “Урал батыр” эпосы ҡасан һәм кем тарафынан яҙып алынған? **(Мөхәмәтша Буранғолов 1910 йылда Баймаҡ районы Иҙрис ауылында сәсән Ғәбит Арғынбаев менән ошо уҡ төбәктәге Бәләкәй Этҡолда йәшәгән Хәмит Әлмөхәмәтовтан яҙып ала.)**

2. Йәнбикә һәм Йәнбирҙе исемдәренең символик мәғәнәләре. **(Йән биреүсе, тормош биреүсе).**

3. Йәнбирҙе ҡарт улдарын ниндәй маҡсат менән сәфәргә оҙата? **(Йәншишмәнең урынын табырға, Үлемдең башын ҡырҡып алып ҡайтырға).**

**Уҡытыусы.** “Урал батыр” беренсе тапҡыр 1968 йылда “Ағиҙел” журналында баҫыла. Ошонан һуң эпос ныҡлы тарала, ғилми яҡтан өйрәнелә башлай. Ул бынан дүрт мең йыл элек яҙылған һәм 4576 юлдан тора. Йыл һайын республикабыҙҙа “Урал батыр” эпосын яттан һөйләүсе йәш сәсәндәрҙең конкурсы үтә. Беҙҙең район уҡыусылары унда әүҙем ҡатнаша һәм лайыҡлы сығыш яһай. Беҙ гран-при яулаған яҡташтарыбыҙ Ридә Тимершәйехова һәм Регина Агалиева менән ғорурланабыҙ.

**ФИЗМИНУТ. Ҡобайыр тыңлау (видеояҙма).** Ә хәҙер ял итеп алайыҡ. Уңайлы итеп ултырып алығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ. Һеҙгә Ейәнсура яҡтарынан музыкаль сәләм. Башҡортостан журналистар союзы рәйесе Артур Дәүләтбәков башҡарыуындағы яҙма халыҡ ижадының ниндәй жанрына ҡарауын әйтерһегеҙ. **(Ҡобайыр).**

Йыйында сәсәндәр ҙә ҡатнашҡан һәм үҙ-ара ҡобайыр әйтешкән. Унда сығарылған ҡобайырҙарҙы **әйтеш** тип атағандар. Беҙҙең дә сираттағы бәйге **“Әйтеш”**тип атала. **Ҡобайыр сығарыу** (текст түбәндә бирелә*).

Афарин, балалар. Һеҙ ҙә йор һүҙле, үткен теллеһегеҙ икән, сәсәндәрҙән бер ҙә ҡалышмайһығыҙ.

**Йомғаҡлау**. Тест.

1. Бөгөнгө йыйында нимәләр тураһында һөйләштек? (Халыҡ ижады, уның жанрҙары тураһында.)
2. “Урал батыр” эпосы нисә юлдан тора? (4576 юлдан)
3. Сәсәндәр бәйгеһендә сығарылған ҡобайыр нисек атала? (әйтеш)

(Уҡыусылар бер-береһенең эшен тикшерә, билдәләр ҡуя. Яуаптар экранда.)

**Рефлексия**.

1. Йыйынға ниндәй маҡсаттар ҡуйғайныҡ?
2. Маҡсаттарға ирештекме?
3. Һинең ҡайһы эшең бигерәк уңышлы килеп сыҡты?

**Баһалау**.

**Өй эше.**

1. Республикала “Урал батыр” эпосына арналған ниндәй саралар үтә?
2. Ауылығыҙҙағы ер-һыу атамаларының тарихын яҙып алырға.
3. Илеш районы ырыуҙарының этнографик картаһын төҙөргә.

**Фаршатова Ә.Ә.**

*Башҡортостан Республикаһы Яңауыл ҡалаһы 1-се УДББМ МБДББУ*

# Р.Ғарипов. Туған тел

# (Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптең 4-се класы өсөн яңы белемде үҙләштереү дәресе)

| |
|---|
| Класс: 4 |
| Предмет: туған (башҡорт)телендә әҙәби уҡыу. |
| Тема: Р.Ғарипов.Туған тел |
| Маҡсат: 1) Р.Ғариповтың тормош юлы менән ҡыҫҡаса танышыу; 2)уҡыусыларҙың бәйләнешле телмәрен үҫтереү, һүҙ байлығын арттырыу, һорауҙарға дөрөҫ, тулы яуап талап итеү;<br>3) туған телгә һөйөү уятыу. |
| Предмет буйынса һөҙөмтәләр: яңы мәғлүмәттәр туплауҙа уҡыу ҡулланмаһы һәм интернет селтәрендә эшләй белеү;тасуири уҡыу,логик фекерләүҙе үҫтереү,ижади һәләттәр асыу. |
| Төп төшөнсәләр:туған тел,башҡорт теле,Башҡортостан |
| Эш төрҙәре: индивидуаль, төркөмдәрҙә эш, парҙарҙа эш |
| Дәреслек:: Нафиҡова З.Ғ.,Мортазина Ф.Ф. Башҡорт теле: уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 4-се класы өсөн башҡорт теле һәм әҙәбиәте өйрәнеү өсөн дәреслек. – Өфө: Китап, 2016. – 44-45-се бб. |
| Йыһазландырыу: дәреслек, презентация Power Point, интерактив мультимедиа күнегеүе, видеояҙма. |
| Предмет-ара бәйләнеш: рус теле, литературное чтение, тирә-яҡ мөхит, башҡорт теле |

| **Дәрес этабы** | **Уҡытыусы эшмәкәрлеге** | **Уҡыусы эшмәкәрлеге** | **Универсаль уҡыу эшмәкәрлеге** |
|---|---|---|---|
| **I.Ойоштороу**<br>**1) Психоло-гик ыңғай халәт тыуҙырыу.**<br><br>**Эшкә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу**<br>Маҡсат: дәрес эшмәкәрлегенә инеп китеү өсөн шарттар тыуҙырыу.<br><br>**II. Өй эшен тикшереү.** | -Һаумыһығыҙ, уҡыусылар!<br>Кәйефтәрегеҙ нисек?<br>-Ҡояшлы иртә кеүек.<br>**Артикуляцион күнегеү.**<br>- Әйҙәгеҙ, дәресебеҙҙе Д.Талхинаның шиғыр юлдары менән башлап ебәрәйек.<br>*Үҙ телемдә һөйләшәм - Миңә коштар көнләшә. Үҙ телемдә һөйләшәм - Мин кояшка тиңләшәм.*<br>а) эстән уҡып сығыу;<br>б) хор менән уҡыу;<br>в) тик башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре булған һүҙҙәрҙе генә уҡыу.<br>Өй эшен тикшереү өсөн интерактив мультимедиа күнегеүе (“Ҡурай”әкиәте буйынса викторина) тәҡдим ителә.<br>https://learningapps.org/vie | Уҡыусылар эстән уҡып сығалар, хор менән ҡабатлайҙар.<br><br>Интерактив күнегеү эшләйҙәр | **Таныпбелеү универсаль уҡыу эшмәкәрлеге**<br>Тейешле мәғлүмәтте табыу һәм айырып ала белеү. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | w22444841<br>( QR код аша ла карап була) | | |
| **III. Актуаллəштереү.**<br>Яңы материалды үҙләштереүгә мохтажлыҡ тыуҙырыу.<br><br>**Уҡыу мəсьəлəһен ҡуйыу.** | -Уҡыусылар, беҙ алдағы дəрестəрҙə һеҙҙең менəн башҡорт халҡының даны булған ҡымыҙ, ҡурай менəн таныштыҡ. Бөгөн нимə тураһында һөйлəшəсəкбеҙ икəнлеген белер өсөн ребусты сисəйек.<br><br><br>- Шулай итеп уҡыусылар, бөгөн беҙ ниндəй изге төшөнсə тураһында һөйлəшербеҙ? Дəрескə ниндəй маҡсат ҡуйырбыҙ? Хəҙер дəфтəрегеҙҙе асығыҙ ҙа бөгөнгө датаны һəм теманы яҙып ҡуйығыҙ. Ошо мəкəл дəресебеҙҙең эпиграфы булыр.Уны ла | -*Туған тел.*<br><br>Теманы һəм маҡсатты бергəлəп асыҡлау.<br><br>-Туған тел тураһында . | **Коммуникатив универсаль уҡыу эшмəкəрлеге**<br>Үҙ фекереңə ышандыра белеү.<br>Башҡаларға аңлайышлы һөйлəй белеү. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | дәфтәрегеҙгә яҙып ҡуйығыҙ.<br>**Матур яҙыу минуты.**<br>*Теле барҙың иле бар.* | | |
| **IV.Таныпбелеү эшмәкәрлеге. Уҡыу мәсьәләһен сисеү.** | **Видеояҙма ҡарау.**<br>Уҡыусылар,хәҙер видеояҙма ҡарап үтәйек. (Р.Ғарипов тураһында)<br>Был яҙма кем тураһында? Шағир тураһында нимәләр беләһегеҙ? Дәреслектең 45-се битенән Р.Ғариповтың биографияһын 1 уҡыусы уҡый.<br>**2.Һүҙлек эше үткәреү.**<br>**Ынйы-жемчуг, жемчужина**<br>**Кәрәҙ-соты**<br>**Хаҡлыҡ- правда**<br>Улар менән һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр төҙөү. | Видеояҙма ҡарайҙар<br>Уҡыусылар яуап бирәләр, үтелгәнде иҫкә төшөрәләр.<br>**2.Яңы һүҙҙәр менән танышыу.**<br>Төркөмдәрҙә эш. Бер-береһенең эшен баһалайҙар. | **Таныпбелеү универсаль уҡыу эшмәкәрлеге**<br>Тейешле мәғлүмәтте табыу һәм айырып ала белеү.<br>Төрлө рәүештә бирелгән мәғлүмәтте ҡабул итеү һәм аңлау. Уҡығанды анализлау. |
| **Ял минуты** | “Башҡорт телендә һөйләшәм”йырын хәрәкәттәр менән башҡарыу . | Ял итәләр | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| **V. Яңы белемдәрҙе нығытыу, үҙ аллы ҡуллана белеү**<br>Маҡсат:<br>яңы белемдәрҙе тренажер ҡулланып камиллаштырыу.<br><br>**Күҙҙәргә ял минуты** | 1) Шиғыр өҫтөндә эш.<br>а) Уҡытыусының өлгөлө уҡыуы.<br>б) Эстән уҡып сығырға тәҡдим итеү.<br>в) Бәйләнешле уҡыу (сопряженное чтение) (Уҡытыусы уҡыусылар менән бергә уҡый башлай һәм уҡыу ваҡытында тауышын әкренәйтә, уҡыусылар ҡысҡырып уҡыуҙы дауам итә)<br>г) Комбинир уҡыу ( Текста хор менән уҡыу өсөн алдан юлдар билдәләнә)<br>**Күҙҙәрҙе ял иттереү**<br>*Күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ. Эстән унға тиклем һанағыҙ һәм күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ. Яңынан йомоғоҙ.10-ға тиклем һанағыҙ ҙа күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ.*<br>ғ) Эстафеталы уҡыу (Уҡыусылар үҙҙәре киләһе уҡыусыны билдәләй)<br>2) Шиғырҙың һәр 4 юлына комментарийлы анализ яһау. | **Төркөмдәрҙә эш**<br>1)Уҡыусылар уҡыйҙар.<br><br>Ял итеү. | **Шәхсән универсаль уҡыу эшмәкәрлеге**<br>Үҙ фекеренде дөрөҫ әйтә белеү.<br>**Коммуникатив универсаль уҡыу эшмәкәрлеге:**<br>башҡалар-ҙың телмәрен ишетеү һәм тыңлау ;<br>үҙ фекереңә ышандыра белеү. |

<table>
<tr>
<td></td>
<td>3)“Күрәм, ишетәм ,тоям” алымы. Таблица тултырыу.
<table>
<tr><th>Күрәм</th><th>Ишетәм</th><th>Тоям</th></tr>
<tr><td>1.Сәскәләр,бал ҡорттары</td><td>1.Бал ҡорттары гөжләүен</td><td>1.Хуш еҫ</td></tr>
<tr><td>2.Тел</td><td>2.Үҙ телемдә көй</td><td>2.Ҡыуаныс</td></tr>
<tr><td>3.Башҡорт халҡы,ил</td><td>3.Ҡурай моңо</td><td>3.Ғорурлыҡ</td></tr>
</table>
3) Уҡытыусы һүҙе.<br>
-Уҡыусылар, илен һөйгән кеше ниндәй булырға тейеш икән? Әйҙәгеҙ, кешенең шул сифаттарын бергәләп “Фекерҙәр кәрзиненә” һалып ҡуяйыҡ<br>
<br>
“Фекерҙәр кәрзине”алымы</td>
<td>2)Уҡыусылар бер-береһенә аңлата.<br><br>Парҙарҙа эш.<br><br>Ошо һүҙҙәрҙе дәфтәргә яҙалар.</td>
<td></td>
</tr>
<tr>
<td>VIII. Уҡыу</td>
<td>Уҡытыусы һүҙе.</td>
<td></td>
<td>Регулятив</td>
</tr>
</table>

| | | | |
|---|---|---|---|
| **эшмәкәрлеге-нә йомғаҡ.**<br>Маҡсат: дәрестәге эшмәкәрлекте анализлау, белемдәрҙе баһалау һәм киләсәккә билдәләү; үҙ фекереңде дәлилләү, дәрестә алған белемдәрҙең әһәмиәтен аңлау, уларҙы киләсәктә ҡуллана белеү.<br><br><br><br>**IX.Йомғаҡлау.**<br>**1.Өй эшенә инструктаж биреү.** | Һәр бер кеше үҙенең теле н яҡшы белергә<br>һәм яратырға тейеш, сөнки үҙеңдең телеңде белмәй тороп башҡа телдәрҙе белеү мөмкин түгел.<br>Үҙ туған телен белмәүсе кеше үҙенең тамырын онота, милләт вәкиле булыуҙан<br>туҡтай. ... Бының өсөн башҡорт телен яҡшы өйрәнергә,<br>был телдә матур итеп һөйләшергә һәм<br>уны яратырға кәрәк.<br>14 декабрь Башҡорт теле көнө үткәрелә.<br>Ошо шиғырҙы өйҙә һеҙгә яттан һөйләргә әҙерләнергә кәрәк буласаҡ. Класыбыҙ менән флешмоб үткәрербеҙ. Кемгәлер шиғырҙы ятлау ҡыйыныраҡ<br>булһа,интернеттан “Быстрое заучивание стихов” онлайн сервисы | -Уҡыусылар телде һаҡларға, яҡларға кәрәклекте әйтәләр.<br><br>. | **универсаль уҡыу эшмәкәрле ге**: үҙ эшмәкәрле-геңде контролгә алыу.<br><br>**Коммуни-катив универсаль Уҡыу эшмә-кәрлеге:** Башҡалар-ҙың телмәрен ишетеү һәм тыңлау ;<br>үҙ фекереңә ышандыра белеү. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 2.Рефлексия<br><br>3.Баһалау<br><br>X. Дәресте шиғыр менән тамамлау | ярҙамға килер. http://byheart.op-team.ru/ru/<br>Дәресте алдығыҙҙа ятҡан һүрәттәр (смайликтар) буйынса баһалағыҙ<br>-Дәрес барышында һеҙҙең әүҙемлегегеҙ оҡшаны. Афарин, уҡыусылар!<br>Уҡыусыларҙың эшен баһалау.<br>- Ватанын , халҡын һөйгән кеше, тыуған телен дә хөрмәт итә, унын үткәне менән ҡыҙыҡһына, киләсәге тураһында уйлай. Хәҙер Айгиз һеҙгә М.Хәйҙең “Ватан” шиғырын яттан һөйләп күрһәтер. (Ютубта сығышты ошо һылтанма аша ҡарарға мөмкин https://youtu.be/7dlisSyLwXg) | Уҡыусылар тыңлайҙар. | |

**Әҙәбиәт**


1. Нафиҡова З.Ғ.,.Мортазина Ф.Ф.Башҡорт теле.укытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 4-се класы өсөн башҡорт теле һәм әҙәбиәте өйрәнеү өсөн дәреслек. – Өфө: Китап,2016. – 44-45-се бб.
2. Интерактив мультимедиа күнегеүҙәре сервисы https://learningapps.org/
3. Ютубтан видеояҙмалар

**Хәҙимуллина Р.Р.**
*Башҡортостан Республикаһы Илеш районы*
*Ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Ғайса улы Гәрәев исемендәге Бишкурай урта дөйөм белем биреү мәктәбе*

# Мостай Кәримдең тормошо һәм ижады. “Ҡайын япрағы тураһында” шиғыры. (8 класс)

| |
|---|
| Дәрес тибы: Дәрес-экскурсия. |
| Уҡытыусы тарафынан дәрескә ҡуйылған маҡсаттар:<br>1. Мостай Кәримдең тормошо һәм ижады менән таныштырыу; шағирҙың ижадына ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм хөрмәт тәрбиәләү; “Ҡайын япрағы тураһында” шиғырының йөкмәткеһен үҙләштереү;<br>2. Тыуған республикабыҙ менән ғорурланыу тойғолары тәрбиәләү.<br>3. Илһөйәрлек, ҡунаҡсыллыҡ, толерантлыҡ кеүек әхләҡи сифаттар тәрбиәләү. |
| Стандарт булмаған дәрестәрҙең үҙенсәлектәре:<br>Уҡыу процесында стандарт булмаған дәрестәҙе индереү танып-белеүҙе, практик күнекмәләрҙе үҫтерә; дөйөм эмоциональ тонусты байыта.<br>Эшмәкәрлекте төрләндереү йәһәтенән уҡыусының булдыҡлылығына юл аса, ижади эшмәкәрлеккә ынтылыш барлыҡҡа килтерә, әҙәбиәткә һәм телгә һөйөү тәрбиәләүгә этәргес бирә.<br>Тормошта үҙ урынын таба алырҙай йәштәр тәрбиәләү кеүек мәсьәләләр хәл итеlә; шәхес күңелен ҡуҙғата, уның иң нескә тойғоларына тәьҫир итә, ижад дәртен уята. |
| Планлаштырылған һөҙөмтәләр. |

| Предмет һөҙөмтәләре: | Метапредмет һөҙөмтәләр: | Шәхсән һөҙөмтәләр: |
|---|---|---|
| Тел менән халыҡ мәҙәниәте тураһында ҡараш булдырыу. Тел ғилеменең төп аңлатмалары: һөйләү һәм яҙма телмәр, монолог, диалог һәм уның төрҙәре, функциональ телмәр төрҙәре (хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү) зе үҙләштереү. Һөйләү этикет нормаларын үҙләштереү. | Коммуникатив: хәбәр ителгән мәғлүмәтте адекват ҡабул итеү.Төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәтте һайлап алыу һәләтлеген булдырыу. Төрлө төрҙәге монологты (хәбәрләү, һүрәтләү, фекер йөртөү) һәм диалог (диалог-аралашыуҙы) үҙләштереү.Телдән үҙ фекереңде иркен еткерә белеү. Уҡыу процесында үҙ телмәреңде баһалай белеү, үҙ тексыңды мөхәррирләү һәм камиллаштыра белеү. Алған белем-күнекмәләрҙе предмет-ара ҡуллана белеү; Аралашыу процесында тирә-яҡтағы кешеләр менән коммуникатив маҡсатлы бәйләнештә, бәхәстә, көнүҙәк темаларҙа фекер алышыуҙа ҡатнашыу; шәхестәр менән мәҙәни аралашыу барышындағы төрлө ситуацияларҙа телмәр этикетының милли-мәҙәни нормаларын үҙләштереү. | интеллектуаль, ижади һәләтлектәрен һәм шәхестең мораль-этик сифаттарын үҫтереү, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим ижадына ҡыҙыҡһыныу, уға ҡарата ихтирам, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү. |

Йыһаҙландырыу: дәреслек, презентация, план, дәрестең эш картаһы, баһалау бите, төркөмдә эшләү ҡағиҙәләре, видеороликта.

Дәрестең структураһы

| Дәрес этаптары | Уҡытыусының эшмәкәрлеге | Уҡыусының эшмәкәрлеге | Универсаль уҡыу эшмәкәрлеге |
|---|---|---|---|
| Психологик инеш | Эш атмосфераһы булдырыу, уҡыусыларҙы дәрескә көйләү, уҡыу эшмәкәрлегенә йәлеп итеү.<br><br>Ошо матур шиғырҙы ишеткәс кәйефтәрегеҙ нисек?<br>Әйҙәгеҙ, бер-беребеҙгә йылмайып, уңыштар теләп, дәресебеҙҙе башлайыҡ. | -Дәресте эмоциональ ҡабул итеүгә әҙерлек.<br><br>Хәйерле көн алһыу таңдарға!<br>Хәйерле көн һайрар ҡоштарға!<br>Хәйерле көн зәңгәр күктәргә!<br>Хәйерле көн яҡын дуҫтарға! | Регулятив: планлаштырыу, шәхси: үҙбилдәләнеш |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | |
| II. Белемде актуаллә штереү, яңы тема менән бәйләнеш булдыры у | Бөгөн һеҙ, хөрмәтле уҡыусылар, ирекмәндәр булырһығыҙ (йәғни волонтерҙар). Һеҙ беләһегеҙ, улар беҙҙең тормошобоҙға үтеп инде. Ҡайҙа ярҙам кәрәк – улар шунда ашыға.<br><br>-Ирекмәндәр ниндәй эштәр башҡара инде? Бөгөн беҙ һеҙҙең менән Башҡортостанға килгән ҡунаҡтарҙы ҡаршы алыу өсөн аэропортҡа юл тотасаҡбыҙ.<br><br>-Эйе, ирекмәндәр үҙҙәренең изге эштәре менән йәмғиәтебеҙҙең бөтә йүнәлештәренә лә үтеп инделәр. Улар оло йөрәкле, ярҙамсыл, әүҙем замандаштарыбыҙ. Беҙ ҙә һеҙҙең менән был эште башҡара алырлыҡ кешеләр, әйҙәгеҙ, үҙебеҙҙе һынап ҡарайыҡ! | -Ирекмәндәр улар бөтә эштә лә әүҙем ҡатнашыусылар. Улар төрлө акцияларҙа: ағас ултыртыу, тирә яҡ мөхитте һаҡлау, өлкәндәргә ярҙам итеү һ.б.эштәрҙә. | Коммуникатив: уҡытыусы менән хеҙмәттәшлек итә. Регулятив: планлаштырыу.<br><br>Танып белеү: белгәндәрен анализлау |
| III. Дәрестең маҡсат һәм | - Уҡыусылар, ҡунаҡтар аэропортҡа килеп төшкәс, аэропорттың кем исемен йөрөтөүе менән ҡыҙыҡһынырлар, моғайын, кем тип таныштырырбыҙ? | -Өфө аэропорты Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим | 1. Проблемалы ситуация булдырыу.<br>2. Проблеманы эҙләү һәм уны билдәләү. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| бурыстар ы. | -Эйе, илебеҙҙә аэропорттарға билдәле шәхестәрҙең исемен биреүгә беҙ ҙә әүҙем ҡушылдыҡ, тауыш биреүҙә арҙаҡлы шәхесебеҙ Мостай Кәрим еңеп сыҡты.<br><br>-Нисек уйлайһығыҙ, ҡунаҡтар Башҡортостан еренә аяҡ баҫыу менән нимә менән ҡыҙыҡһынасаҡтар?<br><br>Ошо асҡыс һүҙҙәргә таянып дәрестең темаһы ниндәй булыуын кем әйтә?<br>-Бик дөрөҫ, уҡыусылар, бөгөнгө дәрестең темаһы: Мостай Кәримдең тормошо һәм ижады. Теманы дәфтәрҙәрегеҙгә яҙып ҡуйығыҙ.<br><br>-Бөгөнгә дәрескә ниндәй маҡсаттар ҡуйырбыҙ инде? | исемен йөрөтә.<br><br>- Өфө ҡалаһының иҫтәлекле урындары, күренекле шәхестәре менән таныштырыу теләге тыуыр, моғайын.<br><br>-Мостай Кәримдең тормошо һәм ижады.<br><br>-Мостай Кәримдең тормошо, ижадын өйрәнеүҙе яҡындан таныштырыу өсөн ҡунаҡтарҙы шағир менән бәйле иҫтәлекле урындарға алып барырбыҙ.<br>-Шағирҙың ижадына ҡыҙыҡһыныу уятыуҙы күҙ уңында тоторбоҙ.<br>-ҡунаҡтарға үҙебеҙҙең ижади һәләтебеҙҙе асырбыҙ.(йыр, шиғыр,рэп) | 3. Уҡыусылар ярҙамында теманы билдәләү. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | -Афарин, уҡыусылар – ирекмәндәр! Минең күҙ аллауымса, дәрес-экскурсия бик ҡыҙыҡлы булырға оҡшап тора. Әйҙәгеҙ, тиҙерәк ҡунаҡтарҙы ҡаршы алайыҡ.<br>**Беренсе слайд** (М.Кәрим исемен йөрөткән Өфө аэропорты) | | |
| IV. Яңы белемде тәүге тапҡыр үҙләштер еү | Экскурсовод-уҡытыусы.<br>– Хәйерле көн, хөрмәтле ҡунаҡтар! Һеҙҙе Башҡортостан ерендә, Мостай илендә күреүебеҙгә бик шатбыҙ. Белеүегеҙсә, беҙҙең аэропортыбыҙ күренекле шәхес Мостай Кәрим исемен йөрөтә. Башҡортостан менән таныштырыуҙы ла Мостай Кәримдән башлаһаҡ, дөрөҫ булыр тип уйлайым.<br>Хәҙер беҙ һеҙҙең менән М.Кәрим исемен йөрөткән 158-се башҡорт гимназияһына юл тотабыҙ. Был уҡыу йорто 2006 йылдың 1 сентябрендә ишектәрен асты. Ошонда Мостай Кәримдең музейы урынлашҡан. Рәхим итегеҙ!<br>**Икенсе слайд.** (158-се башҡорт гимназияһында урынлашҡан Мостай Кәрим музйы).<br>“Кеше үҙ әсәһен һәм Ватанын һайламаған шикелле, үҙенең заманын, йәшәгән дәүерен һайлай алмай. Ниндәй әсәнән, ниндәй илдә тыуыу, ҡайһы заманда йәшәү һинең үҙеңдән тормай. Ләкин тыуған ереңә, йәшәгән йылдарыңа ниндәй эҙ ҡалдыраһың, ер йөҙөндә | | Шәхси: әхләҡи нормаларҙы белеү, шәхес-ара мөнәсәбәттәрҙе дөрөҫ ҡороу. Уҡыусының шәхси-профессиональ тормошта үҙ урынын билдәләүе.<br>Уҡыусының белем алыуҙың мәғәнәүи асылына төшөнөүе (ни өсөн миңә быны белергә кәрәк)<br>Әҙәп-әхләҡ нормаларын белеүе |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | нисек һәм нимә өсөн йәшәйһең-былары инде шәхестең үҙенән тора, уның түккән тире, йөрәк ялҡыны, аҡыл көсө менән һуғарыла”-тип яҙғайны Рауил Бикбаев.<br>Хөрмәтле ҡунаҡтар, **мультимедиа тактаһы эргәһенә** яҡыныраҡ килегеҙ, ирекмәндәр һеҙ ҙә иғтибар итегеҙ.<br>**Өсөнсө слайд.** (Шағирҙың тыуған ауылы күренеше)<br>Мостай Кәрим 1919 йылда Шишмә районы Келәш ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. Бына ул нисек хәтерләй:” Мин үҙ тәртиптәре булған күп балалы ғаиләлә тыуғанмын. Атайымдың ике ҡатыны бар ине. Береһенә беҙ Кесе инәй, икенсеһенә-Оло инәй тип өндәшә торғайныҡ. Мин оҙаҡ ҡына үҙемдең ҡайһы инәйемдең улы булыуымды ла белмәй йөрөнөм, дөрөҫөрәге, уйлап та ҡараманым. Оло инәй тәрбиәһендә донъяны танып белдем” Мостай Кәрим үҙенең тормош юлын “Оҙон,оҙаҡ бала саҡ” әҫәрендә яҙа.<br>Ауылда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас Өфө педагогия рабфагында уҡый. 1937-1941 йылдарҙа ул - Башҡорт дәүләт педагагия институтының тел һәм әҙәбиәт факультеты студенты була.<br>**Дүртенсе слайд.(** Һуғыш эпизодтары) | | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| Яҡынса яңы белемде үҙләштер еү буйынса тәүге тапҡыр нығытыу. | Бөйөк Ватан һуғышы башланыу менән, Мостай Кәрим армия сафына алына һәм һуғыштың еңеү менән тамамланыуына тиклем фронттарҙа ҡатнаша.<br>1942 йылдың йәйендә, еребеҙҙе фашист туптары яралағанда, ҡара яу илебеҙҙең йөрәгенә үрелгәндә туп ярсығы Мостай Кәримдең комсомол билетын тишеп үтә. Илде яралаған һуғыш шағир күкрәген йыртып үтә. Ерҙәге сатнау яугир-шағир күкрәген йырта. Утлы шартлау "йөрәк аша үтеп, йыр юлына сыңлап ҡойола. Еңеү көнөн – 1945 йылдың 9майын – ул Вена ҡалаһында ҡаршылай.<br>**Бишенсе слайд.** ( Яҙыусының әҫәрҙәре)<br>Заман тетрәүҙәренән тетрәнеп, заман шатлыҡтарынан ҡанатланып йәшәү һәм ижад итеү уның ғүмерлек сифаты, рухи донъяһының асылы булып ҡала.<br>Бында һеҙ яҙыусының әҫәрҙәрен күрәһегеҙ. Шиғырҙары ла, сәхнә әҫәрҙәре лә, повесть, хикәйәләре лә.<br><br>-Уҡыусылар, һеҙ уның ниндәй әҫәрҙәрен беләһегеҙ? | -"Өс таған", "Беҙҙең өйҙең йәме"<br>-"Беҙҙең өйҙең йәме әҫәре буйынса""Сестренка"тигән фильм төшөрөлдө. Беҙ уны класс менән ҡараныҡ, бик | Уҡыусының аңлауын тәүге тапҡыр тикшереү.<br>Яңы белемде үҙләштереү буйынса тәүге тапҡыр уҡыусының эшмәкәрлеге.<br>Яҡынса һығымталар һәм йомғаҡлау. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | -Дәреслектә М.Кәрим шиғриәте тураһында нимә әйтелә, уҡып күрһәтегеҙ.(257-се бит)<br><br>– Ә Мостай Кәрим ижадының өс тағаны тураһында нимә әйтер инегеҙ?<br><br>-Мостай Кәрим әҫәрҙәре бер нисә быуын уҡыусыларының рухи хазинаһына әйләнде. Шағирҙың әҫәрҙәрендәге ҡанатлы һүҙҙәре күптән инде мәҡәл дәрәжәһендә йөрөй. Мәктәп уҡыусыһынан алып оло йәшкәсә уҡыусылар Мостай Кәримдең ижад донъяһын төрлөсә аса, тормош тәжрибәһе арткан һайын уның яңы яҡтарын күрә, тулыраҡ аңлай.<br><br>**Алтынсы слайд.** (Наградалары, маҡтаулы исемдәре.)<br><br>Артабан затлы хужаның затлы бүләктәре менән танышып үтәйек.<br>Эйе, халыҡ шағиры булыу – үҙе лә маҡтаулы, яуаплы, абруйлы титул. Ә Мостай аға Кәрим ошоноң өҫтөнә дәүләт эшлеклеһе лә, илебеҙ күләмендә башҡарылған барлыҡ изге | оҡшаны. Һеҙгә лә тәҡдим итәбеҙ.<br><br>Уҡыусылар уҡып аңлайҙар, уйланалар.<br><br>-Шиғриәт, драматургия, проза<br><br>(Бер уҡыусы М.Кәримдең шиғырын яттан һөйләп ишеттерә.)<br>“Мостай уҡыуҙары” конкурсы ҡатнашыусыһы 11 класс уҡыусыһы Закирова Эльнараның М.Кәрим әҫәрҙәрен тәржемә иткән “Телдәрҙең илдәре” тигән донъя интерактив картаһының видеороликы ярҙамға килә ала. | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | эштәрҙең үҙәгендә тороусы ил ағаһы – Аҡһаҡал да ине.. Күренекле һүҙ оҫтаһы – зирәк аҡыл эйәһе – ошо сифаттарҙың тәбиғи үрелеше Мостай Кәрим ижадының юғары ҡиммәте булып тора.<br>**Туғыҙынсы слайд** (М.Кәрим исеме менән аталып йөрөтөлгән урындар).<br>М. Кәрим исеме менән аталған урындар менән дә танышып үтәйек.<br>– Әйҙәгеҙ әле, фотоларға ҡарап әйтеп ҡарағыҙ: М.Кәрим исеме менән йөрөтөлгән ниндәй урындар бар?<br>– Эйе,шуны өҫтәп әйтә алам: самолеты ла бар, һыу судноһы, М.Кәрим энциклопедияһы нәшер ителәсәк.<br><br>Ирекмәндәр, тағы ла ҡунаҡтарҙы ҡайҙа алып барырбыҙ?<br><br>-2013 йылдың октябрендә асылды был һәйкәл. Үҙенең мөһабәтлеге, матурлығы менән Рәсәйҙә бер. Бейеклеге – 6 м., оҙонлоғо – 15 м. Әҫәрҙәрендәге бөтә образдар ҙа һынландырылған. Скульпторы Мәскәү рәссамы Андрей Ковальчук.<br><br>-Ҡәҙерле ҡунаҡтарға экскурсиябыҙҙы | -Милли йәштәр театры, гимназия, аэропорт.<br><br>-Мостай Кәримдең һәйкәленә! | Регулятив: танышты әлегәсә таныш булмағандан айыра белеү, үҙ-үҙеңде көйләү, ихтыяр көсөңдө туплау. Танып-белеү: дәреслек, текст менән эш итә белеү, проблеманы хәл итеү, |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | йомғаҡлап, уҡыусылар, нимә әйтерһегеҙ? Мөмкин дәреслеккә мөрәжәғәт итергә.<br><br>Сит ерҙәрҙән килгән ҡунаҡтарыбыҙ арып киткәндәрҙер, беҙ уларҙы “Башҡортостан”ҡунаҡханаһына оҙатайыҡ,<br>Ә беҙ һеҙҙең менән, уҡыусылар, дәресте дауам итәбеҙ. | Мостай Кәримдең тормош юлы, ижады кешеләрҙе уйландырыусы һәм моңландырыусы, рухты ҡанатландырыусы, намыҫты сафландырыусы яҡты моң, тыуған Башҡортостан ауазын, халҡыбыҙ рухын алыҫ илдәргә, туғандаш халыҡтарға ғына түгел, тыуыр йылдарға, киләсәккә ҡыйыу еткереүсе илсе ул. | |
| V. Тәүге эшмәкәр-лектең диапазо-нын киңәйтеү | Төрлө алымдар ярҙамында яңы белемде нығытыу, ҡабатлатыу. Уҡыусыларҙың уҙаллылығын, ижади һәләттәрен үҫтереү.<br><br>Мин һеҙгә бер **серле ҡумта** алып килдем. Эсендә бер предмет. Нимә тип уйлайһығыҙ?<br><br>-Ағастың бер өлөшө.<br><br>-Япраҡ менән нимәне | Уҡыусыларҙың күҙ аллауҙары.<br>(тамыр, ботаҡ, **япраҡ**) | Регулятив: контроль, баһалау; танып-белеү: эффектлы эш юлдарын һайлау, аңлы рәүештә фекер йөрөтә; коммуникатив: иптәштәренең эшмәкәрлеген төҙәтеү һәм баһалау |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | күҙаллайһығыҙ?(Ассоцияция)<br><br>Мин һеҙгә Мостай Кәримдең бер әҫәрен тәкдим итәм. Күҙҙәрегеҙҙе йомоп хәҙер тыңларһығыҙ, ваҡиғаларҙы кино кеүек күҙ алдынан үткәрегеҙ.<br>**Һигеҙенсе слайд** (“Ҡайын япрағы шиғыры)<br><br>– Ни өсөн шағир тыуған республикабыҙҙы ҡайын япрағына оҡшата?<br><br>-Ә ҡайыны нимә һуң?<br><br>-Япраҡ менән ҡайын ниндәй мөнәсәбәттә? Шул өҙөктө уҡып күрһәтегеҙ әле.<br><br>Эйе, улар айырылғыһыҙ, ҡайын әсә кеүек япраҡты туйындыра.<br><br>-“Япраҡты ҡайындан өҙмәк булып ниндәй елдәр иҫмәгән” тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?<br><br>-Башҡортостандың киңлеген, байлығын шағир ниндәй юлдар менән һүрәтләй? | –Башҡортостан картаһы.<br><br>Артабан уҡыусылар шиғырҙы сылбырлап тасуири уҡып күрһәтә.<br><br>- Картала республикабыҙ территорияһы ҡайын япрағына оҡшап тора.<br><br>- Ә ҡайыны – бөйөк Рәсәй!<br><br>( һайлап уҡыу)<br><br>- Ниндәйҙер уҫал көстәр беҙҙең еребеҙгә һөжүм иткән, Рәсәйҙән айырырға теләгәндәр...<br><br>(уҡыусылар табып уҡып | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | **Унынсы слайд** (Һүҙлек эше)<br><br>Һүҙлек эше.<br>Аңлатма биреү, дәфтәргә яҙҙырыу<br><br>-Лирик герой кем?<br>-Ниндәй тойғолар кисерә?<br><br>-Шиғырҙың аҙаҡҡы юлдарына иғтибар итегеҙ әле, уҡыусылар, ниндәй хис-тойғолар сағыла?<br><br>-Йыл һайын, 11 октябрҙә Республика көнө билдәләп үтелә.<br>Башҡортостан был байрамға үҙенең сал тарихы, бөгөнгө уңыштары, киләсәгенә ышаныс менән аяҡ баҫа. Беҙ бөтәбеҙ ҙә уның үткәне һәм бөгөнгөһө менән ғорурланып йәшәйбеҙ. Башҡортостаныбыҙҙы данлаған арҙаҡлы шәхестәребеҙҙе иҫкә алабыҙ. Шуларҙың береһе?<br><br>Мостай Кәрим?<br>-Шулай, балалар, Башҡортостан менән Мостай Кәрим – бер бөтөн. Был ике бөйөк күренеш Йөҙ тапҡырҙан артыҡ үҙебеҙҙеке! | күрһәтә)<br><br>(Уҡыусыларҙың яуаптары)<br><br>- Шатлыҡ, ҡыуаныс, байрам кәйефе.<br><br>(бергә)<br>-Мостай Кәрим!<br><br>– Йөҙ тапҡыр үҙебеҙҙеке! | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| VI Яңы белемде үҙләштереүҙең кимәлен билдәләү. | Материалды аңлау кимәлен тикшереү, нығытыу, ғәмәли эштәр, ебәрелгән хаталарҙы коррекциялау<br>Төркөмдә эшләү ҡағиҙәләрен хәтергә төшөрөү.<br><br>-Ә хәҙер һеҙҙең менән ошо шиғырға синквейн төҙөп ҡарайыҡ әле. Нимә ул синквейн? Инглиз теленән "Фекерләү юлы тип атала. Төркөмдәрҙә эшләйбеҙ. Өс рәт өс төркөм булһын<br>**Ун икенсе слайд.** ( Синквейн)<br>Төп һүҙ билдәләнә. Һүҙ нимә тураһында барҙы инде ?<br>-Эйе, Башҡортостан –бында төп һүҙ.<br>Ике сифат, өс ҡылым, бер һөйләм, бер күҙаллау(ассоциация) | 1. Башҡортостан бер япраҡ саҡлы,бай, киң, затлы, күп милләтле, байрамса.<br><br>2. Башҡортостан тантана итә, үҫә, ҙурая, байый.<br><br>3. Башҡортостан-йөҙ тапҡыр үҙебеҙҙеке! Башҡортостан-нурлы ил! Башҡортостан-һин | Регулятив: контроль, коррекция, белгәнде-белмәгәнде айыра белеү, үҙеңдең белемеңдең сифатын, кимәлен билдәләү; шәхси: үҙеңде баһалау |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | -Төркөмдәрҙә бик әүҙем эшләнегеҙ, афарин! Мин бик ҡәнәғәт. Баһалау битенә үҙ баһағыҙҙы ҡуйырға онотмағыҙ. | икмәкле тупраҡ!<br>4. Башҡортостан бер япраҡ саҡлы. | |
| VII Рефлек-сив анализ. Баһалау. | --Уҡыусылар, беҙ бөгөн дәрес-экскурсияла нимәләр менән таныштыҡ,үҙ эштәрегеҙгә баһа бирегеҙ,<br><br>Төркөмдә эшләүселәр ҙә Баһалау битенә баһаларын ҡуя. | -Килгән ҡунаҡтар менән берлектә Башҡортостандың Халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тормошо, ижады менән таныштыҡ, шағир исемен йөрөткән урындарҙы, уның һәйкәлен күрҙек, шиғырын яттап һөйләнек, йырын йырлап ишеттерҙек,“Ҡайын япрағы тураһында”шиғырына анализ яһаныҡ . | Һығымталар яһай, маҡсатҡа ирешеү кимәлен билдәләй, үҙенең эшмәкәрлеген үҙе баһалай<br><br>Коммуникатив: үҙ фекереңде дөрөҫ, тулы итеп әйтеп биреү; таныпбелеү;<br><br>рефлексия-үҙ эшмәкәрлегеңә анализ, шәхси фекереңде еткереү. |
| VIII. Өй эше | Уҡытыусы күп кимәлле эштәр бирә, аңлата.<br><br>1. М.Кәрим тормошо, ижадына хронологик таблица төҙөү.<br>2. “Ҡайын япрағы тураһында”шиғырынан өҙөк ятлап. Флешмоб эшләп ҡарау<br>3. Шиғырҙан өҙөктө ятлап тасуири һөйләү. | Уҡыусы үҙенә оҡшаған эш төрөн һайлап ала | Өй эше буйынса мәғлүмәт. Уны эшләү буйынса инструктаж. Шәхси: үҙ-үҙеңде көйләү, маҡсатлы эш эшләү |

**Баһалау бите**

**Үҙ баһалау критерийҙары**

*«5»билдәһе*

1. Һорау тулайым аңлашыла. Мин уны яҙма рәүештә лә аса алам..
2. Картаға кәрәк билдәләмәләрҙе төшөрҙөм.

*«4»билдәһе.*

1. Һорау аңлашыла, ләкин мин бик ышанып етмәйем. Бөтәһен дә үҙ аллы башҡарып сыға алырмын кеүек.
2. Картала кәрәкле яҙмалар бар.

*«3»билдәһе*

1. Һорау аңлашыла, ләкин үҙ аллы фекеремде еткерә алмайым.
2. Эш барышында картала яҙмалар яһаным.

**Төркөмдөң баһаһы.**

*«5»*-төркөмдә эшләүсе тикшереүҙә әүҙем ҡатнашты, үҙ фекерен яҡлай алды..

*«4»*- төркөмдә эшләүсе эш барышында ҡатнашып ултырҙы

*«3»*- төркөмдә эшләүсе тикшереүҙә аҙ ҡатнашты, эш менән ҡыҙыҡһынып ултырҙы.

| № | Уҡыусының исем шәрифтәре | Үҙен баһалауы | Төркөмдә эшләүселәрҙең баһаһы |
|---|---|---|---|
| | | | |
| | | | |
| | | | |
| | | | |
| | | | |
| | | | |

***Төркөмдә эшләү ҡағиҙәләре***

1. *Төркөмдә дуҫтарса мөнәсәбәттә эшлә,иҫеңдә тот – һеҙ бер команда!*
2. *Эш барышында ситтә торма, әүҙем бул!*
3. *Үҙ фекереңде әйтергә ҡурҡма!*

4. *Бөтәһен дә үҙып ҡысҡырма, тыныс ҡына эшлә. Башҡа иптәштәреңдең фекеренә ҡолаҡ һал.*
5. *Башҡаларға һалышма, үҙең уйла!*
6. *Таҡта алдында ҡысҡырып, ҡыҫҡа һәм теүәл яуап бир.*
7. *Төркөмдөң хаталы яуабына бер кемде лә ғәйепләмә. Иҫеңдә тот, һәр кеше хаталанырға мөмкин.*
8. *Әгәр ҙә төркөмөгөҙ исеменән сығыш яһарға теләгән кешене таба алмаһағыҙ, һанашмаҡ йәки йәрәбә ярҙамында билдәләй алаһығыҙ.*

**Хәмиҙуллина Ә.Т.**

*Башҡортостан Республикаһы*

*Борай районы МР «Борай ауылы 2-се гимназияһы» МДББУ*

# Рәшит Ниғмәти. “Нимә ул Ватан?”

# (4-се класс)

**Маҡсат:**

1. Уҡыусыларҙы Р.Ниғмәтиҙең тормош юлы һәм ижады менән таныштырыу.
2. «Ҡыҙымдың һорауҙарына яуаптар» поэмаһынан «Ватан» тигән өҙөгөн өйрәнеү. уҡыусыларға өҙөктө еткереү, мәғәнәһенә төшөндөрөү.
3. Тыуған ергә ҡарата ғорурлыҡ һәм иғтибарлыҡ уятыу, йәшәгән мөхиттең матурлығын күрә һәм һаҡлай белеүгә ынтылыш тыуҙырыу. Киләсәктә тыуған ере тураһында уйланырлыҡ шәхес тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: Р. Ниғмәтиҙең портреты, Р. Ниғмәтиҙең китаптары күргәҙмәһе, ҡурай сәскәһе һүрәте формаһында эшләнгән һорауҙар, дәреслек, слайдтар,карточкалар, кроссворд, проектор, экран.

Дәрес барышы.
I. Ойоштороу мәле.

– Һаумыһығыҙ, балалар!

Һаумыһығыҙ!

Класта кем дежур? Бөгөн барыһы ла бармы?

- Туған тел дәресен башлайбыҙ!

- Балалар, бөгөн ниндәй көн?

Уҡыусылар таҡтала яҙылған числоны, көн исемен уҡыйҙар.

II. Инеш өлөш.
1. Артикуляцион күнегеү. (слайд №1)

Һөйгән ерем – Башҡортостан,

Батыр, көслө һәм ҙур илемде

Таныйым мин бик алыҫтан.

Ул бит минеӊ тыуған илем,

Һөйгән ерем – Башҡортостан.

(Милләт Ғәзизов)

Уҡыусылар тәүҙә уҡытыусының уҡығанын тыңлай, шунан һуң хор менән уҡыйҙар. Теләге булған бер-ике бала һөйләп күрһәтә.
2. Шиғыр юлдарының мәғәнәһен асыҡлап үтеү

-Уҡыусылар, ошо шиғыр юлдарында шағир беҙгә ниндәй кәңәш бирә?
- Ул балаларға тыуған ерҙе яратырға, һөйөргә өндәй .
-Эйе, дөрөҫ әйтәһегеҙ. Тыуған илде онотмаҫҡа,яратырға кәрәк. Ә һеҙ, уҡыусылар, « ...Ул бит минеӊ тыуған илем, // Һөйгән ерем – Башҡортостан...» тигән юлды нисек аңлайһығыҙ?

- Автор ошо шиғыр юлдарында тыуған илдең һөйгәнен беҙгә күрһәтә һәм беҙҙең тыуған илебеҙгә файҙа килтерергә лә тейешлегебеҙ хаҡында әйтә..
-Эйе, дөрөҫ. Беҙ тыуған еребеҙ өсөн файҙа килтерергә,уның киләсәге тураһында уйланырға тейешбеҙ, сөнки уның киләсәге беҙҙән тора. Уҡып сыҡҡас, беҙ ошо шиғыр юлдарында ниндәй тәрән мәғәнә ятҡанын аңлайбыҙ. Ысынлап та, беҙ бөгөн Ватан тураһында, үҙенең илен ятраҡан Башҡортостандың халыҡ шағирҙары ураһында һөйләшәсәкбеҙ.

III. Төп өлөш.
1. Теманы асыҡлау.
Уҡытыусы:
- Ә кем һуң ул – Рәшит Ниғмәти?
-Уҡыусылар, беҙ бөгөн дәрестә Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәтулла улы Ниғмәтиҙең тормош юлын һәм уның «Ватан» шиғырын өйрәнәсәкбеҙ.
Дәфтәрҙәрҙе асып бөгөнгө числоны һәм теманы яҙып ҡуяйыҡ.

2. Өйгә эште тикшереү.
- Ә хәҙер беҙ өй эштәрегеҙҙе тикшереп алайыҡ. Һеҙгә өйгә эшкә дәреслек буйынса Рәшит Ниғмәти тураһында уҡып килергә ине. Хәҙер һеҙ шағир тураһында нәмәләр белгәнегеҙҙе асыҡлайыҡ.
Бына уның портреты (таҡтаға Р.Ниғмәтиҙең портреты ҡуйыла).
Экранда ромашка сәскәһе сыға. (Слайд №2).
Шағирҙың биографияһы һәм ижады буйынса һорауҙар ромашка сәскәһенең таждарында йәшерелгән. Һеҙ теләгегеҙ буйынса тажды һайлап алып һорауға яуап бирәһегеҙ.
(Уҡыусылар яуап биргәндән һуң таҡтаға алдан әҙерләнгән яуаптар эленә бара, уҡыусылар дәфтәрҙәренә теркәп баралар.)

**1-се таж**.
Рәшит Ниғмәти ҡайҙа һәм нисәнсе йылда тыуған?
1909 йылдың 9 февралендә, Һамар өлкәһенең Оло Чернигов районы Диңгеҙбай ауылында.
**2-се таж**.
Ул етем ҡалғас ниндәй балалар йорттарында тәрбиәләнә?
Һамар, Украина, Өфө.
**3-сө таж**
1924 йылда Р. Ниғмәти ҡайҙа килә? Ҡайҙа уҡырға урынлаша?
Өфөгә, Ленин исемендәге мәктәпкә урынлаша.
**4-се таж** .
Ул Туймазы районының ниндәй газета редакцияһында эшләй?
«Ленин юлы».
**5-се таж**
Р. Ниғмәти 1933-1936 йылдарҙа нимә эшләй?
Армияла хеҙмәт итә.
**6-сы таж**
Нисәнсе йылда шағир Яҙыусылар союзына алына?
1938 йылда.
**7-се таж**
Р. Ниғмәтигә ҡасан «Башҡортостандың халыҡ шағиры» исеме бирелә?
1959 йылдың 26 февралендә.
Уҡытыусы: Бына беҙ башҡорт халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәтиҙең ҡыҫҡаса биографияһы менән танышып үттек. Хәҙер уның «Ҡыҙымдың һорауҙарына яуаптар» поэмаһынан «Ватан» тип аталған өҙөктө укыясаҡбыҙ.
3. Рәшит Ниғмәтиҙең «Ватан» шиғырын өйрәнеү
Уҡытыусы:
- Дәреслектең 32-се битен асығыҙ. Шиғырҙы өйрәнеү алдынан яңы һүҙҙәр менән танышайыҡ.
4. Һүҙлек эше.
а) Ватан- Родина
ғүмер- жизнь
Балҡып тора- сияет, светится
б) Һүҙбәйләнештәрҙе телдән тәржемә итеү.
Беҙҙең Ватан матур. Ҡояштай балҡый. Күкрәктәргә ҡалкып тора.
5. Ял минуты.
- Саҡ ҡына ял итеп алайыҡ. Һеҙ күҙегеҙҙе йомғоҙ! Мин әйткән һүҙҙәрҙе күҙ алдына килтерегә тырышығыҙ. Ниндәй рәсем килеп сығыр икән?!
Ҡояш, ҡояш балҡый, тау, зәңгәр болоттар, йылға, матур сәскәләр.
6. Текст өҫтөндә эш.
Уҡытыусы:
– Ватан тигәс һеҙҙең күҙ алдығыҙға нимә килә?
(Уҡыусыларҙың яуаптары).
– Әйҙәгеҙ, хәҙер өҙөктө тыңлайыҡ.

Уҡытыусы уҡый, уҡыусылар иғтибар менән ҡарап баралар. Шиғырҙы тасуири итеп бер уҡыусы уҡып күрһәтә.
7. Шиғырҙың эстәлеген аңлатыу өсөн күнегеү.
Уҡытыусы:
- Мин хәҙер һеҙгә һүрәттәр күрһәтәм, һеҙ шиғырҙан шул һүрәттәргә тап килгән юлдарҙы табығыҙ.
(3-8-се слайдтар күрһәтелә,яуаптар сыға бара).
1 –се һүрәт күрһәтелә.

(Тыуған ил, беҙ торған урын)

2- се һүрәт күрһәтелә

(Ҡояштай балҡып тора,

Тауҙары, зәңгәр болоттай...)

Уҡытыусы: Афарин, дөрөҫ итеп яуап бирҙегеҙ. Рәшит Ниғмәтиҙең ошо шиғыр юлдарында беҙ тыуған еребеҙ Башҡортостандың тәбиғәтен, йәнлек-ҡоштарын, үҙебеҙҙең уйнап үҫкән юлыбыҙҙы ла күҙ алдына килтерҙек, йәғни күрҙек.
8. Шиғырҙы анализлау.
Һорауҙарға яуап биреү.
1. Ватаныбыҙ тураһында автор нимә яҙа?
– Беҙҙең Ватан, ҡыҙым, матур,
Ҡояштай балҡып тора.
2. Унын матурлығын һүрәтләү өсөн ниндәй һүҙҙәр ҡулланған?
Тәбиғәт күренештәрен сағыштырып күрһәтә.
Мәҫәлән: Тауҙары, зәңгәр болоттай;
Күктәргә ҡалҡып тора һ.б.
3. Шиғыр һеҙгә оҡшанымы?
Уҡыусылар үҙ фекерҙәрен әйтәләр.
9. Алған белемдәрҙе дөйөмләштереп китеү.
Уҡытыусы:
- Уҡыусылар, ә һеҙ Ватан ҡайҙан башлана тип уйлайһығыҙ?(Яуаптар)
- Әлбиттә Ватан тыуған йорттан, урамдан башлана, аҙаҡ киңәйә бара. Тыуған район, ҡала, республика, ил – барыһы ла беҙҙең Ватаныбыҙ.
10. Өй эшен биреү.
- Өй эшенә мин һеҙгә карточкалар әҙерләнем. Һеҙгә һөйләмдәрҙе тултырып яҙырға, һорауҙарға уйлап яуап бирергә кәрәк буласаҡ.
Ошо карточка ЯКласс платформаһында бөтәгеҙгә лә ебәреләсәк. Ошо һорауҙарға яуап бирерһегеҙ (1. Һиңә үҙең йәшәгән урам оҡшаймы? Ни өсөн? 2. Үҙең йәшәгән урамды матурайтыр, яҡшыртыр өсөн нимә эшләр инең?)
IV. Дәрескә йомғаҡ яһау.
Уҡытыусы:

- Бөгөн дәрестә беҙ Башҡортостандың халык шағиры Рәшит Ниғмәтиҙең тормош юлын өйрәндек, шағирҙың «Ватан» шиғырын анализланыҡ.
Йәгеҙ әле, ҡабатлап китәйек. Быны өсөн һеҙгә кроссворд тәкдим итәм.

1. Р.Ниғмәтиҙең атаһының исеме (Ниғмәтулла)
2. Р.Ниғмәтиҙең тыуған ауылы (Диңгеҙбай)
3. Р.Ниғмәти кем? (шағир)
4. Шағир ниндәй ҡалала эшләй? (Туймазы)

5.Тыуған ил (Ватан)
6. Р.Ниғмәти эшләгән гәзит «…….. юлы»

Кроссворд сисеү.
– Афарин.
Дәрестә ҡатнашыусыларға баһа ҡуйыла.
– Һау булығыҙ, шуның менән дәрес тамам.

**Хөснуллина Р.Д.**

*Башҡортостан Республикаһы Өфө ҡалаһының*
*116-сы һанлы урта дөйөм белем биреү мәктәбе МБББУ*

# “...Нурға сумған түбәһе, Күккә ашҡан Уралым!” (6-сы класта яңы белем биреү дәресе)

**Туған (башҡорт) әҙәбиәте.**

*Маҡсат*: уҡыусыларҙың халыҡ тормошонда Тыуған илдең ролен, үҙ халҡыңдың тарихын ассоциатив бәйләнештәр буйынса аңлағанын асыҡлау.

*Дәрестең бурыстары:*

1. *Белем биреү*:

- тасуирлай белеүҙе, телдән әйтемдәрҙе формалаштырыу, телдән һөйләү, тасуирлау оҫталыҡтарын формалаштырыу;
- төрлө уҡыу алымдарына өйрәтеү;
- төрлө мәғлүмәт сығанаҡтарына нигеҙләнеп, монологик телмәр оҫталығын формалаштырыу;

2. *Тәрбиә биреү:*

- мәҙәниәт ҡиммәттәренә һәм башҡорт халҡының тарихына ҡарата хөрмәт тәрбиәләү;

3. *Үҫтереү:*

- уҡыу һәм уҡығанды аңлау өлкәһендәге оҫталыҡтарын камиллаштырыу.

Предмет һөҙөмтәләр:

Башҡорт халҡының тормошонда туған әҙәбиәттең алған урыны тураһында белем алыу;

*Дәрестә формалаштырылған универсаль уҡыу эшмәкәрлеге:*

*Танып-белеү:*

- дәрестең темаһын һәм маҡсаттарын үҙ аллы билдәләү;
- анализ, синтез эшләй белеү, сәбәп-һығымта бәйләнештәрен булдырыу.

*Регулятив:* уҡыу һәм танып белеү мәсьәләрен сисеүҙең ыңғай юлдарын һайлау.

*Коммуникатив*: уҡытыусы һәм тиҫтерҙәрең менән бергәләп эшмәкәрлекте ойоштороу оҫталығын формалаштырыу.

*Шәхси һөҙөмтәләр*: уҡыусыларҙың халыҡ тормошонда Тыуған илдең ролен, үҙ халҡыңдың тарихын ассоциатив бәйләнештәр буйынса аңлағанын асыҡлау.

*Дәрес тибы:* яңы белемдәр алыу дәресе.

**1. Ориентация-мотивацион этап.**

**Уҡытыусы**: – Һаумыһығыҙ, уҡыусылар. Бөгөнгө туған (башҡорт) әҙәбиәте дәресен мин – Роза Дияс ҡыҙы алып барам. Бер-беребеҙ менән уртаҡ тел табып, ҡуйылған бөтә бурыстарҙы тормошҡа ашырырбыҙ тип өмөтләнәм.

Дәресте беҙ Тыуған яҡты өйрәнеү музейына виртуаль экскурсиянан башлайыҡ.

Тормошта бит төрлө хәлдәр була, бөгөн экскурсоводыбыҙ юҡ, ә унын ролен һеҙҙең үҙегеҙгә башҡарып сығырға тура киләсәк.

Виртуаль экскурсия ваҡытында һеҙгә бер образ һайлап алырға һәм телдән телмәр төҙөргә кәрәк буласаҡ.

Һәр берегеҙҙең алдында маршрут ҡағыҙы ята. Беренсе эш һеҙгә телдән телмәр төҙөргә ярҙам итәсәк. (видео күрһәтәм)



**Уҡыусылар** видеола күргәндәрен һөйләп бирә.

**Уҡытыусы** әгәр улар уҡыусылар телмәрендә телгә алынһа, асҡыс һүҙҙәрҙе аса.

(Әгәр бөтә асҡыс һүҙҙәр ҙә әйтелмәһә, слайдты асып күрһәтәм һәм асҡыс һүҙҙәрҙе әйтеп, таҡтаға элеп ҡуям)



**Уҡытыусы:**“Тирмә” һүҙе нимә менән ассоциациялана? (“Башкортостан” һүҙен таҡтаға эләм) 1

**Уҡытыусы:** Артабан беҙ нимә күрәбеҙ? (“Тау” һүҙен эләм) 4



**Уҡытыусы:** Нисек уйлайһығыҙ, был ниндәй тауҙар? (“Урал” һүҙен эләм) 2 (Ассоциатив сылбыр барлыҡҡа килә башлай)

**Уҡытыусы:** Музейҙа экскурсия йыш ҡына музыкаль оҙатыу аҫтында ла алып барыла. Йырҙы тыңлағыҙ һәм әйтегеҙ: һеҙ ниндәй образдар өҫтәй алаһығыҙ? (“Караунһарай”төркөмө башҡарыуында “Любезники-любизар” йыры яңғырай. Ассоциатив сылбырҙы дауам итәбеҙ)

**Уҡытыусы**: Ә минең бына ошондай образ барлыҡҡа килде: нисек уйлайһығыҙ, ни өсөн?  4-се слайд

**Уҡыусы**: Башҡорттар ат аҫыраған, һыбай оҫта сапҡан.

**Уҡытыусы**: Ни өсөн Рәсәй батшаһы французлар менән һуғышырға тап башҡорттарҙы саҡырған?

**Уҡыусы**: Сөнки улар ҡурҡыу белмәç, Тыуған илдәрен һаҡлау өсөн йәнен-тәнен аямағандар.

**Уҡытыусы**: Башҡорттарҙа уларҙы кем тип әйткәндәр? (“Батыр” һүҙен таҡтаға эләм )

**Уҡытыусы**: Шундай уҡ һүҙҙәр һеҙҙең маршрут карталарында бар. Улар һеҙгә дәрес аҙағындағы эш биремдәрен эшләргә ярҙам итәсәк.

**Уҡытыусы**: Батыр һүҙен ишеткәс, күҙ алдына кемдәр килә? Салауат батыр, Урал батыр.

**Уҡытыусы**: Әйҙәгеҙ тағы ла бер тапҡыр ошо һүҙҙәрҙе уҡыйыҡ һәм дәрестең темаһын сығарайыҡ. (Уҡыусыларҙың темаларын тыңлайым)

**Уҡытыусы**: Уҡыусылар, мин һеҙгә ошондай теманы тәкдим итәм:

“...Нурға сумған түбәһе

Күккә ашҡан Уралым” (картала килеп сыға)




Был һүҙҙәр ҡайҙан килеп сыҡҡан? (Салауат Юлаев һүҙҙәре)

**Уҡытыусы**: Һеҙ был тема менән ризаһығыҙмы? Маршрут карталарығыҙға теманы яҙып ҡуйығыҙ.

**Уҡытыусы**: Урал башҡорттар өсөн нимә ул?

**Уҡыусы**: Тыуған ил.

**Уҡытыусы**: Ә Тыуған ил - Башкортостан. (карта: ҡурай)




**Уҡытыусы:** Шулай итеп, бөгөнгө дәрестә беҙ нимәләр белергә тейешбеҙ?

**Уҡыусы**: Урал тауҙарының байлығы, тәбиғәте хаҡында. Урал тауы хаҡында йырҙы өйрәнергә тейешбеҙ. (2 тапҡыр баçам, карта: тау һүрәте, “хазина” яҙыуы).




Тағы беҙ нимәне белә алабыҙ? (3 тапҡыр баçам - карта – картина: Р. Юлдашев ҡурайҙа уйнай)







**Уҡыусы**: Урал хаҡында йырҙар сығарылған.

**Уҡытыусы**: Ә был маҡсат һәм бурыстарҙы асырға Аҡыл картаһы ярҙам итер. Беҙ уны төҙөй башланыҡ инде. Ә ни өсөн ул Аҡыл картаһы тип атала? Был һорауға дәрес аҙағында яуап бирә алырһығыҙ тип уйлайым.

2. **Операцион-башҡарыу этап.** Уҡыу-таныпбелеү бурыстары аша уҡыусыларҙың эшмәкәрегә ойошторола.

-Дәреслек менән эшләйбеҙ**.** Китаптарыбыҙҙың 106-сы битендәге тексты астыҡ. Текст нисек атала? ( “Урал тауҙары”)

**Уҡытыусы**: Кем яҙған?

**Уҡыусы**: Диҡҡәт Бураҡаев.

**Уҡытыусы**: Ул ғалим-геолог, журналист, яҙыусы.

Был текстың беренсе абзацын Мираҫ уҡый. Ә башҡалар Уралдың тәбиғәтен һәм байлығын тасуирлаған һүҙбәйләнештәрҙе һайлап ала. (Мираҫ уҡый). Афарин.

**Уҡытыусы**: Ниндәй һүҙбәйләнештәрҙе һайланығыҙ? Уҡығыҙ.

**Уҡыусы**: Мөһабәт тау, ( карта), текә ҡая, (карта) саф йылға, (карта)




**Уҡытыусы**: Ниндәй һүҙҙәр беҙгә тәбиғәттең матурлығын күрергә ярҙам итә?

**Уҡыусы**: Саф, мөһабәт, текә.

**Уҡытыусы**: Был һүрәтләү һүрәтләү саралары нисек атала? Эпитеттар.

**Уҡытыусы**: Һеҙҙең иғтибарға географик белешмә: Башҡортостанда Урал һырттарының иң бейек нөктәһе (карта), – Ямантау (карта), икенсе (карта), – Ирәмәл (карта), Ә Рәсәйҙә иң бейек нөктәһе (карта), – Народная һырты (карта).




**Уҡытыусы**: Был бүлектән ниндәй яңылыҡ белдегеҙ? Һайлағыҙ һәм уҡығыҙ.

**Уҡыусы**: (2 тапҡыр карта –Европа-Азия билдәһе)




**Уҡытыусы**: Автор Уралдың байлығын нисек характерлай? Уҡығыҙ.

**Уҡыусы**:  Һанһыҙ хазина.

**Уҡытыусы**: (таҡтаға карточканы эләм) Һанһыҙ тигән һүҙҙе нисек аңлайһығыҙ? (Ассоциатив сылбыр).

**Уҡыусы**: Бик күп, һанап бөтөп булмай.

**Уҡытыусы**: Текстың артабанғы өлөшөн иғтибар менән тыңлайыҡ. Ундағы төп фекерҙе әйтегеҙ.  (1 тапҡыр баҫам, текстың аудиояҙмаһын тыңлайбыҙ – 1тапҡыр баҫам) ҡара экран.

**Уҡытыусы**: Был өҙөктөң төп фекерен уҡып үтегеҙ. (карта – карта һүрәт )




**Уҡыусы**: Урал тауҙарының оҙонлоғо һәм киңлеге тураһында һүҙ бара. (оҙонлоғо – ике меңдән ашыу км, киңлеге 80-100 (һикһән – йөҙ) километрҙан артмай).

**Уҡытыусы**: Урал тауҙарының оҙонлоғон, башын, киңлеген күрһәткән ҡылымдарҙы һайлап уҡығыҙ. (ассоциатив сылбырҙы ҡылымдар менән тулыландырам)

**Уҡыусы**: Һуҙыла, башлана, тарая.

**Уҡытыусы**: Һеҙҙең маршрут карталарында географик карталар бар. Шуларға ҡарағыҙ ҙа әйтегеҙ, һеҙгә тау образы нимәне күҙ алдына килтерә?

**Уҡыусы**: Улар таш билбауға оҡшаған. (тактала асам, ассоциатив сылбырҙы тулыландырам)

**Уҡытыусы**: Уҡыусылар, Мостай Кәрим текста  Урал тауҙарын нимә менән сағыштыра? Ошо юлдарҙы табып уҡығыҙ.

**Уҡыусы**: “Ҡанат йәйгән самаһыҙ ҙур ҡошҡа оҡшай Урал тауы” тип яҙа Мостай Кәрим.

**Уҡытыусы**: Дәреслектең 107-се битендәге беренсе абзацтан Көньяҡ Уралдың байлыҡтарын һанап сығығыҙ.

**Уҡыусы**:  Ылыҫлы һәм киң япраҡлы ағастарҙан торған ҡалын урмандар, сал ҡылғанлы битләүҙәр, текә ҡаялар, тәрән мәмерйәләр, яланғас таштар.

Картаны асам – Бында ниндәй бурыс ҡуйылғайны?

- Урал тәбиғәте, байлығы хаҡында һөйләргә.

-Тормошҡа ашырҙыкмы?

-Эйе.

**ФИЗМИНУТКА**:

Ә хәҙер ял итеп алырға тәҡдим итәм. Мин халыҡ бейеүҙәре менән ҡыҙыҡһынам. Башҡорттар бейеүҙә шөғөлдәрен, көсөн, таҫыллығын күрһәткән. Әйҙәгеҙ, беҙ ҙә бейеп алайыҡ. (“Бөрйән ҡыҙҙары” бейеүенән өҙөк).

**Уҡытыусы:** Ә хәҙер Урал тауҙарының образын төҙөү өсөн уйын тәҡдим итәм: пазл йыйыу. Һәр төркөмдән берәр уҡыусы сыға. Икешәр пазл йыя. Ә башҡалар ҡарап, ярҙам итеп ултыра. Пазлдар: Мөһабәт тауҙар, хазиналар һаҡлана, ике ҙур континентты бүлә, оҙонлоғо ике мең км, тәбиғәте бай һәм матур, сәсәндәр данлаған.

**Уҡытыусы:** Беренсе бурысты атҡарып сығарҙыҡмы?

**Уҡыусы:** Эйе, эшләнек.

**Уҡытыусы**: Һай афариндар!

**Уҡытыусы**: Уҡығыҙ әле, һуңғы слайдта нимә яҙылған?

**Уҡыусы**: Сәсәндәр.

**Уҡытыусы**: Хәҙер нимә хаҡында һөйләшербеҙ икән?

**Уҡыусы**: Уралды йырҙарҙа данлағандар. (карта)




**Уҡытыусы**: Барығыҙ ҙа баҫығыҙ.

Хәҙер мин һеҙгә “Урал” башҡорт халыҡ йырын Башҡортостандың мәшһүр йырсыһы Абдулла Солтанов башҡарыуында тыңлатам. (Йыр)

**Уҡытыусы**: Нисек уйлайһығыҙ? Ни өсөн һеҙ был йырҙы баҫып тыңланығыҙ?

**Уҡыусы**: Сөнки ул башҡорт халҡының милли гимны. Башта ул халыҡ йыры булған, ә һуңынан милли гимнға әйләнгән. Сөнки ул үҙ Тыуған ерен һаҡлаған батырҙарға дан йырын йырлай.

**Уҡытыусы**: Хәҙер мин һеҙгә был йырҙы уҡып ишеттерәм. Ә һеҙгә эш: батыр һүҙе менән һүҙбәйләнештәр табығыҙ. (ике тапҡыр баҫам - карта - батыр) (слайд)





**Уҡыусы**:
Ерен-һыуын һаҡлап ҡорбан булған,
Шунда ята **батыр** һөйәге (карта) – Тыуған ерҙе һаҡлау.
Үҙ илкәйе өсөн өсөн ҡорбан булған
Яуҙа үлгән **батыр** ҙа ҡандары. (карта) – Тыуған ергә мөхәббәт.
Һис бирмәгән башҡорт Уралын. (карта) – Ҡурҡыу белмәç.
Без нимә төҙөнөк? – Батырҙарға характеристика төҙөнөк.




**Уҡытыусы**: 2-се эш. Текста осраған ҡушма исемдәрҙе табығыҙ. (слайд)

Уҡыусы:

| | | |
|---|---|---|
| башҡорт | Атай-олатай<br>Ерен-һыуын<br>Ир-егеттең<br>Уҡ-һаҙаҡҡай | Урал тауы |




Уҡытыусы: уҡыйыҡ.

Ни өсөн уларҙы өс төркөмгә бүлдек?

**Уҡыусы**: Сөнки беренсе бағанала ҡушып яҙыла, икенсеһендә һыҙыҡса аша яҙыла, өсөнсөһөндә айырым яҙыла.

**Уҡытыусы**: Ни өсөн шулай яҙыла?

**Уҡыусы**:

1-се бағана: ике тамыр бергә ҡушылып, бер мәғәнәне аңлата. – башҡорт

2-се бағана: бер-береһенә яҡын мәғәнәле һүҙҙәр һыҙыҡса аша яҙыла.

3-сө бағана: бәйләү юлы менән яһала, ике һүҙҙән тора, бер мәғәнәне аңлата.

**Уҡытыусы**: Һуңғы ике юлын уҡығыҙ.Ни өсөн йыр ошо һүҙҙәр менән тамамлана? Улар иҫегеҙҙә ҡалһын өсөн маршрут картаһында урынлаштырҙым.

**Уҡыусы**: Аямаған йәнен, түккән ҡанын

Һис бирмәгән башҡорт Уралын.

Урал башҡорттарҙың Тыуған иле лә. Уны һәр башҡорт батыры күҙ ҡараһындай һаҡлаған. (слайд)




**Карта тулыһынса килеп сыҡты.**

**Уҡытыусы**: Уҡыусылар, хәҙер әйтегеҙ, ни өсөн беҙ был картаны – Аҡыл картаһы тип атаныҡ.

**Уҡыусы**: Сөнки ул беҙгә дәрестең темаһын һәм маҡсатын асырға ярҙам итте.

**3 этап. Рефлексив-баһалау.**

**Уҡытыусы**: Уҡыусылар, беҙ әле генә йырҙы тыңлап үттек. Ә мин һеҙгә лә ижади эш тәҡдим итәм, синквейн төҙөгөҙ. Нимә ул синквейн? Беләһегеҙме? Биш юллыҡ шиғри форма. Һеҙ ул эште эшләй алаһығыҙ. Ул түбәндәге план буйынса эшләнә: (слайд)

**Синквейн – төҙөү ҡағиҙәләре**:

1 юл – төп теманы белдереүсе бер исем.
2 юл – төп мәғәнәне белдереүсе ике сифат.
3 юл – темаға ҡараған өс ҡылым.
4 юл – төп мәғәнәне асыҡлаусы фраза.
5 юл – исем менән белдерелгән йомғаҡлаусы һүҙ (беренсе һүҙгә ассоциация ).

Уйлағыҙ әле, ниндәй тема буйынса синквейн эшләйәсәкбеҙ? Урал тауҙары хаҡында.

Мин Һеҙгә “Урал” темаһын тәҡдим итәм. Ә һеҙгә Аҡыл картаһы һәм һүҙҙәрҙең ассоциатив сылбыры ярҙам итәсәк.

1 төркөм: Урал

1.Урал

2. мөһәбәт, текә, саф

3. башлана, һуҙылған, һаҡлай

4. Уралым – Башҡортостаным.

5. Тыуған ер.

Дәрестәге эшмәкәрлекте баһалау мәле етте.

Уны светофор ярҙамында эшләрбеҙ. Маршрут карталарында баһалау критерийҙары бар. Һәр төркөмдә светофорҙың өс сигналы бар.

Баһалау.

**Өй эше.**

- “Урал” йырының бер строфаһын ятларға.
- “Батыр” һүҙенә синквейн төҙөргә.

**Әҙәбиәт**

1. Абрашикова Н.Н. Интеллект – карта как инструмент анализа текста на уроках литературы: методическое пособие для учителей русского языка и литературы / Н.Н. Абрашикова. 2019.-23 с.
2. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте: Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-се класс башҡорт балалары өсөн уҡыу ҡулланмаһы. Вилданов Ә.Х., Хажин В.И.,һ.б. – Өфө: Китап, 2017.
3. Самситова Л.Х. Реалии башкирской культуры : словарь безэквивалентной лексики башкирского языка. - Уфа: Китап, 2006. – 214 с.

**Әхмәтзакирова И.Ф.**

*Башҡортостан Республикаһы Борай районы МР*

*“Борай ауылы 2-се гимназияһы» МДББУ*

# Абдулхаҡ Игебаевтың “Башҡортостан – илгенәм” шиғырын өйрәнеү

# (яңы теманы өйрәнеү дәресе)

**Маҡсат:**

Башҡортостандың халыҡ шағиры Абдулхаҡ Игебаевтың тормошо һәм ижады менән танышыу. Шағирҙың “Башҡортостан – илгенәм” шиғыры менән танышыу. Уҡыусыларҙың Башҡортостан тәбиғәте, тарихы тураһында белемдәрен тәрәнәйтеү. Предметтың билдәһен белдереүсе һүҙҙәр тураһындағы белемде, уҡыу техникаһын камиллаштырыу. Уҡыусыларҙың һүҙлек, телмәр һәләтлектәрен байытыу, тел байлығын арттырыу.

Уҡыусыларҙың уҡыу, һөйләү һәм яҙыу телмәрен, һүҙлек эше аша башҡорт һүҙҙәренең мәғәнәләренә иғтибарын, ҡыҙыҡһыныуын үҫтереү.

А.Игебаевтың ижадына ихтирам, тәржемә эштәре аша һүҙ тойғоһо, тел тойғоһо тәрбиәләү.

**Дәрес төрө:** яңы материал менән танышыу дәресе.

**Укытыу методы:** күрһәтеү-аңлатыу, эҙләнеү методтары.

**Укытыу алымдары:** әңгәмә, һорау-яуаптар, мәҡәл әйтеү, карточкалар менән эш, таҡтала һәм дәфтәрҙә эш, һүҙлек менән эш, тәржемә итеү, уҡытыусының тасуири уҡыуы, уҡыҡсыларҙың сылбырлы уҡыуы, ИКТ ҡулланыу, ял минуты, дидактик уйын, , сюрприз момент, ижади эш.

**Предмет буйынса һөҙөмтәләр:** Башҡортостандың халыҡ шағиры Абдулхаҡ Игебаевтың тормошо һәм ижады тураһында өҫтәлмә мәғлүмәттәр биреү. Предметтың билдәһен белдереүсе һүҙҙәр тураһындағы белемде, уҡыу техникаһын камиллаштырыу.

**Метапредмет буйынса һөҙөмтәләр:** дәрестә ҡуйылған маҡсатты аңлау, уны тормошҡа ашырырға тырышыу, дәреслектән кәрәкле мәғлүмәтте таба белеү, үҙ эшеңде, парыңдың эшен тикшерә алыу, билдәне белдерә торған һүҙҙәрҙе телмәрҙә ҡулланыу, уҡыған әҫәрҙе тормош менән бәйләй белеү, һорауҙарға яуап биреү, үҙ белемеңде бәйәләү.

**Шәхси һөҙөмтәләр:** туған телебеҙҙең матурлығын аңлау.

**Предмет ара бәйләнеш:** туған телебеҙҙең матурлығын аңлау.

**Принциптар:** фәннилек, теория һәм практика берлеге, эҙмә-эҙлеклелек, коммуникатив.

**Яңы термин-төшөнсәләр:** Сабый, бергенәм, сыуаҡ, күп милләтле, дәүләт, йән, дауа.

**Йыһазландырыу:** интерактив таҡта, шағирҙың ижадына бағышланған китаптар, һүҙлектәр, ноутбук, презентация материалдары (Рәсәй һәм Башҡортостан картаһы), таҡта, аҡбур.

**Дәрестең йөкмәткеһе**

***Психологик инеш.*** Психологик кәйеф шарттары булдырыу.

Уңыш ситуацияһы тыуҙырыу.

- Һаумыһығыҙ, хәйерле көн, минең уҡыусыларым! Һеҙҙе күреүемә бик шатмын! Бөтәгеҙгә лә яҡшы кәйеф теләйем. Әйҙәгеҙ, бер-берегеҙгә ҡарап, йылмайып алайыҡ әле. Һеҙҙең йөҙҙәрегеҙ шат, шуға күрә был дәрестә бер-беребеҙҙе аңлап, күп эштәр башҡарырбыҙ тип уйлайым.

***Мотивация.*** *Йыр тыңлау*

А.Игебаев һүҙҙәренә яҙылған "Тамыр" студияһы балалары башҡарған "Башҡортостан – илгенәм" йырын тыңлау. (Йыр Башҡортостандың матур тәбиғәтле презентацияһы менән бергә тыңланыла).

***Уҡыу мәсьәләһен булдырыу.***

- Уҡыусылар, йыр һеҙгә оҡшанымы? Ул нимә тураһында?

**Маҡсатты белдәләү**

- Тимәк, һеҙ бөгөнгө дәрестә Башҡортостан тураһында бик матур шиғыр менән танышасаҡһығыҙ.

**Төп өлөш.**

- Был шиғырҙың авторы Башҡортостандың халыҡ шағиры Абдулхаҡ Игебаев . Әйҙәгеҙ уның тормош юлы һәм ижады менән танышып китәйек (презентация).

*Уҡыусыларҙың иғтибарын перезентацяға йүнәлтеү. Презентацияла Башҡортостан картаһы.*

- Уҡыусылар, картанан Баймаҡ районын табайыҡ. Беҙҙең шағир ҙа ошо райондан (слайд).

**Абдулхаҡ Игебаев** (2 июль 1930 йыл — 27 сентябрь 2016 йыл) — Башҡортостандың халыҡ шағиры (2010) (слайд).

1963 йылдан СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы. Башҡорт АССР-ының (1980) һәм РСФСР-ҙың (1991) атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы (1990) һәм Ғәлимов Сәләм исемендәге йәштәр премияһы лауреаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры (слайд).

Абдулхаҡ Хажмөхәмәт улы Игебаев 1930 йылдың 2 июлендә Башҡорт АССР-ының Баймаҡ районы Күсей ауылында тыуған. Йәшләй етем ҡала, балалар йортонда тәрбиәләнә (слайд).

Дәфтәрҙәргә дата һәм теманы яҙып ҡуйыу.

**Шиғыр өҫтөндә эш**

1. Өлгөлө уҡыу ( уҡытыусы йәки тасуири уҡыған бала);
2. Үҙ аллы уҡыу ;
3. Хор менән уҡыу.

– Уҡыусылар, нисек уйлайһығыҙ шиғырҙың төп алымы нимәлә?

**Һүҙлек эше.**

Сабый- ребенок
Бергенәм- единственный
Сыуаҡ- ясный
Күп милләтле – многонациональная
Дәүләт – государство
Йән – душа
Дауа – лечение (слайд)

**Ял минуты.** А.Игебаев һүҙҙәренә яҙылған “Тамыр” студияһы балалары башҡарған “Башҡортостан – илгенәм” йырына ҡушылып йырлау.

**Шиғыр өҫтөндә эште дауам итеү.**

***<u>Илгенәм</u>*** һүҙенә әйтелеше яғынан оҡшаш һүҙҙәрҙе табабыҙ.

Беренсе рәткә - беренсе строфа.
(Гөл генәм, бер генәм, илгенәм) (слайд)

Икенсе рәткә – икенсе строфа.
(Көн генәм, тел генәм, илгенәм) (слайд)

Өсөнсө рәткә өсөнсө строфа.
(Тиң генәм, ергенәм, илгенәм) (слайд)

**Нығытыу.**

**Парҙар менән эшләү.**

Илһеҙ кеше буламы? Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул тигән мәҡәл был шиғырға тап киләме? Ни өсөн? Үҙегеҙҙең яуаптарығыҙҙы дәлилләгеҙ.

**Рефлексия.** Интерактив таҡтала Башҡортостанға теләктәрегеҙҙе яҙып китәйек (сәскә атһын, үҫһен, матурланһын, яңы йорттар төҙөлһөн һ.б.)

**Өй эше:** шиғырҙы ятларға.

**Дәресте йомғаҡлау.** Бөтәгеҙгә лә уңышлы көндәр теләп, дәресте тамамлайым.

# КЛАСТАН ТЫШ САРАЛАРҘЫҢ ЗАМАНСА ФОРМАҺЫ

**Ғәйнетдинова Л.Р.**
*Башҡортостан Республикаһы Борай районы*
*Борай ауылының 3-сө урта дөйөм белем биреү мәктәбе МДББАУ*

## “Саф күңелле Файыҡ бабай”

**(Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, шағир, журналист, Бөйөк Ватан һуғышы яугире Файыҡ Мөхәмәтйәновҡа арналған кластан тыш сара)**

**Маҡсат**: Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, шағир, журналист, Бөйөк Ватан һуғышы яугиры Файыҡ Мөхәмәтйәновтың тормошо һәм ижады менән таныштырыу, унын ижады аша балаларҙа илһөйәрлек, патриотик тойғолар, ғорурлыҡ хистәре тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу**: Ф.Мөхәмәтйәновтың портреты, презентация материалдары, видеояҙмалар, китаптар күргәҙмәһе.

**Сара барышы.**

**Пролог.** (Сара сәхнәләштерелгән күренештән башлана. Талғын музыка яңғырай)

**1-се күренеш.**

Сәхнәлә 30-сы йылдар осоро күренеше. Мәктәп. Уҡытыусы дәрес алып бара. Дәрес бөтә, уҡыусылар ҡайтырға йыйына.

Уҡытыусы Ғәйниәхмәт ағай:

– Файыҡ, һин ҡал әле! (Башҡа балалар ҡайтып китә, Файыҡ ҡала). Балам, артабан һине уҡыта алмайым, шулай ҡуштылар. Һеҙҙең ғаиләгеҙ белем алыу хоҡуғынан мәхрүм ителгән. (Файыҡтың күҙҙәренә йәш тула, бер ни ҙә аңламай).

**2-се күренеш.**

Күҙ йәштәрен һөртә-һөртә Файыҡ урамдан китеп бара. Шул ваҡыт алып барыусы шиғыр һөйләй.

Алып барыусы:

Күҙ йәштәрен йоҙроҡ менән һөртөп,
Себек малай атлай урамдарҙан.
Атаһы ла бер ғәйепһеҙ тотҡон,
Кем арсалар дауыл-бурандарҙан?

Шул ваҡыт урамдан 3-4 малай йүгереп китә. Улар Файыҡты үсекләйҙәр:

– Хоҡуҡһыҙ. Хоҡуҡһыҙ!
– Мулла көсөгө!

**3-сө күренеш**

Файыҡ менән әсәһе

Әсәһе:
– Балам, бик матур итеп яҙырға, иҫәп-хисап сығарырға өйрәнеп кенә киткән инең, атайыңды ҡулға алыу сәбәпле, уҡырға барырға ярамай шул хәҙер (улының сәсен һыйпап, арҡаһынан һөйә).

Файыҡ:

-Әсәй, мин бары бер уҡыясаҡмын. Ғәйниәхмәт ағай барғансы барам да, парта аҫтында йәшенеп кенә ултырам, ул һөйләгәндәрҙе тыңлап ҡайтам (малай әсәһе тегеп биргән муҡсаһына тиҙ-тиҙ генә китап дәфтәрҙәрен тултыра ла, сығып йүгерә).

**4-се күренеш.**

Файыҡ йүгереп кенә килеп керә лә, иң артҡы парта аҫтына ҡасып ултыра, дәфтәр-китаптарын ала, уҡытыусыны тыңлай . Шул ваҡытта алып барыусы шиғыр һөйләй.

Алып барыусы:

Мал-мөлкәттәр тартып алынһа ла,
Хоҡуҡтарға тоҙаҡ һалынһа ла,
Бәреп сығыр әле, оҙаҡламаҫ,
Аҡ хыялын бер кем йоҙаҡламаҫ.

**5-се күренеш.**

Уҡытыусы:
Уҡыусылар, һеҙҙе башланғыс мәктәпте тамамлауығыҙ менән ҡотлайым. Һеҙгә ошо таныҡлыҡтарҙы тапшырам. (Уҡытыусы мәктәпте тамамлауҙы дәлилләүсе таныҡлыҡ бирә, Файыҡты үсекләгән малайҙар һыу ҡапҡандай тынып ҡалалар, ә Файыҡ иркен һулап, йылмайып ебәрә).

Балалар шатланышып ҡайтып китәләр.

**6-сы күренеш.**

Ауылдың атаҡлы сабатасыһы менән Файыҡ.
Файыҡ:
– Ғәлим бабай, мине лә сабата үрергә өйрәт әле.
Ғәлим бабай:
– Иртәрәк түгелме әле, улым. Ниндәй күңелле йәй, eләккә йөрө. Етешерһең, сабата үрергә лә.
Файыҡ:
– Атайымды ҡулға алғандан һуң, әсәйемә бик ауыр яңғыҙына. Ашарға йүнәтергә кәрәк. Ҡусты-һеңлеләрем дә бәләкәйҙәр бит әле.
Ғәлим бабай:
– Йәәә, улай булғас өйрәтәм, әйҙә, улым (сабата үрәләр, был ваҡытта алып барыусы шиғыр һөйләй)
Алып барыусы:
Өмөттәре йәшерен, тәрәндә лә,
Ялҡынына нисек сыҙаһын йән?
Сабаталар үреп шиғриәткә
Юлдар һалды Файыҡ Мөхәмәтйән.

**7-се күренеш.**

Файыҡ:
– Әсәй, кисә үргән сабатамды бер тәрилкә онға алыштырҙым.
Әсәй:
– Эй. Рәхмәт яуһын улым. Хәҙер ыумас ыуып аш бешерермен.
Файыҡ:
– Әсәй, иртәгә иртүк уят, ҡояш сыҡҡансы. Сабата үрер алдынан, Ҡалмыяҙға барып еләк йыйып ҡайтам, уны ярмаға алыштырам, бөгөн һөйләштем. Ҡайғырма, әсәй, астан үлмәбеҙ. (Әсәһе яулыҡ осо менән күҙ йәштәрен һөртөп ҡуя).

Алып барыусы:
Шул рәүешле көн күрә торғас, көҙҙәр етә. Файыҡтың иптәштәре уҡырға йыйына. Файыҡҡа ла әсәһе күрше Ҡалмыҡ ауылында ете йыллыҡ комсомол йәштәр мәктәбе асылыуы тураһында әйтә һәм унда барып уҡырға кәңәш бирә. Уҡырға ҙур теләге булған Файыҡ бик шатлана һәм ялт итеп күрше ауылға китеп тә бара. Тик шатлығы оҙаҡҡа бармай. “Һин мулла малайы, уҡырға хоҡуғың юҡ” тигән һүҙҙәрҙе ишеткәс, баштары әйләнә, күҙ алдары ҡараңғылана. Тик өмөтөн бер ҡасан да өҙмәй. Белем алыу теләге уны 16 саҡрымдағы алыҫлыҡта урынлашҡан Салҡаҡ мәктәбенә илтә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, унда ла шул уҡ һүҙҙәрҙе ишетергә тура килә. Ун бере тулып, ун икеһе лә тулып етмәгән үҫмер малайҙың күңеле кителә, әрней.

Бер телем икмәккә тилмергән көндәре лә аҙ булмай унның. Кәмһетеүҙәр, рәнйетеүҙәр аша үтеп, рухи яҡтан ауырлыҡтарға ҡаршы торорлоҡ итеп сыныға ул.

Хәйер, яҙмыштың йылы елдәре уларҙың да килеп бер көн ишеген шаҡый. Атайҙары ла ҡайта, хоҡуҡлы ла булалар, уҡыу бәхетенә лә ирешә. Тик... берҙән-бер көндө дәһшәтле һуғыш башлана.

## 8-се күренеш

«Священная война» көйө яңғырай, ҡулына мылтыҡ тотҡан егет һуғышҡа китә. Шул ваҡытта алып барыусы шиғыр һөйләй.

Алып барыусы:

Тыуған илде яуыз дошмандарҙан
Һаҡлар өсөн хоҡуҡ һораманы.
Бурыслымын, тиеп һананы ла,
Ҡулдарына ҡыҫып, ҡорал алды.
Бөйөк Еңеүҙән һуң
Ул ҡәләмен изге ҡорал итте.
Тыуған илгә булған мөхәббәтен
Аҡ ҡағыҙға теҙеп, оран итте.

Алып барыусы:

## Төп өлөш

Хәйерле көн, хөрмәтле уҡыусылар, уҡытыусылар, килгән ҡунаҡтар! Һәр төбәктең үҙенең тыуған еренең бәҫен, мәртәбәһен күтәргән шәхестәре була. Күптәр был шәхес менән шәхсән таныш булмаһа ла, уны ҡылған ғәмәлдәренән сығып, затлы исемен ишетеп үҙ итә, яҡын күрә. Беҙҙең Борай

тупрағы ла арҙаҡлы ул- ҡыҙҙар биргән. Изге тупрағына тәпәй баҫып, һауаһын һулап, һыуын эсеп үҫкән һәм ошо тарафтарҙан оло тормошҡа аяҡ баҫып үҙен донъяға танытҡан абруйлы заттарыбыҙ менән ғорурлана алабыҙ.

Бөгөн беҙ шуларҙың береһе – яҡташыбыҙ – Борай районының Ҙур Баҙраҡ ауылында тыуған, һуғыш яландарын үткән, байтаҡ ғүмерен журналист һөнәренә бағышлаған шағир Файыҡ Мөхәмәтйәновтың ижадына бағышланған «Саф күңелле Файыҡ бабай» тип аталған сараға йыйылдыҡ. Быйыл уның тыуыуына 100 йыл тулды.

Экранда «Әсәй әйтте» шиғыры

Әсәй әйтте: «Бүләк иттем
Фани донъя баҫҡысын,
Намыҫ һатмай ғына менһәң,
Илең өсөн яна белһәң,
Ҡулдарыңа һин алырһың
Ғүмер буйы тутыҡмаусы
Бәхетеңдең асҡысын!»

Шағирҙең ошо ҡыҫҡа ғына шиғырында нисә төрлө изге төшөнсәләр тураһында һүҙ бара. Ә иң мөһиме, әсәһе нәсихәт итеп әйткән бәхет асҡысын ҡулына алғанмы ул? Ошо һорауға сарабыҙҙың аҙағында шағирҙың ижадына байҡау яһағандан һуң, бергәләп яуап бирербеҙ һәм уның ниндәй саф күңелле Файыҡ бабай булыуына инанырбыҙ!

Сарабыҙҙың башында Файыҡ Мөхәмәтйәновтың ауыр баласаҡ йылдарын сағылдырған күренеш ҡаранығыҙ. Атаһы бер ғәйепһеҙгә репрессияланыу арҡаһында күп хоҡуҡтарҙан мәхрүм ителә ул.

Экранда :

«...Уф тимәнем, баш эймәнем
Елдәргә, дауылдарға», – ти ул үҙенең бер шиғырында. Эйе, ысынлап та, шул тиклем ауырлыҡтар кисерһә лә, һынмаған, һығылмаған, көслө ихтыярлы бөркөттәр нәҫеленән булған беҙҙең яҡташыбыҙ.

Уның ижады бик күп яҡлы. Тыуған яғыбыҙҙың мәртәбәһен, данын күтәргән, районыбыҙҙың данлыҡлы ул-ҡыҙҙарына арналған, дәһшәтле һуғыш йылдарын тасуирлаған, ауыр булһа ла, бала сағын юҡһынып яҙылған, йәшлек, мөхәббәт темаларын яҡтыртҡан, иң ғәзиз кешеләргә атай-әсәйҙәргә бағышлап яҙылған, йәш быуынға өгөт-нәсихәттәр биргән шиғыр һәм поэмалары күңелдәргә үтеп инә.

Үҙ яҙмаларында автор хеҙмәти берҙәмлекте, халыҡтар араһындағы дуҫлыҡты, Тыуған илгә һөйөүҙе, ярҙамсыллыҡты данлай.

Замандаштары, ауылдаштары уны ихлас, асыҡ, изге күңелле кеше итеп хәтерләй.

Әйҙәгеҙ, хәҙер тыуған ауылы Баҙраҡҡа юл алайыҡ.

**Видеопрезентация ҡарау.**

Бына уның тыуған ауылы. Ә быныһы тыуып үҫкән өй урыны. Хәҙер инде бында яңы өй һалғандар, ә быйыл тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы, тыуған нигеҙгә ошолай матур итеп фотоһүрәте менән яҙыу яҙып ҡуйылды.

Ә быныһы ауыл мәҙәниәт йорто. Унда Файыҡ Мөхәмәтйәновҡа арнап музей асылған. Туғаны, ауылдашы Рәүиҙә апай унының шәжәрәһен төҙөгән.

Әйҙәгеҙ, Файыҡ ағайҙың тыуған ауылы Баҙраҡҡа бағышланған шиғырын тыңлайыҡ.

**«Баҙраҡ»** шиғырын тыңлау.

Күп михнәттәр күрһә лә, үҙ тыуған яғын, тыуып үҫкән ауылын һағына, юҡһына шағир. Шишмә-күлдәренә, зифа аҡ ҡайындарына, Мәгәшле, Ҡалмыяҙ, Кесе төбәктәрендә еләк йыйып йөрөгән болондарына арнап бик күп шиғырҙар ижад итә ул.

**«Тыуған яғым – ғәзиз ерем»** шиғырын тыңлау.

Үҙ ауылында башланғыс мәктәп кенә булыу сәбәпле, уҡыуын дауам итер өсөн, ауылдан ун алты саҡрым алыҫлыҡтағы Салҡаҡ ауылына барып уҡырға тура килә уға. Унда Шәмғиә исемле апайҙа фатирҙа тора. Бер ялға ҡайтҡанында атаһы уға Ғабдулла Туҡайҙың «Шүрәле»һен яттан уҡып ишеттерә. Ул уны йотлоғоп тыңлай, шунда атаһы унының ихлас күңел менән тыңлауын күреп, улының үҙенә лә шиғыр яҙып ҡарарға кәңәш бирә.

Шиғыр яҙып китеү өсөн ниндәйҙер бер тетрәнеү кәрәк булғандыр, моғайын.

Файыҡ 6-сы класҡа ингәндә, ғаиләләренә йәнә ауырлыҡ килә. Шул йылды иген уңмау сәбәпле, ғаиләләре хәйерселәнә. Атаһы менән әсәһе Файыҡҡа уҡыуын туҡтатып торорға ҡуша. Төн буйы ҡайғыһынан күҙ ҙә йоммаған малай, иртән тороп Салҡаҡҡа мәктәп менән хушлашырға китә. Йәшәгән фатирына барып инә лә, ҡағыҙ-ҡәләм алып, шиғыр яҙырға ултыра. «Һау бул, мәктәп» тип исем дә ҡуя.

**«Һау бул, мәктәп»** шиғырын тыңлау.

Ошо шиғырҙы ул директорға бирмәксе була, тик баҙнат итмәй. Ҡаршыһына Зөфәр дуҫы осрай, уға бирә лә, фатирға ҡайтып китә. Тегеһе ике лә уйлап тормайынса, шиғырҙы директорға индереп тә бирә. Бер аҙҙан документтар артынан килгәс, Файыҡ директорҙың үҙенә тап була. Ул уны үҙенең бүлмәһенә саҡыртып ала, уҡыуын ташлауҙың сәбәптәрен һораша. Белгәс, Файыҡҡа мәктәп йыйыштырыусыһы бүлмәһендә тороп, уҡыуын дауам итергә ҡуша. Ярҙам йөҙөнән ай һайын бер бот он, бер бот картуф бирәсәктәрен дә әйтә. Ошо минутта Файыҡтан да бәхетлерәк кеше булмай. Унының бит бар теләге – уҡыу, белем алыу! Ошонда инде ул шиғри һүҙҙең ниндәй ҙур көскә эйә булыуын аңлай һәм шул көндән алып шиғыр яҙа башлай, ғүмеренең аҙағына тиклем ҡәләменән айырылмай. Салҡаҡ ауылы менән унының бары тик яҡты хәтирәләр генә бәйле. Шул ауылға, халҡына, мәктәбенә арнап яҙған шиғырҙары ла унының байтаҡ.

**«Салҡағым»** шиғырын тыңлау.

Файыҡ Мөхәмәтйәнов ғүмере буйына үҙ иленең патриот улы була. Илем, халҡым тип яныпп, көйөп йәшәй ул. Рәсәй, Башҡортостан, туған халҡы, уларҙың дуҫлығы тураһындағы шиғырҙары унының шиғриәтендә ҙур урын алып тора.

**«Балҡы, балҡы, Башҡортостан!», «Халҡым», «Дуҫлыҡ»** тигән шиғырҙарын тыңлау.

Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, ике лә уйлап тормайынса, ҡулына мылтыҡ тотоп иле өсөн көрәшергә китә ул. Көнбайышта немец илбаҫарҙарына, уларҙың ҡуштандары финдарға һәм көнсығышта япон самурайҙарына ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша. Батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Йондоҙ һәм II дәрәжә Ватан һуғышы ордендары, «Хәрби ҡаҙаныштары өсөн» миҙалы менән бүләкләнә. Һуғыш темаһы уның шиғриәтендә айырым бер ҙур урын алып тора.

**«Үҙ Ватаны менән барып», «Нәфрәт менән ғәйрәт»** тигән шиғырҙарын тыңлау.

Һуғыштан һуң һалдат ең һыҙғанып, тыныс тормош төҙөү эшенә тотона. Әммә ҡайҙа ғына эшләһә лә, ҡәләме менән бер ҡасан да айырылмай, күңелендәге изге, яҡты уйҙарын аҡ ҡағыҙға төшөрөп йәшәй.

Яман эштәрҙән ситтә булып, бары яҡшылыҡтар ғына ҡылып, керһеҙ күңел менән йәшәргә өндәй ул бар кешеләрҙе үҙенең шиғырҙарында.

**«Ғүмер», «Әгәр эшең яман булһа...», «Күңел»** тигән шиғырҙарын тыңлау.

Файыҡ ағай Мөхәмәтйәнов менән яҡындан таныш булмаһаң да, шиғырҙарын уҡығандан һуң, уның ниндәй изге күңелле, бар кешегә бәхет һәм яҡшылыҡ ҡына теләп яшәгән, һәр ваҡытта ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер торған кеше икәнен аңлауы ауыр түгел. Бөтә кешелек донъяһын да ул ошо сифаттар менән генә күрә, ә үҙендәге изгелек, йомартлыҡты фәҡәт шул халҡымдан күсте лә инде, тип аңлата ул үҙенең бер шиғырында.

**«Төшмәй, күктән төшмәй»** тигән шиғырын тыңлау.

Иң ғәзиз кешеләребеҙ – атай-әсәйҙәребеҙгә бағышланған, шулай уҡ бәләкәстәргә арнап яҙылған шиғырҙары ла байтаҡ Файыҡ Мөхәмәтйәновтың.

**«Әсәйем ҡулдары»** тигән шиғырын тыңлау.

Атай-әсәйҙәрҙе хөрмәт итеп, уларға ҡәҙер күрһәтеп, уларҙың һүҙҙәрен тыңлап, кәңәштәренә ҡолаҡ һалып йәшәгәндә генә тормошта бәхетле булып була.

Шағир Файыҡ Мөхәмәтйәнов та ата-әсәһе нәсихәтенә ғүмере буйына тоғро ҡала.

**«Атай-әсәй нәсихәте»** шиғырын тыңлау.

Файыҡ Мөхәмәтйәнов үҙен шағир ғына түгел, оҫта журналист итеп тә таныта.

Бына ошондай тырыш, сыҙам, үҙ илен, халҡын һаҡлап, данлап йәшәй ул Файыҡ Мөхәмәтйәнов. Ул иҫән сағында үҙенең тыуған яҡтарында бик йыш була ине, һеҙҙең кеүек уҡыусылар менән осрашырға ярата ине, уларға үҙ башынан үткән ауыр тормошо хаҡында, бөгөнгө көндөң ниндәй рәхәт икәнен һәм уның ҡәҙерен белеп, дөрөҫ юлдан барып, тирә-яҡҡа яҡтылыҡ сәсеп йәшәргә кәрәклеклеге тураһында ихлас һөйләй ине. Бөгөн инде ул беҙҙең арабыҙҙа юҡ... Уның һеҙгә атап яҙылған шиғыры оран булып яңғыраһын ине.

Алып барыусы **«Йәш быуынға»** шиғырын һөйләй.

*...Әй, йәш быуын,*
*Олатайҙар юлын*
*Тапап-тапап йәшәй күрмә һин,*
*Ил ҡәҙере сепрәк һатыу түгел,*
*Яҙа баҫып, уны күммә һин.*
*Һаҡта саҡта, күҙ ҙә йоммайынса,*
*Керпек ҡаҡмайынса уяу тор.*
*Тыуған илең сәскә атһын тағы,*
*Олатайҙар кеүек илде ҡор.*
*Шомло болоттарҙан ҡотолһон да*
*Тыуһын,сыҡһын бәхет ҡояшың,*
*Көсөң-дәртең ергә бүләк иткән*
*Бәхет кенә булһын юлдашың!*

Бына ошондай кәңәштәр биреп, бәхет теләп ҡала ул һеҙгә, ҡәҙерле балалар!

Ул үҙен бәхетле тип һанай микән? Ни өсөн? Әйҙәгеҙ, «Бәхет - тәхет» тигән шиғырын уҡыйыҡ та ошо һорауҙарға яуап бирәйек.

**«Бәхет – тәхет»** тигән шиғырын тыңлау.

Шағир бәхетлеме?

Ни өсөн ул үҙен бәхетле кешегә һанай?

Эйе, был тормошта ул бары тик изгелеккә юлдар ярып йәшәй һәм шуның менән бәхетле.

Кеше йәшәй, ғүмер итә, ә артында оҙон юл ҡала, эҙе ҡала. Беҙ ҙә бөгөнгө шәхесебеҙ, яҡташыбыҙ Файыҡ ағай Мөхәмәтйәнов кеүек ҡара таптарһыҙ, бары аҡ юлдар ғына ҡалдырып, Ватаныбыҙға хеҙмәт итеп, уны яратып , был тормошта «Мин бәхетле», – тип әйтерлек йәшәһәк ине! Саф күңелле Файыҡ бабай кеүек булһаҡ ине!

(Сара презентация менән үрелеп бара).

## Әҙәбиәт

1. Мөхәмәтйәнов Ф.Т. Батырлыҡ эҙе: шиғырҙар, поэмалар. – Өфө: Китап, 2008. – 192 бит.
2. Мөхәмәтйәнов Ф.Т. Тыуған яғым йылыһы. Шиғырҙар, поэмалар. – Өфө: Китап, 2006. – 176 бит.
3. Мөхәмәтйәнов Ф.Т. Ер өндәшә. Шиғырзар, поэмалар. – Өфө: Китап, 2001. – 128 бит.
4. Мухаметзянов Ф.Т. Край мой родной, свет души моей. Сборник стихов. Редактор Р.Зиялтдинов. – Бураево: ГУП РБ “Бураевская районная типография”, 2006.
5. Замандаштары күңелендә сағыу публицист булып ҡалды // Башҡортостан. – 2021. – 16 март.
6. Арыҫланов М. Үҙ һөйәгебеҙ үҙебеҙгә ҡәҙерле // Башҡортостан. – 2001. – 23 март.

7. Габидуллина Ф. Туздырылган оянын бер моңлы кошы // Кызыл таң .– 2006. – 10 март.
8. Корал һәм каләм белән // Кызыл таң. – 2021. – 9 март.
9. Усманова Р. «Уф димәдем, баш имәдем җилләргә, давылларга» // Алга. – 2021. – 9 март.
10. Замандаштары күңелендә сағыу публицист булып ҡалды // Йәнтөйәк. – 2021. – 16 март.

**Галяутдинова Р.Р.**

*МБОУ СОШ с.Исмаилово МР Дюртюлинский р-н Республика Башкортостан*

## «А ну-ка, девочки!»

### (Конспект внеклассного занятия, посвященного Дню 8 Марта)

**Цель мероприятия:** воспитывать уважительные отношение к маме, девочкам.

**Задачи мероприятия:**
1. развитие способности учащихся, их индивидуальность, фантазию и изобретательность;
2. закрепить знания о празднике 8 Марта;
3. развивать умение работать в команде;
4. формировать уважительное отношение друг к другу.

**Оборудование:** конспект, цветок, презентация.

**I. Организационная часть.**

– Здравствуйте ребята, сегодня занятие буду вести у вас я, меня зовут Регина Радисовна.

**II. Вводная часть.**

***1. Вступительное слово.***

– Как вы думаете, какой праздник приближается, кто скажет ? **(отвечают) (Слайд1)** Да, правильно, праздник весны, женский день.
- В начале марта на улицах многих городов нашей страны еще лежит снег. Еще по- зимнему холодно, но уже чувствуется весеннее праздничное настроение. Дни перед 8 Марта можно сравнить только с предновогодними: так же много людей на улицах и в магазинах, так же много покупают подарков. Как много цветов в руках у женщин! Сколько нежных слов слышат они в этот день!

***2.О празднике 8 Марта. Беседа.***

***(Слайд2 )***- А как называется праздник? (Международный Женский день 8 Марта).

Этот всеми любимый праздник 8 марта восходит к традициям Древнего Рима I века до нашей эры. Считалось, что богиня Юнона супруга великого Юпитера была наделена большой властью и обладала огромными возможностями. У нее было много имен: Юнона-Календария, Юнона-Монета.

Почему день женщин отмечается 8 Марта?

– Да современном мире день женщин отмечается 8 Марта. История этого праздника началась в 19 веке, и был он приурочен ко дню борьбы за права женщин. Именно 8 марта 1857 года в Нью-Йорке прошла манифестация работниц швейных и обувных фабрик. Но только в 1910 году на Международной женской конференции социалисток в Копенгагене Клара Цеткин предложила праздновать Всемирный женский день 8 марта. День 8 Марта стал считаться днем международной солидарности трудящихся женщин в борьбе за свои права.

-И так, проверим, что вы узнали о празднике.

-Как называется праздник?

-Почему празднуются этот день 8 Марта?

-8 Марта поздравляют мам, бабушек, сестер, учителей. Сегодня мы поздравим девочек нашего класса.

-Почему девочек поздравляем ?( Потому, что девочки будущие труженицы, будущие мамы)

***3.Сообщение темы и цели.***

-Сегодня мы проведем конкурс «А ну-ка, девочки» посвященный дню 8 Марта. Поздравим их, посмотри, какие они будущие труженицы, мамы, хозяйки.

**(СЛАЙД 3)** Пришла весна!
Весна пришла!
И улыбнулась нам она.
И засветило ярче солнце,
Лучами осветив оконце.
А в классе собрались девчонки.
Нет, не сидят они в сторонке –
Они красивы и умны,
Да лучше просто не найти!
И мы сейчас у них узнаем,
На что способны, Много ль знают!

***4. О конкурсе. (Слайд4)***

- В честь этого праздника мы проводим конкурс, в котором примет участие прекрасная половина нашего класса

– Наши милые девочки. А называется конкурс «А ну-ка, девочки!»

- Девочки разделены на 2 команды, прошу вас выбрать капитана команды.

- Сегодня наши участницы покажут свои таланты, докажут какие они славные, милые конкурсанты.

***Представление жюри***

За проявлением талантов будет следить и судить наше доброе и строгое жюри. Разрешите представить членов нашего уважаемого жюри! Галимьянова Элиза, и Головезникова Анастасия

***5 .Жюри***

-Да, жюри, прошу Вас строго не судить,
По достоинству лишь только
Всех участниц оценить.

-Так, девочек мы поделили на команды, а вы мальчики будете группами поддержки, -И так, мы начинаем. Внимание, внимание! Друзья! Первый конкурс объявляю я.

-И так, мы начинаем. Внимание, внимание! Друзья! Первый конкурс объявляю я.

**III.Основная часть**

**(Слайд 5). 1 конкурс -"Визитная карточка"** (раздаю конвертики, они должны собрать из букв, название своей команды)

-Я засекаю время, даю вам 3 минут, вы по моей команде должны открыть конвертики. Раз, два, три начали.

-Каждая команда выходит и называет своё название. Оценивается по пятибалльной системе. (Выходят капитаны команды и называют)

-А что бы поразмяться сделаем физминутку

**Команда «Золушки». Команда «Принцессы».**

-Молодцы! А мы двигаемся дальше, наш второй конкурс «**Чудесные хозяйки**»

**(Слайд 6). 2 конкурс "Чудесные хозяйки"**

-Давайте проверим, какие они хозяйственные . У частницы должны отгадать загадки. Каждой девочке загадывается загадка о вещах домашнего обихода– правильная отгадка – цветок

(**Слайд** 7).

**Первая команда**

1. То назад, то вперед
   Ходит, бродит пароход.
   Остановишь - горе
   Продырявишь море. (Утюг)

   **2.** Большой кусок ткани, который стелют на стол.(Скатерть)
   **3.** Плоская подставка, на которую ставят сразу много посуды.(Поднос)
   **4.**Вся дырявая и злая
   И кусачая такая,
   Только бабушка с ней ладит,
   Ей бока и трёт, и гладит. (тёрка)
   5.Новая посуда,
   А вся-в дырках. (Дуршлаг)

**2. (Слайд 8) Вторая команда:**

5. Я увидел свой портрет-
Отошёл – портрета нет. (зеркало)

**6.** Два конца, два кольца,
А по середине гвоздик. (ножницы)
**7.** Живёт в нём вся вселенная,
А вещь обыкновенная. (телевизор)
**8.** Она пыхтит, как паровоз,
Но никуда не мчится.
В любой момент своим теплом готова поделиться (печь).
– Каждая команда соберите цветочки, отдадим жюри. Сколько цветков- столько баллов вы набрали.

– Давайте спросим наших девочек. Первая команда умеете ли вы пользоваться утюгом? Жюри оценивают.

-Вторая команда, умеете пользоваться стиральной машиной?

-Ну а теперь, хочу вам прочитать несколько правил пользования с утюгом

***(Слайд9). Правила пользования утюгом:***

- утюжить необходимо на специальной доске или на ровной поверхности, застеленной мягкой, чистой тканью;
- проверьте подошву утюга перед использованием. Она должна быть чистой, иначе вы испортите вещи;
- перед началом утюжки в обязательном порядке проверьте, при каком температурном режиме необходимо утюжить ту или иную вещь;
- вещи необходимо утюжить вдоль;

После пользования отключите от электричества питание, чтобы не было пожара.

***(Слайд10). Правила пользования с стиральной машиной:***

**Подготовка белья к стирке.**

-Белье следует тщательно рассортировать по цвету и типу тканей;

-Проверьте карманы, нельзя допускать наличия в них мелких посторонних предметов во время процесса стирки;

-слишком рваное, ветхое или грязное белье (спецодежда) стирать не следует.

**(Слайд11). 3 конкурс «Угадайте, что лишнее»**

-Умеют ли девочки готовить различные блюда? Девочки наши будущие кулинары, повара, потому что, мама должна уметь готовить вкусные блюда.

-Девочки , а вы знаете как готовят борщ ? На листе бумаги записаны продукты, которые можно использовать для приготовления борща. Зачеркните лишние продукты. (капуста, картофель, лук, ~~верминшель~~, морковь, ~~помидоры~~, ~~рис,~~ соль, ~~сахар~~, свёкла, ~~огурец~~)

- А пока наши девочки, готовят борщ, я поиграю с вами, мальчики. Викторина для болельщиков. Если знаете ответ, поднимаем красиво руки.

– Куда зайцу бежать удобней: с горы или в гору? Почему? **(В гору. У зайца передние ноги короткие, а задние ноги длинные. Поэтому заяц в гору бежит легко, а с отвесной горы летит кубарем, через голову).**

– Где бывают реки без воды, а города без домов? **(На карте).**

– Одного отца и одной матери дитя, а никому не сын**. (Дочь)**.

– Назовите имя сказочной героини - первой женщины-лётчика **(Баба Яга)**.
– И так, мы возвращаемся к нашим девочкам, вы готовы? Давайте проверим вместе. Отдайте мне ваши листочки, я отнесу их жюри.
– А мы двигаемся дальше, наш следующий 4 конкурс «Поздравления»
**(Слайд12). 4 конкурс – «Поздравления »**
- Я командам раздаю поздравительные открытки , вы должны составить разные пожелания с Днем 8 Марта. А кому посвящать эти пожелания , узнаем, отгадав загадки.
(**Слайд13**).
1.В мире нет её роднее,
Справедливей и добрее.
Я скажу, друзья вам прямо-
Лучше всех на свете (мама)
2. Кто носки внучатам вяжет,
Сказку старую расскажет,
С медом даст оладушки-
Это наша ... (Бабушка).
-Девочки пишут пожелания первая команда своим мамам, а вторая команда бабушкам.
Мальчики, скажите, какие правила вежливости в обращении с девочками вы знаете?(Заслушивают ответы мальчиков)
-Молодцы, правильно. Наши девочки уже закончили, давайте послушаем их пожелания.
-Пожелания написаны очень красиво, молодцы, а для оценивания отдадим членам нашим жюри.
**lV.Заключительная часть**
**Объявление результатов.** Ну а теперь, уважаемое жюри, итоги подводим. Мы закончили.. А пока жюри подводит итоги, я хочу провести «Кулинарную викторину»
(**Слайд14**)
1. Фирменное блюдо сороки – воровки (кашка).
2. Деликатес из кабачков (икра).
3. Картофель всмятку (пюре).
4. То, что осталось от варенья, когда из него съели все ягоды (сироп).
5. Булочное изделие, которым можно порулить (баранка).
6. Продукт, которым собиралась позавтракать ворона (сыр).
7. Блюдо, приготовленное с участием коровы и курицы (омлет).
8. Фруктовый кефир по-нашему (йогурт).
9.Какая из нот не нужна для компота? (соль).
– Молодцы, правильно все отгадали. Ну а теперь слово предоставляется нашему уважаемому жюри.**( Слово жюри)**
**( Слова жюри)-** Поздравляем наших девочек с наступающим Международным Женским днем с 8 Марта, они сегодня показали какие они хозяйственные, умные, умеют красиво ухаживать за собой, какие они будущие труженицы,

будущие мамы. В конкурсе все должны быть победительницами. (Вручение подарков).

И на этом наш конкурс подошел к концу. Милые наши девочки-победительницы, мы поздравляем вас с заслуженной победой. Вы все очень хорошо потрудились. Вы все победители, молодцы! И в заключение хочется прочитать стихотворение и поздравить девочек с праздником:

Вам девчонки мы желаем
Быть прекрасными всегда,
Чтобы каждый, кто вас знает,
Говорил: «Вот красота!»
Чтоб мальчишки на свиданиях
В вас без памяти влюблялись!
Чтобы все ваши желания .
Очень просто исполнялись!

**Гильманова Н.С.,**
**Ахмадиева Э.Н.**
*МБОУ СОШ №4 города Бирска Республики Башкортостан*

# Правила этикета на дне рождения для гостя. Дарение подарка

**(Внеклассное мероприятие в 1 классе)**

**Цель***:* Воспитание нравственности
* закрепить знания правил приема гостей;
* правила поведения за столом; правила приема подарков;
* показать обучающимся, что праздник интересен тогда, когда люди участвуют в его подготовке;
*формировать умение оценивать поступки окружающих;

***Задачи:***
***Развивающие:*** стимулировать развитие речевого общения, образного мышления и творческого воображения;
***Воспитательные:*** Воспитывать у детей доброжелательное и уважительное отношение к окружающим, стремление помочь ближнему, уметь выражать положительные эмоции, стимулировать радостные эмоции, воспитывать умение работать в команде.
***Образовательные:*** формировать умение оценивать поступки окружающих; формировать умения работать по сюжетным картинкам; активизировать речь обучающихся, правильно строить предложения,
***Оборудование:*** 1. Презентация «Как вести себя в гостях».
2. видеоролик песни «Доброта», День рождения».
3. Тематические плакаты серии «Этикет».

***Используемые педагогические технологии:*** коллективного творческого воспитания, игровая технология интеллектуально-творческого развития детей, технология воспитания на основе системного подхода, здоровьесберегающая, технология современного и проектного обучения.

**Ход занятия.**

**Учитель:**

Вы, наверное, заметили приятные изменения в этике общения в нашем классном коллективе? Вы общаетесь, учитывая этические нормы, и поэтому стали намного дружнее. Возможно, не всё ещё удаётся , но важно стремиться к лучшему. И в этом вам поможет этикет.

-А что такое ЭТИКЕТ?

1-й ученик:

*Что такое этикет –*
*Знать должны мы с детских лет.*
*Это нормы поведения:*
*Как ходить на День рождения?*

*Как знакомиться?*
*Как есть?*
*Как звонить?*
*Как встать?*
*Как сесть?*
*Как здороваться со взрослым?*
*Много разных есть вопросов.*
*И на них дает ответ*
*Этот самый ЭТИКЕТ.*

**Исполнение песни «День рождения».**

**Ученица**:День рожденья с детства любим мы.
В День рожденья — дарятся цветы.
В День рожденья — водим «Каравай».

**Ученик: Пригласительный этикет.**

На праздник необходимо заранее пригласить друзей.
Пригласить в гости можно в письменной и устной форме. Например: ***«Даша, я приглашаю тебя на свой День рождения. В воскресенье в 12 часов»*** (проиграть ситуацию устного приглашения.)
Итак, приглашение получено теперь необходимо подумать о подарке.

**Ученик: Подарочный этикет**

Среди множества подарков мы должны выбрать тот, который хотели бы подарить своему другу или подруге.
А, какие бывают подарки? (**Ответы детей).**

**Ученик:Виды подарков:**

- живые;
- литературные;
- музыкальные;
- сладкие;
- игрушки.

Подарок можно изготовить своими руками.
Выбранный подарок нужно красиво упаковать. Существуют разные виды и формы упаковки.

**Ученица**: Ребята, я хочу, чтоб вы послушали одну историю и помогли разобраться – в чем мальчик был неправ.

***Монолог.*** Отрывок из рассказа «**Шоколадный торт**» (реквизит: книга, настольная игра, фломастеры).

*«Когда наступил мой день рождения, я пригласил гостей, а мама купила шоколадный торт для угощения. Пришли гости. И все с подарками. Коля, сосед, мне настольную игру подарил – «Футбол» принес.*

-*Спасибо, – сказал я, – интересная игра. Мне точно такую же дядя Глеб подарил.*

*Вадик, с которым в одном лагере были, подарил книгу «Приключения Незнайки».*
*- Спасибо, – говорю я. – Книжка чудесная. Это ничего, что она не новая. Видно, что ее все твои родственники перечитали.*
*Лиля, одноклассница, подарила мне набор фломастеров.*
*-Вот хорошо, - говорю я. – Мне как раз нужны фломастеры. Жаль только, что здесь всего только шесть цветов. Особенно не разрисуешься. Вот я в магазине набор видел – восемнадцать цветов!*
*Положил я подарки и пригласил гостей к столу. Начал делить торт и чай разливать. Смотрю, что-то гости мои какие-то скучные сидят. Я уже и музыку веселую включил, а они все равно не веселятся. Ковыряют торт ложечкой и в тарелку смотрят. Потом один за другим попрощались и ушли. И чем я им не угодил? Может быть торт не понравился?*
***Ответы детей.***
***Исполнение детьми танца «День рождения»***
**Ученица**: Ребята, на день рождения, в гости надо одеваться красиво и нарядно!
Красивую одежду ты надел,
И сразу изменилась жизнь твоя
Ты на глазах у всех похорошел
И, в зеркало взглянув, воскликнул:
«Вот так я!»
- Ребята, а праздничная одежда обязательно должна быть очень дорогая?
-А какая она должна бать обязательно?
-Верно - чистой и опрятной!
-Будь в одежде аккуратен
Избегай и дыр и пятен!
**Мы знаем пословицы и поговорки** (на доске):
***«По одежке встречают, по уму провожают»***
***«Быть чистым ты обязан, не только для себя»***
***«В человеке все должно быть прекрасным: и лицо, и одежда, и душа, и мысли!»***
**Ученик: Застольный этикет.**
-В гостях уже ждет красивый стол.
-Сервировка чайного стола имеет свои особенности: Напротив стула на стол ставится чашка, под ней блюдце. Ручка чашки смотрит вправо. Под ней на блюдце лежит чайная ложка. Слева ставится пирожковая тарелка, на ней салфетка. На чайный стол ставятся различные сладости, сахарница, порезанный лимон.
**Ученик:**
- Сейчас необходимо вспомнить правила поведения за столом. Я предлагаю вам пройти небольшой тест: «Умеешь ли ты вести себя за столом?» (Слайды). Дети отвечают на вопросы.
**Праздничное меню.**

Ребята, без чего не обходиться день рождения? Верно, в день рождения пекут красивый, праздничный торт для именинника.

**Рефлексия деятельности.**

**Ученик:**

- Украшения торта свечами:

*Красная свеча – приглашение*

*Желтая свеча – выбор и упаковка подарка*

*Синяя свеча –сервировка стола*

*Зеленая свеча* - *приготовление блюд.*

**Учитель:**

- Ребята, вы сможете рассказать своим близким и друзьям как готовиться ко Дню рождения?

- Я очень рада, что вы все запомнили. Мне очень понравилось, как вы подготовились и работали на занятии, особенно ….

Главная задача гостей – не как можно больше съесть, а хозяина – откармливать гостей. *Главной целью дружеской встречи является атмосфера – приветливые жесты, взгляды, улыбка. Здесь хорошо помогают игры, песни, танцы.*

***Презентация слайдов «Поведение в гостях»***

**Итог мероприятия. Учитель:** Подводя итог, хотелось бы напомнить Вам стихотворение А.Хайта

В квартире нашей всё блестит, посуды слышен звон,
И стол торжественный накрыт на дюжину персон.
Мы все гостей сегодня ждём, и даже Васька-кот,
Забыв про миску с молоком, от радости поёт.
Ведь без гостей, как без друзей, на свете очень трудно жить,
И не беда, что после них посуду надо мыть.
За нашим праздничным столом веселье, шум и смех.
Как хорошо, когда кругом таланты есть у всех!
Один нам барыню сплясал, другой нам песню спел,
Стихи нам третий прочитал, четвёртый много ел.
С друзьями расставаться нам бывает нелегко.
Но всем домой пора гостям, им ехать далеко.
Им было весело у нас за праздничным столом,
И значит, в следующий раз мы в гости к ним придём.

Печкин: Какие вы ловкие! Посылка ваша. Я всех поздравляю и желаю быть всегда в отличном настроении. До новых встреч! (Печкин уходит под музыку).

Из посылки дети достают символические кирпичики, на которых написаны слова (доброта, честность, порядочность, злость, внимание, старательность, зависть, скука, усидчивость, дружба, взаимопомощь, трудолюбие, общительность, гнев, обида, тревога, улыбки, забота, счастье и т.д.)
Ведущий: Мы выполнили задание Печкина и можем положить первый кирпичик в фундамент нашего дома (победитель конкурса читает надписи и выбирает подходящий , на его взгляд, кирпичик с надписью, дети обсуждают).
Печкин: Какие вы умные. А как бубут вас звать вы знаете?
А я знаю. Если отгадаете загадку ,то я вам скажу.
Зимою в школу он бежит,

А летом в комнате лежит,
Но только осень настает,
Меня он за руку берет.
(Портфель)

А вы умеете быстро и аккуратно собирать портфель в школу? Вот сейчас мы это и проверим. (Три ребенка собирают портфель из предложенных предметов. Тот, кто побеждает, закладывает в фундамент 2-ой кирпич.)

Ребята, а когда вы опаздываете в школу, кто вам помогает собирать портфель? (Родители)

Приглашаются родители. Им завязывают глаза, и они собирают портфель. Среди предложенных предметов самые необычные: журналы мод, косметички, лак для волос, духи, помады и т.д. Победитель получает первое слово дружные.

Молодцы, ребята и родители! Вы справились с моими заданиями. Но второе слово я вам не отдал,если хотите его получить ,то отгадывайте мои загадки.

Загадки

1. Буквы напечатанные, очень аккуратные.
Буквы для письма я пишу сама. (Ручка)
2. Я – умейка.
Прямота - главная моя черта. (Линейка)
3. Я нужна вам для порядка.
Зря сраницы не листай!
Где я, там читай. (Закладка)
4. Я – чумазенькая спинка.
Но совесть у меня чиста:
Помарку стерла я с листа. (Ластик)
5. Карандаш во мне так мается,
Но зато он не сломается.
Ручка в темноте находится,
Но зато легко находится. (Пенал)
6. Написал я сто бумажек.
А когда я начинал,
То с трудом влезал в пенал. (Карандаш)

7. Над бумажным, над листом
Машет все она хвостом.
И не просто машет, а бумажку мажет.
Красит в разные цвета.
Ух, какая красота! (Кисточка)
8. Учитель у меня в портфеле.
Кто? Быть не может! Неужели?
Взгляни, пожалуйста, он – тут.

Все знают, как его зовут. (Учебник)
Печкин:Ну, ладно, загадки вы отгадали. А одеваться быстро вы умеете?
Конкурс: оденься с завязанными глазами. (Сначала – дети, потом – родители, с завязанными глазами, одевают детей ).
Победители конкура получают слово ребята.
Учитель:
Тихо, тихо рядом сядем –
Входит музыка в наш дом.
В удивительном наряде:
Разноцветном, расписном.
Ну, какой же День рождения без настоящих именинников. У нас в классе есть ребята, которые отмечают свой день рождения осенью. Это Новиков Денис,Гопаненко Никита,Меркель Гелена,Козыренко Василий, Резинкин Валера.. Давайте поздравим наших осенних именинников и исполним им песню «Каравай». (Всем по очереди).

А вот теперь мы открываем страничку «Наши таланты». Мы уже знаем, кого как зовут, но незнакомы с талантами друг друга. Впереди нас ждет много праздников. Вместе со мной и вы узнаете, какие таланты скрывают ученики нашего класса, способны ли поддержать товарища, когда это нужно, умеют ли веселиться, хорошо сидеть за столом. Не забывайте аплодировать после каждого номера. Аплодисменты расскажут нам всем, что вам понравился номер. (Номера, приготовленные детьми и их родителями к празднику. Учитель заранее узнает, какие номера приготовлены к празднику и составляет праздничную программу, где чередуются стихи, песни, гимнастические номера ,фокусы, инсценировки, музыкальные номера).
Подведение итогов праздника.
Учитель: Чтобы вспомнить, какими мы были, загляните в семейный альбом. Появились первые странички нашего семейного альбома (показывает). Альбом вместе с нами будет расти. В него мы поместим фотографии всех наших дел, наши успехи и достижения. А когда через много лет мы встретимся на вечере встречи выпускников, заглянем в него и вспомним, какими мы были…

Вот и подошел к концу наш вечер, мы заложили фундамент нашего дома. Отныне он будет держаться на … (зачитывает слова с кирпичиков).

В заключении объявляется танец «Дружбы». Найди себе пару и танцуй (Дети и родители берут части разрезанных на две геометрических фигур, ищут себе пару, танцуют).

Всем спасибо за вниманье, за задор, веселье, смех, за огонь соревнованья, созидающий успех. Какой же славный стол накрыт. И чай, наверное, стоит. (Чаепитие).

Во время его родители знакомятся ближе друг с другом (назови свое имя, следующий – имя предыдущего и свое, следующий двух предыдущих и

свое и т.д.). Дети придумывают названия и девизы своим экипажам. Все вместе исполняют песню о дружбе.

**Селянина Л.В., Белобородова О.А.**

*МБОУ СОШ №4 г.Бирска Республики Башкортостан*

# Светофор – наш друг

# ( классный час в 1-м классе)

**Цели:**

1) формировать представления младших школьников о безопасности дорожного движения;

2) повторить правила уличного движения пешеходов по улице и дороге, дорожные знаки;

3) воспитывать уважительное отношение ко всем участникам дорожного движения.

**Оборудование:** картинки светофоров разных видов , дорожные знаки, 3 круга – красный, желтый, зеленый для игры.

**Ход классного часа**

**Учитель:**

Долгожданный дан звонок -
Это начался урок.
А урок расскажет всем,
Как без обид и без проблем,
Рано утром, не спеша,
Прийти в школу малышам.

- У дорог и улиц есть свои строгие законы, своя азбука – это ПДД, которые необходимо соблюдать водителям и пешеходам. Незнание языка дорог может привести к беде, к дорожно-транспортным происшествиям. А для того, чтобы с вами такого не случилось, мы поговорим, как нужно вести себя на улице.

- Первые правила дорожного движения появились 329 лет тому назад. В 1683 году царь Пётр I издал указ о правилах движения. А через 129 лет в Москве действовали самые настоящие правила, они ограничивали скорость экипажей, ведь автомобилей ещё не было.

Шло время, и появился первый автомобиль. Собаки с лаем убегали от этого чудовища, люди крестились, как при виде “нечистой силы”, прятались по домам, а если встречали автомобиль по дороге, то прижимались к заборам.

Быстро пролетело время, и автомобили появились повсюду. Скорость современных автомобилей превышает начальную на несколько десятков.

Поэтому на дорогах нужны были помощники. Отгадайте, какие помощники нужны были на дорогах городов.

Загадка. (Читает учитель)

Я глазищами моргаю
Неустанно день и ночь.
Я машинам помогаю
И тебе могу помочь!

Ученики: Это светофор.

- Расскажите, что вы знаете про цвета светофора.

Сообщения детей.




Свое происхождение светофоры ведут от семафоров, которые применялись на железных дорогах и имели два цвета – красный и зелёный. Такой семафор более ста лет назад был установлен на улицах Лондона. Но, чтобы не было столкновений, нужен был какой-то промежуток времени между зелёными и красными сигналами. И тогда люди придумали жёлтый цвет.

В нашей стране первый светофор появился на улицах Москвы в 1929 году. Он представлял собой круг, разделённый на три сектора: красный, жёлтый и зелёный. По кругу, как по циферблату часов, двигалась стрелка. Управлял таким светофором специально представленный к нему регулировщик. Но уже через несколько лет такой светофор заменили на электрический, который действует и сегодня.

Учитель. А кто знает, почему были выбраны именно такие цвета?

Красный – цвет опасности. Он хорошо виден и днём, и ночью, и в туман и в дождь.

Зелёный цвет – резко отличается от красного. Их невозможно перепутать.

Жёлтый цвет – промежуточный, он призывает быть внимательным.

**Учитель:** О чём это стихотворение? Что такое светофор?

Заслушиваются ответы учащихся.

**Учитель:** Надо помнить о том, что сигналы светофора располагаются в строгой последовательности: вверху — красный, внизу — зелёный, в середине — жёлтый. Где устанавливаются светофоры?

**Учащиеся**: На самых опасных участках дороги.

**Учитель:** Представьте себе такую ситуацию: вы подходите к пешеходному переходу и вдруг зелёный сигнал светофора начал мигать. Как вы поступите?

♦ Заслушиваются ответы учащихся.

**Учитель:** Посмотрите на рисунки. Здесь 2 светофора.




Светофоры, которые имеют только две секции с изображениями красного неподвижного человечка и зелёного шагающего человечка, предназначены только для пешеходов и устанавливаются на пешеходных переходах. Такой светофор называется пешеходным. Светофор, у которого три сигнала, называется транспортным.

♦ Учитель помещает на доску карточки со словами «Пешеходный светофор» и «Транспортный светофор».



**Игра на внимание (физминутка)** - А сейчас, ребята, я предлагаю поиграть. Я буду показывать сигналы светофора. Если красный – вы стоите на месте, желтый – руки на пояс, зеленый – ходьба на месте. И так, внимание!

Учитель показывает карточки с цветами сигналов светофора в произвольном порядке.

**Работа в тетрадях (тесты Светофор) Вариант 1.**

- У вас на партах модели светофоров, дома вам нужно будет их вырезать и склеить(показать образец) и при их помощи повторить правила перехода улицы, можно рассказать об этом своим игрушкам.

Учитель. Но не только светофор нам помогает перейти дорогу.

Ученик.

Очень нужен он в пути,
Где дорогу перейти?
Он расскажет "что" и "как",
Звать его … дорожный знак.

**(показать знаки пешеходных переходов)**

Выполнить задания на листочке, раскрасить один рисунок на выбор

**Итог занятия.**

- Что нужно, чтобы стать настоящим пешеходом?
- Какие бывают светофоры?

**Дидактическая игра "Есть сигналы светофора, подчиняйся им без спора".**

(С сигнальными карточками)

Бурлит в движеньи мостовая -
Бегут авто, спешат трамваи.
Скажите правильный ответ-
Какой горит для пешеходов цвет?
(Дети показывают красную сигнальную карточку)
Особый цвет – предупреждение!
Сигнала ждите для движения.
Скажите правильный ответ –
Какой на светофоре свет?
(Дети показывают жёлтую сигнальную карточку)
Иди вперёд! Порядок знаешь,
На мостовой не пострадаешь.
Скажите правильный ответ –
Какой горит при этом свет?
(Дети показывают зелёную сигнальную карточку)

- Надеюсь, что вы всегда будете помнить правила пешеходов и будете всегда их выполнять. Удачи вам! До новых встреч!

**Уйылданова А.К.**
*Башкортостан Республикаһы*
*Әбйәлил районының Сиҙәм урта дөйөм белем биреү мәктәбе*

# “Йәшләй китте, йәшнәп китте!” (Рәмил Ҡол-Дәүләт ижадына арналған хәтер һәм ҡәҙер кисәһе)

**Маҡсат:** Шағирҙың тормош юлы һәм ижады менән танышыу; уның шиғриәте аша ил,тыуған ер, халҡың өсөн ғорурлыҡ тойғоһо тәрбиәләү, киләсәк өсөн хәстәрлек, яуаплылыҡ тойорға өйрәтеү.
**Йыһазландырыу**: Фоноязмаға яҙылған ҡурай моңо, шағирҙың портреты, китаптары, проектор, экран.

I. (Талғын ғына музыка уйнай).

**1-се алып барыусы:**

Мин китермен,бер китермен
Шуҡ елдәргә тағылып.
Эҙләһәң дә,табалмаçһың,
Тик иларһың һағынып.

Йәнем керһеҙ шуға еңел,
Көсө етер елдәрҙең.
Үткән-һүткән елдән һорап
Йүгереп йөрөп эҙләрһең.

Көтмә мине,миңә күптән
Елдәр ене ҡағылған.
Таңғы елгә битеңде ҡуй
Әгәр мине һағынһаң...

**2-се алып барыусы.** Хөрмәтле ҡунаҡтар, туғандар! Ауылдашыбыҙ, ҡустыбыҙ, ҡәләмдәш дуçыбыҙ, тормошта йәшнәп йәшәгән, ең һыҙғанып ижад итер мәлендә 40 йәше лә тулмаç элек был донъянан бик йәшләй китеп барған талантлы шағир һәм драматург Рәмил Ҡол-Дәүләттең хәтер һәм ҡәҙер кисәһен башларға рөхсәт итегеҙ!

**1-се алып барыусы.** Бөгөнгө матур сараға Рәмил Ҡол-Дәүләттең туғандары, яҡындары, уның менән аралашҡан, ижадына битараф булмаған кешеләр йыйылған. Беҙҙең сараға йәм өçтәп, алыç араларҙы яҡын итеп килеүсе хөрмәтле ҡунаҡтар менән таныштырып үтәйек.

1) “Ҡуңыр буға” һәм “Йәйғор” ижади берекмәһе ағзалары: Зөһрә Кашапова, Мәүлит Кәримов, Земфира Кәримова, Фәнүзә Биктимерова, Иҙрис Ноғоманов, Радик Өмөткужин, Айһылыу Хәсәнова, Ислам Ирғәлин, Азат Көмөшбаев, Мәрйәм Сәлмәнова, Флүрә Моратшина.

2) Рәмил Ҡол-Дәүләттең бер туған апайы Әнисә Хөснитдин ҡыҙы Хафизова.

2-**се алып барыусы**: Тәбрикләү өсөн һүҙҙе мәктәп директоры Рәфил Рәсүл улына бирәбеҙ.

**1-се алып барыусы:** Шағир ғүмере-йондоҙ атылып һүнгән арауыҡ. Ләкин ул бөтөнләй һүнмәне, ә күңелдәрҙә яҡты эҙ, һағышлы моң,
матур хәтирәләр ҡалдырып алыҫ-алыҫтарға осто.

Шағирҙың бөгөнгөһө менән киләсәге айырылғыһыҙ. Тыуған халҡына, уның үткәненә булған һөйөүе - уның шиғриәтен, хыял-маҡсатын сағылдырып тороусы берҙән-бер һыҙат.

**Монтаж** (уҡыусылар Р.Ҡол-Дәүләттең ”Килен”, “Тыуған ерем”, “Һыулүҙәк”, ”Ҡыҙыл буйы”, “Уралымдың ҡарлы бураны”, “Ҡолбаҡты”, “Талдар”, “Арҡайым” шиғырҙарын яттан һөйләй.)

**2-се алып барыусы. –Һеҙҙең алдығыҙҙа “Ҡурайсы егет” йыры менән “Уралым”ансамбле.**

**1-се алып барыусы.:** Һағындыра һәр саҡ атайсалым,
Ҡайҙа ғына табан юл алма:
Алыҫыраҡ унан киткән һайын
Мөхәббәтем арта Уралға.

**2-се алып барыусы.** Рәмилде яҙмыш ҡайҙа ғына ташламаһын, ул һәр саҡ һағынып Әбйәлилгә ҡайтты, уйҙары менән тыуған яғында булды.

Яҙыусыларыбыҙ Зөһрә Кашапова, Радик Өмөткужин, Айһылыу Хәсәнова, Азат Көмөшбаев, Мәрйәм Сәлмәнова, Флүрә Моратшиналарҙы сәхнә түренә саҡырабыҙ. Рәхим итегеҙ! **(“Йәйғор”ағзалары).**

**1-се алып барыусы. Һеҙҙең өсөн “Трио” сығышы. (“Ауыл ҡыҙҙары”).**

**2-се алып барыусы:** Йылдар аяуһыҙ, йылдар үтә. Рәмилдең вафатына ла байтаҡ йылдар үтеп китте. Ләкин был йылдар Рәмил Ҡол-Дәүләт ижадына булған һөйөүҙе юя алманы, киреһенсә, тағы көсәйтә. 2011 йыл беҙҙең өсөн һөйөнөслө булды.Сөнки “Йәшлек” гәзите Башҡортостан яҙыусылар союзы һәм Әбйәлил районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты менән берлектә башҡорт әҙәбиәтенә һөйөү уятыу, Рәмил Ҡол-Дәүләт исемен мәңгеләштереү маҡсатында Рәмил Ҡол-Дәүләт исемендәге премияға конкурс иғлан итте. Еңеүселәр рәтендә беҙҙең райондан яҙыусылар һәм шағирҙарҙың булыуы ҡыуаныслы булды. Бына улар - Фәнүзә Биктимерова, Иҙрис Ноғоманов.

Хәҙер һүҙ уларға бирелә. ( **Р.Ҡол-Дәүләт премияһы лауреаттары сығышы)**

**Һеҙҙең өсөн “Бөрлөгән”йыры менән Ғүмәрова Фәнилә һәм “Дуҫлыҡ” ансамбле сығышы.**

**1-се алып барыусы.** Рәмил Ҡол-Дәүләттең әсәһенә, атаһына, туғандарына, дуҫтарына арналған шиғырҙары ижадының төп өлөшөн алып тора.

**Монтаж**: уҡытыусылар Р.Ҡол-Дәүләттең шиғырҙарын һөйләй.

**2-се алып барыусы:**

Һигеҙебеҙ һигеҙ төҫкә индек,

Боҙолоштоҡ,әсәй,һин киткәс.
Аҡланырға һис бер һүҙҙәр етмәҫ,
Аңлатырға быны аң етмәҫ.

Был замандың аҫты-өҫкә килде,
Китте мәллә уның “әсәһе”?
Туғандарым,тупланайыҡ тағы-
Һүҙҙәрем күп һеҙгә әйтәһе.

-Һүҙ Рәмил ағайҙың бер туған апайы Әнисә Хөснитдин ҡыҙына бирелә. **(Әнисә Хөснитдин ҡыҙы һөйләй)**

**2-се алып барыусы. - Һеҙҙең өсөн ир-егеттәр башҡарыуында “Өлкәнтау” ҡобайыры.**

**1-се алып барыусы:**Рәмил Ҡол-Дәүләттең ғүмере ҡыҫҡа булды. Әммә ул барыбер бәхетле шағир. Сөнки ул шиғриәт майҙанына үҙ ваҡытында килде: үҙгәртеп ҡороу осороноң демократияһы, һүҙ ирке уға “мыжыҡ ҡәйнәгә хеҙмәт иткән килен” хәлендәге Башҡортостан һәм тыуған халҡы өсөн йөрәген әрнеткән һүҙҙәрҙе иң кәрәкле мәлдәрҙә әйтергә мөмкинлек бирҙе. Юғиһә, уның ише уйлағанын ярып әйткән шағирҙар совет осоронда “милләтсе”исемдәре аҫтында йәшәне. Ә Рәмил Ҡол-Дәүләтте заман үҙе герой яһаны. Республика матбуғаты ойоштторған “Йыл кешеһе”рейтингыларында уның исеме юғары урын биләне.

**2-се алып барыусы:** Рәмил ижады башҡаларҙан сатира-юмор оҫталығы менән дә айырылып тора. Иң мөһиме – уның иронияһы, тапҡыр телле шиғырҙары уның уҡыусылары күңеленә хуш килә.

**Һеҙҙең өсөн “Уралым”ансамбле башҡарыуында “Магнитка тураһында таҡмаҡ”**

**1-се алып барыусы.** Үҙенең тәүге шиғырҙары менән үк барыһының һушын алған Рәмил Ҡол-Дәүләт үҙе иҫән саҡта 4 шиғыр йыйынтығы сығарып өлгөрҙө. Әлбиттә, ул тағы ла күберәк яҙа, күберәк китаптар сығара ала ине. Ләкин кесе йәштән эйәреп килгән сир уны беҙҙең аранан иртә алып китте.

**2-се алып барыусы:** Һуңғы йылдарҙа Рәмил Ҡол-Дәүләт драматургия өлкәһендә лә ихлас эшләне.Башҡорт академия драма театрында, Йәштәр театрында, Салауат, Стәрлетамаҡ театрҙарында драматургтың әҫәрҙәре сәхнәгә ҡуйылды һәм тамашасы һөйөүен яулап өлгөрҙө.

Рәмил Ҡол-Дәүләт Әбйәлилдән сығып, Башҡорт академия драма театры сәхнәһенә күтәрелгән берҙән-бер драматург.

**“Ҡарауыл” драмаһынан өҙөк.**

Ғүмер үтә. Унан үлем килә.
Нимә һуң ул үлем,нимә һуң?
О, кеше! Һин уны янып йәшәү,
Күкрәп йәшәү менән еңәһең.

Йәлләмәйек күңел йомартлығын,

Тартынмайыҡ уйҙар сафлыҡтан.
Ҡартлыҡ –бары күңел һүрәнлектән,
Ҡартаймайҙыр кеше ҡартлыҡтан.

**2-се алып барыусы.** Шағирҙар еңел яҙмышлы булмай.Улар һәр ваҡыт үҙ заманы менән бәхәсләшеп, хәүефтән кешелекте, халҡын ҡурсалап йәшәй. Шуның менән ул заманын да, халҡын да мәңгелеккә әйҙәп алып бара.

Рәмил Ҡол-Дәүләт ана шундайҙарҙан ине. Шуға ла ул халҡы кеүек үлемһеҙ. Шағир халҡының күңеле түрендә, ул һәр кемгә ҡәҙерле. Ул замандан да талап итте, үҙенә лә аяуһыҙ булды.

Ялғанлыҡ, ғәмһеҙлек, рухһыҙлыҡ менән килешмәне, халҡына, хаҡлыҡҡа һәм туған теленә табынып йәшәне бөйөк шағир.

**Алып барыусы:** Был кисәлә ҡатнашҡанығыҙ өсөн, иғтибарығыҙ өсөн барығыҙға ла рәхмәт!

Әҙәбиәт


1. Балҡыштар. Шиғриәт. – Өфө: Китап, 2004. – 560 бит
2. Башҡорт шиғриәте антологияһы. – Өфө: Китап, 2001.
3. Бикбаев Р. Замандың шиғри йылъяҙмаһы (Хәҙерге башҡорт поэзияһының үҫеү проблемалары). – Өфө: Башҡ.китап нәшр., 1980. – 272 бит.
4. Бикбаев Р. Һайланма әҫәрҙәр. IV: мәҡәләләр. – Өфө: Китап, 2011. – 632 бит.
5. Вафин М. Рәмил маяғы // Тамаша. – 2003. – № 4. – 45 бит.
6. Ғәниева Т. Их, Рәмил // Тамаша. – 2003. – № 4. – 30-32-се биттәр.
7. Егет һүҙе: шиғырҙар йыйынтығы. – Өфө: Башҡ.кит.нәшр., 1997. – 320 бит.
8. Искәндәр М. Ни тимәксе инең, Рәмил? // Тамаша. – 2003. – № 4. – 33 – 44 биттәр.
9. Ҡол-Дәүләт. Һигеҙенсе мөғжизә: Шиғырҙар, поэма. – Өфө; Башҡ.китап нәшр., 1991. – 80 бит.
10. Мәһәҙиев Н. Талант тураһында бер һүҙ // Тамаша. – 2003. – №4. – 30 бит.
11. Үтәбай Ә. Ҡол-Дәүләт // Тамаша. – 2003. – № 4. – 46-47 биттәр.
12. Үтәбай Ә. Офоҡтарға китеп юғалһам // Ағиҙел. – 2008. – № 5. – 55-56-сы биттәр.

**Хәҙимуллина Р.Р.**

*Башҡортостан Республикаһы Илеш районы*

*Ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Ғайса улы Гәрәев исемендәге Бишҡурай урта дөйөм белем биреү мәктәбе*

# Урал батыр уҙған юл буйлап сәйәхәт

## ( Кластан тыш сара)

**Маҡсат:**

1) Башҡорт халыҡ эпосы «Урал-батыр”ҙы өйрәнеү һәм популярлаштырыу.
2) Абдулхаҡ Игебаевтың “Урал тауышы” лиро-эпик поэмаһының ошо эпосҡа ауаздаш булыуын күрһәтеү; Шағирҙың ижадына ҡыҙыҡһыныу уятыу.
3) Тыуған ил, милли рух, башҡортлоҡ, туғанлыҡ, ҡәрҙәшлек кеүек төшөнсәләрҙең мәғәнәһен тәрәнәйтеү.
4) Урал-батыр эпосындағы заманға тура килгән тәрбиә һабаҡтарын өйрәнеүгә өндәү, үҙтәрбиә менән шөғөлләнеүгә нигеҙ һалыу, йәш быуындың эске энергияһын уятып ебәреү.
5) Шәхес булып формалашыуҙа рухи ҡиммәттәрҙең матди байлыҡҡа ҡарағанда өҫтөнлөгөн күрһәтеү.
6) Үрҙә атап үтелгән әҫәрҙәр нигеҙендә үҙ ерен, илен яҡлаусы батырҙарға, тарихына битараф булмаған шәхестәренә ҡарата хөрмәт тәрбиәләү, уҡыусыларҙы иһөйәр шәхес итеп тәрбиәләү.
7) Тәбиғәттәге тереклеккә, эсәр һыуға һаҡсыл ҡарарға өйрәтеү, йәғни тәбиғәтте һаҡлау, йылға-күлдәрҙе таҙартыу, ағас ултыртыу, сүп-сар йыйыштырыу, йорт-ихаталар, ауыл-ҡасаба тирәһен йәшелләндереү буйынса эштәр алып барырға өндәү.
8) Эposты яттан һөйләүгә этәргес биреү, ҡыҙыҡһындырыу.
9) Үҙ милләтең менән ғорурланып, уның үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге хаҡына йәшәргә өндәү.

**Йыһазландырыу:**

Слайдтар, уҡыусыларҙың эпосҡа ҡарата төшөрөлгән һүрәттәре, мәҡәл-әйтемдәр яҙылған плакаттар.

(Слайдтарҙа Башкорт халыҡ эпосын төрлө телдәрҙә башҡарыусыларҙың VIII халыҡ-ара конкурсында ситтән тороп ҡатнашыу формаһында Урал батыр эпосында “Иң яҡшы юл күрһәтеүсе” номинацияһында еңеүсе 8 класс уҡыусыһы Гәрәева Лиананың эше файҙаланылды)

**Сара барышы:**

Ҡурай моңо аҫтында йәйрәп ятҡан Урал тәбиғәте мультимедиа проекторҙа күрһәтелә.

**1-се уҡыусы**

Башҡортобоҙ биләгән
Урал изге йортобоҙ.
Еребеҙгә ерегеп,
Йәшәү – беҙҙең йолабыҙ.

**2-се уҡыусы**

Башҡортостан – илебеҙ,
Урал – сәхрә еребеҙ.
Яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ
Ҡылып торор йәнебеҙ.

( Ике алып барыусы сәхнәгә сыға)

**1-се алып барыусы.**

Ҡәҙерле дуҫтар, бөгөн беҙ һеҙҙең менән Урал батыр уҙған юлдар буйлап сәйәхәткә сығабыҙ. Юлыбыҙ мажаралы ваҡиғаларға бик бай булырға оҡшап тора.

**2-се алып барыусы.**

Бөгөнгө сәфәребеҙҙең нигеҙендә быуындарҙан быуындарға күсер аҫыл ынйылар: Урал батыр эпосы  тип аталған поэтик ҡомартҡы һәм Башҡортостандың халыҡ шағиры Абдулхаҡ игебаевтың “Урал тауышы” лиро-эпик поэмаһы ята.

Башҡорт халҡының бөтә донъяға билдәле эпостарының береһе – Урал батыр. Уны 1919 йылда хәҙерге Баймаҡ районы Иҙрис ауылында йәшәүсе Ғәбит Арғынбаев(1856-1921) һәм Этҡол ауылында йәшәүсе Хәмит Әлмөхәмәтов (1861-1923) сәсәндәрҙән Мөхәмәтша Буранғолов яҙып алған.

**1-се алып барыусы.**

Урал батыр эпосы – бынан 4 мең йылдан ашыу элек ижад ителгән.Ул 4576 поэтик юлдан тора. Эпос композицияһы яғынан өс быуын батырҙары хаҡында һөйләй, өс өлөштән тора.

Был мәһшүр эпос ижад ителгән осор менән беҙ йәшәгән заман араһында тиҫтәләгән быуат ята.  Шуныһы ғәжәп: кешенең күңел донъяһы йылдар арауығына ла, заман шауҡымына ла әлләни бирешмәй. Яратыу-яратмау, яҡшылыҡ-яманлыҡ, киң күңеллелек – көнсөллөк, асыҡлыҡ – аҫтыртынлыҡ, ғәмлелек – битарафлыҡ, йомартлыҡ – ҡарунлыҡ кеүек сифаттар һаман йәшәп килә әле. Милләтебеҙҙең быуаттар төпкөлөнән килгән күңел хазиналарын тәләф итмәйенсә, йәшәйеш фәлсәфәһен, йолаларҙы дауам итеүҙе үҙ эсенә алған Абдулхаҡ Игебаевтың  “Урал тауышы” поэмаһы эпос менән ауаздаш.

**(Слайд. Боронғо ғаиләнең йәшәгән төйәге).**

Сәхнәгә Урал батыр эпосын ятлаған балалар бер-бер артлы сығалар.

**1-се уҡыусы.**

Борон- борон борондан,

Кеше – маҙар килмәгән,

Килеп аяҡ баҫмаған,

Ул тирәлә ҡоро ер

Барлығын һис кем белмәгән,

Дүрт яғын диңгеҙ ураткан

Булған, ти, бер урын.

Унда булған, ти, борон

Йәнбирҙе тигән ҡарт менән,

Йәнбикә тигән бер ҡарсыҡ.

**2-се уҡыусы**

Тора-бара ул икәү

Ике уллы булып киткән, ти,-

Шүлгән булған олоһо,

Урал булған кесеһе.

Бүтән кеше күрмәйенсә,

Тик йәшәгән дүртеһе-

Донъя маҙар йыймаған,

Ҡашыҡ-аяҡ тотмаған,

Ҡаҙан аҫып, ҡамыр баҫып,

Улар донъя көтмәгән.

Ауырыу-һыҙлау күрмәгән,

Үлем барын белмәгән,

Барлыҡ нәмәгә үлем-

Үҙебеҙ, тип һанаған.

**2-се алып барыусы.**

Йәнбирҙе уландарына донъялыктағы мөһим мәсьәләләрҙе аңлатырға тырыша, ләкин улар һунарға сығып киткәс, балалары яңғыҙы ҡала. Өлкәндәр аңлап етмәһә лә, балаларҙың яңғыҙы өйҙә ҡалыуы күңел яраһына әйләнә. Урал бик тыңлаусан, тәрбиәле була, сөнки ул фекерен тәбиғәт ҡанундарына таянып төйнәргә тырыша, ә Шүлгән үҙ һүҙле, көнсөл бала булып үҫә. Шүлгәндең һәр саҡ яманлыҡҡа ҡайырыуы, яманлыҡты өҫтөн ҡуйыуы, тормошта еңел юл һайларға яратыуы, көнсөллөк, үс алыу һымаҡ насар ғәҙәттәре барлыҡҡа килә.

**(Слайд. Аҡкоштоң ҡыҙға әйләнеүе)**

**3-сө уҡыусы**.

Берҙән-бер көн дүртәүләп,

Былар ауға киткән, ти,

Күп ерҙәрҙе үткән, ти,

Күп йән алып, шатланып,

Ауҙан былар ҡайтҡан, ти.

Аулап алған ҡоштарҙың

Араһында бер аҡкош,

Аяҡтарын бәйләгәс,

Башын ҡырҡып ташларға

Бабай бысаҡ ҡайрағас,
Ҡанлы йәшен түккән, ти
Ил зарыны әйткән, ти:
“Ил күрергә сыҡтым мин,
Ер ҡошонан түгелмен,
Ебәрегез һеҙ мине,
Атам барыбер табыр ул,
Килеп яулап алыр ул.
Самрау тигән батшаның
Һомай тигән ҡыҙымын;
Алтын сәсем тарҡаһам,
Нурға илде күмәмен:
Көндөҙ ергә нур һибәм,
Кисен айға нур бирәм;
Ебәрегеҙ һеҙ мине,
Илемә мин ҡайтайым;
Йәншишмәнең һыу юлын
Һеҙгә әйтеп китәйем”.

**1-се алып барыусы.**

Был юлдарҙа тыуған иленән, туған мөхитенән айырылыу, иң ғәзиз, иң яҡын мөхиттән, күңел һыйыныр төйәгеңдән айырылыуҙың ни ҡәҙәр ауыр булыуын күрәбеҙ. Эпоста Тыуған илдә йәшәү өҫтөнлөгө, ғүмер итеү өсөн үҙ илеңдә яй табыу һәр саҡ зиһенгә һеңдерелә бара.

Ошонан күренеүенсә, илдән ситтә йәшәүҙе зарлыҡта үткән ғүмер тип һанаған башҡорт. Ошо аҡыл аңға һеңдерелә килгәндә лә башҡорт халҡы быуаттар буйы тамырҙары ереккән төйәге Урал өсөн ҡалҡан булып йәшәгән һәм әлегәсә йәшәй.

(Ҡыҙҙар башҡарыуында Аҡҡоштар бейеүе)

**2-се алып барыусы.**

Урал егет булып еткәс, ата-әсәһенән рөхсәт һорап, ил күреп ҡайтырға, йәнлектәрҙе, кешеләрҙе үлтереүсе әжәлде табып юҡ итергә, кешене мәңгелек үлемһеҙ итер Йәншишмә һыуын эҙләп табырға сығып китә. Йәнбирҙе ҡарт улдарына ҡоштар осҡан яҡҡа күҙ яҙмай китергә, арттарынан күҙәтеп барып, Йәншишмәнең урынын табарға, әгәр юлда үлем осраһа, башын ҡырҡып алып ҡайтырға ҡушҡан. Ике улын ике арыҫланға мендереп оҙатҡан ти. Йәнбирҙе бер ниндәй хәйләгә лә өйрәтмәй. Улдарын бәләкәйҙән үк көслө, ғәйрәтле, оһолло булырға ғына күнектергән.

Әйҙәгеҙ, дуҫтар, беҙ ҙә уларға эйәрәйек!

**1-се уҡыусы**

Урал, Урал, ҡыйыу егет Урал,
Тағат әле тарих йомғағын,
Сал быуаттар хәтирәһе булып
Күҙ алдыма килһен уҙғаның.

**2-се уҡыусы**

Ай, Уралым, уҙған юлдарыңда

Өйөрмәле ыжғыр елдәр бар,

Ер зыңҡытҡан ҡурғаш ямғырҙар бар,

Ләхет һымаҡ ҡара көндәр бар.

**3-сө уҡыусы**

Уралҡайым, һин бошонһаң,

Хәлеңде бер йыһан белгән,

Ҡояшың, гөл-сәскәләрең

Һине йәлләп былай тигән:

(Төрлө образдарҙы тасуирлаған балалар сыға)

**Сәскәләр:**

Уй-хәсрәтең ауыр-ауыр...

Ни хәл итеп йыуатырға?

Йөрәгеңдең йәрәхәтен

Нисек кенә уңалтырға

**Йылғалар:**

Мөмкин булһа, Урал, һиңә

Беҙ ҙә ярҙам итер инек,

Бөтә хәсрәттәреңде лә

Ағыҙып алып китер инек.

**Урмандар:**

Мәңге йылы биреп кенә

Торор инек, Урал, һиңә,

Тик ел үтмәҫ арамдан да

Ауырлыҡтар бәреп инә.

**Ҡояш:**

Уралҡайым, туғанҡайым,

Һинең өсөн йәнем һыҙлай,

Алда күрәһеләреңде

Нур менән дә юйып булмай.

(**Слайд. Ҙур бер ағас төбөндә аҡ һаҡаллы ҡарт**.)

**4-се уҡыусы.**

Аҡ һаҡаллы бер ҡартҡа

Былар барып еткән, ти.

Барып сәләм биргән, ти.

Ҡарт ҡаршы алған, ти,

Юл башыны быларҙың

Ҡарт та һорашып белгән, ти.

Ике юлды күрһәтеп,

Былай тиеп әйткән, ти:

“Бына һеҙгә ике юл:

**(Слайд. Һамрау батша иле)**

Һулға китһәң юл буйы-

Уйын-көлкө төн буйы,

Ҡайғы-этлек күрмәйенсә,

Барлығын да белмәйенсә,

Рәхәт йәшәй байманда;

Ҡан да эсмәй, ит еймәй,

Һис Үлемгә юл ҡуймай,

Йәшәп килгән бер ил бар;

Яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ

Ҡыла торған йола бар.

**1-се алып барыусы.**

Нимә ул Юл башы? Был юлдарҙа кәңәш биреү – кәңәш алыу йолаһы тураһында аңлатыу бара. Ҡарт кәңәш биреү алдынан егеттәрҙең тотош уй башын, нимә уйлағандарын, ниндәй уй-ниәт менән, ниндәй маҡсат менән китеп барыуҙарын һораша, йәғни был юлға сығыуҙың төп сәбәбе ниҙә икәнен төшөнөп ала. Тимәк, кәңәш бирер алдынан, артабан юлға дөрөҫ йүнәлеш күрһәтеү өсөн кешенең тотош эске донъяһын өйрәнеү, “күҙ йөртөп “ алыу мотлаҡ икәнен аңлайбыҙ.

**(Слайд. Ҡатил батша иле)**

**5-се уҡыусы**

Уңға китһәң, юл буйы-

Илау-һыҡтау йыл буйы;

Яуызлыҡтан дан алған,

Батшаһынан, башҡаһынан

Ҡайғы, этлек күреүсе,

Ҡанлы йәшен түгеүсе,

Ҡатил батша иле бар.

Юлдар, юлдар фажиғәле,

Йәшенле ине;

О, шул юлдар ҙур көрәшкә

Әйҙәне һине!

**2-се алып барыусы.**

Юл сатында Урал менән Шүлгән йәрәбә һалыша.Йәрәбә буйынса Урал һул яҡҡа китергә тейеш булһа ла, ағаһы Шүлгәндең баш тартыуы арҡаһында, Урал уң яҡҡа – Ҡатил батша иленә китергә мәжбүр була.

**6-сы уҡыусы**

Халыҡ илап торғанын

Күҙ алдында күргәндә,

Йәнде алыр яуыз Үлем

Кешегә ҡулын һалғанда,

Ирмен тигән ир батыр

Шып-шым ҡарап торормо?

Яуыздарға юл ҡуйып,

Батыр ҡурҡып ҡалырмы?

**1-се алып барыусы**

Ысын батырлыҡ – ул яуызлыҡҡа юл ҡуймауҙа. Башҡорт яугирҙәре араһында бер генә һатлыҡ йәндең дә булмауы, илен, телен, ерен, тимәк, халыҡ киләсәген ҡурсалауҙы үҙ ғүмерҙәренән өҫтөн ҡуйыуҙары бына ниндәй тәрбиә ҡанундарына нигеҙләнгән.

**( Слайд. Әҙрәкә иле).**

**2-се алып барыусы.**

Урал батыр яуыз, ҡанескес Ҡатил ханды һәм йыландар батшаһы Ҡаһкәһәнең батшалығын ҡыйрата; ер аҫты һәм һыу аҫты батшаһы Әҙрәкәне үлтерә; яуызлыҡ юлына баҫҡан туғаны Шүлгән менән алыша.

**6-сы уҡыусы.**

Батыр булған ир-егет
Еңмәҫ нәмә булырмы?
Батырмын тигән ир- егет
Яуызға юл ҡуйырмы?
Утҡа ҡаршы һыу булыр ул,
Яуға ҡаршы тау булыр;
Үҙенә түгел барына
Ауырлыҡта юл булыр;
Батырҙан ил тарыҡмаҫ,
Батыр һис бер зарыҡмаҫ,
Яҡшылыҡтан ялыҡмаҫ,
Күккә менер баҫҡысһыҙ,
Ерҙе асыр асҡысһыҙ,
Яҡшынан эскәне – һыу булыр,
Ямандың эскәне - ыу булыр.

**1-се алып барыусы**

Урал батыр һәр ваҡыт эскерһеҙ, асыҡ күңелле була, һүҙгә ышана, физик көсөнә таянып эш итә. Шуның арҡаһында юлында бик күп хаталар ебәрә. Яуызлыҡҡа юл ҡуймай, ауырлыҡтар килгәндә юл асыусы батыр ул. Күп тапҡыр уны Һомай ҡотҡара.

Бөгөнгө көндә халҡыбыҙҙың юлын быуған һәр ҡаршылыҡ – яуызлыҡ тип атала. Халҡының йәшәйешенә янаған яуызлыҡтан юл таҙартып, юл асыусы узамандар – бөгөнгө көн батырҙары. Яу тигәне һуғыш ҡына түгел, ә көрәш. Йәшәү өсөн, рухи азатлыҡ өсөн, айныҡ, сәләмәт тормош өсөн көрәш. Ошо афәттәргә ҡаршы сығыусылар беҙ булырға тейеш, йәғни Урал батырҙың рухи вариҫтары – шәхестәр, быуынды-быуынға бәйләп торор батырҙар.

Урал ғорурланып:
Арыҫландай ажғырып,
Мәкергә ут яуҙырып,
Илен ҡурсып, яу сапҡан,
Төйәгем, тип йән атҡан
Батырҙарым бар минең, ау
Батырҙарым бар минең!
Баҫһа баҡыр иҙерлек,
Типһә, тимер өҙөрлөк,
Нәфрәтләнеп тондорһа
Дейеү башын өҙөрлөк
Батырҙарым бар минең, ау,
Батырҙарым бар минең!

**2-се алып барыусы.** Ә Шүлгән юхалыҡ, ике йөҙлөлөк, аҫтыртынлыҡ, башҡаларға хөсөтлөк ҡылыу кеүек сифаттарға эйә. Эпоста дан һәм мал нәфсеһенең ни тиклем “яман ауырыу” икәнлеге һәм нәфсеһен ҡандырыу – теләгенә ирешеү өсөн хатта иң яҡыны – ҡустыһы Уралдың ғүмеренә ҡул һуҙырға ла әҙер Шүлгән йөҙөндә күрһәтелә был яманлыҡ.

Ләкин бындай кешеләр башҡорт халҡында һирәк осрай торған күренеш. Эпостағы Һынсыл ҡарт кеүек донъяның асылын аңлаған Аҡһаҡалдар, Һомай кеүек аҡыллы, ауыр ваҡытта ярҙам ҡулы һуҙыусы кешеләр тормошто биҙәй.

**( Слайд. Йылғалар ағып сығыуы)**

**1-се алып барыусы**.

Йылдар үтә, Урал һаман яуҙа йөрөй. Һуғыш башланғанда тыуған балалар үҫеп етә.Урал батыр эргәһенә дүрт егет килә.

- Мин Яйыҡ улың. Әсәйем Ҡатил батша ҡыҙы!
- Ә минең әсәйем- Һомай. Исемем – Иҙел!
- Мин Нөгөш. Әсәйем – Гөлөстан!
- Мин – Һаҡмар батыр булам. Әсәйем – Айһылыу, атайым – Шүлгән. Беҙгә хыянат иткән Шүлгән хәҙер минең дошманым, ти.

**2-се алып барыусы.**

Урал батыр улдарына ҡылысын бирә, тауҙарҙы ярып, йылғалар яһарға ҡуша. Дүрт яҡҡа дүрт йылға ағып китә – Иҙел, Яйыҡ, Нөгөш һәм Һаҡмар.

Олоно оло итегеҙ,

Кәңәш алып йөрөгөҙ.

Кесене кесе итегеҙ,

Кәңәш биреп йөрөгөҙ,

тип төп васыятын әйтә Урал.

Башҡорт халҡында туғанлыҡ тойғйһо көслө булған.
Тимәк, тәрбиәлә быуындар сылбыры, айырыуса рухи тәрбиә сылбыры өҙөлөргә тейеш түгел.
**1-се алып барыусы.**

Урал батыр Йәншишмәне эҙләп таба, тереклек һыуын тирә-яҡҡа бөркөп, тәбиғәтте мәңге йәшел, йәнле итә.Урал батыр үлеп ҡала. Батырҙың кәүҙәһе башҡорттарҙың төйәген кәүҙәләндереусе Уралтауға әүерелә.

**(Слайд. Урал тау, Йәншишмә эргәһендә байрам).** Балалар милли кейемдәрҙә йүгерешеп сығалар.

**1-се бала.**

Иң бейек тау ҡайһы тау?- тип

Йондоҙҙарҙан һораным,

Ә йондоҙҙар йым-йым итеп

Һиңә баҡты Уралым;

Ай Уралым, Уралым!

**2-се бала.**

Иң күркәм тау ҡайһы тау? тип

Ағиҙелдән һораным,

Ағиҙелкәй көлә-көлә,

Һине ҡосто, Уралым;

Ай, Уралым, Уралым!

**3-сө бала.**

Иң моңло тау ҡайһы тау? тип

Йор ҡурайҙан һораным,

Ҡурай һинең моң-зарыңды

Көйләп бирҙе, Уралым;

Ай, Уралым, Уралым!

( Бер уҡыусы ҡурайҙа уйнай)

**4-се бала.**

Атай-олатайҙар төйәккәйе-

Күгәреп тә ятҡан Уралым-

Бына һинең бейек ҡаяңда мин

Таңалдында баҫып торамын.

Сулпан йондоҙ ихлас сәләм биреп,

Көмөш нуры менән алҡышлай,

Һары һандуғасың һайрай-һайрай

Йөрәк моңон миңә бағышлай.

**5-се бала.**

Әйтерһең дә инде Һомай ҡоштоң

Ҡау(ы)рыйынан ынйы һибелде,

Әйтерһең лә донъя өр яңынан

Сикһеҙ матурлыҡҡа күмелде.

Туғайҙарға баҡһам, гөлдәр көлә;

Офоҡтарға баҡһам- нур ғына...

Үҙәндәргә баҡһам,сылтыр-сылтыр

Шишмә булып шатлыҡ урғыла.

**6-сы бала.**

Сеү...өндәшмә, өнһөҙ генә тыңла,

Тауҙар йырлай моңон-һағышын..

Ана ниндәй ғорур, ниндәй хозур,

Ишетәһеңме Урал тауышын?!

Тыңлайыммы зәңгәр диңгеҙҙәрҙә

Тулҡындарҙың ярға ҡағышын,

Әйтерһең дә, тулҡын шауҙарында

Ишетәм мин Урал тауышын!

Үҙ яҙмышым итеп тойғанға ла

Тыуған еркәйемдең яҙмышын,

Йөрәгемдең һәр бер тибешендә

Ишетәм мин Урал тауышын!

**7-се бала.**

Күрегеҙсе күпме гөлдәр

Сер бүлешә Уралтауҙа!

Дуҫлыҡ гөлө гөрләп үҫкән

Уралымдай ер ҡайҙа?

Ҡарағыҙсы, нисә төрлө

Аҫыл таш бар Уралтауҙа!

Таштарында нур уйнатҡан

Уралымдай ерҙәр ҡайҙа?

Тыңлағыҙсы, йәнде арбап

Ҡурай сыңғырай Уралтауҙа!

Ҡурайына саф моң биргән

Уралымдай ерҙәр ҡайҙа?

( Ҡыҙҙар башҡарыуында “Ҡурай сәскәһе” бейеүе)

Ерҙәр ҡайҙа? Йондоҙ, ай ҙа

Уға ғашиҡ мәңге шулай...

Башҡорт, рус, татар, сыуаш...

Уралымды һөйөп туймай..

Күп милләтле халыҡтарҙың

Ҡот-төйәге – ғәзиз Урал,

Татыулыҡтың, туғанлыҡтың

Ҡояшынан, әйҙә, нур ал!

Күкрә, дуҫлыҡ иле, Урал!

**1-се алып барыусы.**

Шулай итеп, Урал батыр эпосы геройҙары йөрөгән юлдар буйлап сәйәхәтебеҙ тамам. Эпос беҙҙе Йәнтөйәгебеҙ, Атайсалыбыҙҙағы барлыҡ тереклеккә иғтибарлы, хәстәрлекле булырға өндәй. Йәшәү сығанағы булған һыуыбыҙҙы бысратмайыҡ, шишмәләребеҙҙе таҙартып, тәрбиәләп торайыҡ. Тәбиғәтебеҙҙең матурлығын, еребеҙҙең имменлеген һаҡлап,

илебеҙҙе һөйөп йәшәйек. Батырыбыҙҙың изге аманатын килер быуындарға ла түкмәй-сәсмәй тапшырайыҡ!

**2-се алып барыусы.**

“Урал батыр” эпосының һәр һүҙе, һәр юлы фәһемле. Уҡыйыҡ, өйрәнәйек уны һәм, иң мөһиме – ундағы аҡылды тотайыҡ! Һәр ваҡыт күңелебеҙҙә Урал тауышы яңғырап торһон. Тыуған еребеҙҙең яҙмышына битараф булмайыҡ!

Сара балалар башҡарыуында “ Уралҡайым”( Тамыр йыр ансамбле репертуарынан) йыры менән тамамлана.

Әҙәбиәт


1. Урал батыр. Башҡорт халыҡ эпосы. [Башҡортсаға тәржемә Ә.Х.Хәкимов]. – Өфө : Китап, 2017. – 260 бит.
2. Игебаев А. “Урал тауышы” лиро-эпик поэмаһы // Игебаев А. Ғүмер аяулы.(шиғырҙар, поэмалар, ҡобайырҙар). – Өфө: Китап, 2015. – 366-397-се биттәр
3. Ғәбитова З.М., Усманова М.Ғ. Башҡорт теле. – Өфө: Китап, 2017.
4. Урал батыр. Башҡорт халыҡ эпосы. – Өфө: Китап, 2017.
5. “Урал батыр” эпосын мәктәптә өйрәнеү. – Өфө. “Эшлекле династия”, 2010.
6. Бураҡаева М. “Урал батыр” эпосында заманға ауаздаш тәрбиә алымдары // Йома – Башҡортостан. – 2018. – 16 март.
7. “Аҡ тирмә” милли-мәҙәни үҙәге төбәк-ара йәмәғәт ойошмаһы. “Халҡым һеҙгә шуны әйтәм...” ( “Урал батыр” эпосынан) – Өфө, 2019.

**Хамитова Р.Р.**

*Башҡортостан Республикаһы*

*Өфө районы Алексеевка урта дөйөм белем биреү мәктәбе МБДББУ*

# Башҡорт ырыуҙары

# (Кластан тыш сара. Этно-квест уйыны)

Маҡсат: Башҡортостан тураһында белгәндәрҙе иҫкә төшөрөү; башҡорт ырыуҙарын, үҙенсәлекле тамғаларын өйрәнеү; тыуған илгә һөйөү, патриотик рух, Бащкортостан тарихына, халҡына ихтирам тәрбиәләү; уйын аша белем алыуҙы, ҡыҙыҡһыныу тойғоһон уятыу.

Һаумыһығыҙ, хөрмәтле тамашысылар, ҡунаҡтар, уйынсылар! Минең "Ырыуҙаш" этно-квест тапшырыуыма рәхим итегеҙ! Һеҙҙе, алып барыусы, Резеда Хәмитова сәләмләй. Бөгөн беҙҙә ҙур байрам –ырыуҙар йыйыны.
-Нимә һуң ул йыйын? Иғтибар экранға! (Видео ҡарау "Ырыуҙар йыйыны")

Борон-борондан халыҡта йыйылып, кәңәш итеү, килеп тыуған төрлө бәлә-ҡаҙаға ҡаршы һүҙ ҡуйышыу, сәсән һүҙен тыңлау йолаһы булған. Уны йыйын тигәндәр. Йыйындарҙа ырыу, ҡор тормошона бәйле төрлө мәсьәләләр хәл ителгән. Бына шулай йыйын тарихы.

Башҡортмон тигән башҡортка етмеш төрлө һөнәр өҫтөнә ете быуынға саҡлы үҙенең ата-бабаларын, үҙ ырыуының шәжәрәһен, ил-йорт тарихын яҡшы белеүе шарт.

Мин бөгөн һеҙгә бик ҡыҙыҡлы уйын тәкдим итәм. Уйындың ҡағиҙәләре менән танышып китәйек. Һеҙгә уйын барышында төрлө турҙарҙа эштәр башҡарырға тура киләсәк. Әгәр эште үтәй алһағыҙ, тәңкә һеҙгә төшә. Уйын аҙағында үҙенсәлекле тамғалар ярҙамында башҡорттарҙың төп ете ырыу атамаһын белербеҙ.

Ә, хәҙер уйынсылар менән танышып китәйек.
1 се төркөм менән - Исем уйлана.

Күршеңә тапшыр! Исемеңде әйт, түңәрәк буйлап-йылмай,күҙеңде ҡыҫ!...
Ҡулдарҙы өҫкә күтәрҙек, ҡулдарҙы берләштерҙек. Бына команда ойошто.
2 се төркөм менән – Исем уйлана

Исемеңде әйт! Күршеңә тапшыр-мосолмандарса ике ҡуллап күреш!
Ҡулдарҙы күтәреп устарҙы сәпәкәйләштерәбеҙ. Икенсе команда ла эшкә әҙер.

Таҡтаға тирмә, малай, ҡыҙ һүрәттәре элenә.
Этно-квест уйынын башлайбыҙ.

1-се тур.
2 төркөмгә лә эш бирелә.
Һеҙҙе бында малайҙар менән ҡыҙҙар ҡаршы ала икән.
Улар һеҙгә эш әҙерләгән.

Түңәрәк эсендә тамға - Һәнәк, Даға

Алдығыҙҙа таблица ята, шунан ҡарап был тамға нимә аңлатҡанын әйтергә кәрәк. Был тамғалар ҡайһы ырыуҙыҡы икәнен белер өсөн башваҡкыс сисергә тәкъдим итәләр. Ырыу исемдәре башваҡкыс эсендә йәшеренгән. (Юрматы. Тамъян исемдәре килеп сыға).

Тирмәгә ырыу атамаһын, тамғаларын беркетәләр. Магнит таҡтаға йәбештереп ҡуялар.

Тәңкәләр һалына.

2 -се тур.

Был ҡыҙҙар, малайҙар ниндәй эш әҙерләне икән. Шулай уҡ тирмәләр эленә.

Конвертты асалар унда ла тамғалар. Таблицанан ҡарайҙар, был тамға нимәне аңлата? Сүмес, Ҡаҙаяҡ.

Был тамғалар ниндәй ырыуҙыҡы икәнен белер өсөн һеҙгә ярҙамға ике әйбер, предмет кәрәк буласаҡ, ә ул предметтар ноҡот борсағы (фасоль), көнбағыш араһына йәшеренгән. Тапҡан әйберҙәрегеҙ серле һүҙҙәрҙе уҡырға ярҙам итер. (Береһенә көҙгө, икенсе төркөмгә лупа йәшерелә). Табын һүҙен көҙгө ярҙамында, Мең һүҙен лупа ярҙамында уҡыйҙар.

Ҡыҙҙар, малайҙар һеҙҙең яуаптар менән ризалар.

Тирмәгә ырыу атамаһын, тамғаларын беркетәләр. Магнит таҡтаға йәбештереп ҡуялар. Балалар, ә һеҙ беләһегеҙме Өфө ҡалаһы, Өфө тирәһе районлар ниндәй ырыуға ҡарай икән? Һеҙгә Алексеевка уҡыусылары сәләмдәрен еткерәләр. Видеоролик ҡарау. Иҫтәлеккә мең ырыуы значоктары таратылып бирелә. Өфө ҡалаһы һәм Өфө районы мең ырыуы биләмәһендә урынлашҡан.

Тәңкәләр һалына.

3-сө тур. Был туҡталышта беҙҙе кемдәр һәм ниндәй эштәр көтә икән. Шулай уҡ таҡтаға тирмә, малай, ҡыҙ һүрәте эленә.

Бына һеҙгә тағы сер. Тамғалар-Ҡойошҡан,Ҡапҡа.

Таблицанан ҡарап был тамғалар нимә аңлатҡанын әйтәләр.

Беҙ ҡайһы ырыу биләмәһендә икәнбеҙ, йә әйтегеҙ.

Ҡойошҡан, Ҡапҡа тамғалы ырыуҙар нисек атала икән, был серҙе сисергә кәрәк.

Шифр йәшерелгән мәҫьәләне сисә алһағыҙ, йоҙаҡлы тартма эсендә яуабын табырһығыҙ. (Үҫәргән-532,Ҡыпсаҡ-235 кодтары йоҙаҡтың арҡы яғына ябештерелеп ҡуйылған була. Уйынсылар кодтарҙы алып барыусыға күрһәткәндән һуң, асҡыс менән йоҙаҡты асалар, ырыу атамаһы һүҙҙәре шул йәшерен тартма эсендә була).

Тирмәгә ырыу атамаһын, тамғаларын беркетәләр. Магнит таҡтаға йәбештереп ҡуялар.

Тәнкәләр һалына

4- се турҙы бергә уйнайбыҙ. Был турҙа, уйындың бағыусыһы, Алексеевка йәшелсәләр үҫтереү совхозы һеҙгә күстәнәстәр әҙерләне (Алексеевка совхозы логотипы экранда сыға)

Бында беҙҙе ырыу башлығы Мостафа олатай көтә икән. Тирмә янына һүрәте эленә.
Ул нимә, ти:
Тамғам – яғалбай (тамғаһы күрһәтелә)
Илем-Баймаҡ.
Ниндәй ырыуҙың башлығы икән Мостафа олатай?
Бында тамғаның атамаһын беләйек. (Яғалбай икәнен әйтәләр).

Олатайыбыҙ һеҙгә ребус әҙерләгән, ошо ребустарҙа нимә исемдәре йәшеренгән икән, бергәләп уйлайбыҙ. (Интернет селтәре аша һүҙҙәрҙе эҙләргә була).
Шаран, Мәсетле, Дүртөйлө.
Асҡын. Балтас, Баймаҡ .
Ә хәҙер ошо ребусты ла сисһәгеҙ, ырыу атамаһын әйтә алырһығыҙ.
(Бөрйән. Бөрө-почка һүҙен интернеттан ҡарарға була).
Тәңкәләр һалына. Афариндар.

Һанап сығайыҡ әле, беҙ нисә ырыуҙа булдыҡ. Ҡайһы ырыуҙың ниндәй тамғаһы барлығын белдек? Шулай итеп, үҙенсәлекле тамғалары ярҙамында башҡорттарҙың нисә төп ырыу атамаһын белдек? Башҡорттарҙың төп ете ырыу барлығын белдек. Был ябай ғына тамғалар булманы, улар мисәткә, йә гербҡа тиң булған. (Тәңкәләр һанала, еңеүсе команда билдәләнә).

Ошоноң менән беҙҙең уйын тамам. Һәҙҙең менән "Ырыуҙаштар" этно-квест уйынын ойоштороусы Резеда Хәмитова булды.

Мең ырыуы ватсап төркөмөнә ҡушылырға онотмағыҙ!

Һау булығыҙ! Киләһе осрашыуҙарға тиклем!

| ПЛЕМЯ | КЛИЧ | ДЕРЕВО | ПТИЦА | ТАМГА |
|---|---|---|---|---|
| **ТАМЪЯН** (ТАМЬЯН) | Тутыя (тутыя) | Тирәк (тополь) | Ҡарға (ворона) | |
| **ЮРМАТЫ** (ЮРМАТЫ) | Аҡтайлаҡ (актайлак) | Өйәңке (ветла) | Әтәлге (кречет) | |
| **ТҮҢГӘҮЕР** (ТАНГАУР) | Ҡуңырат (кунырат) | Һайыҫҡан (сорока) | Ерек (ольха) | |
| **БӨРЙӘН** (БУРЗЯН) | Аҡтуған (актуган) | Имән (дуб) | Ҡарсыға (ястреб) | |
| **ҮҪӘРГӘН** (УСЕРГАН) | Мөйтән (муйтен) | Миләш (рябина) | Торна (журавль) | |
| **ҠЫПСАҠ** (КЫПСАК) | Туҡһаба (туксаба) | Ҡарама (вяз) | Бөркөт (беркут) | |
| **ӘЙЛЕ** (АЙЛИНЦЫ) | Һандал (хандал) | Муйыл (черемуха) | Аҡҡош (лебедь) | |
| **ҠАТАЙ** (КАТАЙ) | Тайлаҡ (тайлак) | Артыш (можжевельник) | Ҡауҙы (аист) | |
| **ТАБЫН** (ТАБЫН) | Салауат (салават) | Ҡарағас (лиственница) | Ҡараҡош (стервятник) | |
| **МЕҢ** (МИНЦЫ) | Алас (алас) | Ҡайын (береза) | Ҡарсыға (ястреб) | |



**Харасова Р.Г.**

*ПДО СП ЦДТ ГБОУ СОШ №1*

*им. И.М. Кузнецова с. Большая Черниговка муниципального района*

*Большечерниговский район Самарской области*

# «Великая дочь Большого Иргиза»
# (план мероприятия)

**Цель :** воспитание чувства патриотизма и любви к родному краю.

**Задачи:**

- способствовать формированию уважительного отношения к творческому наследию земляков;
- ознакомить обучающихся с творчеством первой башкирской писательницы землячки Хадии Давлетшиной;
- создать условия для развития интереса к культурному наследию башкирского народа;
- способствовать формированию навыков публичного выступления;

**Оборудование:** Ноутбук, видео проектор, микрофон, подборка музыки.

**Наглядность:** фотографии, презентация.

**План мероприятия**

1. Слово преподавателя. “Хадия Давлетшина – гордость моей деревни Хасьяново”.

2. Выступления обучающихся:

а) родная деревня (место рождения), семья Хадии;

б) учеба;

в) первые рассказы;

г) работа над романом «Иргиз»

3. Родословная Хадии (материал из работы «О бурзянских корнях башкирской писательницы Хадии Давлетшиной» М.М.Маннапова-к. и.н.ИИЯЛ УНЦ РАН).

4. Чтение стихов местных поэтов о Хадии из сборника «Певцы Иргиза», в издании которого участвовали сами обучающиеся объединений, продукт проекта «Певцы Иргиза».

5. Рассказ-презентация педагога (Увековечение памяти нашей землячки В Самарской области: Мемориальная доска в нашем Большечерниговском районе, в с. Большая Черниговка; в п. Костино Камень-памяти, посвященый Хадии от бывших земляков Баймакского района, с. Зилаир Башкортостана (2007г.); в соседнем Большеглушицком районе с. Ташкустьяново установлена стелла (2021г.), где запечатлено и ее имя.)

6. Видео-интервью с земляком Х. Давлетшиной Хафизовым Ю.Р. «История камни – памяти Хадии Давлетшиной в п. Костино».

Рассказывает Кутлахметова Ивилина.

7. Показ ролика «Хадия Давлетшина» – первый этап большого проекта «Жемчужина деревни Хасьяново».

8. Итог мероприятия: Выйти с предложением в общественность: Увековечить память Хадии Давлетшиной в родной деревне Хасьяново.

(обсуждение вопроса об установлении мемориальной доски, задумки обучающихся каким её представляют).

9. Игра сложите из букв слова, должно получится «Жемчужина деревни Хасьяново» , итак проект продолжается. Удачи всем!

**Яхина Г.Р.**

*МБОУ ООШ с.Юнны Илишевского района Республики Башкортостан*

# «Семь чудес моего села»

# (классный час-экскурсия)

**Цель: расширение и углубление новых знаний учащихся об истории родного села.**

Добрый день, ребята! Я очень рада вас сегодня приветствовать! Ребята, посмотрите друг на друга, улыбнитесь и пожелайте удачной работы. А теперь послушаем песню. О чем говорится в этой песне? Да, о путешествиях! Ребята, а вы сами любите путешествовать? **(Слайд 1)**

- А сегодня мы с вами вместе отправимся на необычную экскурсию. А куда, вы узнаете только тогда, когда разгадаете этот ребус. Будем разгадывать по буквам. **(Слайд 2)**

- Итак, куда мы отправимся на экскурсию? (Хором: в село **ЮННЫ)** **(Слайд 3)**

Село Юнны- это ваша малая Родина. А что же такое, по- вашему, Родина? (1-2 ответа) Действительно, Родина, родной край – это все, что нас окружает, это все то, что с первых дней нашей жизни становится для нас таким же дорогим, как воздух, вода, хлеб, как улыбка близкого и родного края. Это место, где живет наш род, где мы растем, учимся, трудимся. Родина – это то, что есть сегодня: наши города и села, наши луга и леса, наш народ, наша школа. Но это и то, что было здесь у нас раньше: наша древняя история и культура, наши памятники и традиции. Родина – это и наше будущее; то, что будет на нашей Земле. Это надежда на радость и счастье. Это, наконец, уверенность: здесь нам лучше всего будет жить.

**Начинаем экскурсию по нашей малой Родине - селу Юнны «Семь чудес моего села» Запишите число и тему экскурсии в своих путевых листах. (Слайд 4).**

Никто точно не знает, когда было основано наше село. Но, говорят, проходил через эти места мужчина, которого звали Юньле. Местность ему очень понравилась, так как протекает большая река, много озер и лесов. И построил он себе небольшой домик около реки Базы, жил там и занимался охотой, рыболовством. Потом к нему переехали его родные, близкие, знакомые. Так возникло наше село, которое назвали Юньле. Потом это название видоизменили, деревня стала называться Юнны. Наши предки были очень трудолюбивыми. Они занимались земледелием, скотоводством, бортничеством, охотой, рыболовством. К природе относились очень уважительно. Они считали, что если им Бог дал такие богатства, то их надо беречь.

**Приближаемся к первой остановке нашего маршрута – памятнику, посвященному памяти погибших на полях сражений ВОВ. (Слайд 5)** Памятник построен жителями села Юнны в 1985 году согласно решению заседания правления колхоза «Башкортостан» к 40-ой годовщине Победы в Великой Отечественной войне в дань памяти 166 воинов, ушедших из с.Юнны и погибших на полях сражений в Великой Отечественной войне. Памятник был открыт 9 мая 1985 года, а в 2020 году была полностью обновлена и дополнена информацией о воинах, вернувшихся с ВОВ живыми. **(Слайд 6).**

Ребята, посмотрите, нет ли среди этих имен ваших родственников? (2-3 ученика: Ландыш, Гульнара, Ринат).

Наша страна не смогла бы победить в этой страшной войне без тружеников тыла, которые снабжали всех хлебом. Не зря говорят, хлеб-всему голова. И сегодня труженики села трудятся во благо всей страны. Приближаемся к КФХ Ялалова- это наша вторая остановка. **(Слайд 7 ).** КФХ Ялалова- один из знамененитых хозяйств не только района, но и всей страны по размножению элитных сортов сельскохозяйственных культур. Оно основано в 1992 году. Ежегодно реализуют элитные сорта семян яровой пшеницы, гречихи, проса, рапса. Неоднократно становились победителями республиканских, всероссийских конкурсов. Возглавляет хозяйство Ялалов Ильдар Фирдависович. Он любит повторять пословицу: БУДЕТ ДЕНЬ – БУДЕТ И ХЛЕБ. **(Слайд 8)**

А давайте теперь проверим знаете ли вы пословицы о хлебе.

(идет работа в группах). **(Слайд 9)**

БЕЗ ХЛЕБА КУСКА ВЕЗДЕ ТОСКА.

БЕЗ ХЛЕБА СЫТ НЕ БУДЕШЬ.

СЫТЫЙ СЧИТАЕТ ЗВЕЗДЫ НА НЕБЕ, А ГОЛОДНЫЙ ДУМАЕТ О ХЛЕБЕ.

ХЛЕБ НОГАМИ ТОПТАТЬ – НАРОДУ ГОЛОДАТЬ.

ХЛЕБОМ ЛЮДИ НЕ ШУТЯТ.

БЕЗ УМА ПРОКОЛОТИШЬСЯ, А БЕЗ ХЛЕБА НЕ ПРОЖИВЕШЬ. **(Слайд 10)**

**И запишите свою пословицу в своих путевых листах**

**Приближаемся к третьей остановке- это основная школа с. Юнны. (Слайд 11).**

До 1912 года в деревне Юнново дети обучались в маленьком неказистом здании медресе. Обучение велось только в религиозном направлении и сводилось к заучиванию сур из Корана; старших шакирдов учил старший мулла, а младших- несколько учителей - халфы. Школа современного типа (жадид) была организована в 1913 году. Соверменное здание школы было построено в 1969 году на средства колхоза «Башкортостан». Гордость школы- её учащиеся. Они ни раз защищали честь школы на конкурсах, соревнованиях различного уровня. Мы заслуженно гордимся Героем Социалистического Труда Яхиным Ф.Ф., Заслуженным врачом РБ Хазиповой Л.Г., Отличником мед службы РБ Яппаровой Л.Г. и др.

**Следующая наша остановка – кабинет истории, парта Героя.**
**Наш герой- Герой Социалистического Труда Файзелгаян Яхин.**
**(Слайд 12).**
Сообщение о нашем Герое нам подготовила Азалия. Пожалуйста.

**Файзелгаян Яхин** родился 9 июня 1923 года в деревне Юнново, в семье крестьянина. Учился в Юнновской школе, затем — в ФЗУ, работал на различных заводах. Участвовал в Великой Отечественной войне. Награжден орденом Отечественной войны II степени. После демобилизации работал в ДОСААФ, а с 1958 года был председателем колхоза «Октябрь». За трудовые успехи на производстве в 1966 году ему присвоено звание Героя Социалистического Труда. Он стал известен всей республике. Он проводил эксперименты по определению лучших сроков и способов сева пшеницы, углублению пахотного горизонта.

Спасибо.

Файзелгаян Яхин посвятил свою жизнь Земле родной. А вы, ребята, что можете отдать своей Родине, чтобы вы сделали для родной земли?

-У каждого из вас на парте лепесток ромашки, ответьте письменно на этот вопрос: **“ Если хочешь быть со мной, что отдашь Земле родной?”**

(Ребёнок должен написать, что он сделает для Родины, когда вырастет, например: посажу сад, буду строить красивые дома...). **(Слайд 13).**

**- Вот мы приближаемся к реке Базы- это наша пятая остановка**
**(Слайд 14)**
**А что вы знаете, ребята, о реке Базы. (Карина)**

Длина реки Базы составляет 123 км, площадь бассейна — 1 590 км², общее падение — 150 м. Питание Базы преимущественно снеговое. База берёт начало из родника в лесной местности, в 2,5 километрах к востоку от деревни Михайловка Шаранского района и протекает с юга на север по населённой местности по территории Шаранского, Чекмагушевского, Илишевского и Дюртюлинского районов Башкортостана. Впадает в реку Белая (Агидель) в 110 километрах от её устья.

**Продвигаемся по улице Мира, и доходим до следующей остановки- Гора Акбур. (Слайд 15).**

Горы Акбур. На этих горах люди добывали мел. Юнновский мел был очень популярным. Его всегда продавали на ярмарках. Он приносил жителям хорошие доходы.

Аккуратно спускаемся с горы. **Наша дорога ведет к роднику «Кызылъяр» - эта наша последняя остановка (Слайд 16).**

Этот родник расположен недалеко от реки Базы в живописном месте, оттуда открывается прекрасный вид на село, лес и горы. Старожилы говорят, что он был обнаружен давно, Бьющий из-под земли ключ издавна пользовался популярностью среди жителей села. И из других мест ехали сюда люди, так как рядом, говорят, была водяная мельница на берегу реки Базы. Хозяином мельницы, говорят, был Биккул, который следил и за родником. Он установил деревянный сруб и по мере разрушения вновь его

менял. После смерти Биккула  за родником следил мужчина по имени Тимербай. Давно уже нет в живых  Тимербая, но источник продолжает существовать, не замерзая даже в зимнее время, притягивая к себе путников. Вода родника «Кызыл  яр» очищает организм, выводит шлаки, оказывает омолаживающее воздействие. Возьмите с собой это чудо-воду и угостите своих близких. А вот эти маршрутные листы подарите своим близким и пройдите еще раз  этот путь вместе с ними. (БУКЛЕТ)

**Ведущий**: Бына беҙҙә бөгөн һеҙҙең ҡаршығыҙға Дауытовтар ғаиләһенең 28 быуындан торган шәжәрәһен тәҡдим итәбеҙ. Үҙҙәренең тамырҙары менән таныштырыу өсөн уларҙы саҡырабыҙ. (Рассказ Даутовых о своих предках).

***(Мультимедийный экран: фото памятника С. Юлаева. Звучит «Марш Салавата», муз. Х.Ибрагимова (на фоне музыки звучит кубаир).***
***Ребенок читает отрывок из народного кубаира*** «Салават Юлаев».
**Инсценировка из произведения Степана Злобина «Салават Юлаев».**
***Появляется Салават Юлаев. В руках нож, за плечами лук со стрелами.***

**Сабантуй**

**Ведущий.** Җилферди чиккән сөлгеләр,
Бүләкләр күбебезгә.
Көрәшик тә, узышыйк та:
Сабантуй бүген бездә! (Дети рассказывают стихотворения о сабантуе).
***(Стелится полотно, мальчики показывают борьбу "Корэш")***

**Татарский танец**

**1ребенок.**
Башкортостан күкрәгендә
Жәйрәп ята Борай жире.
Урманнары, болоннары,
Елгалары чишмэ, күле.
**2ребенок.**
Бәхет тоеп яшәр өчен
Килгәнбез без шушы жиргә.
Бәхетле балачак өчен
Рәхмәт, дибез, Туган илгә.

**Ведущий.** *Одним из районных центров Башкортостана, является село Бураево.* Названо село так в честь башкира-вотчинника Ергозина Бурая. *Наша маленькая родина красивая и живет своей интересной и полноценной жизнью, которая свойственна многим селам нашей необъятной России. Районному центру 406 лет. Это немалый срок, за время которого Бураево нажило свою историю. У нас нет больших гор или большой реки, но несмотря на это наш край по-своему чудесен и красив.* Также наша родина славится своими певцами, поэтами, танцорами и конечно же Бураевским медом! *(Дети рассказывают стихотворения о меде).*

*Вот так и живет село Бураево, благоустраивается, цветет и народ со светлыми надеждами смотрит вперед.* ***(Презентация Бураево).***

***Вед.:*** *Хәр төбәкнең узенең тарихи урыннары бар. Безнең Борай районының да легендалашкан урыннары да бар. Шуларның берсе Бакалы авылындагы «Әулия чишмәсе».*

***Инсценировка "Аулия чишмәсе", девочки в голубых накидках сидят изображая родник, к роднику подходят бабушка с внучкой.***

***Внучка:*** Дәүәнием, кара әле нинди матур жир! Чиста суы белән чишмә дә агып ята. (Имитирует, на руки воду черпает и пробует).
***Бабушка:*** Әе кызым, бу чишмэ тылсымлы чишмэ.
***Внучка:*** Ә ни өчен?
**Бабушка:** Бик куптэн булган бу хэл, кызым. Кышкы сувык урманда бер шәкерт адашып шушы жиргә килеп чыга.Ул бик нык өшегән була. Яңа гына мәдрәсәне тәмамлап кыска сувык кыш көнендә шушы тау аша Карыш авылының мәчетенә хезмәт итергә барган. Күрәсең, ул бик нык хәлсезләнгән булган,шушында ял итергә утырган һәм мәнгелеккә йоклап киткән. Аны жан биргән урынында жирләгәннәр һәм кабере өстенә таш куйганнар. Жәй көнендә, көтмәгәндә шушы таш астыннан чишмә ургылып чыккан. Тирә-яктагы авыл кешеләре бу тауга "Әулия тауы", ә чишмәгә "Әулия чишмәсе" дигән исем биргәннәр. Бу чишмәнең суы эссе жәйләрдә шундый салкын, йомшак, тәмле. Аны эчсән көч-дәрт арта, битеңне –кузеңне юсаң-ул сафлана.
Куе урманның тар сукмагыннан кешеләр хаман да шушы чишмә суын эчәр өчен баралар. Ләкин чишмә изге куңелле кешеләргә генә юлын курсәтә, ә начар куңелле кешеләр чишмә юлын табалмай икән. Тапкан хәлдә дә, чишмә суын корыта, изге кешеләр өчен яңадан ургылып чыга.
***(Тихонечко девочки встают на танец. А бабушка с внучкой уходят).***

**Танец девочек**

Шат авазлар яңгырасын
Туган жирем кырларына.
Киләчәк буын кушылсын
Безнең бәхет жырларына.

***Ведущий:*** *на любой карте наша республика похожа своими очертаниями на человеческое сердце. Про хорошего человека <u>говорят:</u> « У него доброе сердце», а что можно сказать о нашей республике? Очень многим можем мы гордиться. Но главная гордость-это люди. Люди разных национальностей которые живут в нашей республике.*

***Ведущий читает на башкирском языке стихотворение К. Аралбаева «Дуҫлыҡ йорто».***

**Русский танец.**

**<u>Ведущие вместе</u>**. Башкортостан - надежда наша. Как я люблю тебя! В твой день рождения желаем:

<u>Все</u>: **Цвети**, **Республика моя**!

**Песня «Цвети, родной Башкортостан».**

**Баһауетдинова З.М.**
*Башҡортостан Республикаһы Борай районы МР*
*Борай ауылының 1- се балалар баҡсаһы*
*“Гүзәл” баланы үҫтереү үҙәге” МБМББУ*

# Балалар баҡсаһында «Бәпес күреү» йолаһы

**Маҡсат**: Борон - борондан килгән ата-бабаларыбыҙҙың тормошона, бай тәжрибәһенә нигеҙләнгән күренештәрҙе күрһәтеү, балаларҙа үҙ халҡының ғөрөф- ғәҙәттәренә ҡыҙыҡһыныу уятып халҡыбыҙҙың матур йолаларын береһе «Бәпес күреү» йолаһы менән таныштырыу, йәш быуынды милли рухта тәрбиәләү. **Йыһазландырыу**: сәңгелдәк, башҡорт орнаменттары төшөрөлгән балаç, ҡурсаҡ, самауыр, аш-һыу, һауыт-һаба.

**Алдан эшләнгән эштәр:** йырҙар, шиғырҙар ятлау, башҡорт халҡының йолалары тураһында әңгәмә үткәреү, «Йәшерәм яулыҡ » уйынын өйрәнеү.

Сәхнә башҡорт йорто һымаҡ матур итеп биҙәлгән. Сәңгелдәк эленеп тора. Иҙәндә балаç, уның өҫтөнә сәк-сәк, ҡоймаҡ, бал, самауыр менән сынаяҡтар ҡуйылған.

**Балалар сыға. Ҡобайыр әйтә**ләр.
**Илнур**. Бер тигәс тә ни яҡшы?
**Айзиля.** Берҙәм булыу- шул яҡшы.
**Марат.** Ике тигәс тә ни яҡшы?
**Тимур**. Икеләнмәү- шул яҡшы.
**Әзәлиә.** Өс тигәс тә ни яҡшы?
**Гүзәл.** Өс туғаның берҙәм булып ,яҡшы йәшәү- шул яҡшы.
**Марат**. Дүрт тигәс тә ни яҡшы?
**Мансур.** Дуç,татыу булып берҙәм йәшәү -шул яҡшы.
**Илнур.** Биш тигәс тә- ни яман?
**Элина**. Ҡурсаҡ һымаҡ өй эсендә бишек булмау - шул яман.
Сығып китәләр.
Сәхнә артында көй яңғырай. Өләсәй, йәш әсә менән бала тирбәтә.
Өләсәйҙең балаға әйткән теләктәре яңғырай:
БӘПЕС ҠАЙТТЫ
Аллаһ биргән бүләк булып бәпес ҡайтты,
Бәпес менән бер яҡтылыҡ, шатлыҡ артты..
Ғаиләгә өмөт тә һин! Ышаныс һин!
Йүгертәһең үҙ тирәңдә йәш, олоһон .
Әле һин тәмле йоҡлайһың бер ни белмәй,
Әсәйеңдән башҡаларҙы яҡын күрмәй,

Үҫ һин, бала, атай-әсәй араһында,
Өләсәйҙәр, олатайҙар уртаһында.
Иманлы бала булып үҫ!
Туған телле! Һинең йәшәгән илкәйең ожмах иле,
Ата - әсәң - алтын ҡанатың.
**Йәш әсә.** Бөгөн беҙҙә ҙур байрам-бәпесебеҙ тыуҙы,
Кеше артты донъяла, Аллаға шөкөр.
Аллаға шөкөр, улыбыҙ донъяға килде.
Тупраҡтай сабыр бул,
Тупраҡтан табыр бул,
Тупраҡтай таҙа бул,
Тупараҡтан алған балам!
Ағзаң теүәл булһын,
Аҡылың теүәл булһын,
Изге бала бул!

Ишек шаҡыйҙар.
**Өләсәй**: – Беҙҙең бәпесебеҙҙе күрергә ҡунаҡтар килгән икән.
Матур итеп кейенгән әсәләр менән балалар инә. Ҡулдарында бүләктәр, тәмлекәстәр.
**1 -се әсә: –** Һаумыһығыҙ!
**Өләсәй: –** Әйҙәгеҙ, ҡунаҡтар! Түрҙән үтегеҙ. Ҡунаҡ булығыҙ!
**2-се әсә:-** Беҙ Алмаздың тыуыуы менән ғаиләгеҙҙе ҡотларға тип килдек. Беҙ бәпескә бүләктәр, күстәнәстәр алып килдек. Бауырһаҡ, сәк – сәк алып килдек. (Сәңгелдәк *янына килеп, баланы ҡарайҙар, кейеҙ аҫтына һабын ҡуялар, бүләктәр тапшыралар.)*
**3-сө әсә:** – Улым, улым, кил әле, ҡара әле. Һин дә ошолай сәңгелдәктә яттың, үҫтең. Хәҙер ниндәй ҙур булдың. Алмаз да баһадирҙай көслө, матур, таҙа булып үҫһен. (Балаларға бәпесте күрһәтә).
**Балалар.** Һаумыһығыҙ,инәй.
**Өләсәй**. Һаумыһығыҙ,балалар.
**Гүзәл.** Беҙ бәпес күрергә килдек.
**Тимур.** Майлы ҡоймаҡ ашарға килдек.
**Әзәлиә.** Бәхетле булһын, сәләмәт булһын.
**Йәш әсә:** Рәхмәт изге теләктәрегеҙ өсөн.
**1-се әсә.**
Бала тыуғас,уны апаһына йәки ағаһына йөҙөнән алда аяғын курһәткәндәр. Шулай итһәң, улар татыу була, өлкәне кесеһен йәберләмәй.
**2-се әсә.**
Ҡырҡ көн үтмәйенсә, төндә утты һүндерергә һәм баланы яңғыҙ ҡалдырырға ярамай.
**3-сө әсә**.

Баланың ҡулына ҡыҙыл сепрәк бәйләп,маңлайына ҡором һөртөргә кәрәк, юғиһә кешеләрҙең күҙе тейә, бала сырхау була.
**Йәш әсә:** Балама күҙ тейеп ҡуймаһын, маңлайына ҡором һөртөп ҡуяйым әле.
**1- се бала:-** Һәтес, һәтес, һәтес тә
Бигерәк матур бәпес тә,
Кем ҡарамай, кем һоҡланмаәй
Бындай матур бәпескә.
**2 - се бала:-** Һәттәй – һәттәй, һәттәй ҙә
Бәләкәй генә бәпәй ҙә
Әйҙә, ерҙә бер мин тип.
Өҫкә һикергән тәпәй ҙә.
**3 -сө бала:-** Үҫеп китермен әле
Айға етермен әле,
Космонавт булып алһам,
Шунда көлөрһөң әле.
**4 - се бала**:- Әлли- бәлли көйләрмен.
Әкиәттәр һөйләрмен,
Һиңә теләк теләрмен,
Бәхетле бул тейәрмен.
5 б.:- Бәү- бәү бәпкәһе,
Ҡайҙа киткән әсәһе?
Ҡайҙан эҙләп табаһы.
Туҙ бишеккә һалаһы.
**1 - се бала**: - Кеше артты донъяла. Ризығы менән, төклө аяғы менән!
Бәхетле, сәләмәт бул!
Тәүфиғең, аҡылың үҙеңдә булһын.
**2- се бала**: Әсәйеңә ярҙамсы, атайыңа иш бул.
Уҡып ҙур кеше бул.
**1 - се әсә**: - Ырыҫ – бәхетең, төклө аяғың менән!
Сабыйым, аталы - әсәле бул,
Үҙ бәхетең менән үҫ, бал-май
Эсендә йөҙ, тырыш бул,
**2 - се бала:** - Миһырбанлы, аҡыллы, изгелекле бул,
Әсәйең менән атайыңа терәк бул,
Ярҙамсыл, игелекле бул.
**3 - сө әсә :** - Иҫән – һау йөрө, бәлә - ҡазанан һаҡ бул,
Дошмандарға бирешмә, юҡҡа- барға ирешмә,
Бәхетле бул, эштәреңдә тәхетле бул,
Яҡшыға ла яҡшы, шаҡшыға ла яҡшы бул.
**4 - се әсә**: - Боҫло ашты бора баҫма,
Юлың булыр асыҡ таҫма,
Ҡурҡмайынса алға атла,
Ат менән атҡанға таш менән атма,

Яуызлыҡҡа – яманлыҡҡа батма,
Дан өсөн дуҫтарыңды һатма,
Һынауҙар килһә, һынатма.
**Өләсәй:** - Улыбыҙ сәсле тыуған.
Ғүмере оҙон булһын.
Бөҙрә генә сәсле тыуҙы.
Әсәһе өҙөлөп торһон.
Дүрт күҙ араһында
Үҫергә яҙһын балабыҙға.
**Өләсәй.** Рәхмәт балалар теләктәрегеҙ өсөн, бигерәк аҡыллыһығыҙ икән. Әйҙәгеҙ ултырышығыҙ.
Балалар иҙәнгә йәйелгән балаҫҡа ултырышалар.
**1-се бала:** - Өләсәй, элек башҡорт халҡында ниндәй юрауҙар булған, һөйләгеҙ әле.
**Өләсәй:** - Бәпесебеҙ йоҡлаған ваҡытта беҙ башҡорт халҡының йолалары тураһында һөйләшеп алайыҡ. Бына элек баланы ен – шайтандан, яман күҙҙән һаҡлау йолаһы булған. Бала тыуғас та, уны ен-шайтан алмаштырыуҙан һаҡлағандар. Ҡырҡ көн үтмәйенсә, төндә утты һүндерергә ярамай. Баланы яңғыҙ ҡалдырып сыҡҡанда, өҫтөнә бысаҡ йә ҡамсы һалырға кәрәк булған.
Әсә: – Ә бына мин ошондай йола беләм. Бала тыуғас уҡ, уға иң тәүҙә «эт күлдәге» кейҙерәләр. «Эт күлдәгенең» еңе лә, итәге лә бөрөп тегелмәй, ә ике яҡ ҡырынан ғына тегелә. «Эт күлдәген» кейҙерһәң, балаға ен-шайтан килмәй йәнәһе.

Эт күлдәге төрлө (ете төрлө) ҡораманан тегелә. Ете төрлө ҡораманы өй һайын йөрөп йыйып алалар, шунан ҡоршап тегеләр. Шайтан күлдәген балаһы тыуып та, тормаған ҡатындарҙың яңы тыуған балаһына кейҙерәләр. Күлдәктең матурлығына ҡыҙығып, шайтан балаға зыян итергә онота, ти.
**1-се әсә: -** Был йола бала тыуып, өс көн үткәс тә үткәрелә. Тәүҙә майға ғына ҡоймаҡ ҡойола, шунан биш-алты йәшлек малайҙар саҡырыла. Ҡоймаҡты сәңгелдәккә бала эргәһенә һалалар. Малайҙар шул ҡоймаҡты алабыҙ тип, ҡулдарын һуҙалар сәнгелдәк эргәһендә ултырыусы әбей уларҙың ҡулдарына «һуға», малайҙар «илай». Күҙгә күренмәгән ен-шайтандар уларҙың шулай ҡысҡырғандарын ишетә лә: «Әһә, быларҙы туҡмаған кеүек беҙҙе лә туҡмар», – тип сәңгелдәккә килмәйҙәр.
**2 - се бала: –** Баланың ҡулына ҡыҙыл сепрәк бәйләп, маңлайына ҡором һөртөргә кәрәк, юғиһә, кешеләрҙең дә, ендең дә күҙе тейә, бала сырхау була.
**Өләсәй: –** Сабыйҙың сәсен тәүге алыу ҡарын сәсен алыу була. Уны теләһә кемдән түгел, ә күңелгә оҡшаған кешенән генә алдырырға кәрәк. Ә бына сабый саҡында ҡарын сәсен алынмаған кешене рәнйетергә ярамай. Юҡҡа рәнйетеүсегә ҡаты төшә. Ҡарын сәсен

утҡа яғырға ярамай, уны төрөп, ҡыҫтырып ҡуялар. Ҡырын сәсен алыусыға ата-әсә бүләк бирәләр.

**Өләсәй:** -Борон, башҡорттоң яҙылмаған шундай ҡануны йәшәгән: ирмен тигән ир-егет һәм ҡыҙҙар ата-бабаһының кәмендә ете быуынын, ырыуының шәжәрә ебен, халҡының ҡобайырын, йыр-моңон белергә тейеш булған. Хәҙерге ваҡытта ла өлкән йәштәге кешеләр үҙҙәренең эштәре, һүҙҙәре, көйҙәре, йыр-моңдары менән балаларҙы, йәштәрҙе тәрбиәләүҙә, киләсәк быуында милли рух, тәрбиә биреүҙә ҙур роль уйнай. Бала тәрбиәләгәндә иң мөһиме булып быуындар бәйләнеше, ғаиләлә әсә-ата тәрбиәһе, олатай-өләсәй тәжрибәһе, ярҙамы бик кәрәк. Сәңгелдәк йырҙары ҙур тәрбиәүи көскә эйә, баланың теле асылыуҙа, зиһенен уятыуҙа иң тәьҫирле тәрбиә сараһы булып тора ул. Бала күңеленә әсә наҙы сәңгелдәк йыры ярҙамында бирелһә, ғүмерлек була. (Бәпес илаған тауыш).

**Өләсәй: –** Бәләкәсебеҙ арып та киткәндер инде, малайҙар, ҡыҙҙар, әйҙәгеҙ уны бишек йыры йырлап, сәңгелдәктә бәүелтеп, йоҡлатып ебәрәйек.

Барыһы бергә сәңгелдәк ҡырына баралар, баланы һалып, әсә бәүелтеп йырлай.

**Өләсәй башҡарыуында йыр.** Дәрдмәндтең “Бәллү” шиғыры, Р.Әхъярова көйө.

Ҡыйғас ҡашым, аҫыл ташым,
Йоҡлайыҡ икәү,
Йоҡла, иркәм. Йоҡла, бәбкәм.
Әлли -бәлли, бәү.

Елбер - елбер,
Һин бик тилбер-
Күбрәк уйнайһың.
Ал - гөлдәрҙе,
Сөмбөлдәрҙе өҙөп туймайһың.
Кил, гөлкәйем, сөмбөлкәйем,
Йоҡлайыҡ икәү.

Юл юлдашың
Һәм юлдашың,
Һиңә бар эштә,
Һәм һаҡлаусы,
Һәм яҡлаусы

Булһын фәрештә.
Йоҡла, иркәм,
Йоҡла, бәбкәм,
Әлли -бәлли,бәү.
**1 - се бала:** Әйҙәгеҙ бәпес йоҡлағанда әйтештәр әйтеп алайыҡ.
**Балалар. (**Әйтеш)
**Малайҙар**: Әйтегеҙ әле, ҡыҙҙар,нисек һыуға баралар?
**Ҡыҙҙар**. Бына шулай, бына шулай, шулай һыуға баралар.
**Ҡыҙҙар**. Әйтегеҙ әле, малайҙар, нисек утын яралар?
**Малайҙар.** Бына шулай,бына шулай,бына шулай яралар.
**Малайҙар.** Әйтегеҙ әле, ҡыҙҙар, нисек ҡамыр баҫалар?
**Ҡыҙҙар.** Бына шулай, бына шулай, бына шулай ҡамыр баҫалар.
**Ҡыҙҙар.** Әйтегеҙ әле, малайҙар, нисек бесән сабалар?
**Малайҙар.** Бына шулай, бына шулай, бына шулай бесән сабалар .
**Бөтәһе бергә.** Әйтегеҙ әле, дуҫтар, нисек күңел асалар?
**Бөтәһе бергә.** Бына шулай,бына шулай, бына шулай бейеп күңел асалар. (Бейеү).
**Өләсәй**. Һай, афариндар. Эй афарин, балалар, бигерәк күңелле һеҙҙең менән.
**Өләсәй .** Балалар, беҙ йәш саҡта уйындар уйнай инек, ә һеҙ уйын беләһегеҙме?
**Балалар.** Эйе.
«Йәшерәм яулыҡ" уйынын уйнай инек.
("Йәшерәм яулыҡ" уйынын уйнау).
Йәшерәм,йәшерәм яулығымды
Йәшел ҡайын артына.
Һиҙҙермәйсә һалып китәм
Бер иптәшем артына.
**Өләсәй.** Һай, афариндар.
**Йәш әсә:** *(сәңгелдәк янына килеп)*
Эй, улым, уяндыңмы? Тыңлап яттыңмы? Ашайһың да киләме? Кил әле үҙемә, кил әле. *(Әсә баланы ҡулына ала.)*
Алмазым уянған, әйҙәгеҙ әле бергәләп матур һүҙҙәр әйтәйек әле.
Һуҙылһын, һыу буйы булһын,
Киерелһен, кәртә буйы булһын,
Тәүфиҡле, бәхетле булһын.
**Өләсәй:** Ә хәҙер бәпес сәйенә саҡырам. Рәхим итегеҙ. Әйҙәгеҙ, үҙегеҙ алып килгән күстәнәстәр менән сәй эсеп алырбыҙ.Ҡоймағым да өлгөрҙө.

Әҙәбиәт

1. Ғөбәйҙуллина Ф.Х. Беҙҙең байрамдар. – Өфө, 2004.
2. Сөләймәнов Ә.М. Бала-сағаның уйын фольклоры. – Өфө: Китап, 2007.
3. Ғәләүетдинов И.Ғ. Балалар фольклоры. – Өфө: Китап, 1994.

4. Аҙнабаева Ф.Ғ., Шафиҡова Г.Р. Тәбиғәт һәм кеше. Методик ҡулланма. – Өфө: Китап, 2012.

**Ғәлләмова Н.А.**

*Башкортостан Республикаһы*

*Борай районы Борай ауылының 5-се һанлы балалар баҡсаһы*

## Ҡарға бутҡаһы

**Бурыстар:**

**Өйрәтеү:** Балаларҙы халҡыбыҙҙың мәжүси байрамдары менән таныштырыуҙы дауам итеү.

**Үҫтереү**: Ҡарга бутҡаһы мәжүси йола-байрамы, ырымдары, уйындары, таҡмазалары аша һөйләм телмәрен үҫтереү.

**Тәрбиәүи:** Халҡыбыҙҙың боронғо йола-байрамдарына ихтирам тәрбиәләү.
**Йыһазландырыу:** Ҡоштар рәсемдәре, бутка бешереү өсөн ҡаҙан, балалар һанынса ҡашыҡ-һауыттар, уйын өсөн-яулыҡ, магнитофон.
**Балалар менән әҙерлек эштәре:** Алдан шиғырҙар өйрәнеү.
**Тәрбиәсенең әҙерлек эше:** Кисәне үткәреү өсөн урын әҙерләү, уйындар өсөн атрибуттар әҙерләү.

**Кисә барышы:**

**1-се бала:** Асылды аҡ ҡалын юрған

Иҫте апрель елдәре.

Ҡоштар ҡайта, һағындыра

Тыуып- үҫкән ерҙәре.
**2-се бала:**

Көндәрен юлда үткәреп

Ҡыуанышып осалар.
Ҡанаттарында күтәреп

Яҙ килтерә бит улар.

**«Яҙ саҡыра» йыры (Н.Дәүләтколова).**

**3 бала :** Эй яҙ-матур, яҙ-матур,

Хуш киләһең, уҙ бире.

Ҡунаҡ булып килер тиеп,

Күптән көттөк беҙ һине.

**Карина :** Бөрө суҡтары менән,

Сыйырсыҡтары менән,

Яҙ килә, Яҙ килә,

Яҙ ишектәрҙән керә.

**«Ҡояшкай көлә» йыры ( Р. Сәлмәнов муз., Ҡ. Даян һүҙ.)**

**Алып барыусы ( А.Б.)** Борон-борон заманда кешеләр ни өсөн яҙ булғанын белмәгәндәр, ти. Улар яҙҙы йылы яҡтарҙан ҡара ҡарғалар алып килә тип уйлағандар. Ошоноң өсөн ҡарҙар иреп, һыуҙар аға башлағас, ҡарғалар килеү хөрмәтенә байрам яһай торған булғандар. Уны "Ҡарга буҡкаһы" йәки "Ҡарға туй" тип атағандар. Аҡланда уйнағандар, йырлағандар, күңел асҡандар. Ахырҙан бутҡа ашай торган булғандар.

(Ҡар-ҡар тип ике ҡарға осоп керәләр)

**Ҡарға** : Мин ҡарға,ҡарр-ҡарр.Тиҙҙән иреп бөтөр ҡар.
Ҡанатымда хатым бар, Буйың етһә, тартып ал.
**А.Б**: Уҡымай ҙа беләбеҙ бит. Хатыңда ни яҙғанын!
Бөтә ҡоштар һәм балалар // Матур яҙҙы һағынған.
**Әбей** : Һаумыһығыҙ, балалар. Был ниндәй тауыш? Ни тип гөрләшәһегеҙ?
**1-се ҡарға :** Балалар, беҙҙең килеү хөрмәтенә бөгөн Ҡарға бутҡаһы үткәрә . Ҡарр-ҡарр .
**2-се ҡарға**: Ҡаҙан аҫканһығыҙ ҙа бит, беҙҙе һыйларға һыйығыҙ бармы һуң?

*Әбей инә.*

**Әбей:** Булыр, ҡунаҡтар, барыһы ла булыр.
Ҡарға килер – ҡаҙан аҫыр,
Торна килер – тоҙ һалыр,
Һайыҫҡан килер – һалма һалыр.
Беснәк килер – бешерер,
Сыпсыҡ килер – тикшерер,
Ҡарға ашап бөтөрөр. Ҡап та ҡоп!

**2-се ҡарға:** Бутҡа бешер ҡаҙанда ,
Тәмле еҫ таралыр урманда.
Ҡарр –ҡарр, ҡарр-ҡарр.
**1-се ҡарға:** Ҡар-ҡар!
**2-се ҡарға:** Туйым етте, бар, бар!
**1-се ҡарға:** Матур яҙҙар алып килдек!
**2-се ҡарға:** Күңелле йәйҙәр килтерҙек!

**“Иҫәнмеһегеҙ, ҡошкайҙар” . Ш.Маннур.**

**4 бала:** Иҫәнмеһегеҙ,ҡошҡайҙар,
Беҙҙең яҡын дуҫҡайҙар!
Сәүкәләр, аҡсарлаҡтар,
Сыйырсыҡтар, турғайҙар.

Ҡыштан туйып бөттөк беҙ,
Һеҙҙе һағынып көттөк беҙ.
Һеҙҙе көткән арала
Күп нимәләр белдек беҙ.

Инде яҙ килде көлөп,
Һыуҙар аға йүгереп,
Беҙ оялар яһаныҡ
Һеҙ килер көндө белеп.

**5 бала: “Килегеҙ, кил, ҡошкайҙар”.**

Сыпсыҡ,сыпсыҡ,сыҡ-сырыҡ, Ем һиптем, кил тиҙ осоп.

Беснәк, беснәк, кил тиҙерәк,   Ем һибәм һиңә әҙерәк.
Сәүкә, сәүкә, кил сәүкә, Ем бирәм бер тәрилкә.
Күгәрсенем,гөр-гөр-гөр, Ем һиптем, бына күр,күр.
Ҡарға, ҡарға, һин ҡара, Ҡабып ҡал аҙыҡ барҙа.
Һайыҫҡан,ала ҡанат, Ем һибәм ҡабат-ҡабат.
Килегеҙ, кил, ҡошҡайҙар,  Һеҙ бит беҙҙең дуҫҡайҙар.
Баҡсабыҙҙа ҡунығыҙ, Көн дә ҡунаҡ булығыҙ.

**А.Б.:** Булдырҙығыҙ, балалар, бик матур һөйләнегеҙ. Ҡанатлы дуҫтарығыҙҙы рәнйетмәгеҙ, яуыз ниәтле малайҙарға ла юл ҡуймағыҙ.

(Балалар башҡарыуында ҡоштар бейеүе башҡарыла.)

**Әбей**: Әйҙәгеҙ, балалар, ҡарғалар килеү хөрмәтенә байрам яһайыҡ, уларға бутҡа бешерәйек. Беҙ өйҙәргә барып, дуҫтарҙы саҡырайыҡ, ҡарға бутҡаһына һый-хөрмәт кәрәк.

**6 бала:** Өйҙәме түтәй?
Йәһәтерәк бирсе күкәй!
Бирһәң беҙгә өс күкәй,
Тауығың һалыр 100 күкәй.
**Бергәләп:** Май кәрәк, ярма кәрәк,
Ҡарға туйына бар ҙа кәрәк.

**7 бала:** Тағын булһа – он сығар,
Бешерербеҙ беҙ сумар.
Шәкәр кәрәк,тоҙ кәрәк,

Сығар, түтәй, йәһәтерәк!
**Бергәләп:**

Һинең кеүек уңған түтәй
Был донъяла бик һирәк. (Балалар йырлап башҡа өйҙәргә китәләр).

**Әбей:** Мәгеҙ, балалар, мәгеҙ,
Байрамығыҙ ҡотло булһын!
**Бергәләп**:Рәхмәт, әбей!
**А.Б:** Һый етәрлек булды.Ҡарға бутҡаһын бешерергә ҡай ергә барайыҡ икән?
**Әбей**: Әйҙәгеҙ, балалар, яланға. Беҙ ҙә йәш саҡтарҙы иҫкә төшөрөп, бер елләнеп ҡайтырбыҙ. (Йылға буйына китәләр).
**8-се бала:** Атым егелгән, әҙер Ҡырға китәбеҙ хәҙер.
“Ҡарға бутҡа”һы көтә. Һый бөтәһенә етә.
**9-сы бала:** Оло ҡаҙан аҫырбыҙ Етерлек һыу һалырбыҙ.
Бутҡаға һәр кем туйыр. Бутҡа бешер ҡаҙанда
Тәмле еҫ таралыр урманда.
**10-сы бала:** Буғыр-буғыр бутҡа бешә, Уртаһына аҡ май төшә.
**Бергәләп:** Ямғыр, яу, яу. Ямғыр, яу, яу.
**11-се бала**: Ямғыр, ямғыр, ямғыр яу, Көмөш ҡаҙаҡ, уҡа бау.
Яу һин, яу, килеп кенә, Тыпырҙап бейеп кенә.
Самаһын белеп кенә. Ергә йәм биреп кенә.

**«Ямғыр» йыры.**

**Әбей**: Яланға төшкәс, ваҡытты бушҡа уҙҙырмайыҡ әле. Беҙ йәш саҡта уйнаған “Йәшерәм яулыҡ” уйынын уйнап алайыҡ. **“Йәшерәм яулык” уйыны.**

**Әбей**: Балалар, ярма ла бар, май ҙа, тоҙ ҙа бар, һыу ҙа булды. Беҙ бутҡаны бешерергә ҡуяйыҡ та, бутҡа бешкәнсе бейеп алайыҡ. **Эбей:** “Беҙ, беҙ, беҙ инек” уйынын беләһегеҙме, балалар?

(Бер-нисә төркөмгә бүленеп **“Беҙ, беҙ, беҙ инек”** уйыны уйнала).
**12-се бала:** Әке, мәке, ҡыйыҡ һике. Майлы бутҡа, эремсек.
Һин ҡалып тор, ә һин сыҡ.
**Ҡарғалар**: Бутҡа беште, бутҡа беште! (Иҙәнгә эскәтер йәйелә, балалар йырлашып, иҙәнгә ултыралар).

**Малайҙар:** Ал да итәйек әле, Гөл дә итәйек әле,
Күңелле итеп, бергәләшеп Бутка ашайыҡ әле.
Тәмле микән бутҡаһы, Ауыҙ итәйек әле.
Матур яҙҙы ҡаршылап, Байрам итәйек әле. (Әбей бутҡаны эскәтер өҫтөнә килтереп ҡуя).
**Әбей:** - Бына быныһы – Ер-анаға!
Ер атаһы - ерән һаҡал, Ер анаһы-аҫыл бикә!

Түбәһенә – туҡлығың бир, Тамырына-ныҡлығың бир,
Ил өҫтөнә муллығың бир, Ил эсендә беҙгә лә бир!
- Бына быныһы - һыуға, Һыу эйәһе ташламаһын!
- Бына быныһы - күккә, Ямғыр бирһен!
Ҡояшлы йылы көндәр бирһен! Илгә туҡлык, ғаиләгә именлек килһен!
-Быныһы - ҡарғаларға! Ҡанат остарында яҙҙы алып килгән өсөн!
**Ҡарғалар**: Ҡарр, ҡарр, һәйбәт дуҫтар барр, барр!
**Әбей:** Ә ҡалғаны - һеҙгә, балалар. Һыйланығыҙ. Муллыҡ килһен!
**А.Б** : Әбей, һеҙ оло кеше, һеҙ башлап ҡабығыҙ бутҡаны.

**А.Б:** Ҡарға бутҡаһы ашаған - Матур яҙға оҡшаған
Ҡара ҡарға ашамаһа - Ала ҡарға ашаһын.
Ала ҡарға ашамаһа - Ҡара ҡарға ашаһын!
Ҡарға килмәй-ҡар китмәй, Ҡарға килмәй - яҙ етмәй.
Ҡабул итеп йыйынды, Ҡабул итеп һыйымды,
Беҙгә ямғыр яуҙырһын, Битен йыуһын тау-ҡырҙың.
Илгә аслыҡ килмәһен, Игендәрҙе үҫтерһен
Беҙгә туҡлыҡ килтерһен!
**“Ҡояшлы ил” йыры башҡарыла. Ә.Рәшитов һүҙҙәре, Л. Батыр-Болгари көе**

**А.Б.:** Тып-тын һауа, нурҙар яуа, көн аяҙ.

Бар доньяға нурҙар һибеп килә яҙ.

Кил һин, яҙым, тиҙерәк кил, бик һағынып көтәбеҙ.

Йырҙар йырлап, һөйөп, ҙурлап, һине тәбрик итәрбеҙ!

Ашығабыҙ һине тиҙерәк күрергә.

Йәш үләндән ялан тәпәй йөрөргә.

Кил һин, яҙым, тиҙерәк кил,

Бик һағынып көтәбеҙ.

Йырҙар йырлап, һөйөп, ҙурлап, һине тәбрик итәрбеҙ!!

**Әғәҙуллина Р.Ғ.**
*Башҡортостан Республикаһы*
*Дәүләкән районыҠоръятмаç урта мәктәбенең*
*“Тамсыҡай” мәктәпкәсә йәштәге төркөмө*

## “Минең ғаиләмдә ҡунаҡта”

**Үткәреү формаһы**: белем биреү эшмәкәрлеге (шөғөл).
**Йүнәлеше**: телмәр үçтереү.
**Интеграция**: баланың донъяны танып белеү үçеше, физик үçеш.
**Бурыстар:**
**Белем биреү**: ғаилә ағзалары менән таныштырыу; балаларҙы башҡорт халҡының милли аш-һыуҙары менән таныштырыуҙы дауам итеү, һөт ризыҡтары менән яҡындан таныштырыу, ҡыҙыҡһыныу уятыу, эшләү ысулдары менән таныштырыу;
**Үçтереүсе**: балаларҙың иғтибарлылығын, бәйләнешле телмәрен, һорауҙарға яуап биреү оçталығын үçтереү;
**Тәрбиәүи**: башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәттәренә, милли аш-һыуҙарға ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм һөйөү тәрбиәләү.
**Эш формаһы**: Флүзә инәй менән осрашыу; йомаҡтар сисеү; «Тирмә» башҡорт халыҡ уйындары; һөт ризыҡтары меән танышыу; шиғыр ятлау.
**ТСО**: музыкаль үҙәк,компьютер, проектор.
**Йыһазландырыу**: ғаилә ағзалары тураһында презентация;магнитлы таҡта; ҡурай таждары; «Тирмә» уйынына ҡурай моңо, яулыҡтар, ултырғыстар; һөттән әҙерләнгән ризыҡтар.
**Белем биреү эшмәкәрлеге барышы:**
Балалар залға инә. Һаулыҡ һорашалар.
**Тәрбиәсе.** Бөгөн беҙҙең кәйеф шәп,
Күңелдәр күтәренке.
Көнөбөҙ гөрләп үтһен,
Ҡояштай көлөп торһон. (*Балалар ултырыша)*
Балалар, мин һеҙгә шиғыр һөйләп ишеттерәм. Иғтибар менән тыңлағыҙ. Нимә тураһында икән был шиғыр?
Бар бында атай- әсәй,
Олатай һәм өләсәй.
Бар ағай- апайҙарым,
Йүгереп йөрөй туғандарым.
Бына шундай ҙур,
Татыу беҙҙең -.....(ғаилә)
Эйе, тап шулай. Бөгөн беҙ һеҙҙең менән ғаилә тураһында һөйләшәсәкбеҙ.
Әйҙәгеҙ,экранға иғтибар итәйек.
-Һүрәттә кемдәрҙе күрәбеҙ? (1 слайд)*атай, әсәй, балалар*
-Ғаиләлә тағы кемдәр йәшәй? (2 слайд)*олатай, өләсәй*

Ә хәҙер һеҙҙе йомаҡтар иленә сәйәхәткә саҡырам. Мин һеҙгә йомаҡтар әйтәм, ә һеҙ яуаптарын табығыҙ.(*Тәрбиәсе йомаҡ әйтә, балалар яуап бирә.Яуап биргән бала магнитлы таҡтаға ҡурай тажын йәбештерә*).

Иртән иртүк ул тора,
Йыуа , тегә, бешерә.
Беҙҙе өҙөлөп ярата,
Тәмле сәйҙәр эсерә… (әсәй)
*(Бер- нисә баланан әйттерергә мөмкин.)*

Ә кем әсәй тураһында шиғыр белә? *(Бер бала шиғыр һөйләй. Шиғырҙан бер һөйләмде бергәләп ҡабатлау).*

Көрәк, балта ,сүкеш,
Ҡулында уйнап тора.
Беҙҙе эшкә өйрәтә,
Ватылғанды төҙәтә…( атай)

*(Атай тураһында шиғыр һөйләтеү. Шиғырҙан бер һөйләмде бергәләп ҡабатлау)*

Беҙҙе көн дә иркәләй,
Әсәйгә лә ул әсәй.
Тәмле ҡоймаҡ бешерә,
Ул бит беҙҙең… (өләсәй)

*(Өләсәй тураһында шиғыр һөйләтеү. Шиғыр ҙан бер һөйләмде бергәләп ҡабатлау)*

Аҡыллы кәңәш бирә
Атайға ул бит атай.
Өйөбөҙҙөң бер йәме,
Ул бит беҙҙең …..(өләсәй).

*(Олатай тураһында шиғыр һөйләтеү .Шиғыр ҙан бер һөйләмде бергәләп ҡабатлау.)*

Атай- әсәйгә ярҙамсы,
Мәктәптә улар уҡый.
Минең өсөн ҙур терәк,
Ҡәҙерле……. (ағай- апай)

Өйөбөҙҙө пыр туҙҙырып,
Уйынсыҡтарын ташлай.
Һәр кешене ярата,
Тәмлекәс һорай башлай …..(туғаным).

Бер- береһенә терәк,

Һәр ваҡыт улар кәрәк.
Бәхетле булам тиһәң,
Ҡәҙерен белер кәрәк.

*Проектор һүндерелә.*

Магнитлы таҡтаға ҡарайыҡ әле, балалар, нимә һүрәтләнде унда? (Ҡурай).
Ә нимә ул ҡурай? (милли музыка ҡоралы)

**Тәрбиәсе.** Афарин! Беҙҙең ҙур татыу ғаиләбеҙгә йәшәргә бик матур өй ҙә кәрәк. Төҙөйбөҙме, балалар? (Геометрик фигуралар ҡулланып , өҫтәлдә балалар картина төҙөй ).*Залда ҡурай моңо яңғырай.*



**Тәрбиәсе.** Ниндәй матур өй килеп сыҡҡан! Балалар, әйҙәгеҙ, билдәләйек, ниндәй геометрик фигуралар ҡулландыҡ?Уның ҡыйығы ниндәй формала (өсмөйөш)?Ниндәй төҫтә? (йәшел)Өй ниндәй төҫтә? (һары)Ниндәй формала? *Ағастарҙың,сәскәләрҙең, ҡояштың төҫөн билдәләү.*

*(Төҫтәр һәм гоеметрик фигураларҙы әйттереү)*

**Тәрбиәсе.** Арып киттегеҙме, балалар? Әйҙәгеҙ, беҙ һеҙҙең менән, башҡорт балаларының яратып уйнаған “Тирмәкәй” уйынын уйнап алайыҡ.

(Дәртле көй уйнай.“Тирмәкәй” уйынын уйнау.)

**Тәрбиәсе.** Эй, балалар, әйтергә онотоп торам. Беҙҙе Флүзә инәй һөт ризыҡтарын тәмләтергә ҡунаҡҡа саҡырғайны. Барабыҙмы?Нимәгә ултырып барабыҙ? (автобусҡа)
Автобусты бөгөн Арсен йөрөтә.

*Балалар “автобусҡа” ултырып, ҡунаҡҡа юллана.*

*2-се тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һорашҡандан һуң, ашъяулыҡҡа теҙеп ҡуйылған һөт ризыҡтары һәм самауыр янына саҡыра. Һөт төрҙәре һәм һөттән яһалған аҙыҡтар, уларҙың файҙаһы хаҡында һөйләп ишеттерә. Ҡорот, эремсек, май, ҡаймаҡ кеүек исемдәрҙе бергәләп ҡабатлайҙар. Ауыҙ итәләр.*

**Тәрбиәсе.** Флүзә инәйгә рәхмәт әйтәйек, балалар. Бик күп файҙалы мәғлүмәт бирҙе, һыйланы.

*Балалар һаубуллашып, кире “автобусҡа” ултырып ҡайтып китәләр.*

**Тәрбиәсе.** (йомғаҡ яһау) -Бөгөнгө көнөбөҙ матур үттеме , балалар?

- Нимәләр хаҡында һөйләштек?
- Ғаиләлә кемдәр йәшәй?
- Һөттән ниндәй ризыҡтар эшләп була?
- Кем һеҙгә тәмле һөт ризыҡтарын эшләп ашата?

Бөгөн күп нәмә белдек, күп эштәр атҡарҙыҡ. Афарин, балалар! Йомғаҡлап, әйҙәгеҙ, бергәләп, "Әсәй менән гөл ултырттыҡ" йырын йырлап үтәйек. (Йырлайҙар)

**Әлбәкова З.Й.**
*Башҡортостан Республикаһы Хәйбулла районы МР*
*Буребай ауылының «Ҡояшҡай» балалар баҡсаһы*
*муниципаль үҙ аллы мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы*

## «Тыуған төйәгем – Хәйбуллам»
## (мәктәпкә әҙерлек төркөмөндә тирә-яҡты танып-белеү үсеше шөғөлө)

**Үткәреү формаһы:** белем биреү эшмәкәрлеге (шөғөл).
**Йүнәлеше:** тирә-яҡты танып-белеү үҫеше.
**Интеграция:** телмәр үҫтереү, социаль-коммуникатив үҫеш, физик үҫеш.
**Бурыстар:**
***Белем биреү:*** балаларҙың тыуған районы тураһында белемдәрен нығытыу; райондың биш мөғжизәһе тураһында белемдәрен системалаштырыу; Ҡыҙыл китапҡа индерелгән ҡоштар, йәнлектәр, үҫемлектәре тураһындағы атамаларҙы нығытыу.
***Үҫтереүсе:*** балаларҙың иғтибарлығын, телмәр тасуирлығын, фекерләү һәләтен, ҡулдарҙың моторикаһын үҫтереү, хәтерҙе нығытыу.
***Тәрбиәүи:*** тыуған төйәккә һөйөү һәм һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.
**Эш формаһы:** (Р.Ниғмәти) "Ватан" шиғырын уҡыу, дидактик уйын "Маҡан йылғаһының һыубаҫар туғайҙары", дидактик күнекмә "Таштуғай тауҙары", физкультминутка, дидактик күнекмә "Ҡанифа һуҡмағы", дидактик күнекмә "Ҡайын-ҡабаҡ", "Шайтан-тау" интерактив уйыны, рефлексия.
**ТСО:** музыкаль үҙәк, телевизор, ноутбук.
**Йыһазландырыу:** Белмәҫйән геройы, Башҡортостан картаһы, ҡырҡырған һүрәттәр, "Ҡанифа һуҡмағы" темаһына һүрәттәр, пластилин, әүәләргә таҡталар, "Шайтан-тау" интерактив уйыны.

**Белем биреү эшмәкәрлеге барышы:**
*(Балалар ярым түңәрәктә ултырарар, ҡурай моңо яңғырай, тәрбиәсе шиғыр уҡый)*
**Ватан**
Ватан ул, ҡыҙым,-
Тыуған ил,
Бына һин торған урын.
Был ерҙә ғүмер кисергән

Атай-бабайҙар борон. (Р.Нигмәти)
**Тәрбиәсе:** Хәйерле иртә, балалар! Беҙ шөғөлөбөҙҙе бушҡа ғына был шиғырҙан башламаныҡ, нисек уйлайһығыҙ, ни өсөн ул яңғыраны? *(Балаларҙың яуаптары)*
**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ, беҙ бөгөн һеҙҙең менән Ватан тураһында һөйләшәсәкбеҙ. Балалар,нимә ул Ватан?
**Балалар:** Тыуған, йәшәгән еребеҙ.
**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ, ул кешеләрҙең иң ҡәҙерле, иң яратҡан ата-әсәһе бүләк иткән тыуған ере, йәшәү урыны. Балалар, беҙ ниндәй республикала йәшәйбеҙ?
**Балалар:** Беҙ Башҡортостан Республикаһында йәшәйбеҙ!
**Тәрбиәсе:** Афарин, М.Кәримдең шиғырында әйтеүенсә, Башҡортостан республикаһы ҡайын япрағына оҡшаған, шулай бит. Беҙҙең төпләнгән районыбыҙ нисек атала? *(Тәрбиәсе Башкортостан картаһын күрһәтә һәм Хәйбулла районына балаларҙың ҡараштарын йүнәлтә)*
**Балалар:** Беҙ Хәйбулла районында йәшәйбеҙ!
**Тәрбиәсе:** Дөп-дөрөҫ! Беҙ Хәйбуллалар!
*(ерәү ишекте шаҡый, тәрбиәсе барып аса һәм Белмәҫйән килеп инә)*
**Белмәҫйән:** Һаумыһығыҙ, балалар, һеҙ мине таныйһығыҙмы? *(Белмәҫйән).* Эйе, мин Белмәҫйән, дуҫтарыма ҡунаҡҡа китеп бара инем һәм аҙаштым *(илай),* мин ҡайҙа килеп эләктем ул?
**Тәрбиәсе:** Туҡта, туҡта, Белмәҫйән, илама әле, тыныслан, һин бик яҡшы ергә килеп эләктең, беҙ балалар менән бергәләп унын турала һөйләрбеҙ, бергәләп уйнарбыҙ.
**Белмәҫйән:** Ярар, һеҙ, балалар, беләһегеҙме ҡайҙа йәшәгәнегеҙҙе?
**Балалар:** Әйе, беләбеҙ! Беҙ Хәйбулла районында йәшәйбеҙ!
**Тәрбиәсе:** Белмәҫйән, хәҙер, балалар, районыбыҙ менән һинелә таныштырырҙар. Балалар, Белмәҫйәнде беҙҙең Хәйбулла районынының биш мөғжизәһе менән таныштырайыҡ.
**"Маҡан йылғаһының һыубаҫар туғайҙары" дидактик уйыны.**
**Тәрбиәсе:** Бына, балалар, һеҙҙең алдығыҙҙа дарыу үләндәренең ҡырҡылған һүрәттәре, шуларҙы йыяйыҡ һәм Белмәҫйәнгә улар тураһында һөйләп ишеттерәйек.
**Белмәҫйән:** Афарин, рәхмәт, һеҙгә! Һеҙҙең менән бик ҡыҙыҡ икән! Дарыу үләндәре тураһында күп нимәләр белдем инде!
**Тәрбиәсе:** Эйе, афариндар! Хәҙер, Таштуғай тауҙарының йәнлектәре тураһында йомаҡтар сисәйек.

**"Таштуғай тауҙары" дидактик күнекмәһе.**

Үҙе йомортҡа баҫмай,
Балаһын да баҡмай. *(кәкүк)*

Яңғыратып һыу буйҙарын
Һарай, алһыу таң тыуғас,

Моңло, дәртле … . *(һандуғас)*

Ҡатыҡты ла ул эсмәйҙер,
Эсмәйҙер ул һис тә һөт,
- Һөҙ һ-ө-ө-өт! - тип оҙаҡ өндәй
Тажлы башлы ҡош ... . *(һөҙһөт)*

Дала буйлап эҙләнә
Быҙау, бәрәстәр менән туҡлана *(бүре)*

Һоро, ҡыҫҡа, йыуантаҡ
Һыуыҡтан ҡурҡаҡ ҡына,
Яланда оя ҡаҙып
Ҡыш буйы йоҡлап сыға *(байбаҡ)*

Һары бәләкәй ҡошсоҡ
Яҙ етһә осоп ҡайта,
Флейта кеүек моңдары
Шундай наҙлы тауышлы *(төйөт)*

**Белмәҫйән:** Оһо, шундай йәнлектәр Таштуғай тауҙарында йәшәй икән, мин белмәгәйнем.
**Тәрбиәсе:** Шулай, ял итергә ваҡыт етте.

**Физкультминутка**

**Тәрбиәсе:** Балалар, әйҙәгеҙ, Белмәҫйәнгә Ҡанифа һуҡмағы тураһында һөйләп ишеттерәйек.

**“Ҡанифа һуҡмағы” дидактик күнекмәһе**

*(балалар алдан эшләгән һүрәттәре буйынса*
*“Ҡанифа һуҡмағы” тураһында һөйләйҙәр )*

**Тәрбиәсе:** Молодцы, Белмәҫйән, беҙҙең районда шундай “Ҡанифа һуҡмағы” бар. Тағыла бер ҡыҙыҡлы, тарихы менән бай “Ҡайын-ҡабаҡ” тигән урын бар, унда әлләмә нисә йыл буйҙарына ятҡан ҡабырсаҡтар табып була. Балалар, әйҙәгеҙ пластилиндан ҡабырсаҡтар әүәләйек.

**“Ҡайын-ҡабаҡ” дидактик күнекмәһе**

*(өҫтәлдәргә ултырып, пластилиндан ҡабырсаҡтар әүәләү)*

**Белмәҫйән:** Мин, ҡабырсаҡтың нимә икәнлегендә белмәгәйнем, рәхмәт, балалар, бик матур килеп сыҡты.
**Тәрбиәсе:** Хәйбулла районының бишенсе мөғжизәһе тураһында онотмайыҡ, ул “Шайтан-тау”.

**“Шайтан-тау” интерактив уйыны.**

*(интерактив уйында балалар “Шайтан-тауҙа” осраған ҡош,*
*йәнлектәр, үҫемлектәрҙе атайҙар)*

**Тәрбиәсе:** Был уйында ла, балалар, бик шәп башҡарҙығыҙ. Белмәçйән, инде беҙҙең Хәйбулла районы тәбиғәте тураһында бик күп нимәләр белдең инде.Әйҙәгеҙ, балалар, беҙҙең районыбыҙҙың ҡоштарын, хайуандарын һәм үçемлектәрен һаҡлайыҡ һәм яҡлайыҡтар!
**Белмәçйән:** Рәхмәт, һеҙгә, ҙур итеп! *(сәпәкәй итә)* Мин һеҙгә килеп эләккәнемә бик шатмын һәм рәхмәтлемен, тик мине дуçтарым көтә, һау булығыҙ! *(хушлашып сығып китә)*

## Рефлексия

**Тәрбиәсе:** Ошоноң менән беҙҙең шөғөлөбеҙ аҙағына ла килеп етте, балалар, һеҙ үҙегеҙ өсөн яңы нимәләр белдегеҙ? Оҡшанымы? Нимә оҡшаны? Барығыҙға ла ҙур рәхмәт!

## Әҙәбиәт

1.Николаева С.Н. Юный эколог. Система работы в подготовительной группе детского сада. Для работы с детьми 6-7 лет. – М.: МОЗАИКА - СИНТЕЗ, 2011.
2.ОТ РОЖДЕНИЯ ДО ШКОЛЫ. Основная образовательная программа дошкольного образования / Под ред. Н.Е.Вераксы, Т.С.Комаровой, М.А.Васильевой. – 3-е изд., испр. и доп. – М.: МОЗАИКА – СИНТЕЗ, 2016.

**Аллаярова З.И.**
*Башкортостан Республикаһы*
*Борай районы Борай ауылының 2-се һанлы “Йәйғор” балалар баҡсаһы*
**Ғөбәйҙуллина Г.З.**
*Башкортостан Республикаһы Борай районы*
*Салкаҡ урта дөйөм белем биреү мәктәбенең*
*Яңы Бикмәт ауылындағы мәктәпкәсә йәштәге төркөмө*
**Рамазанова З.Ғ.**
*Башкортостан Республикаһы Борай районы Таңғатар төп*
*дөйөм белем биреү мәктәбенең мәктәпкәсә йәштәге төркөмө*

# Милли уен коралы курай иленә сәяхәт

***Максат:*** балаларны башкорт һәм татар халыкларының милли тынлы музыка коралы курай һәм аның барлыкка килү легендасы белән таныштыру; башкорт халкының милли музыкаль коралына кызыксыну уяту; балалар белән музыкаль-ритмик хәрәкәтләрне ныгыту, башкорт милли көенә бию хәрәкәтләре эшләү; башкорт сәнгатенә сөю, музыкаль эстетик зәвык тәрбияләү; пластилиннан таякчык әвәләүне ныгыту; әвәләү аркылы балаларның бармак моторикасы эшчәнлеген, кул хәрәкәтләрен, уйлау сәләтен яхшырту, фантазияне баету, осталыкларын арттыру, пластилин белән әвәләп ясауга кызыксыну уяту; башлаган эшне азакка кадәр җиткерү сыйфаты формалаштыру; балаларның кәефләрен күтәрү, психоэмоциональ халәтләрен (игътибарлылык, фикерләү, уйлау, фаразлау, күз алдына китерү сәләтләре) яхшырту.

***Җиһазландыру:*** техник чаралар, ноутбук, күргәзмә, Башкортостан Республикасы символлары, сүрәтләр, музыка уен кораллары - уенчыклар, башкорт милли киемендэ курчаклар, персонаж: курайчы, курай-чәчкә макеты, балалар кулы белән эшләнгән курай рәсеме, пластилин, әвәләү өчен такталар, шырпылар, юеш салфеткалар.

Дәрес барышы.

*(Курай моңы. Балалар керәләр һәм бер-бер артлы урындыкларга утыралар.)*





*Тәрбияче:* Исәнмесез, балалар, исәнмесез кунаклар! Балалар, әйтегез әле, нинди халыкның милли киемен кигәнмен мин?
*Балалар барысы бергә:* Башкорт халык киеме.







*Тәрбияче:* Дөрес! Балалар, юкка гына мин сезне бу милли киемдә каршы алмадым.
Бүген без башкорт халкында киң таралыш тапкан музыка уен коралы турында күбрәк белергә дип килдек. Сез музыка уен коралларының тавышларын ишетерсез. Уен коралларының килеп чыгу тарихлары белән танышуны дәвам итәрбез. Һәм сезне башкорт халкының музыка коралы белән таныштырып үтәсем килә. Мин сезгә табышмак әйтәм, ә сез җавабын табыгыз:

1) Алты-җиде генә булыр
Тәнемдәге уемнар,
Миннән башка үтми иде
Аулак өйләр, уеннар. *(Курай.)*
*(Курай.)*

2) Голос птиц, мелодии расцвета –
Всё передает тростинка эта.
Он слов не говорил, наверняка,
Хоть голос есть - да нету языка.

3) Аягын-башын кистем, корсагын тиштем,
Эченә өрдем, моңайганын ишеттем. *(Курай.)*
(Курай)

4) Авызы бар – теле юк,
Тавышы бар – сүзе юк.






*Тәрбияче:* Курай сүзенең мәгънәсен дә ачыклап китик әле. Кыу сүзе эче буш дигәнне аңлата. Мәсәлән, куыш, кура җиләгенең сабагының дә эче буш.
*Тәрбияче:* Башкорт халкының милли музыка коралы - курай турында сез ишетеп берникәдәр беләсез. Менә ул курай! (Курайны күрсәтү). Курай − башкорт һәм татар халыкларының элек-электән үк киң таралган милли уен коралы булган. Курайның җиде таҗы – ул җиде ыру,






ә курай бердәмлек, татулык символы. Башкорт халкының җаны, йөрәге, көче, яшәү дәрте курай моңнарында чагылыш таба. Бик гади бу уен коралы башкорт халкының рухи бөеклеген раслаучы иң тылсымлы музыка коралы. Башкорт халкы бик моңлы, җыр-бию яратучан. Башкортлар элек-электән озын көйләрне яратканнар.

Курай турында бик күп легендалар, әкиятләр һәм шигырьләр бар, аларның берсен сезгә сөйләп үтәм.

(*Видео. Тәрбияче шигырь сөйли.)*








Безнең якташыбыз Ринат Хәйри менә нәрсә дип язган:

**Курай.**
Мәшһүр курай!
Син беренче карашка
Тауда үскән гади бер үлән.
Моңлы халкым минем шул үләнгә
Йөрәгеннән алып җан өргән.
Сөйләгән ул бары аңа гына
Бар язмышын, барлык моң-зарын,
Бар өметен, якты хыялларын ,
Бар тарихын, барлык булганын.

**“Моңлы курай”.** Фәнис Яруллин .
Уйнар идем гармуным юк, җырлар идем - тавышым.
Кисеп алып курай иттем елгабызның камышын.
Камыш- курай эчләрендә күпме моң булган икән.
Ул камышка җәйләр буе күпме кош кунган икән.
Һәрбер коштан моңнар алган елгабызның камышы.
Өргән саен саркыш чыга шул кошларның тавышы.
Әйтәләр миңа кешеләр, моңлы, диләр, уйнавың.
Минем монда катнашым юк, үзе моңлы кураем.

*Тәрбияче:* Ә курайны каян алалар сон? (*Балаларның җавапларын тыңлау.*) Ә иң беренче курай ничек барлыкка килгән? Мин шуның турында сезгә сөйләп ишеттерим әле.

*I вариант* – әкият.

Бик борын заманда Бөрҗән якларында Байгазы авылы янында шайтаннар үзәгендә бик куп курай үскән, дип сөйлиләр. Бу җирне кешеләр һәрвакыт урап үтер булган, чөнки аннан төрле сәер тавыш ишетелә икән. Анда шайтаннар оялагандыр, дип курыкканнар. Ә соңрак карасалар, исләре киткән! Кибеп беткән гөпшәле үләннәр сына да, җил өргән саен, һәр берсе бер тавыш чыгара икән. Шуннан аны кешеләр, көз җиткәч, үлән кипкәч кисеп алып, тишекләр тишеп, шуңа өреп, шагыйрь әйтмешли, җан өреп уйнар булганнар. Исеме ничек булды икән? (*Курай*).
Әйе. Менә ул. (*Күрсәтү.*) Ә сезнең мондый үләнне кургәнегез бармы? Яз җиткәч урманда балтырган, гөпшә үсә. Мөгаен , сезгә әни-әтиләрегез алып кайтып ашатканы бардыр. Менә шул балтырган, гөпшә, көз җиткәнче зур булып үсеп кибеп, менә шушындый үләнгә әйләнә.

*II вариант* - *Слайд-шоу* «Курай турында әкият».

1) СЛАЙД №1 - Курай турында әкият.




СЛАЙД №2 - Бик борын заманда булган бу хәл. Яшәгән ди бер сылу кыз. Аның чибәрлеген тик айга гына тиңләп булган. Кызның күңеле чишмә суыдай саф, йөрәге бик назлы булган. Әти-әнисе кызларына шатланып туя алмаганнар - йөзгә дә килгән, эшкә дә уңган.




СЛАЙД №3 - Сылу кыз турында хәбәр явыз байга да барып җиткән. Бай шунда ук үзенең ахмак малаен сылу кызга өйләндерергә булган , һәм кызны сорап яучылар җибәргән. Кызның әти-әнисе бик каты кайгыга калганнар. Ярлы кеше булганнар алар, байга каршы килә алмаганнар.




СЛАЙД №4 - Ә сылу кыз күз яшьләрен коя-коя урман буена киткән, бер кем дә аның кайгысына ярдәм итә алмаган. Озак кына баргач, чәчкә аткан Курайны күреп калган. Шул Курайны назлы куллары белән кочаклап, бар кайгысын аңа сөйләгән.




СЛАЙД №5 - Шул мәлдә урман буйлап яшь егет Батыр үтеп барган. Курай чәчәген күргән, аның сабагын кисеп сыбызгы ясаган. Курай-сыбызгы бик моңлы һәм моңсу итеп җырлый башлаган, сылу кыз турында сөйләгән. Ә Батыр бик ярдәмчел һәм яхшы күңелле кеше булган, шуңа да ул сылу кызны ахмак киявеннән коткарырга булган.




СЛАЙД №6 - Авылга барып, кыз яшәгән өйне тапкан һәм аларны якларга, аларга ярдәм итергә дигән ниятен белдергән. Ә кызны күреп калуы белән, гомер буе тик аны гына эзләгәнең аңлаган. Батырның күңеленә сылу бик хуш килгән.




СЛАЙД №7 - Батыр сылу кызны һәм аның әти-әнисен үзенең туган ягына алып киткән. Анда матур итеп туй ясаганнар. Ә явыз бай үзенең ахмак улы белән бернисез торып калганнар. Менә шулай Курай яхшы кешеләргә ярдәм иткән.





СЛАЙД №8 - Әле дә курайның назлы моңнары Башкортостаныбызның киң яланнарын яңгыратып кешеләргә шатлыклы яки көенечле, бәхетле яки моңсу хәбәрләрне житкерә.




*III вариант* - Башҡорт телендә йәнһүрәт карау: «Курай». (Группа-сообщество «Итиль әкияте - Идельская сказка» ВК. https://vk.com/boron_boron_zamanda_akiat_ilenda )

*Тәрбияче:* Исегездә булса, без сезнең белән уен кораллары төркемнәре белән танышып үткән идек. (Духовые – тынлы; ударные – кагып уйнау, бәрмә; струнные – кыллы, чиртмә; смычковые – сызгычлы: клавишные – төймәле).
Ә хәзер музыкаль табышмак. (*Балалар тыңлыйлар һәм нинди уен коралларының тавышларын ишетәләр - әйтәләр.)*Уен коралларын кулларга алып басыйк әле. Мин сезгә төрләрен әйтеп барам, ә сез хәрәкәтләр белән күрсәтерсез.

  

Видео. Музыкальные инструменты.mp4

Кайсысына туры килә? ((*Балаларның җаваплары. Тынлы музыка уен коралы.*)
*Тәрбияче: (Курай турында сөйли. Курайны күрсәтә.)* Курай киптерелгән камыш ботагы яки агачтан ясалган. Хәзерге курайларның күбесе металлардан эшләнә. Әлеге уен коралы озынча, өске ягында дүрт, ә астында бер тишеге бар. Тишекләрне бер-бер артлы каплап өргәндә, матур көй чыга.
Безнең бай, юмарт табигатебез менә нинди матур, сихри тавышлы музыка коралы бүләк иткән. Ә хәзер мин сезгә курай тавышын тыңлатып үтәсем килә. Сез игътибар белән тыңлагыз.

Урал - Без названия (башкирский курай) (www.hotplayer.ru).mp3

Курай көенең характеры нинди? (Күңелле, әллә, бәлки, моңсумы?)
*Тәрбияче:* Балалар, курай турында тел шомарткычлар әйтеп алыйк әле:
Рай- рай- рай – урманда үсә курай.

Рай-рай-рай – мин уйныйм курай.
Тур-тур-тур – минем кураем матур.
Тур-тур-тур – аның көйләре матур.

*Тәрбияче:* Балалар, телләребез шомарды. Ә сез курай турында шигырьләр беләсезме? *(* Әйе!)

WhatsApp Video 2021-09-29 at 11.43.12.mp4

1 бала: Люблю тебя, люблю родная земля!
Люблю тебя, люблю гордая земля!

2 бала: Милая моя земля!
Реки, сладкие поля.
Березняк, чернотал,
В небо возвышенный Урал!

WhatsApp Video 2021-09-29 at 11.43.13.mp4

3 бала: Ай богатый мой Урал!
Пуповина всей земли
С древности средь этих скал
Дом башкиры обрели.

WhatsApp Video 2021-09-29 at 11.43.12.mp4

4 бала: Уң биткәең гүя якты кояш,
Сул биткәең гүя нурлы ай,
Уң кулыңда сайрый сандугач,
Сул кулыңда моңлы бер курай.

5 бала: Халкымның моң чишмәсе,
Йор тавышлы кураем,
Тавышыңны ишетсәм,
Яктырадыр чыраем.

6 бала: Тылсымлы моңнарыңа
Мин кушылып җырлаем,
Күк Уралымның данын
Яңгырат син, кураем!

7 бала: Җирнең йөрәк тамырыннан
Яралгансың, кураем,
Шуңа да син, җир-энкәмдәй,
Моңлысыңдыр, мөгаен.

8 бала: Ничә буатлар буена
Сайрыйсың син, кураем,

9 бала: Син сыздырып уйнаганда,
Мин кушылып җырлаем,

Моңнарыңны хәйран калып,
Милли моңга жан өрүче
Тыңлагандыр Аркаем…
Әле дә син бар, кураем!

*Тәрбияче:* Афарин, бик матур шигырьләр ятлагансыз!
- Курай!
- Әү!
- Син нигә уйнамыйсың?
- Ә мине бит курайчы уйный.
Курайчы кем була икән ул, балалар? (*Курай уйнаучы кеше.*) Әйе, курайда уйнаучыны курайчы дип йөртәләр.

*I вариант* – Курайчы янына виртуаль сәяхәт.








Курайчы һәйкәле - Уфа. Курше тугандаш Татарстан Республикасының Мөслим районы байрагында курайда уйнаучы егет сурәтләнгән.
***Курайчы видеочыгышыннан өзек карау*** https://youtu.be/LEMlx698y1A
**(Знакомство с музыкальным инструментом Курай.)**

*II вариант* - Буген бездә кунакта районыбызның курайчысы, күрше Чалкак авыл мәктәбе укытучысы Марат Миндибай улы Азнабаев.



Хәзер ул шушы курай үләненнән ничек итеп уен коралын ясап булыуы турында сөйләп китер. *(Курайчының, чыгышы.)* (*Курай турында сөйләп, уйнап күрсәтә.*)

*Тәрбияче:* Курай тавышы менә ничек ямьләп җибәрде безнең дәресебезне. Рәхмәт сезгә, Марат Миндибай улы! Дәрескә бәйрәм төсе керде. Мин балаларның күзләреннән үк тә күреп торам.

*Тәрбияче:* Балалар, курайчы Марат абый курайда матур көйне уйнап үтте. Әйтегез әле, курайчы абый уйнаган көй һәм «Урал» көе нәрсәсе белән аерылып тора? (*Беренчесен ишетү сәләте ярдәмендә тын,ласак , ә икенчесен күрү сәләте ярдәмендә карадык.)* Курай моңы ярдәмендә хәрәкәтләнеп алыйк. (**Бию**.)






Курай чәчәге бии.mp4 Танец детей под музыку курая.mp4

*Тәрбияче:* Афарин, оста биедегез, күңелләр күтәрелеп китте.

Ә курайны ничек уйныйлар икән? (*Өреп.)* Сезнең дә өреп уйнап карасыгыз киләме? (*Бермләп уйнатып карау.*)

Мальчик играет на курае.mp4

*Тәрбияче:* - Ә хәзер, әйдәгез, балалар курай янында уйнап алыйк. ***Уен «Курай».***

Курай тавышын ишетеп
Без киләбез болынга.
Курайчы белән бергәләп,
Күңел ачып уйнарга.

1. Курай тавышын ишетеп,
Без киләбез чирәмгә.
Курайчы белән бергәләп
«Кем суктылы» уйнарга.
Һай[3] матур яшел болында,
Һай[3] уйнап алаек шунда.
Кураеңны безгә бир дә,
Узең карама безгә.

2. Түгәрәк буйлап тавышсыз
Без йөгереп йөрибез.
Шауламагыз, шауламагыз,
Сугып алыйк беребез.
Һай[4]
Мин тугел да, мин тугел.
Һай[4]
Кем сукканын узең бел.

- Бу кешегә нинди җәза бирәбез? *(Шигырь сөйләсен.)*

Курайда кырлар догасы, чишмә тавышлары бар.
Курайда туган як гаме, кеше сагышлары бар.
Иң элек курайда туа һәр аткан таңның көе.
Курай ул — тылсымлы әйбер, курай ул — моңның өе.

*(Такмаклар җырласын.)*

Гармунчы тавык.

Иртән торып тышка чыксам,
Кырмыска утын кисә.
Кара сарык биеп йөри,
Сыер чәбәкәй итә.
Ак әтәч курай тарта,
Тавык гармун уйната.
Шул моңнарга чыдый алмый
Ата каз елап ята.

Бәйрәмнәрдә курай куңел ачкан,
Бәйрәмнәрдә курай биеткән.
Ә алда курайны тагын бер зур бәйрәм көтә. Ниди бәйрәм ул? *(Җаваплар тыңланыла.)* Сезгә җавап бирергә менә символиканы да күрсәтәм. *(Символика күрсәтәм.)* Башкортостан Республикасы көнен бәйрәм итергә әзерләнәбез. Бу зур бәйрәмдә дә курайның урыны түрдә булыр әле. Шулай ук курай янында республикабызның флагы җилфердәр, гербы торыр. Игътибар белән карасак, флагта да, гербта да нәрсә чәчкәсен күрәсез? Аның таҗлары

бик күп бит, ә символларда бары тик 7 тажы гына. Ни өчен шулай икән ул? (*Башкорт халкы ыруның берләшмәсе.*)

**Әвәләү** «Курай» - пластилиннан әвәләп курай ясау.

Ә сез беләсезме, балалар, курай турында әйтем дә бар: *Ярык курай уйнамас.* Курайны пөхтә генә, турыга тәгәрәтеп, озынча итеп, ярыксыз эшләргә кирәк. Эшләү алымын аңлату, эшләп карау, балаларга юнәлеш бирү һәм ярдәм итү. Пластилинны тәгәрәтеп, таякчыклар эшлибез. Шырпылар белән тишекләр тишәбез. («Курай» җырын тыңлап әвәләү.)








Гальсар Байгускарова - Курай (www.hotplayer.ru).mp3

**Җыр Гәлсәр Байгускарова – “Ҡурай”.**



1) Уралымдың күкрәгенә һыйынып үскәс ҡурай,

Көйөн тыңлағанда күңел, киң тауҙар илен урай.

*Ҡушымта:* Тылсымлы серле ҡурайҙың уйыны ла уята,

Моңлоларҙы хайран итә, моңһоуҙарҙы уята.

2) Агиҙелдең ағымында бәүелеп үскәс ҡурай,

Тауыштары тыныс ҡына, талғын ғына яңғырай.

3) Үткәндәрҙе киләсәккә тоташтырыусы ҡурай,

Ғәзиз тыуған илкәемә бәхетле көндәр юрай.

*Тәрбияче:* Балалар, бик матур уен коралы ясадыгыз. Афарин! Тугәрәккә басып, курай турында тизәйткеч ятлау:

Урманда сайрый тургай, Яланда уйный курай.

Кураемда мин уйныйм, Туган илемне уйлыйм.

*Тәрбияче:* Афарин, булдырдыгыз! Балалар, курай турында бик кызыклы мәкальләр дә бар: “Ач корсакка курай уйнамыйлар”, “Анысы шулай шулаен да, тартып җибәр кураең!”.

Үзебезнең курайлар белән уйнап та алыйк әле.




*Тәрбияче:* Без курай белән уйнарга да яратабыз. Афарин!

Балалар, сезгә бүгенге дәрес ошадымы? Без нәрсәләр белдек бүгенге дәрестә?

Башкортларда курай белән кызыксыну бүгенге көнгә хәтле сүнмәгән. Башкортостанда һәм башкортлар яшәгән башка җирләрдә курай белән кызыксыну көннән-көн арта. Курайда башкорт халык көйләрен һәм хәзерге заман җырларын да башкарып була.

Кадерле балалар, бүгенге дәрестә катнашучыларга һәм килгән кунакларга зур рәхмәт!














Учебно-методическое издание

# Современный урок – 2021

М а т е р и а л ы
Всероссийского конкурса методических разработок

Выпуск 5

Компьютерная верстка и оригинал-макет
Материалы публикуются в авторской редакции

452450, Республика Башкортостан, г. Бирск, ул. Интернациональная, 10
Бирский филиал Башкирского государственного университета
Отдел множительной техники Бирского филиала БашГУ